**ЗӘЙТҮНӘ ХАНОВА**

# ИЛКӘЙЕМ



ЗӘЙТҮНӘ ХАНОВА

# ИЛКӘЙЕМ

Өфө «КИТАП» 2001

Рецензенты
сәйәсәт фәндәре докторы, филология фәндәре кандидаты
И. Ғ. ИЛИШЕВ

**Ханова З. Ҡ.**
Х 24 Илкәйем. – Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 2001. – 320 бит.

ТП–80

УДК 342.7(470.57)
ББК 63.5(2.Рәс-Баш)

ISBN 5-295-02923-9

© Ханова З. Ҡ., 2001

# I. МИН ҺАМАН ДА МӨҒЖИЗӘГӘ ЫШАНАМ...

*ИНЕШ ҺҮҘ УРЫНЫНА*

– Беләһегеҙме, мин ғүмерем буйы бер нәмәгә ғәжәпләнәм.

– Нимәгә?

– Бына, ҡарағыҙ әле, ҡап-ҡара тупраҡ. Ямғыр яуһа, батҡаҡ була. Шул ерҙән күҙ яуын алырлыҡ матур сәскәләр, мәғрүр ағастар үҫеп сығыуына аптырайым.

– Мөғжизәле тәбиғәт бүләге улар. Шуға ла ерҙе күҙ ҡараһылай һаҡларға, яҡларға ине лә бит...

Аҙнай ауылының тулы булмаған урта мәктәп директоры Рәлиә Кирәева менән шулай һөйләшә-һөйләшә урам буйлап китеп барабыҙ. 1990 йылдың август айы ине. Көн һайын ямғыр яуғанға аяҡ аҫты бысраҡ, ҡайһы урындарҙа итек менән дә үтерлек түгел. Сылбырлы һәм тәгәрмәсле тракторҙар аҡтарып, соҡорайтып бөтөргән Аҙнай урамдары иңрәп, һыҙланып ятҡан һымаҡ. Арендаторҙарҙың һәр береһе машинаһын өйөнөң эргәһенә килтереп ҡуйғанға шулай булған ул.

Бишбүләк яҡтарына быйыл ғына сыға башлаған «Йәшлек» гәзитен пропагандалау маҡсаты менән юлланғайным. Бындағы кешеләр менән танышҡас, күңелем көрәйеп, күҙҙәрем асылып ҡалғандай булды. Халыҡтың хәл-әхүәле менән ҡыҙыҡһынып, уның иғтибарға һәм ихтирамға сарсаған күңелен аҙ ғына йыуатһаң да, ул һиңә икеләтә яҡшылыҡ, йомартлыҡ, ихласлыҡ менән яуап бирә. Бигерәк тә – сәйәси хәле, мәҙәниәте ифрат артта ҡалған, үҙәктән алыҫ ятҡан төпкөл ауылдарҙа.

... Бына әле, резина итектәр кейеп, Биҡкол ауылында өйҙән-өйгә йөрөйөм һәм «Йәшлек» гәзитенә яҙылырға өндәйем. Мәжбүр итергә теләүҙән түгел, ә, журналист булараҡ, милләтем ҡыҙыҡһынып уҡырлыҡ ниндәй гәзит кәрәклеген нығыраҡ аңлар өсөн йөрөйөм.

Биҡколда бер йорт ихатаһына килеп инегәс тә бәләкәй генә ир баланың этен типкеләүен, эткеләүен, төрткөләүен күреп, ҡатып ҡалдым. Аптырағас, тегенән: «Этеңдең исеме нисек? Ниңә интектерәһең уны?» – тип һораным. Малай яуап бирмәй генә тура ҡарап тик тора. Яуап алмағас, сығайым, тип боролғайным, ҡапыл: «Не знаю!» – тигәнде ишетеп, шып туҡтаным. «Һин кем, русский, что-ли?» – тим үҙенә. Күҙен дә йоммай: «Да!» – тине. Үҙ телен белмәгән башҡорт балаһылыр, ҡаланан өләсәһенә ҡайтҡандыр, тип уйлағайным. Юғиһә, ауылдағы малайҙар һәм ҡыҙҙар эттәрен типкеләмәй, ә дуҫ күреп ярата, ашата, артынан да ҡалдырмай эйәртеп йөрөтә. Туған телен белмәгәндәрҙең, милли рухы, ерлеге булмағандарҙың күңелдәре лә китек булалыр, күрәһең...

Ошо уҡ ауылда йәшәүсе Тимербулат ағай Буранғолов миңә: «Һин, һеңлем, «Йәшлек» гәзитен алдырығыҙ, яҙылығыҙ, тип өгөтләйһең... Бөгөн билем һыҙлап, үлерҙәй булып ауырып ултырам. Көйрәтергә, исмаһам, тәмәкеһе лә юҡ бит хәҙер, ә һин, гәзит уҡығыҙ, тиһең. Ниңә радио йышыраҡ башҡортса һөйләмәй? Башҡортостан тигән үҙ илкәйеңдә йәшәп тә туйғансы башҡортса радио ла тыңлап булмай бит. Башҡорт үҙ иленә берәй ҡасан баш булырмы?» – тигән һорау ҡуйҙы. Оло йәштәге ауырыу кешенең ошо хаҡлы һүҙҙәрен ишеткәс, күҙҙәремә йәштәр тулды.

Көс-ҡеүәтебеҙ ҙә, нигеҙебеҙ ҙә, дәртебеҙ ҙә ауылда беҙҙең. Шуға ауыл халҡына, тәҡдимдәренә, кәңәштәренә йышыраҡ ҡолаҡ һалыу дөрөҫ булыр. Ниндәй ғәжәп кешеләр йәшәй бында! Ҡаныҡай ауылында 74 йәшлек Рәшиҙә Фәхриша ҡыҙы Ғәбдуллина менән танышҡас, хайран ҡалдым. «Ваҡытлы матбуғатта сыҡҡан башҡорт телендәге баҫмаларҙы гел алдырып уҡыйым мин», – тигәс, уға ысын күңелдән һоҡланып, тормошо тураһында

һорашып ултырғайным. 1924–1925 йылдарҙа Айыт ауылында асылған беренсе совет мәктәбендә уҡыған. Дүрт класс ҡына белем алған. Ҡалғаны өсөн «тормош университетына» бурыслы. Ғөмүмән, үҙем булып киткән ошо ауылдарҙа һоҡланғыс кешеләр йәшәүенә ышандым. Ҡайҙа ғына барһам да, ниндәй генә өйгә инһәм дә, ҡысҡырып әрләшеүсене түгел, тауышын күтәреп һөйләшкән кешене ишетмәнем мин. Бала-сағаны тупаҫ итеп әрләү, хатта һуғып ебәреү кеүек ҡырағайлыҡты өнөңдә түгел, төшөңдә күрмәҫһең бында. Шуныһы ғәжәп, ауыл балалары ҡаланыҡыларға ҡарағанда күпкә тәртиплерәк, тыйнағыраҡ, үҙаллыраҡ. Сабыр холоҡло, йомарт күңелле, алсаҡ, ҡунаҡсыл апайҙар һәм ағайҙар, инәйҙәр һәм бабайҙар менән аралашҡанда үҙемде ниндәйҙер бер изге төбәктә итеп тойғайным.

Тик... Аҙнайҙағы клуб эргәһенә килеп еткәс, айнып киткәндәй булдым. Иғландар таҡтаһынан күренеүенсә, клубта ял һайын тиерлек видеобоевиктар менән аралаш секс, ә дөрөҫөрәге, иң әшәке порнография күрһәтелә икән. Тимәк, ҡалалағы заманса «рух», «цивилизация» бында ла килеп еткән. Ә бит йәштәрҙең күңелен аҙҙырып, аңын томалағанса, ауыл халҡының көнкүрешен еңеләйтеү, мәҙәниәтен күтәреү өсөн башҡа төрлө саралар күрергә кәрәк ине лә. Юғиһә бит ошо ауылда ғына илленән ашыу егет өйләнмәй йөрөй. Сөнки ҡыҙҙар юҡ. Эш булмағас, ситкә китеп бөткәндәр. Кәләштәр булмағас, кейәүҙәргә секс күрһәтеүҙән ни фәтүә? Өйләнгән хәлдә лә йәш егеткә айырым йорт һалып инеү өсөн күпме аҡса кәрәк!

Йәштәрҙе, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙы ауылда нығытыу өсөн яңы эш урындарын булдырырға, халыҡтың көнкүрешен хеҙмәтләндерергә, мәктәптәр, балалар баҡсаһы асырға, тип күпме генә һүҙ буҡаһы бешерһәк тә, ысынында иһә, күп урындарҙа дөйөм күренеш үҙгәрешһеҙ ҡалған икән. Әйтәйек, үрҙә атап үтелгән ауылдарҙа ферманан тыш эш табыуы еңел түгел. Ә бит ҡатын-ҡыҙ, ғаиләмде, балаларымды ас-яланғас интектермәйем тип, ғүмер буйы ошо ауыр физик эштә яфа сигә!

Аҙнай ауылында ғүмере буйы фермала һыйырҙар һауып, ә хәҙер быуынһыҙ булып ятҡан Фәһимә апай Мостафинаның әсәһе Мөтиғә әбей Сөләймән ҡыҙы менән һөйләшеп ултырҙыҡ. 90 йәшкә яҡынлашып килгән әбей 52 йәштәге ҡыҙынан күпкә шәберәк. Фәһимә апайҙың иһә хәле ҡот осҡос ауыр. Гел башы ауырта, ике ҡолағы ла ишетмәй, аяғы, биле, арҡалары һыҙлай, йөрөй ҙә алмай ята.

Ошо уҡ ауылда йәшәүсе Минафа Ниғмәтулла ҡыҙы Имашева ла 14 йәшенән һыйыр һауа башлаған. 20 йыл һауған. 10 йыл быҙау ҡараған. «Инәйем бик ҡаты сирләгәс, аҙаҡҡы йылды келәттә эшләнем. Шуға пенсиям әҙ, 50 һум ғына булды. Былтыр ғына 70 иттеләр. Совхоз бесән һәм утын менән ярҙам итмәй. Һорап йөрөргә оялам да. Һыйырҙы быйыл ғына тотабыҙ инде, икенсе йылға хәл булмаҫ», – тип зарланып ултырғайны ул. Ғүмере буйы фермала ауыр эштәр башҡарған Минафа апайҙың да һаулығы ныҡ ҡаҡшаған, бөтә быуындары һыҙлай. Ятһа, тора алмай, ултырһа, аяҡтарын яҙа алмай интегә.

70 йылдан ашыу совет осоро эсендә ҡатын-ҡыҙҙың хәле еңеләйгәнме лә хоҡуҡтары күбәйгәнме? Инвалидлыҡ аҡсаһын юллап алырлыҡ та хәле юҡ хәҙер йырҙарҙа йырланған, шиғырҙарҙа данланған, сағыу плакаттарҙа һүрәтләнгән, трибуналарға күтәрелгән һауынсы ҡатын-ҡыҙҙың!

Әйткәндәй, фәҡир генә йәшәүенә, аҡсаға мохтажлыҡ кисереүенә ҡарамаҫтан, Минафа апай башҡорт баҫмаларын гел алдырып уҡый икән. «Гәзит тә уҡымағас, үлергә кәрәк бит», – тип кенә ҡуйҙы ул. Бына шулай!

Ҡалала юғары уҡыу йорттарын тамамлап, милли кадр итеп ҡайтарылған, типһә, тимер өҙөрҙәй ҡайһы берәүҙәрҙең: «Мин башҡортса уҡымайым!» – тийеүенә һабаҡ булырлыҡ яуап был. Саф башҡорт ауылында ла, эскелек менән шөғөлләнмәйенсә лә, маңҡортҡа әйләнеп була икән дә. Үкенескә ҡаршы, бындай көйөнөслө күренеште лә үҙ юлымда йыш осраттым.

Ә шулай ҙа милләтемдең зиһене яҡтырып асылырына ышанам. Милли үҙаңы барыбер ҙә уяныр, тим. Быға мин

ялан сәскәләренең илаһи матурлығына, ҡар бөртөктәренең семәрле, биҙәкле булыуына – матурлыҡҡа ышанған кеүек ышандым.

Ышандым, һәр иртән сәскәләр уяныл, ҡояшҡа баҡҡан һымаҡ, кешеләр ҙә бер килеп барыбер уяныр һәм үҙҙәре өсөн бөтә проблемаларҙы кемдәрҙер ситтән килеп хәл итер, тип көтөп, йомолоп йәшәүҙең фәтүәһеҙ икәнлеген аңлар ҙа ең һыҙғанып эшкә тотонор.

Телебеҙ ҙә, рухыбыҙ ҙа, мәҙәниәтебеҙ һәм тарихыбыҙ ҙа терелер. Башҡорт илендә радио менән телевидение ла башҡортса һөйләр. Милләтем азатлыҡ һәм хоҡуҡтар даулар. Мөғжизәгә ышандым...

## Шул ваҡыттан алып 10 йыл үтеп китте

Бик күп ауылдарға газ үткәрелде, ҙур һәм яҡты мәктәптәр, клубтар, юлдар һалынды. Тәмәкегә, шырпыға, тоҙға, колбасаға ла тилмереп йәшәмәйбеҙ хәҙер. Күпме, ниндәйен теләйһең – тулып ята. Радиола һәм телевидениела башҡортса тапшырыуҙар күбәйҙе. Республиканың да Рәсәйҙә абруйы юғары, бәҫе бар.

Тик халҡым ғына һаман да мөшкөл, төшөнкө. Эшһеҙлек, эскелек, наркомания, инде килеп – спид – алҡымдан ала башланы. Ауылдарҙа егеттәребеҙ һаман да көтөүҙәре менән өйләнмәй йөрөй, ҡыҙҙар ҡалаға ҡаса.

Ул ғына ла түгел, күп милләттәштәрем илен ташлап ҡаса. Миграция, ассимиляция көсәйә. Халҡымдың һаны бер туҡтауһыҙ кәмегән кеүек, башҡорт матбуғатына яҙылыусылар ҙа йылдан-йыл кәмей. «Йәшлек» гәзитенә генә 1990 йылда 45 меңгә тиклем кеше яҙылһа, унан һуңғы йылдарҙа бик ныҡ кәмеп (мәҫәлән, 1992 й. – 30000, 1994 й. – 35000, 1996 й. – 33000), 1998 йылда ғына яңынан күтәрелә башланы – 40 119 тираж булды. 1999 йылда – 39 410. 2000 йылда – 45 161. 2001 йылда йәнә кәмене – 40507. 10 йыл эсендә республикала иң популяр иҫәпләнгән гәзиттең тиражы артмауын, киреһенсә,

кәмеүгә барыуын нисек аңлатырға? Башҡорт телендәге бүтән баҫмалар менән дә шул уҡ хәл бит...

Бөтә донъяла һәм Рәсәйҙә барған хәл-ваҡиғалар шуны асыҡ күрһәтә: бер генә халыҡтың да юҡҡа сыҡҡыһы килмәй, һәр береһе милләт булараҡ һаҡланып ҡалырға, тарихи территорияһының остоғон да юғалтмаҫҡа тырыша, үҙ илендә милләтенең иҫәбен арттырырға ынтыла, шул мәнфәғәттә хоҡуҡи акттар ҡыла, закондар ҡабул итә. Донъя кимәлендә быны ғәрәптәрҙең ғүмер буйы баҫҡынсы йәһүдтәр менән ер өсөн айҡашыуы, Вьетнамдың һәм Афғанстандың унар йылдар буйына АҠШ һәм СССР оккупацияһына ҡаршы тороуы, Эфиопия, Ангола, Мозамбик, Никарагуа һ. б., ә бөгөн элекке СССР халыҡтарының азатлыҡ көрәшендә асыҡ күреп булыр ине.

Ошо юҫыҡтан ҡарағанда, башҡорттарҙың үҙенең тарихи ватанында ни өсөн йылдан-йыл кәмеүенә йәмәғәтселек иғтибарын көсәйтеү һәм уны хәл итеү йүнәлешендә тәүәккәл аҙымдар яһау халыҡ иҫәбен алыу алдынан көн үҙәгендә торған иң мөһим мәсьәләләр ул. Башҡорт халҡының этнодемографияһы ниндәй фажиғәле сиккә яҡынайыуын асығыраҡ күҙаллау өсөн тәүҙә архив документтарына мөрәжәғәт итәйек.

1865 йылғы халыҡ иҫәбе буйынса Өфө губернаһында йәшәгән халыҡтың 50 процентын (!) – башҡорттар, 33,8 процентын – урыҫтар һәм 6,9 процентын татарҙар тәшкил иткән. 1897 йылғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу буйынса иһә Өфө губернаһында 40,9% – башҡорт, 38,2% – урыҫ, 8,4% – татар, 0,95% – мишәр һәм 1,8% типтәр йәшәгән. Ә Өфө губернаһына алты өйәҙ ингән бит![1]

| Өйәҙҙәр | Башҡорттар | Урыҫтар | Татарҙар | Мишәрҙәр | Типтәрҙәр |
|---|---|---|---|---|---|
| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 |
| Өфө | 30,4% | 61,6% | 1,2% | 0,3% | 0,6% |
| Бәләбәй | 53,8% | 22,9% | 11,3% | 0,6% | 1,6% |
| Бөрө | 53,1% | 28,9% | 0,5% | 0,4% | 0,09% |

[1] Первая всеобщая перепись населения Российской империи. Уфимская губерния. Том 4, тетради 1, 2. Спб, 1901, 1904.

| Өйәҙҙәр | Башҡорттар | Урыҫтар | Татарҙар | Мишәрҙәр | Типтәрҙәр |
|---|---|---|---|---|---|
| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 |
| Златоуст | 27,7% | 65,6% | 1,1% | 1,5% | 2,7% |
| Стәрлетамаҡ | 35,4% | 40,5% | 6,2% | 1,1% | 7,3% |
| Минзәлә | 32,4% | 32,6% | 28,1% | 3,9% | 0,9% |

Совет осорондағы халыҡ иҫәбен алыуҙар иһә башҡорт халҡының һаны кинәт кәмеүен күрһәтә[1].

| Халыҡ-тар | Йылдар | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | 1923 | 1926 | 1939 | 1959 | 1970 | 1979 | 1989 |
| башҡорттар | 29,3% | 23,5% | 21,2% | 22% | 23,4% | 24,3% | 21,9% |
| татарҙар | 6,8% | 17,3% | 24,6% | 23% | 24,7% | 24,5% | 28,4% |
| урыҫтар | 39,6% | 40,0% | 40,6% | 42% | 40,5% | 40,3% | 39,3% |

Ә хәҙер 1979 һәм 1989 йылдарҙа халыҡ иҫәбен алыу йомғаҡтары буйынса ҡайһы бер райондарҙа башҡорттар һәм татарҙар нисбәтен килтерәйек (райондар халҡы нисбәтенә ҡарата проценттарҙа)[2]:

| Райондар | Башҡорттар | | Татарҙар | |
|---|---|---|---|---|
| | 1970 | 1989 | 1970 | 1989 |
| Балтас | 74,90 | 22,10 | 5,60 | 59,20 |
| Борай | 62,10 | 39,60 | 26,10 | 50,80 |
| Дүртөйлө | 33,80 | 24,20 | 43,70 | 59,60 |
| Илеш | 70,90 | 63,20 | 20,70 | 30,30 |
| Кушнаренко | 28,20 | 5,50 | 51,20 | 78,00 |
| Саҡмағош | 30,40 | 18,70 | 61,80 | 75,60 |
| Тәтешле | 61,40 | 53,60 | 12,50 | 21,10 |
| Шаран | 13,50 | 6,40 | 38,90 | 51,00 |
| Яңауыл | 41,50 | 36,30 | 22,60 | 29,20 |

Эйе, башҡорт милләтенең кәмеүе бигерәк тә төньяҡ-көнбайыш райондарҙа аяныслы сиккә яҡынлашҡан. Әгәр 1979 йылда Балтас, Благовар, Борай, Дүртөйлө, Йәрмәкәй, Илеш, Кушнаренко, Бүздәк, Миәкә, Тәтешле, Туймазы, Саҡмағош, Шаран һәм Яңауыл райондарында башҡорт-

[1] ЦГА БАССР, фонд 1943, оп. 1, д. 18, л. 177.
[2] «Башкортостан», 30 октябрь, 1996 йыл.

тарҙың һаны 251 694 кеше тәшкил итһә, 1989 йылда 142 106 кешегә ҡалған. Ошо ваҡыт эсендә татарҙарҙың һаны иһә 15 районда (Краснокама һәм Өфө районДарын да ҡушып, Бүздәк районынан башҡа) 151 547 кешенән 251 232-гә артҡан.

Тарих фәндәре докторы, БДУ профессоры Рим Янғужин был хаҡта ошолай тигәйне: «Башҡорттарҙың... ассимиляциялашыуы – төньяҡ-көнбайыш башҡорттарына ҡарата һығылмалы, тотороҡло, төплө сәйәсәт алып бармауҙың һөҙөмтәһе ул» («Ватандаш», № 2, 1996).

БАССР-ҙағы төрки телле халыҡтарҙың һанын түбәндәге мәғлүмәттәр ҙә яҡшы күрһәтеп тора (мең кеше иҫәбенән)[1]:

| Йылдар | Башҡорттар | Татарҙар | Мишәрҙәр | Типтәрҙәр |
|---|---|---|---|---|
| 1920 й. | 896,4 | 242,1 | 155,5 | 167,5 |
| 1923 й. | 686,8 | 143,6 | 100,2 | 144,2 |
| 1926 й. | 584,8 | 460,8 | 109,5 | 23,3 |
| 1939 й. | 671,1 | 777,2 | | |

Шулай итеп, 1926–1939 йылдарҙа татарҙар ҡапыл мишәрҙәр, типтәрҙәр һәм башҡорттар иҫәбенә артып киткән. Мәҫәлән, Топорнино волосында ғына (хәҙерге Кушнаренко районы) 1923 йылдағы 20 мең башҡорттан 3,3 мең генә тороп ҡалған. Шишмә, Бүздәк, Ҡырмыҫҡалы һәм башҡа волостарҙа ла шундай уҡ хәл күҙәтелгән.

Әгәр ҙә беҙ 2002 йылда Рәсәй Федерацияһы халыҡтарының иҫәбен алыу Башҡортостанда демократия мөхитендә һәм үҫешкән хоҡуҡи дәүләттәр ҡанундары буйынса уҙғарылһын, тиһәк, бығаса татарса уҡытылған башҡорттар, мишәрҙәр, типтәрҙәр үҙ асылына ҡайтһын һәм татар булып яҙылыуҙан туҡтаһын өсөн республикала тейешле шарттар тыуҙырылырға тейештер!

Ғөмүмән алғанда, үҙ республикаһында төп халыҡтың кәмеүе татар милләтенең артыуына туранан-тура бәйле. Мәҫәлән, 1897–1989 йылдарҙа, йәғни 92 йыл эсендә,

---

[1] ЦГА БАССР, ф. Р–1943, оп. 1, д. 18, л. 17.

башҡорттар үҙ илендә 45 меңгә генә артҡан, ә татарҙар Башҡортостанда 738 мең кешегә артҡан һәм 1 млн. 120 меңгә еткән. 1979–1989 йылдарҙа иһә башҡорттар республикала 72 мең кешегә кәмеһә, татарҙар 180 меңгә артҡан.

Башҡорт этносының тарҡалыуы һәм көсһөҙләнеүе уның тарихи территорияһының төрлө Рәсәй өлкәләренә бүлгеләнеүе менән дә аңлатыла. Республиканан ситтә ҡалған 600 мең башҡорт, социаль-иҡтисади һәм рухи-мәҙәни бәйләнештәр булмағанлыҡтан, халыҡтан ситләшә, шулай уҡ милләтен юғалта бара. Ул ғына ла түгел, 20-се һәм 30-сы, ә һуңынан 50-се йылдарҙың аҙағында руслаштырыу сәйәсәтен көсәйтеү һөҙөмтәһендә төп халыҡтың күпләп илен ташлап китеүе күҙәтелә. 1959–1965 йылдар эсендә генә көнсығыш райондарҙың башҡорттары 97–100 мең кешегә кәмей. 1997–2000 йылдарҙа Башҡортостандан сығып киткән башҡорттарҙың һаны 98660-ҡа еткән.

Башҡортостандан ситтә төрлө илдәрҙә таралышып йәшәүсе башҡорттар 150 мең кешегә артҡан. Бында Силәбе (161 163 башҡорт йәшәй), Ырымбур (53339), Пермь (52326), Свердловск (41500), Ҡурған (17548), Һамар (795), Һарытау (4087) өлкәләрендә, Татарстан Республикаһында (19106), Удмуртияла (5217) тарихи ерҙәрендә йәшәүсе милләттәштәребеҙ түгел, ә Төмән (41059), Кемерово (4369), Иркутск (3893), Коми (5313),Чита (2138), Амур (2289), Яҡут-Саха (4190) һәм Ҡаҙағстан (41817), Үзбәкстан (34771), Тажикстан (6821), Украина (7402), Төркмәнстан (4678), Ҡырғыҙстан (4026) башҡорттары күҙҙә тотола.

Миграцияның көсәйеүе, һуңғы сиктә, бер милләттең күбәйеүенә, ә икенсеһенең кәмеүенә, хатта юғалыуына килтерә. Был милли дәүләт ҡоролошоноң нигеҙҙәрен аяуһыҙ ҡаҡшата.



*Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов.
Артҡы планда: Премьер-министр урынбаҫары Хәләф Ишморатов
һәм халыҡ яҙыусыһы Мостай Кәрим.*

## ЕР – МИЛЛИ РЕСПУБЛИКАЛАР БИШЕГЕ

Халыҡ һанының туҡтауһыҙ ҡыҫҡарыуына ер мәсьәләһе лә тығыҙ бәйле. Быуаттар төпкөлөндә Уралдан Каспийға тиклем һуҙылған иркен далаларыбыҙ юҡ хәҙер. Ә ҡалған ғына остоҡ ерҙәребеҙҙә лә халҡыбыҙҙың күпләп ассимиляциялашыуы, туған теленән һәм милләтенән ваз кисеүе, урыҫлашыуы, татарлашыуы, йә иһә өмөтһеҙлеккә биреләп, башын ситкә олаҡтырыуы илебеҙҙең һәм еребеҙҙең ҡәҙерен белмәүебеҙ, Уралын һаҡлап изге һуғыштарҙа башын һалған ата-бабаларыбыҙ аманатына хыянат итеүебеҙ күрһәткесе ул.

Ә беҙ бит күптән түгел генә еребеҙ яҙмышына һис тә битараф түгел инек...

1992 йылдың февраль баштары[1]. Өфөләге ижтимағи-сәйәси үҙәктә ер мәсьәләһе буйынса фекер алышыу булып үтте. Унда Башҡортостан хөкүмәте, Башҡорт халыҡ конгресы, «Урал» башҡорт халыҡ үҙәге, Башҡорт халыҡ фирҡәһе вәкилдәре, яҙыусылар, юристар, журналистар ҡатнашты.

**Башҡорт халыҡ конгресы рәйесе Нәжип Вәлитов** Рәсәй Федерацияһы Президенты Борис Ельциндың 1991 йылдың 27 декабрендә ҡул ҡуйған «Ер реформаһы буйынса кисектергеһеҙ саралар тураһында»ғы Указы нигеҙендә әңгәмә ойошторҙо. Һөйләшеү барышында Указдың ерҙе һатыуға бәйле булған бөтә пункттарын яңынан эшләргә, Башҡортостанда ерҙе һатыуҙы рөхсәт итмәҫкә, БССР-ҙың Ер тураһындағы законын нигеҙ итеп алырға, тигән тәҡдимдәр индерелде.

---

[1] «Йәшлек», 11 февраль, 1992.

Ергә һалым һалыу һәм ер өсөн түләү мәсьәләләре ҡаралды. РСФСР һалымдың 40 процентын һорай икән, мин бер тин дә бирмәҫкә тәҡдим итәм, сөнки беҙҙең үҙебеҙҙең эштәребеҙ етерлек, тип белдерҙе Нәжип Хәтмулла улы. Йыйылған аҡсаны банктарҙа туплап, ауылды яңыртыуға, бөтөп барған башҡорт халҡын һаҡлап алып ҡалыу, иң мөһиме, республиканан ситкә киткән башҡорттарҙы ҡайтарыу өсөн шарттар тыуҙырыуға (мәҫәлән, ссудалар бүлеүгә), промышленность предприятиеларын реконструкциялауға, экологияны яҡшыртыуға һәм республика халыҡтары өсөн башҡа файҙалы сараларға тотонорға кәрәк. Башҡорт халыҡ конгресы рәйесе, Башҡортостан Министрҙар Советы оборона предприятиеларына ауыл хужалығы техникаһын һәм завод ҡорамалдарын эшләүгә дәүләт заказы бирергә тейеш, тип өҫтәне. Мәҫәлән, Өфө моторҙар эшләү берекмәһе – моторҙар, РТИ – тәгәрмәстәр, Стәрлетамаҡ синтетик-каучук заводы резина етештереп, дөйөм көс менән ауылды техника йәһәтенән тәьмин итергә, фермерлыҡты үҫтерергә һәм ошолар аша Башҡортостандың иҡтисади хәлен еңеләйтергә мөмкин булыр ине.

**Элек Башҡортостан Юғары Суды рәйесе булып эшләгән, ә хәҙер хаҡлы ялдағы Шакир Вәхитовтың сығышы** ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты. Ул ошондай ауыр мәлдә, хатта, аслыҡ көтөлгәндә, колхоз-совхоздарҙы йәнә лә ашығып бөтөрмәҫкә өндәне, ассоциациялар ойоштororға саҡырҙы. Акционер йәмғиәттәренең бөтә төр тармаҡтарҙа ла – умартасылыҡ, ер эшкәртеү, малсылыҡ, кирбес етештереү, быйма баҫыу, колбаса цехтары рәүешендә һ. б. – ойошоуы ихтимал. Коллектив хужалыҡтарҙы бер ниндәй әҙерлекһеҙ бөтөрөп, ер һатыу башланһа, кемгәлер 50–100 гектар тейер, ә бүтәнгә нимә? Ҡоймалап, мылтыҡлы ҡарауыл ҡуйылған, эт ултыртылған ерҙә еләк, бәшмәк йыйып, муйыл, балан тиреп ҡара һуңынан!

**Күп йылдар дәүләт һәм партия органдарында эшләгән Рамазан Өмөтбаев** төп халыҡ ерһеҙ ҡалмаһын өсөн ауыл советтары эргәһендә ниндәйҙер механизм булдырырға, кемдең, ҡасан, ҡайҙа сығып китеүен

асыҡлап, исемлектәр төҙөп, уларҙы саҡырып алырға тәҡдим итте. Юғиһә, башҡорт халҡы ерһеҙ ҡаласаҡ һәм иҡтисади бойондороҡло хәлгә төшәсәк, тип хәүефләнде.

**Башҡортостан ауыл хужалығы институты профессоры Нурамбәк Арыҫланов** БССР Министрҙар Советының Өфө районы ерҙәрен завод һәм фабрикаларға биреүенә борсолоу белдерҙе. Ниндәй нигеҙҙә, кем хәл иткән? Колхозсыға, ауыл кешеһенә нимә эшләргә? Колхозсының шәхси милеген тартып алырға түгел, ә ялланып эшләүсе хәленән ҡотҡарырға, хужа яһарға тейешбеҙ, тине. Нурамбәк Ғиниәт улы ла ерҙең шәхси милеккә һатылыуына ҡәтғи ҡаршы төштө.

**Профессор, философия фәндәре докторы Дамир Вәлиев** фермерҙарға ерҙе тик общиналар (ауылдар, колхоз-совхоздар) ризалығынан ғына бүлергә, Башҡортостанда урынлашҡан хәрби базаларҙан закон тәртибендә юғары һалым түләтергә тәҡдим индерҙе. Улар беҙҙән сығып китһен өсөн түләй алмаҫлыҡ һалым талап итергә, сөнки Башҡортостан ядроһыҙ, демилитаризацияланған республика булырға тейеш, тине. Ямантау – беҙҙең милли байлығыбыҙ. Туристар саҡырып, табыш алырға тейешбеҙ. Ә унда – хәрби объект. Ниңә беҙ Ямантауҙы үҙ ҡулыбыҙға алмайбыҙ?

**«Урал» башҡорт халыҡ үҙәгенән Баһауетдин Зәйнетдинов** Мәсетле районы ауылдарында йөрөп ҡайтыуын, халыҡ менән кәңәшләшеүен, ауыл кешеләренең ер һатыуға ҡырҡа ҡаршы булыуын бәйән итте.

Ейәнсура, Күгәрсен райондарында ете ауылда лекциялар менән сығыш яһап ҡайтҡан **ғалим Рәфкәт Акманов** ер мәсьәләһе менән бик һаҡ эш итергә саҡырҙы, көньяҡ райондарҙа фермерлыҡ бармай әлегә, сөнки техника юҡ – алты һәнәк тә бер эшсе, башҡа бер нәмәләре лә юҡ, тине.

**Профессор, ауыл хужалығы буйынса хоҡуҡ белгесе Фәнис Раянов** БССР Юғары Советында ер кодексы, крәҫтиән хужалыҡтары, ергә түләү, ер реформаһы тураһында яңы закондар эшләнеүен әйтте. Ерҙе һатыуҙы ла, фермерлыҡты ла тулыһынса тыя алмайбыҙ, сөнки баҙар мөнәсәбәттәре ҡотолғоһоҙ, һәм иҡтисад милек

төрөнөң үҙенә ҡулайлыһын – шәхси милекме, әллә коллектив-пай, общинамы һ. б. – үҙе һайлаясаҡ, тине Фәнис Мансур улы.

**БССР Юғары Советы Президиумы юрисконсульты Ванцет Буранғолов** Рәсәй хөкүмәтенең ергә һалымдың 40 процентын талап итеүенә ҡаршы, Башҡортостан – ҡырыҫ тәбиғәтле республика, тигеҙ урындарҙан тауҙар күберәк булыуын иҫәпкә алып, ғалимдар һәм белгестәр был проблема менән төплө шөғөлләнергә һәм РСФСР-ға түләүҙе кәметеүгә ирешергә тейештәр, тигән фекер үткәрҙе.

БССР Министрҙар Советы рәйесе М. П. Мирғәзәмовтың матбуғат конференцияһында һәм телевидениелағы интервьюһында Башҡортостанда ергә шәхси милек булдырмай мөмкин булмаҫ, ахырыһы, киләһе сессияла ошо мәьсәләне хәл итәсәкбеҙ, тип белдереүе халыҡта ошондай борсолоулы уйҙар тыуҙырҙы. Кәңәшмәлә әйтелгән бөтә тәҡдимдәрҙе БССР Юғары Советы Президиумы эргәһендәге ер реформаһы буйынса комиссияға тапшырырға һәм 25 февралдә буласаҡ хөкүмәт парламенты сессияһына еткерергә ҡарар ителде.

Фекер алышыу аҙағында **БССР Юғары Советы Рәйесе М. Ғ. Рәхимовҡа** һәм **БССР Министрҙар Советы Рәйесе М. П. Мирғәзәмовҡа** «Урал» башҡорт халыҡ үҙәгенең һәм Башҡорт халыҡ фирҡәһенең **Асыҡ хаты** уҡып ишеттерелде һәм дөйөм хуплау тапты.

«Урал» башҡорт халыҡ үҙәгенә һәм Башҡорт халыҡ фирҡәһенә мәғлүм булыуынса, **Башҡортостан хөкүмәте Балтик буйы республикаларында хеҙмәт иткән бик күп офицерҙар ғаиләләрен Башҡортостанда урынлаштырыуға ризалыҡ биргән.** Быға тиклем хөкүмәтебеҙ **Урта Азия республикаларынан ҡыуылған месхет төрөктәрен йәшерен рәүештә республикабыҙҙа ҡалдырған.** Бынан тыш, **Монголиянан һәм башҡа илдәрҙән сығарылған танк частарын Башҡортостанда урынлаштырыу хаҡында Рәсәй хөкүмәтенең ҡарары барлығын** БХҮ һәм БХФ ышаныслы сығанаҡтарҙан белә.

Быға тиклем Башҡорт халыҡ конгресы Башҡортостанды демилитаризацияланған, ядроһыҙ зона тип иғлан итеүҙе һәм уның территорияһынан бөтә ғәскәри частарҙы, ядро һәм ядро булмаған ҡоралды сығарыуҙы талап итеп, республика Юғары Советына мөрәжәғәт иткәйне, БХҮ һәм БХФ әҙерләгән асыҡ хат, ошо мөрәжәғәтте нығытып, республикаға төрлө хәрби һәм йәшерен объекттарҙы, хәрби частарҙы, хәрби хеҙмәткәрҙәрҙе, ҡоралды тыңҡыслап тултырырға ниәтләнеүҙәренә ҡаршы протест белдерҙе.

Хөкүмәт сере, әгәр ул халыҡ мәнфәғәттәренә ҡаршы килһә, бер ҡасан да сер булып ҡала алмай икән.

... Башҡортостан Республикаһында ер тураһындағы закондар ҡабул итеү 1991 йылда, ер реформаһын үткәреү өсөн Хоҡуҡи база булдырыуҙан башланды. Иң тәүҙә «Ер реформаһы тураһында», «Крәҫтиәндәр (фермерҙар) хужалығы тураһында», «Ҡортомға алыу тураһында», «Ер өсөн түләү тураһында» закондар, «Ер кодексы» ҡабул ителде, республиканың Юғары Советы Президиумының «Урындағы Советтарҙың махсус ер фондын булдырыу тураһында», «Ергә хужа булыу һәм даими файҙаланыу хоҡуғына Дәүләт актын раҫлау тураһында» ҡарарҙар һәм Указдар, Министрҙар Кабинетының егермеләгән норматив документтары сыҡты – улар ер реформаһын уҙғарыу һәм ер ресурстарына идара итеү тәртибен урынлаштырҙы. Һәм ер реформаһының тәүге осоронда ер мәсьәләләрен хәл итеүҙә мөһим роль уйнаны. 1991–1994 йылдарҙа урындағы Советтар ауыл һәм ҡасаба Советтары ҡарамағына 1380 мең гектар ер тапшырҙы, 684 мең гектар майҙанда район Советтарының махсус ер фонды булдырылды. Граждандарға мәңгелек мөлкәткә – 292,2 мең га, шәхси хужалыҡҡа – 135,7 га, дөйөм баҡсасылыҡҡа һәм йәшелсәселеккә – 44,7 га, шәхси торлаҡҡа һәм гараж төҙөлөшөнә 15 мең га ер бирелде.

Шулай ҙа, Салауат ҡалаһынан «Аҡбуҙат» башҡорт халыҡ ойошмаһы рәйесе ярҙамсыһы Тәлғәт Исмәғилев хөкүмәт әһелдәренә биргән: «Ҡасан Башҡортостан Республикаһында йәшәүсе башҡорт халҡына ерен, һыуын һәм урманын кире ҡайтарып бирәһегеҙ? Ҡасан башҡорт

халҡы исеменән башҡорт ерен һатыуҙы туҡтатаһығыҙ?» – тигән һорауҙарына яуап алдымы икән? («Йәшлек, 23 февраль, 1993 йыл). Был һорауға яуапты тормош үҙе бирә.

Тик шуныһы, беҙҙә ер реформаһы башҡорттар мәнфәғәтендә генә түгел, ә һәр үҫешкән йәмғиәттәгесә, хоҡуҡи нигеҙҙә тормошҡа ашырыла. Башҡортостан Республикаһы Конституцияһының 10-сы статьяһында яҙылғанса: «Башҡортостан Республикаһы территорияһындағы ер, ер аҫты һәм ер өҫтө байлыҡтары, шулай уҡ тәбиғәт байлыҡтары һәм башҡа ресурстар уның күп милләтле халҡының ҡаҙанышы (милке) булып тора».

Әммә Рәсәй империя фекерләүенән һаман да арына алмай һәм федерализмға ныҡлап аяҡ баҫа алмай ыҙаланғанда, Башҡортостан, дәүләт суверенитетын иғлан итеп тә, еренә, һыуына, урманына барыбер тулы хужа була алмай, әлбиттә.

Атом боеголовкалары, уран һәм плутоний, ҡорал һатып байыуҙан туя алмаған, Рәсәй территорияһын бөтә донъяның радиоактив ҡалдыҡтары ҡәберлегенә әйләндереп, ғәйәт ҙур табыш алырға хыялланған мафия башлыҡтары халыҡты хәйерселек сигенә төшөрөү, үҙҙәре тағы ла нығыраҡ байыу өсөн күптән инде илдә ер һатыуҙы законлаштырырға теләне. Хәйер, беҙҙең Башҡортостан ере былай ҙа йәшерен генә һатылыуын дауам итә ине. Гүзәл күлдәр иле Әбйәлил күрше Силәбе өлкәһенә ҡараған Магнитогорск металлургия комбинатының табышына әйләнә барһа, Башҡортостандың кендеге – икенсе Швейцарияға тиң мәшһүр Белорет урмандары – Рәсәй атом энергетикаһына ҡорбан килтерелде. Ахырҙа, Башҡортостан суверенитетына, Декларацияһына һәм Конституцияһына ҡаршы килеп, 96 мең гектар ерҙе Оборона министрлығы тартып алды.

«Шок терапия»һы 1993 йылда ла дауам ителде: бер ай ваҡыт ҡалғас ҡына, халыҡтың башына күҫәк менән тондорғандай, республика өсөн үтә лә мөһим булған иҡтисади үҙаллылыҡ һәм ер мәсьәләһенә бәйле референдум иғлан ителде. Ошо ваҡыт эсендә генә референдумдың асылын халыҡҡа аңлатып өлгөрөп булырмы?

Унан һуң, республикала ер һатыуға ҡаршы һәм иҡтисади үҙаллылыҡты яҡлап тауыш биргәндә лә, яңы «Межгорье»лар хасил булмаç, тип кем ышандыра ала?

Әлбиттә, Башҡортостанда йәшәгән бер генә милләт тә тыуған еренән яҙырға теләмәй, ер һатыуға ҡаршы, бигерәк тә – дүрт быуат буйы ер өсөн туҡтауһыҙ ихтилалдарға күтәрелеп, миллионлаған ҡорбандар килтергән төп халыҡ.

1995 йылдың 17 декабрендә Башҡортостан халҡы, республика референдумында ҡатнашып, күпселек тауыш менән ер һатыуға ҡаршы икәнлеген белдерҙе.

Ә 1998 йылдың 24 февралендә «Советская Россия» гәзите Федерация Советында региондар етәкселәренең ер һатыу буйынса тауыш биреү мәғлүмәттәрен баçтырып сығарҙы. Унда күпселек, шул иçәптә Башҡортостандан М. А. Зайцев менән Татарстандан В. Н. Лихачев, ер һатыу өсөн тауыш биргәйне. Бына шулай Михаил Зайцев Башҡортостан референдумының йомғаҡтарын бер һелтәүҙә юҡҡа сығарып ҡайтҡайны. Рәсәйҙә ерҙе һатыу-һатмау тураһындағы бәхәс, бер өҙөлөп, бер яңыртылып, бөгөнгә тиклем дауам итә. Әммә шуныһы асыҡ: беҙҙең илдә ер һатыу һәм һатып алыу рөхсәт ителә ҡалһа, был электән нығыраҡ иҙелгән, йәшәргә иммунитеты көсһөҙләндерелгән һәм шуға ла әлегә тиклем баҙар мөнәсәбәттәренә инеп китә алмаған төп халыҡтар өсөн үлемесле буласаҡ, хатта Рәсәйҙә милли республикаларҙы бөтөрөүгә килтереүе лә ихтимал. Төп халыҡ, ерле халыҡ, дәүләтселеген һаҡлап ҡалайым, тиһә, еренән, тарихи территорияһынан айырылырға тейеш түгел. Бөгөн цивилизациялы донъяла тап шуға төп иғтибар йүнәлтелә.

Әммә халыҡ иçәбен алған һайын бер туҡтауһыҙ кәметеп күрһәтелгән һәм ҡасандыр аçаба ер хужаһы булған башҡорттар үҙ илендә, бер көн килеп, ерһеҙ ҡалһа, йәғни территориаль бөтөнлөгөн юғалтһа, беҙгә Америка ла, БМО ла, НАТО ла ярҙам итә алмаясаҡ. Беҙ быны бөгөн һәм бөгөн ҡайғыртырға тейешбеҙ! БМО Генераль Ассамблеяһының 1979 йылғы сессияһы

азатлыҡ, территориаль бөтөнлөк, милли берҙәмлек өсөн мөмкин булған бөтә саралар менән, шул иҫәптән ҡорал көсө менән, көрәшеүҙе законлы тип билдәләне. Мин, йәһүдтәр баҫҡынсылығынан алйыған ғәрәптәр кеүек, ҡоралға тотоноорға саҡырмайым – белем, хоҡуҡтар һәм төп халыҡты яклаған закондар менән ҡоралланайыҡ! Иң тәүҙә илбаҫарлыҡҡа сик ҡуйыусы һәм республикала башҡорттарҙың процентын әҙәйтеүгә йүнәлтелмәгән «Ҡасаҡтар тураһында» цивилизациялы закон кәрәк!

Юғиһә хәҙер беҙҙе төп халыҡ тип тә танымай башланылар: «Ученым и публицистам, считающим башкир единственным в РБ «коренным» народом, интересно будет знать, что из числа опрошенных в 1992 г. 93,4% – башкир, 86,2% – татар, 67,2% – русских ответили, что их «предки всегда жили здесь» или их происхождение «не известно» (*Р. Г. Кузеев*. Демократия. Гражданственность. Этничность. Уфа, 1999). Ә бит халыҡ-ара хоҡуҡ кимәленән тороп һүҙ йөрөткәндә, «төп халыҡ» тигәндә бөгөнгө мәмерйә хужалары тураһында һүҙ бармауы айыҡ фекер йөрөткән һәр кемгә аңлашылалыр. Татар-монгол урҙалары, һуңынан Мәскәү кенәзлеге баҫып алғанға тиклемУралдан Каспийға тиклем иркен далаларҙа ирәйеп йәшәп ятҡан төп халыҡ – башҡорттар тураһында һүҙ бара. Баҫҡынсылыҡ, колониализм, геноцид сәйәсәтенә ҡаршы мәҙәниәтен, ерен, динен һәм халҡын һаҡлап алып ҡалыу өсөн туҡтауһыҙ көрәш алып барыу һөҙөмтәһендә башҡорттар үҙ илендә әҙселектә тороп ҡалған икән, был уның төп халыҡ булыуҙан туҡтауын аңлатмай. Чечняны ла чечендарҙан тотошлай «таҙартҡан» осраҡта ла оккупанттар – оккупант, чечендар – төп, ерле халыҡ булып ҡаласаҡ. Унда күсеп ултыртыласаҡ күскенселәр, Башҡортостандағы кеүек, илдең хужаһы, төп хужаһы булғанда ла халыҡ-ара хоҡуҡ нормаларында билдәләнгән төп халыҡты бер ҡасан да алмаштыра алмаясаҡ.

Башҡортостанда төп халыҡты милләттең һанына ҡарап билдәләү төп халыҡты яклау һәм һаҡлау хаҡындағы закондың бөгөнгә тиклем ҡабул ителмәүенең һөҙөмтәһе.

Ул халыҡ-ара хоҡуҡ документтарына нигеҙләнеп төҙөләргә тейеш ине.

Юғиһә бит, башҡортто хәҙер төп халыҡ тип тә, милләт тип тә танымай башланылар. Улар араһында профессорҙар, академиктар бар, шулар тарих китаптарын нәшер итә, юғары уҡыу йорттарында милли кадрҙар тәрбиәләй.

Мин Рәсәй Федерацияһындағы республикаларҙа ҡыҙыу бәхәстәр тыуҙырған «Федерализм власти и власть федерализма» тигән китапты ла күҙ уңында тотоп һүҙ алып барам (Москва, 1997. Ответственный редактор: Губогло М. Н.). Шунда беҙҙең республиканан Рәсәй Дәүләт Думаһына депутат итеп һайланған Александр Аринин милли дәүләтселектәргә ҡаршы бик ҙур мәҡәлә менән сығыш яһап, төп халыҡтарҙың хоҡуҡтары хоҡуҡи дәүләт һәм демократия нигеҙҙәрен ҡаҡшата, тип яҙа. Һәм милли республикалар менән суверенлы дәүләттәр Рәсәй дәүләтселегенә һәм ысын федерализмға ҡаршы килә, тип раҫлай. Бына һеҙгә «региональ проблемалар институты президенты»ның кимәле! Бар донъя йәмғәтселеге, Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы һәм Европа Советы халыҡ-ара хоҡуҡ системаһын яҡлауға һәм иң тәүҙә уларҙың тарихи ерҙәренең тейелгеһеҙ булыуына ҙур иғтибар бүлгәндә, тик беҙҙең Рәсәйҙә генә һаман да саф урыҫ империяһын төҙөү тураһында хыяллана булып сығалар. А. Н. Арининдың фекерҙәрен, нигеҙҙә, үрҙә телгә алынған китаптың башҡа авторҙары, шулай уҡ РФ Дәүләт Думаһы депутаттары С. Н. Бабурин, Л. А. Иванченко, В. Н. Лысенко, субъекттар менән ике яҡлы килешеүҙәр төҙөү буйынса Рәсәй президенты эргәһендәге комиссия рәйесе С. М. Шахрай һәм Рәсәй Фәндәр академияһы этнология һәм антропология институтының директор урынбаҫары, Рәсәй этнологтары һәм антропологтары Ассоциацияһы президенты М. Н. Губогло ла яҡлай. Уларҙың барыһы ла субъекттарҙың Үҙәк менән төҙөгән ике яҡлы Килешеүҙәрен Рәсәй Конституцияһын тупаҫ боҙоу тип ҡарай. Әйтергә кәрәк, Чечняла тап шул «Конституция тәртибен» урынлаштырыу өсөн инде нисәмә йылдар

ҡанлы һуғыш бара. Республикаға исем биргән төп халыҡ иң аяуһыҙ ысулдар менән депортациялана, һуғыштан һун тергеҙелгән ерҙәрҙә тик күскенселәргә, йәғни чечен булмағандарға, өҫтөнлөк бирелә, гуманитар ярҙам таратыла, матди ярҙам күрһәтелә, аҡса түләнә...

... Ер – милләттең бишеге, тинек. Башҡорттоң Аллаһы ла, муллаһы ла – Ер. Ул һаман ислам диненә мөкиббән бирелеп инеп китә алмай, асылы менән һаман мәжүси булып ҡала бирә. Беҙ бөгөн дә Ергә, Һыуға, Ҡояшҡа, Ыйыҡ таштарға арҡаланып, шуларҙан көс-ҡеүәт алып, ерегеп һәм берегеп йәшәйбеҙ. Уларҙан Космос энергияһын һәм нурын алып, башҡортлоғобоҙҙо һаҡлайбыҙ, яҡлайбыҙ. Һәр башҡортҡа йырсы, ҡурайсы, рәссам, бейеүсе, шағир, йыраусы... һәләттәре тәбиғәт тарафынан бирелгән.

Шул йондоҙло һәм йыһан нуры һеңгән бер ҡатлы тәбиғәтебеҙ арҡаһында баҙар мөнәсәбәттәренә лә инеп китә алмай ыҙаланабыҙ түгелме?! «Һин, болотҡай, Айҙы ҡаплама!» – тип һөрән һалыу ғына аҙ бөгөн. Шул Ай яҡтыртырлыҡ, шул Ҡояш йылытырлыҡ, күпме шиғырҙарҙа наҙланған ләйсән ямғыры сылатырлыҡ Еребеҙ йәшәһен өсөн хәрәкәт һәм хәрәкәт итергә кәрәк! Юғиһә беҙ табынған Урманды киҫәләр, кендегебеҙ береккән Ергә ракеталар ҡаҙайҙар, хәрби полигон урынлаштыралар, Ер Әсәһе – Ағиҙелде быуалар...

Статистика мәғлүмәттәренә мөрәжәғәт итәйек.

Башҡорт иленең аҡылдан яҙҙырырлыҡ ожмах мөйөштәре – Башҡортостан ҡурсаулығы (1930 йылда ойошҡан), Шүлгәнташ ҡурсаулығы (1986 йылда төҙөлгән), Көнъяҡ Урал ҡурсаулығы (1979) һәм «Башҡортостан» дәүләт-милли тәбиғәт паркы (1986) ерҙәре элек 383, 9 мең гектар тәшкил итһә, 1999 йылда 1,6 мең гектарға кәмегән. Шул иҫәптән 1,5 мең гектары БР Министрҙар Кабинетының 1999 йылдың 17 августындағы 263-сө «Башҡортостан» милли паркының сиктәрен асыҡлау тураһында»ғы ҡарары нигеҙендә урман фонды категорияһына күсерелгән.

Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәтенең 1992 йылдың 3 марттағы 35-се «Ҡасаҡтарға һәм мәжбүри күскенселәргә ярҙам күрһәтеү саралары тураһында»ғы ҡарарына ярашлы рәүештә Башҡортостан Республикаһының Министрҙар Кабинеты 1992 йылдың 3 августында үрҙә телгә алынған кешеләргә индивидуаль торлаҡ (фермер) хужалыҡтарын ойоштороу өсөн ер участкаларын бүлеп биреү хаҡында 265-се ҡарар ҡабул итә. Шул ҡарар нигеҙендә 1993–1999 йылдарҙа республикала 3152 күсеп килгән ғаиләгә 1415 гектар ер бүленгән. Ә 2000 йылдың 1 ғинуарына ҡарата республикаға бер туҡтамай ағылған ҡасаҡтарҙың тағы 410 мең гектар ер һорауы мәғлүм. (Күскенселәр араһында иһә башҡорттар бармаҡ менән генә һанарлыҡ). (Государственный (национальный) доклад о состоянии и использовании земель Республики Башкортостан за 1999 год. Уфа, 2000).

Халыҡ-ара гуманитар мәсьәләләр буйынса бойондороҡһоҙ комиссия өсөн әҙерләнгән докладтың ҡайһы бер мәғлүмәттәренә мөрәжәғәт итәйек:

**«Отличительной особенностью коренного населения является владение землей или наличие территориальных претензий...»**

**«Разработка полезных ископаемых, сооружение плотин, строительство дорог, вырубка лесов лесозаготовительными компаниями и скотоводческими хозяйствами – вся эта деятельность, проводимая во имя национального развития, часто отрицательно сказывается на жизни и средствах к существованию коренного населения».**

**«В последние 30 лет возросло число случаев и возросла интенсивность вторжения на земли, которые когда-то считались исключительно территорией коренного населения».**

**«В результате осуществления программ строительства плотин страдают земли коренного населения... Многие из этих территорий действительно не служат основным источником средств к существованию для большого числа жителей. Тем не менее на них**

**проживают коренные жители, и они могут здесь жить тысячи лет. Поэтому затопление плодородных долин и покрытых лесом склонов, которые могут использоваться для переложного земледелия, охоты и собирательства, может разрушить систему жизнеобеспечения коренных жителей».**

*(Коренное население. Глобальное стремление к справедливости. Доклад для независимой комиссии по международным гуманитарным вопросам. Москва, 1990. Стр. 33, 79, 80, 93).*

... Бөгөнгө көндә Рәсәйҙә алып барылған милли сәйәсәттән айырмалы рәүештә, бөтөн донъяла ерле халыҡтарҙың йәшәйеше халыҡ-ара берләшмәлә айырыуса ҙур борсолоу уята, сөнки тап улар иҡтисади, социаль үҫеш йәһәтенән башҡа этник төркөмдәргә ҡарағанда нығыраҡ зыян күргән. Державасыл империялар, яңынан-яңы территориялар үҙләштереп, колонияларындағы халыҡтарҙы күп быуаттар буйы иҙеп йәшәгәнлектән, улар хәҙер кәмеү генә түгел, бөтөү сигенә яҡынлашҡан. БМО Генераль Ассамблеяһының 1993 йылды «Халыҡ-ара төп халыҡтар йылы» тип иғлан итеүе иһә халыҡ-ара йәмәғәтселектең төп халыҡ проблемаларына йөҙө менән боролоуының сағыу миҫалы булып торҙо. Ә был осор беҙҙең Рәсәй Федерацияһында иһә 1992 йылда үҙҙәренең тарихи ерҙәренә – Төньяҡ Осетияның Пригородный районына – ҡайтырға теләгән ингуштарҙы ҡанға батырып, ҡабаттан депортациялағандан һуң, 1994 йылда азатлыҡ иғлан иткән Ичкерияға ғәскәр индерер алдынан тын алыу ғына ине.

Тик беҙгә шуны асыҡлап ҡуйырға кәрәк, Рәсәй Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы ағзаһы, тимәк, беҙ, Рәсәй халыҡтары, бөтәбеҙ ҙә, Конституцияларыбыҙҙа был хаҡта яҙылыу-яҙылмауына ҡарамаҫтан, халыҡ-ара хоҡуҡ субъекттары булып торабыҙ. Сөнки Рәсәй Федерацияһының Конституцияһы «Беҙ, Рәсәй Федерацияһының күп милләтле халҡы...» тип башланып китә. Ә 1-се главаның 1-се статьяһында: «Рәсәй Федерацияһы – Рәсәй ... демократик федератив хоҡуҡи дәүләт», – тип яҙып ҡуйылған.

5-се статьяла Рәсәй Федерацияһының республика, край, өлкә, федераль әһәмиәтендәге ҡалалар, автономиялы өлкәләр, автономиялы округтар кеүек тиң хоҡуҡлы субъекттарҙан тороуы нығытылған. Шулай булғас, беҙ ҙә БМО ҡабул иткән халыҡ-ара пакттарҙағы хоҡуҡтарыбыҙ өсөн аяҡ терәп көрәшә алабыҙ. Ә бит БМО-ның 1994 йылдың 26 августа ҡабул иткән Төп халыҡтар хоҡуҡтары Декларацияһы проектында[1] беҙҙең ергә аҫабалыҡ хоҡуғыбыҙ нығытылған: **«Коренные народы имеют право на признание своей особой и глубокой связи со своими землями и территориями... В настоящей Декларации выражение «земли и территории» используется для обозначения всех компонентов окружающей среды, включая земли, воздушное пространство, воды, морские районы, морские льды, флору, фауну и другие ресурсы, которые традиционно принадлежали коренным народам или которые иным образом занимались или использовались» (часть V, пункт 23). «Коренные народы имеют право на возвращение земель и территорий, которые были конфискованы, заняты, использованы или которым был нанесен ущерб без их свободного и осознанного согласия, а если это не представляется возможным, то на получение справедливой компенсации...» (Пункт 25).**

Был юлдар 1957 йылдың 29 сентябрендә Арғаяштан 50 саҡрым алыҫлыҡта ятҡан Ҡыштым менән Кәҫле араһында «Маяҡ» комбинатының радиация ҡалдыҡтары һаҡлағыстарының береһе шартлағандан һуң юҡ ителгән алтмыш башҡорт ауылының яҙмышына ла туранан-тура ҡағыла. Атом ҡоралы өсөн плутоний эшләп сығарған «Маяҡ» радиохимик комбинатының радиоактив ҡалдыҡтарын Мейәскә ҡойған Динис (Теча) йылғаһына түгеүҙәре етмәгән, шартлауҙан һуң тик Силәбе өлкәһендә генә 450 мең кеше зарарлана. Иң күп радиация алғандары – Арғаяш, Ҡоншаҡ, Кәҫле райондары халҡы (уның күп-

---

[1] *Илишев И. Г.* Язык и политика в многонациональном государстве. Уфа: «Китап», 2000. С. 227.

селеге башҡорттар). Силәбе башҡорттары бөгөн дә нур ауырыуынан, төрлө шеш ауырыуҙарынан ҡырылыуын дауам итә. Үле Динис йылғаһында ашарға ярамаған, радиациянан таҙға әүерелгән суртандар йөҙә, ҡоштар һәләк була, әсәләр «балыҡ-балалар» таба, ә Мөслим ауылы халҡы һаман да шул йылғаның һыуын эсеп йәшәй...

2000 йылдың 1 июленә, мәҫәлән, Силәбе өлкәһе территорияһында радиация йоғонтоһонан зыян күргән 31936 граждан йәшәй. Быға ҡағылышлы тиҫтәләгән федераль закондар ҡабул ителеүенә һәм уларға бер туҡтауһыҙ өҫтәлмәләр индерелеп тороуға ҡарамаҫтан, Рәсәй хөкүмәтенең уларҙы дауаларға, аҡсалата компенсациялар түләргә, башҡа төрлө өҫтөнлөктәр булдырырға мөмкинлектәре лә, аҡсаһы ла, теләге лә етерлек булғаны юҡ әле.

Ә бит «Маяҡ»та яһалма рәүештә эшләп сығарылған плутоний – 239 ($^{239}Pu$) радиоактив химик элементы – иң хәүефле, иң ҡурҡыныс изотоп. Уның тарҡалыу осоро 24 мең 110 йыл тәшкил итә. Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ...

Эйе, Рәми Ғарипов яҙғанса, кешеләр бит «тупраҡтан, ерҙән яралған, ерҙә тыуып-үҫеп, ерҙә аунап, ерҙән йыйып... йыр алған!» Шағир Башҡортостанын, тыуған илкәйен Урал күкрәгендәге йөрәк, ә күкһел Ағиҙелде ҡан тамырҙары менән сағыштырған. Әммә бөгөн шул йөрәккә химия уҡтары ҡаҙала, ҡан тамырҙарына ағыу үтеп инә. Урмандарҙа ағастар ҡорой, бал ҡорттары һәләк була, үләндәр, йәшелсә-емеш – бөтәһе лә нефть һәм химия продукттарының ташландыҡтары менән зарарлана. Барса йән эйәһенә йәшәү һуты биреп, тереклек бөркөүсе тәбиғәт һәләкәт сигендә.

... Тәүге тапҡыр Өфөгә килеүем хәтерҙә уйылып ҡалған. Томра, эҫе йәй көндәре ине. Ағиҙелгә һыу инергә барҙыҡ. Ҡойоноп сыҡҡас, тәнемдең ҡарайып китеүенә аптырап ҡалғайным. Ҡом буялғандыр, тип йәнә һыуға сумдым. Тик ... тағы ла нығыраҡ бысрандым. Шул саҡ тәнемә ҡарағусҡыл май һылашыуын шәйләнем – мазут ине был. Ҡала кешеләрен йәлләп тә ҡуйғайным.

Ул ваҡыттан бирле 25 йыл ваҡыт үтеп китте. Бөгөн ошо зарарлы промышленность ҡалдыҡтары һыуға, һауаға инеп, хатта тупраҡҡа ла үтеп инеп, кешелектең йәншишмәһе булған тәбиғәтте тамырынан ҡоротто.

Республиканы ҡасандыр илебеҙҙең алдынғылары иҫәбенә сығарған, милли ғорурлығыбыҙға әйләнгән, кешегә юғары маҡсаттарҙа хеҙмәт итеү өсөн тәғәйенләнгән нефть эшкәртеү һәм нефть химияһының хәҙер файҙаһынан зыяны күберәк. Тыуған еребеҙҙең ысын мәғәнәһендә ҡан тамыры булған Ағиҙел йылғаһы буйындағы Мәләүез, Салауат, Ишембай, Стәрлетамаҡ, Өфө, Благовещенск ҡалаларында промышленность үҙәктәренең күпләп тупланыуы тәбиғәттә көсөргәнешлек тыуҙырҙы. Химия комплексы һәм йылылыҡ энергетикаһы предприятиялары тирә-яҡ мөхитте бысратыусы төп объекттарға әйләнде.

Республикабыҙ йылғаларында балыҡ үрсемәй, аҡкоштар күлдәрҙе ташлап китә, урмандарҙа һайрар ҡоштар, кейектәр кәмей... Шул уҡ ваҡытта ҡайһы бер үҫешкән капиталистик илдәрҙәге заводтар эргәһендә һауаның шундай таҙа булыуы (сөнки таҙартыу ҡоролмалары бар һәм сифатлы эшләй), хатта яҡын-тирәлә ҡоштар оялауы һәм ҡошсоҡтар сығарыуы хаҡында гәзиттән уҡып хайран ҡалабыҙ. Эйе, беҙ телевизорҙа, радиола, гәзит-журнал биттәрендә тыуған ергә ҡарата һөйөү, патриотизм тойғоһо тәрбиәләү, атайсалдың рухи һәм матди байлыҡтарын арттырыу тураһында фәлсәфә һатырға яратабыҙ. Тормошта иһә бөтә ер йөҙөндә тиңдәше булмаған гүзәл мөйөштәрҙе, мәмерйәләрҙе һыу аҫтында ҡалдырырға, ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған ерҙәрҙе тапап, емереп, бөтә тәбиғәтте һәләкәткә дусар итеүсе объекттар төҙөргә йыйынабыҙ...

БМО-ның төп халыҡтар хоҡуҡтары Декларацияһы проектында ҡаралған ергә хоҡуҡтарыбыҙҙы барлауҙы дауам итәйек әле.

**«Коренные народы имеют право на восстановление и охрану всей окружающей среды и производственного потенциала их земель и территорий, а также на получение для этой цели помощи от государств и**

**международного сообщества. Если с соответствующими народами не имеется добровольно достигнутой договоренности об ином, на их землях и территориях не осуществляется военная деятельность и хранение или удаление опасных материалов» (пункт 26).**

Хәҙер инде һәр кемгә мәғлүм, Башҡортостанда нефть табыуҙы арттырыу маҡсатында түбәндәге райондарҙа ер аҫтында атом шартлатҡайнылар: Ишембайҙа – Кинйәбулат ауылы эргәһендә, Мәләүездә – Тирәкле ауылы янында. Салауат ҡалаһынан алыҫ түгел «Кама» программаһы һәм Стәрлетамаҡ ҡалаһы ситендә «Тәбиғәт» программаһы буйынса сәнәғәттәге[1] шыйыҡ ташландыҡтарҙы күмеү өсөн ер аҫты резервуарҙары барлыҡҡа килтереү маҡсатында шулай уҡ атом шартлаттылар. 1954 йылдың сентябрендә Ырымбурҙағы Тоцк полигонында ер өҫтөндә атом шартлатылды, шунын һөҙөмтәһендә Башҡортостан Республикаһының Федоровка, Стәрлебаш, Бишбүләк, Бәләбәй, Туймазы, Шаран һ. б. райондары радиоактив зарарланыуға дусар ителде. Бөгөнгө көндә ошо райондарҙа эсер һыу етешмәүе, республиканың шеш ауырыуҙары больницаларының туптулы булыуы шуның менән дә аңлатылалыр, моғайын. Үҫешкән, алға киткән илдәрҙә хәҙер халыҡҡа зыян килтерерлек АЭС-тар төҙөмәйҙәр, хатта быуаларҙан баш тарталар, икенсе, зарарһыҙ ысулдар эҙләп табалар. Йәшелдәр хәрәкәте, комитеттар, министрлыҡтар шул юҫыҡта эшләй. Ә беҙҙәге бәшмәк кеүек шытып сығып торған яңынан-яңы экология комитеттары, министрлыҡтар бөгөн халыҡты шул бәләләрҙән йолоп алып ҡалыу йүнәлешендә түгел, йәғни экология фажиғәләрен булдырмау өсөн түгел, ә фажиғә эҙемтәләрен бөтөрөү менән мәшғүл.

... Ә «Белорет–15», «Белорет–16» һәм Межгорье хәрби ҡаласыҡтарында ерһеҙ, эшһеҙ, мәктәпһеҙ, больницаһыҙ, магазинһыҙ, газһыҙ, һыу үткәргесһеҙ, телефонһыҙ – бер нимәһеҙ ҡалған, Башҡортостан телевидениеһын ҡарай алмаған һәм башҡортса радио тыңлай алмаған башҡорттар («Ватандаш», № 8, 1999) үҙ хоҡуҡтарын беләме икән?

---

[1] Сәнәғәт – промышленность.

Хатта Рәсәй Федерацияһы Конституцияһына таянып ҡына ла улар йәшәүгә хоҡуҡ талап итә алыр ине.

Нинә беҙ үҙ хоҡуҡтарыбыҙ өсөн хоҡуҡи кимәлдә көрәшә белмәйбеҙ икән? Күҫәк күтәреп сығыр замандар күптән үткән, цивилизациялы донъя бөгөн законлар менән генә эш итә, хоҡуҡи йәмғиәттәрендә хоҡуҡи юлдан атлай.

Йәшәүгә хоҡуҡ яулап, көрәшә һәм еңә белеүгә Рәсәйҙең яҡын тарихынан ғибрәтле миҫал килтерергә теләйем.

1984 йылда партия Үҙәк Комитеты төньяҡ йылғаларын кирегә бороу һәм Урта Азия сүллектәрен һуғарыу проектын күтәреп сыҡҡас, тотош урыҫ интеллигенцияһы быға ҡаршы сыҡты. Беҙ ул йылдарҙы, тоталитаризм осоро, тибеҙ, әммә 80-се йылдар башында Себер йылғаларын быуыуға ҡаршы мәҡәләләр үҙәк гәзиттәрҙә, шул иҫәптән «Правда»ла баҫылып сыға, Яҙыусылар съезы уҙғарыла. Һәм Сергей Залыгин кеүек бөйөк урыҫ зыялыларының дәлиле шундай була: йылғаны быуыу менән төньяҡта климат үҙгәрәсәк, шуның һөҙөмтәһендә милләттең архитектура ҡиммәттәре – мәмерйәләр һәм уларҙың стеналарындағы боронғо кеше һүрәттәре боҙоласаҡ, Соловки, башҡа монастырҙар юҡҡа сығасаҡ. Уйлап ҡарағыҙ әле, ә Соловкиҙан башҡа, ғөмүмән, урыҫ тарихын күҙ алдына килтереп буламы ни? Төньяҡ йылғаларын бороу проекты, шулай итеп, юҡҡа сығарыла, ә Урта Азияла, күреүебеҙсә, бер кем дә һыуһап үлгәне юҡ әле. Унда һыу былай ҙа етерлек икәнлеге һәр кемгә мәғлүм. Тотош халыҡтарҙың тарихын, уның йәшәү тамырҙарын, милли байлыҡтарын бер һелтәүҙә юҡ итеү ихтималлығын бөтә фажиғәһендә аңлау өсөн түбәндәгеләрҙе күҙ алдына килтереп ҡарайыҡ әле. Башҡорт халҡының тарихи төйәге Уралға, донъяла тиңе булмаған Шүлгәнташ мәмерйәһенә, башҡорттоң ошо төбәктәге меңәр йыллыҡ тарихын һөйләүсе «Урал батыр», «Аҡбуҙат» эпостарында һүрәтләнгән ерҙәргә, Ер әсәһе – Ағиҙелгә, Йылҡысыҡҡан күленә, милләтебеҙҙең быуаттарҙан-быуаттарға күсә килгән мифологияһын һәм топонимияһын

барлыҡҡа килтергән тау-ҡаяларға, саф һыулы шишмәләргә, ҡабатланғыһыҙ үҫемлектәр һәм кейек-хайуандар донъяһына, ҡош-ҡортҡа, бар донъяла танылыу яулаған бал ҡорттарына үлемесле хәүеф янаһа, нимә эшләр инек икән? Беҙгә бирелгән демократияның самаһы һәм хаҡы ана шуға яуап булыр.

Күп милләтле Башҡортостанда утрау-утрау булып һаҡланып ҡалған башҡорт шул ерҙәренән дә яҙһа, беҙҙе бында төп халыҡ тип тә танымаясаҡтар. Әле бөгөн, күҙгә бәрелеп торған дәлилдәребеҙ булыуға ҡарамаҫтан, беҙ уны ҙур ҡыйынлыҡ менән иҫбатлайбыҙ түгелме?

Шул уҡ Төп халыҡтар Хоҡуҡтары декларацияһы проектының II өлөшөнөң 9-сы пунктында былай тип яҙылған: **«Коренные народы не подлежат насильственному перемещению со своих земель или территорий. Любое перемещение осуществляется на основе свободного и осознаного согласия соответствующих коренных народов и после заключения соглашения, предусматривающего предоставление справедливой компенсации и, по возможности, права на возвращение».**

Үҙ йортонда үҙ ихатаһы, йәшелсә һәм емеш баҡсалары, мал-тыуары, ҡуян-йәнлектәре, ҡош-ҡорто, бөткөһөҙ умарталары менән саф йылға-шишмәләре ҡосағында йәйрәп йәшәп ятҡан һәм 1995 йылда ғына Межгорьеға бирелеп, биш ҡатлы таш йорттарға күсерелгән халыҡтан нимә ҡалды? Бындай шарттарға яраҡлашмаған, бер ниндәй квалификацияһы булмаған ауыл кешеләре «бөйөк милләттәрҙең» хеҙмәтсеһе хәлендә ҡалып, эскегә бирелеп, һәләк булып бөтөп бара бөгөн.

Баязит Бикбайҙың «Ер» поэмаһы бөгөн дә актуаль яңғырай:

Ерҙе талап алдылар,
Ерҙе алдап алдылар,
Ерҙән яҙған ярлылар
Ҡаҡ сағылда ҡалдылар.

Еренән ҡалған халҡым бөгөн дә ярлы, фәҡир, бахыр. Мәҫәлән, Магнитогорск өлкәһенең Әбйәлил һәм Белорет райондарының ерҙәренә ҡаныҡыуы тураһында журналист Гөлдәр Хафизова «Йәшлек» гәзитендә борсолоулы ла, рәнйеүле лә мәҡәләләрен бынан ун йыл элек үк баҫтыра башлағайны. Һуңғы йылдарҙа хәл тағы ла аянысыраҡ төҫ алған икән. Әйтәйек, Белорет районының Абзаҡ ауылы эргәһендә генә ни өсөндөр республика халҡы өсөн түгел, ә «Магниттың ял йорттары, балаларҙы һауыҡтырыу үҙәктәре, йәйге ял һәм спорт лагерҙары, туристар базаһы, донъя стандарттарына яуап биргән тау саңғыһы трассаһы урынлашҡан» икән. Һуңғы ваҡытта был ерҙәргә күрше өлкәнең «яңы урыҫтары» ла күҙ һалған. Ауылдарына килеп, хан һарайҙары, коттедждар, сауналар төҙөй башлаған... Ситтән килгәндәргә уңлы-һуллы ер таратыу арҡаһында урындағы халыҡтың ерҙәре ҡыҫылған, күбеһе һаҡал һыйпап ҡалған» («Йәшлек», 26 октябрь, 1999).

Белорет районының Асы ауылынан 13 кешенең ҡултамғаһы менән килгән хатта ла ер мәсьәләһе күтәрелгән.

«Беҙҙең ауыл тар ғына урында, тауҙар уратып алған һаҙлыҡ ерҙә ултыра, ауылды уртаға бүлеп үтеп, тимер юлы беҙҙе тауҙарға ҡыҫырыҡланы.

Хәҙер яңы хәүеф өҫтәлде. Бөгөнгө район етәкселәре, Силәбе, Магнитогорск ҡалаһы етәкселеге, беҙҙең йорт артындағы еребеҙҙе үлсәтеп, яңы төҙөлөп ятҡан санаторий зонаһы тип иғлан итеүгә әҙерлек алып баралар.

Белеүегеҙсә, ауыл өйө янында йәшелсә, картуф баҡсаһы ла, мөмкинлек булған ерҙә әҙме-күпме бесәнлек тә була. Ә беҙ шул бесәнлекте йылдан-йыл тау һыртын таҙартып, ҡул көсө менән эшләп алғанбыҙ. Унда яҙын-көҙөн ваҡ мал тотабыҙ. Атыбыҙ ҙа шунда тора, сөнки яҡын-тирәлә көтөүлектәр бөтөнләй юҡ». («Йәшлек», 14 октябрь, 1999).

* * *

1999 йылда Үҙәк телевидениела Ханты-Манси округынан тетрәткес кадрҙар күрһәткәйнеләр... Ҡыш. Буран. Йөнтәҫ кейемле тундра кешеләре, саналарға боландар егеп, ҡайҙалыр китә алмай аҙаплана. Иғтибарлабыраҡ ҡараһаң, бөтәһе лә иҫерек. Бисәләр, ирҙәр – барыһы ла ауа-түнә йөрөйҙәр. Шунда яҡындағы йорт ишеге асылып китте лә өй эсе күрһәтелде. Бер төркөм ханты-мансиҙар өй түренә усаҡ яҡкандар ҙа, уны уратып алып, ҡара ҡайғыға ҡалып ултыралар: ниңә беҙҙе тыуған төйәгебеҙҙән айырып, ошо ҡәһәр һуҡҡыр «ҡаптарға» килтереп тултырҙылар?

Беҙ ҙә хыялға бирелмәйек: үҙ мөхитенән көсләп айырылған төп халыҡты ана шундай яҙмыш көтә...

## Раиль КУЗЕЕВ:

### «Башҡортостанда йәшәгән халыҡтарҙың күпселеге – башҡорттар»

Ер мәсьәләһенә халыҡ иҫәбен алыу кампанияһы туранан-тура бәйле. Әгәр ҙә быға тиклем тәүҙә Рәсәй империяһында, шунан СССР-ҙа һәм РСФСР-ҙа уҙғарылған халыҡ иҫәбен алыуҙар нисек тә төп халыҡтарҙы, шул иҫәптән башҡорттарҙы ла, гелән кәметеп күрһәтеү һәм шуның менән милли дәүләтселектәр нигеҙҙәрен ҡаҡшатыу маҡсатында уҙғарылһа, 2002 йылдағы халыҡ иҫәбен алыу, башҡорттар бөтөп бара, тигән йүнәлештә түгел, ә башҡорттар бар һәм улар Башҡортостандағы халыҡтың яртыһынан күберәген тәшкил итә, тигән хәҡиҡәтте асып һалыу маҡсатында үткәрелергә тейештер. Һәм шуға бар көсөбөҙҙө һалырға кәрәк. Бигерәк тә сит мөхит тарафынан аяуһыҙ «йотолған» төньяҡ-көнбайышта. Бик күп арҙаҡлы ғалим- академиктарыбыҙ (Раиль Кузеев, Нияз Мәжитов, Ирек Аҡманов, Рим Янғужин, Әнүәр Әсфәндиәров һ. б.) таныуынса, башҡорт халҡының яртыһы тик тел үҙенсәлектәре өсөн генә үҙ

милләтенән ситләштерелеп йәшәй һәм сит халыҡҡа күсә бара. Ошо хаҡта бик фәһемле һөйләшеү тәҡдим итмәксемен. Әңгәмәсем – этнолог, Көнсығыш ғилемдәре белгесе, тарихсы, Рәсәй Фәндәр академияһы ағза-корреспонденты, БР фәндәр академияһы академигы, тарих фәндәре докторы, профессор Раиль Кузеев. Халҡымдың иң ҡәҙерле, иң хөрмәтле һәм иң арҙаҡлы шәхестәренең береһе булған оло ғалимыбыҙҙан ошо интервьюны уның 70 йәше айҡанлы алғайным. Әйтергә кәрәк, «Башҡорт шәжәрәләре» тигән бөйөк хеҙмәте менән генә лә үҙенә тере һәйкәл ҡуйған быңдай ғалимдарыбыҙ тарихта күп түгел.

*– Раиль Ғүмәр улы, 70 йәшегеҙ тулыуы – бөтөн ватандаштарыбыҙ өсөн дә kыуанысльı вакиға, сөнки һеҙҙе, донъя кимәленә сыkkан башkорт ғалимын һәм арымаç-талмаç йәмәғәт эшмәкәрен, һәр кем белә, хөрмәтләй, ярата. 70 йыл әҙ ғүмер түгел, ошо көнгә ниндәй уйҙар һәм тойғолар менән киләһегеҙ?*

– Иң тәүҙә, бик йылы һүҙҙәрегеҙ өсөн рәхмәт. Эйе, кеше ҡартая башлаһа, үткәненә күҙ һала башлай. Тик минең уйланып ултырырға ваҡытым булғаны юҡ әле. Һаман эшләргә лә эшләргә генә атлығып торам. Үҙемдең ғилми биографиямды мин башҡорттарҙың этнографияһынан башланым. Тормошомдоң шул дәүере иң яҡыны, иң ҡыҙыҡлыһы булды. Хәтеремдә, «Башҡорт шәжәрәләре» өсөн бик ҡаты киçәтеү алғайным, ниндәйҙер иçкемоçҡо тамғалар баçтырып ятаһың, тип тиргәнеләр... Шунан башҡорттарҙың килеп сығышы тураһында китап сығарҙым. Ләкин тормош беҙҙең Рәсәйҙә барыбер бик ҡатмарлы. Шуның өсөн археография һәм бик ныҡ ҡына бөгөнгө көн – этносоциология менән дә шөғөлләнеп алдым. Үҙгәртеп ҡороу башланғас, беҙ, этнологтар, ғына түгел, ә тарихсылар, химиктар, физиктар ҙа хәҙерге тормош менән ҡыҙыҡһына башланыҡ. Шул юçыҡта мин һуңғы 10 йыл эсендә байтаҡ хеҙмәттәр баçтырып сығарҙым. Әле, 70 йәшемә еткәс, яңынан этнографияға, йәғни классикаға, ҡайтам, тип хыялланам. Унан һуң, бик күп әҙер әйберҙәрем нәшер ителмәй ята.

Беренсенән, миндә бер ете-һигеҙ мең төрки халҡы тамғалары йыйылған. Шуның бер ете меңе, тигәндәй, башҡорт тамғалары. Социаль тормош буйынса, башҡорттарҙың килеп сығыуы һәм миграция тураһында бик бай сығанаҡ был. Ошо тамғалар, тарихи риүәйәттәр, шәжәрәләр, ырыу-ҡәбилә исемдәре, йәғни этнонимия, этногония тигән аңды билдәләй. Сөнки байтаҡ ҡына халыҡтың боронғола яҙмаһы, алфавиты булмаған.

– *Уның ҡарауы, тамға менән яҙғандар. Шул иҫәптән, башҡорттар ҙа.*

– Башҡорттарҙың ана шул тамғаларын мин 20–25 йыл йыйҙым. Дүрт китапҡа һыйышлы илле шәжәрә йыйҙым мин. Төньяҡ-көнсығыш һәм Көньяҡ Урал буйлап. Шунан Дим башҡорттарыныҡы. Бигерәк тә төньяҡ-көнбайышҡа ныҡ иғтибар иткәйнем. Ә һуңғы йылдарҙа, дәүерҙең закондарына баш эйеп, тигәндәй, бөгөнгө тормош, социология һәм иң башты ауырттырған мәсьәлә – беҙҙең республика халыҡтарының, башҡорт халҡының киләсәге. Бынаһы беҙҙең ғалимдар өсөн иң мөһим мәсьәләлер. Ошоға бәйле хөкүмәтебеҙ Фәндәр академияһына «Башҡортостан халыҡтары» программаһын эшләүҙе йөкмәтте. Беҙ уны әҙерләнек. Ул хаҡта бик ҙур бәхәстәр барҙы. Өс мәртәбә уны семинарға тикшереүгә ҡуйҙыҡ. Өс мәртәбә беҙҙе туҡманылар, маҡтанылар, тешләнеләр. Барыһы ла булды.

– *Ә туҡмауҙарға нимә сәбәпсе булды инде?*

– Был менә беҙҙең әңгәмә башланмаҫ борон уҡ һеҙҙең миңә биргән һорауығыҙға тура килә. Башҡорттар, Рәсәй эсендә йәшәп, тора-бара ассимиляцияға, окультурацияға бирелмәҫ микән, тигән мәсьәлә ҡуйыла. Минең фекеремсә, ундай хәүеф бар. Ләкин бында бер нисә этнәкәһе бар. Бер яҡтан, окультурациянан, ассимиляциянан ҡурҡып, халыҡты артҡа саҡырып булмай бит инде. Халыҡ алға барырға тейеш. Милләттең мәҙәниәтендә бик көслө нигеҙ, ҡаҡшамаҫ таяу – традицион компонент булырға тейеш. Әммә мәҙәниәт һәр ваҡыт яңыртылып (модернизация) торғанда ғына йәшәмек була. Бөгөн беҙҙең донъя технологияһы бик юғары икән, беҙ бит

Башҡортостанды, унда йәшәгән халыҡтарҙы интернеттан, компьютерҙан ситтә тороғоҙ, тип әйтә алмайбыҙ. Унан һуң, Башҡортостанда йәшәгән халыҡ үҙенең туған теленән башҡа рус, инглиз телдәрен белергә, ҡайһы берәүҙәр немец, француз телдәрен өйрәнергә тейеш. Модернизация барыбер кәрәк. Был – бер яғы. Ә икенсе яғы, ассимиляциянан, окультурациянан ҡурҡҡан милләт артта ҡалған халыҡ була.

*– Беҙ артта калдырылган халык инде. Башкорт теленең тормоштоң бөтөн өлкәләренән кысрыклап сыгарылыуы, халыктың күпселеге ауылда йәшәүе, югары белем алыуҙа иң артта килеүе, тормош кимәленең иң түбән булыуы һәм башка факттар беҙҙе бик түбәнгә төшөрҙө.*

– Ләкин улай уҡ түгел. Әлеге ваҡытта Башҡортостандың суверенитеты бар. Һуңғы тиҫтә йылдар эсендә республика ныҡ үҙгәрҙе. Элек беҙҙең урамдарҙа башҡорт һәм татар телдәрен ишетеп булмай ине. Әле университет яғынан барһаң, трамвайға йәштәр килеп тула һәм барыһы ла йә татарса, йә башҡортса рәхәтләнеп ҡысҡырып һөйләшә. Магазинда, театрҙа шул уҡ хәл. Әле бит театрҙар халыҡ менән туп-тулы. Менә, башҡорт театрына барыр өсөн билетты алдан алыр кәрәк. Икенсенән, беҙҙең үҙебеҙҙең хөкүмәтебеҙ, Конституциябыҙ бар. Башҡорттарҙы, республика халыҡтарын Конституция яҡлай. Инде беҙгә мәктәптәр етмәһә – төҙөйбөҙ. Кластар кәрәкһә – асабыҙ. Татарҙарҙың театры юҡ икән – һалабыҙ. Мариҙарға шарттар булдырабыҙ. Элек Башҡортостанда ундай хәл булғаны юҡ ине. Иң мөһиме, халыҡтар араһында дуҫлыҡ булырға тейеш. Һәм уны бик ныҡ һаҡларға кәрәк.

*– Закондар сыгарыу палатаһының башкорт һәм рус телдәренә дәүләт статусын биреүсе закон проектына тауыш биреүе, нигеҙҙә, тыныс кабул ителде. Тимәк, сит дәүләтселектәр, бигерәк тә күрше республикалар беҙҙең эске сәйәсәткә килеп кысылмаһа, проблемалар еңелерәк хәл ителәлер.*

– Бер төрлө генә ҡарашты көтөү барыбер дөрөҫ булмаҫ. Халыҡтың мәғлүмәте лә, үҙаңы ла айырыла, яуап

реакцияһы ла төрлөсә. Телдәр тураһындағы законды аңлап ҡабул итер өсөн ваҡыт кәрәк.

*– Һеҙ хаҡлы, әлбиттә.*

– Беҙҙең Урал халыҡтары бүлеге ул тел мәсьәләләрен семинарға сығарып, бәхәс ҡороп тикшерергә бер нисә тапҡыр тәҡдим иткәйне. Сөнки бында проблемалар бар. Мәҫәлән, 1989 йылғы халыҡ иҫәбен алыу буйынса 235 мең башҡорт туған телен татар теле тип атаны.

*– Мәктәптә гел Ҡазан дәреслектәре менән татарса уҡытылып, татар радиоһын тыңлап, Ҡазан телевидениеһын ҡарап, сит дәүләт мөхитендә йәшәгәнгәлер.*

– Шулайҙыр. Әммә Пермь өлкәһенең Барҙы районында гәйнә башҡорттары бар – улар ҙа шул төркөмгә керәләр. Уларҙың телен татар теле, тип тә, башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалекты, тип тә була. Сәриә Миржанованың «Башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалекты» тигән китабы бар. Ҡазандың тел һәм әҙәбиәт институты директоры Мирфәтих Зәкиев тә ошо уҡ фекерҙе таный. Ә мин йәш саҡта Таһир Ғәләм улы Байышевты бик яҡшы беләинем. Уның менән бергә бер нисә йыл Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында эшләнем. Бик һәйбәт ҡарт ине ул. Беҙҙең төньяҡ-көнбайыш райондарға ҙур-ҙур экспедициялар ойоштorҙо. Уның отчеты беҙҙең ғилми архивта һаҡлана. 600–700 битлек отчет «Башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалекты» тип атала. Ул татарлашҡан башҡорттарҙың телендә – лексикала, фонетикала – бик күп башҡорт теле элементтарын таба. Шуның өсөн ул тел саф татарса түгел тип барҙы. Ләкин лингвистикала был фекерҙе өҙөп кенә әйтеп булмай. Был процесс үҙгәреп тора. Тимәк, шундай һорау тыуа: шул татар телендә һөйләшкән башҡорттар башҡорттармы, әллә түгелме? Беҙ ҡаты сәйәсәт алып бармаһаҡ, улар иртәгә барыһы ла татар булып китәләр. 1979 йылдан алып 1989 йылға тиклем башҡорттар былай ҙа 120–130 мең кешегә кәмегән. Ул кәмеүҙе ҡайһы берәүҙәр башҡорт халҡының, йәнәһе, бөтөп барыуынан, йә иһә миграциянан күрә. Улай түгел. Был райондарҙа башҡорттар кәмей – татарҙар күбәйә, йәғни ассимиляция.

окультурация бара. Ә минең фекеремсә, Башҡортостанда башҡорттар күпселек булмаһа ла, уларҙың һаны күберәк булырға тейеш. 22% түгел – 35–40%-ҡа күтәреү мөмкинлеге лә бар, минеңсә.

– *Нисек итеп?*

– Бер яҡтан, ул процесс бара. Хәҙер башҡорттар йәшәгән бөтә ерҙә лә синыфтар асыла, телде өйрәнеү ныҡлап ҡуйыла. Күптән түгел генә Саҡмағош районының Ҡаръяуҙы ауылына барҙым. Ул борондан башҡорт ауылы, ләкин шунда барыһы ла татарса һөйләшә. Ауылға Халыҡ мәғарифы министрлығынан комиссия килеп, балаларығыҙҙы ниндәй телдә уҡытаһығыҙ, тип һорай. Халыҡтың 50 проценттан күберәге, башҡорт телендә, тип яуап бирә.

– *Төньяҡ-көнбайыштың күп кенә ауылдарында шул уҡ һүҙҙәрҙе ишетергә була.*

– Бына шулай. Унан һуң, хоҡуҡи дәүләт закондары буйынса башҡорттар бөгөн ике телле һаналырға тейештәр, сөнки 300 меңгә яҡын әҙ һан түгел бит. Юғиһә, ҡайһы бер кешеләр, күсһендәр шулар, ти, татар милләтенә.

– *Юҡ, улар күсергә теләмәй.*

– Эйе, улар теләмәй шул. Беренсенән, үҙаңдары көслө һаҡланған, халыҡ иҫәбен алыуҙан икенсеһенә тиклем, быуаттар буйы шулай башҡорт булып һаҡланып киләләр. Уларҙы милләтенән өҙөп алып ташлау дөрөҫ булмаҫ. Һеҙ хаҡлы был йәһәттән.

– *Төньяҡ-көнбайыш башҡорттары ике телле һаналырға тейеш, тигәндә, ниндәй телдәрҙе күҙҙә тотаһығыҙ?*

– Быны ҡыйын әйтеүе, уны семинар ғына асыҡлай ала. Әйтәйек, Дүртөйлөлә, Илештә, Нефтекамала торған халыҡтың теле ул татар телеме, әллә башҡорт теленең диалектымы?

– *Ҡазандар уны бер ваҡытта ла татар теле тип танымаған.*

– Юҡ, улар бит «ич» тип һөйләшә. «Әнкәй», «әткәй» тимәй, «әннә», «әттә», «күмәч» ти. Минең дуҫ, исеме бөтөн донъяға танылған археолог Альфред Халиков, һинең телең ни татарса, ни башҡортса түгел, тип, эй көлә ине. Беҙҙең тел шулай бит инде... Минеңсә, ул мәсьәләне

әкрен генә, закон түгел, ә ваҡыт хәл итер. Сөнки Башҡортостанда торған халыҡтың күпселеге – башҡорттар. Хәҙер Арғаяштан, Ҡурғандан, Туҡ-Сорандан бөтөн башҡорттарҙы ла Башҡортостанға күсереп алайыҡ тиһәк, был бит мөмкин булмаған эш.

– *Үзбәкстандан, Ҡаҙағстандан – ситтән ҡайтырыр кәрәк. Ә былар Ырымбурҙа һәм Пермдә, Силәбелә, Екатеринбургта – үҙ ерҙәрендә йәшәй бит.*

– Әлбиттә. Етмәһә, уларҙы яңылыш, диаспора, тиҙәр. Диаспора түгел, тарихи ерендә тора улар. Гел әйтә киләм шуны. Башҡортостан – ҡеүәтле республика, ул ситтә йәшәгән милләттәштәргә ярҙамын үҫтерә торор. Ә, икенсенән, татар телендә һөйләшкән башҡорттар үҙҙәрен башҡорт тиҙәр икән, бер кеше ҡаршы төшөргә тейеш түгел. Менә, Дим буйындағылар – уларҙың телдәре бик матур, тип әйтәм мин – улар ҙа бит айырылып тора. Уларҙы бит һалйот башҡорттары менән бергә ҡуйып булмай, бөтөнләй икенселәр.

– *Рашль Ғүмәр улы, шулай ҙа «Башҡортостан халыҡтары» программаһына һеҙ ниндәй өмөт тотаһығыҙ?*

– Ул 25 йылға иҫәпләнгән стратегик программа. Беҙҙең парламент шуны сәйәсәтенең нигеҙенә һалһа һәм ашыҡмай ғына хоҡуҡи йәмғиәтебеҙҙе төҙөһәк, Рәсәй Федерацияһында Башҡортостан иң үҫешкән, цивилизациялы республикаларҙың береһе булыр ине. Шундай мөмкинлек бар.

– *Ул саҡта беҙ Рәсәй Федерацияһы эсендә Башҡортостан Федерацияһына әйләнмәҫбеҙме? Ни өсөн беҙ Мәскәүҙең, Марий Элдың, Ҡазандың функцияларын үҙебеҙгә алырға тырышабыҙ икән ул?*

– Тарихи ысынбарлыҡ бар. XV быуатты алайыҡ. Бында Волганан Тубылға тиклем башҡорттар йәшәгән. Ерҙәре иркен булған, сөнки күсмә тормош алып барған. 1552 йылда урыҫтар Ҡазанды ала. Был фажиғә башҡорттар өсөн көтөлмәгән хәл була. Башҡортостан ирекле вассалитет шарттарында Рәсәйгә ҡушыла. Ергә аҫабалыҡ хоҡуғы Рәсәйҙә иң юғары хоҡуҡ була һәм, башҡорттарҙан башҡа, тик баярҙарға, мырҙаларға ғына бирелә, хатта

дворяндар алпауыт ер биләүенә генә эйә була. Ислам дине, үҙидаралыҡ ҡала. Шулай йәшәйҙәр. XVI быуаттың икенсе яртыһында Мәскәү башҡорт ерҙәрендә ҡала-ҡәлғәләр төҙөй башлай... Һәм башҡорттар азатлыҡ көрәшенә күтәрелә. XVI быуаттың икенсе яртыһынан алып XVIII быуаттың аҙағына тиклем башҡорттар ана шул Мәскәү менән Башҡортостан төҙөгән беренсе договорҙа ҡаралған шарттар – бойондороҡһоҙлоҡ – өсөн көрәшә. Ҡайһы бер ғалимдар уны, феодализмға, крепостной хоҡуҡҡа ҡаршы көрәш, тип күрһәтергә тырыша. Дөрөҫ түгел, Америка тарихсыһы Алтон Доннеллиҙың минең редакцияла донъя күргән «Завоевание Башкирии Россией» тигән китабы инглизсә «Русское покорение Башкирии Россией» тип атала. Сөнки ҡушылыу акты XVI быуат уртаһында булһа, ысынында буйһондороу тарихы 250 йыл дауам иткән. Был тотош дәүер! Башҡорт ихтилалдарын тик Төньяҡ Америка индеецтарының азатлыҡ көрәше менән генә сағыштырып була.

1711 йылда бит Петр Беренсе гениаль идея тәҡдим итә: Башҡортостанды крепостной һыҙыҡтар менән уратып алырға! Был гигант планды Татищев, Кириллов яҡлай. Бөйөк Петрҙың был эше бөгөнгө көнгә тиклем тейешенсә баһаланмаған әле. Ул Исет, Тубыл, Уй, Яйыҡ (беҙҙең Верхнеуральскиҙан Гурьевҡа тиклем), Һаҡмар, Һамар (Волгаға хәтлем) һыҙыҡтарын төҙөтә. Йәғни, йомоҡ түңәрәк барлыҡҡа килтерә. Был төҙөлөш XIX быуатта ғына тамамлана. Иң һуңғылары булып Илек һыҙығы һәм Орскиҙан Уйға Тубыл тамағына тиклем һыҙыҡтар башҡорттарҙы Бүкәй Урҙаһы ҡаҙаҡтарынан ғына түгел, ә тотош Ҡаҙағстандан һәм ҡалмыҡтарҙан айыра. Араға казактарҙы һәм нуғайбәктәрҙе күсереп ултырталар. XVI быуат аҙағында татарҙар Кама аръяғына күсеп ултыра башлайҙар. Ул ерҙәрҙән башҡорттар Кама аръяғы һыҙығы (Семберҙән Минзәләгә тиклеме) төҙөлөп ситләтелә. Башҡортостан ерендә Минзәлә, Мөслим, Аҡтаныш районы ҡала. Былар бөтәһе лә башҡорт ерҙәре. XVII-XVIII быуатта Башҡортостанға күскенселәр бигүк күп килмәй. Нигеҙҙә көнбайышына татарҙар килә. Картаны

ҡараһаҡ, беҙҙең Яңауыл, Борай, Тәтешлегә – удмурттар, Миәкә, Ҡалтасы, Дүртөйлөгә – мариҙар, Бишбүләккә сыуаштар, Йәркәйгә – мордвалар күсеп ултыра. Ҡара тупраҡлы ерҙәргә украиндар килеп урынлаша. Иң һуңғы күскенселәр – немецтар (Благоварға), ә урыҫтар латыш менән бергә Өфө эргәһенә, Иглин тирәһенә килә. XVIII быуаттың аҙағында һәм XIX быуатта, башҡорт ерҙәрендә заводтар төҙөгәндә, урыҫ күскенселәре күбәйә. Башта Свердловскиҙа завод төҙөйҙәр, шунан Нижневартовск, Уфалей, Миәс, Белорет, Йылайыр, Тубинск – барыһы ла Башҡортостан территорияһында. Шулай итеп, Евразияның иң уртаһында, Башҡортостанда, күп милләтле халыҡ ойоша. Хәҙер килеп беҙ, Төркмәнстандағы һымаҡ, урыҫтар – Рязангә, татарҙар – Ҡазанға ҡайтып китегеҙ, тиһәк, законлы булырмы? Сәйәси һәм фәнни аспекттан ҡарағанда, әлбиттә, был дөрөҫ тә һымаҡ, сөнки мариҙың, удмурттың, сыуаштың – бөтәһенең дә үҙ республикаһы бар. Әммә кеше хоҡуҡтары декларацияһы һәм цивилизациялы дәүләт күҙлегенән баҡҡанда, халыҡты йәшәгән еренән бер кем дә ҡыуып ебәрә алмай. Улар бөтәһе лә беҙҙеке, Башҡортостандыҡы. Былардан тыш, күп милләтлелек – республиканың өҫтөнлөгө лә ул, сөнки бер милләтле дәүләт, ҡағиҙә буларак, аҡрын үҫешә.

– *Һеҙҙең хәтерегеҙгә беҙҙең республика ғына түгел, донъя тәжрибәһе һыйған. Әйткән фекерҙәрегеҙ һәм кәңәштәрегеҙ беҙгә фәһем бирер, түҙемлелек һәм сабырлыҡ менән ҡоралландырыр, киләсәккә өмөттө нығытыр, тип уйлайым.*

– Тағы ла бер генә уй-теләк: күберәк Башҡортостандың киләсәге, башҡорт халҡының киләсәге тураһында уйлағыҙ. Әлеге хәленә, тарихына, киләһе көнөнә дөрөҫ баһа бирегеҙ... һәм шунан сығыбыраҡ дөрөҫ юлды һайларға өйрәнегеҙ. Артҡа ҡарап, тормошто алға ебәреп булмай. Бөтөн донъяның ҡан тибешен тойоп йәшәргә кәрәк. Беҙ юғары дәрәжәле халыҡ, Алла бирһә, ҡеүәтле үҙ аллы дәүләт төҙөрбөҙ, Европала мөшкөл булмабыҙ.

* * *

... Бына шулай, үҙ булмышыбыҙға һәм киләсәгебеҙгә ошондай юғарылыҡтан тороп дөрөҫ баһа биреү өсөн, ысынлап та, бөйөк кеше булырға кәрәктер ул.

Башҡортостанда йәшәгән халыҡтарҙың күпселеге – башҡорттар, тине. Тик был хәҡиҡәттең осона сығыу өсөн күпме милләттәштәребеҙҙең рухи донъяһын терелтәһебеҙ, өммәтебеҙ тамырҙарына йән өрҙөрәһебеҙ бар...

**Әлшәй районы.** 30-ға яҡын башҡорт ауылы. Мең (нигеҙҙә), бөрйән, ҡыпсаҡ, ҡатай, ҡумырыҡ табын башҡорттары нигеҙ һалған.

**Архангель районы.** 27 башҡорт ауылы. Табын (нигеҙҙә), шулай уҡ ҡатай, кәлсер башҡорттары нигеҙләгән.

**Асҡын районы.** 48 башҡорт ауылы. Нигеҙҙә балыҡсы, шулай уҡ танып, һун ырыуҙарыныҡы.

**Ауырғазы районы.** 23 башҡорт ауылы. Мең, меркет мең, бигәнәш мең башҡорттары нигеҙ һалған.

**Баҡалы районы.** 23 башҡорт ауылы. Ҡырғыҙ, ҡатай, юрмый, һаралы мең ырыуҙарыныҡы.

**Балтас районы.** 38 башҡорт ауылы. Танып, һун, ирәкте, таҙларҙыҡы.

**Благовар районы.** 38 ауыл. Ҡаңлы, дыуанай, табын, меңдәрҙеке.

**Благовещен районы.** 11 ауыл. Көҙөй, мең ырыуыныҡылар.

**Бүздәк районы.** 54 ауыл. Ҡаңлы, мең, йәлдәктәрҙеке.

**Борай районы.** 65 ауыл. Йәлдәк, эске йылан, йылан, таҙ, таҙлар, һун, танып, ҡырғыҙҙарҙыҡы.

**Дүртөйлө районы.** 55 ауыл, йылан, йәлдәк, ирәкте, шәмшәҙе, дыуанай, гәрәй, ҡаңлылар нигеҙ һалған.

**Йәрмәкәй районы.** 23 ауыл. Йылан, байларҙыҡы.

**Иглин районы.** 19 ауыл. Мең, көҙәйҙәр нигеҙләгән.

**Илеш районы.** 72 ауыл. Йылан, йәлдәк, ҡырғыҙ, бүләр, йәнәй, ҡыпсаҡ, һеңрән, байлар, гәрәй башҡорттарыныҡы.

**Ҡалтасы районы.** 8 ауыл. Гәрәй, йылан, йәнәйҙәрҙеке.

**Ҡариҙел районы.** 41 ауыл. Балыҡсы, танып, һун, йәлдәктәр нигеҙләгән.

**Ҡырмыҫҡалы районы.** 32 ауыл. Мең, табындарҙыҡы.

**Ҡыйғы районы.** 22 башҡорт ауылы. Әй, дыуан ырыуҙарыныҡы.

**Краснокама районы.** 38 ауыл. Ҡырғыҙ, гәрәй, йылан, йәнәй башҡорттарыныҡы.

**Күгәрсен районы.** 70 ауыл. Бөрйән, ҡыпсаҡ, түңгәүер, үҫәргәндәрҙеке.

**Кушнаренко районы.** 27 ауыл. Дыуанай, ҡаңлы, ҡаршын, мең башҡорттарыныҡы.

**Көйөргәҙе районы.** 38 ауыл. Бөрйән, ҡыпсаҡ, ете ырыу берләшмәһе, тамъяндарҙыҡы.

**Мәләүез районы.** 41 ауыл. Ҡыпсаҡ, тамъян, юрматыларҙыҡы.

**Мәсетле районы.** 37 ауыл. Дыуан, ҡошсо, өпәйҙәр нигеҙ һалған.

**Миәкә районы.** 36 ауыл. Мең, бөрйән, ҡыпсаҡ, ҡатай, тамъяндар нигеҙләгән.

**Нуриман районы.** 26 ауыл. Көҙөй, йәлдәк, һалйот, мең, дыуандарҙыҡы.

**Салауат районы.** 44 ауыл. Көҙөй, әйле, мырҙаларҙыҡы.

**Стәрлебаш районы.** 28 ауыл. Юрматы, мең, тамъяндар.

**Стәрлетамаҡ районы.** 12 ауыл. Юрматы, меңдәр.

**Тәтешле районы.** 59 ауыл. Гәрәй, танып, ирәкте, урандар.

**Туймазы районы.** 66 ауыл. Байлар, йылан, тамъян, әйле, йәнәй, юрмый, ҡырғыҙ, бүләр, ҡыпсаҡ, һеңрән, ҡаңлы, ҡатай, меңдәр.

**Федоровка районы.** 12 ауыл. Юрматылар.

**Саҡмағош районы.** 29 ауыл. Дыуанай, ҡаңлы, йылан, йәлдәк, ҡырғыҙҙар.

**Шишмә районы.** 13 ауыл. Мең, ҡатай, тамъян, әйле, бөрйәндәр.

**Шаран районы.** 24 ауыл. Йылан, тамъян, ҡаңлы, ҡырғыҙ, юрмыйҙар.

**Яңауыл районы.** 44 ауыл. Гәрәй, уран, йылан, ирәкте, йәнәйҙәр.

(Мәғлүмәттәрҙе филология фәндәре докторы, профессор Азат Камаловтың 1997 йылда Башҡортостан «Китап» нәшриәтендә донъя күргән «Башкирские географические термины и топонимия» тигән китабынан алдым).

Бөтәһе лә башҡорт ерҙәре, аҫаба биләмәләр.

Ә бөгөн уларҙың күбеһе ни хәлгә төшөрөлгән?

Башҡортса һөйләшмәйҙәр, беҙҙең яҙыусыларҙы, артистарҙы, башҡа арҙаҡлы шәхестәребеҙҙе белмәйҙәр, башҡортса йырламайҙар, боронғо тарихыбыҙҙы белмәйҙәр. Беҙҙән башҡа бер халыҡта ла булмаған үҙенсәлекле, ҡабатланғыһыҙ мифтарыбыҙ, героик легендаларыбыҙ, «Урал батыр», «Аҡбуҙат», «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» кеүек эпостарыбыҙ миҫалында түгел, ә сит мәмләкәттәрҙең ят рухтағы туҙға яҙмаған анекдоттарын тыңлап үҫә, тәрбиәләнәләр.

1969 йылғы «Башҡорт АССР-ының административ-территориаль бүленеше» тигән китапты ғына ҡулыбыҙға алайыҡ. Мәҫәлән, Кушнаренко районы буйынса элек тик башҡорттар йәшәгән Мәүлет, Юлыш ауылы кешеләре хәҙер үҙҙәрен башҡорт тип иҫәпләмәй. Ә Аҡбаш ауылында XIX быуатта 345 башҡорт һәм 161 килгән халыҡ иҫәпләнгән, ә 1989 йылғы халыҡ иҫәбен алғанда тик татарҙар яҙылған.

Бындай миҫалдар иҫәпһеҙ-һанһыҙ.

... 1995 йылда Нефтекамала булғанда урындағы педагогия колледжын тамамлап, ҡаланың 3-сө мәктәбендә башҡорт теле дәрестәрен алып барған йәш мөғәллимә Ирина Зарипова менгән һөйләшеү хәтерҙән һис юйылмай.

– Иркәм, һин үҙең ниндәй районрдан әле?

– Борай районының Иҫке Ҡарағош ауылынан.

– Анда нисек, башҡорттар йәшәйме шул ауылда?

– Юҡ, татарҙар.

– Ә тарихығыҙҙы, шәжәрәләрегеҙҙе беләһегеҙме?

– Дөрөҫөн әйткәндә, аның менән бик ҡыҙыҡһынып та бармайҙар әле. Уҡығанда андай белемдәр алып сыҡманыҡ.

– Үҙең бит шул хәтлем матур иттереп башҡортса һөйләшәһең. Училищела өйрәндеңме?

– Беҙ уҡығанда 8 йыллыҡ мәктәп ине, башҡорт теле керҙе. Беҙ аҙаҡҡы сығарылыш булдыҡ. Аҙаҡ инде татар теле инеп китте. Училищела дүрт йыл башҡорт телен өйрәндек, әле башҡорт теленән уҡытам һәм Башҡортостан мәҙәниәте тарихынан дәрестәр алып барам.

– Башҡортса теләп уҡыйҙармы, өйрәнәләрме?

– Тырышам инде, теләктәре булһын өсөн. Башҡорт теле түңәрәген алып барам.

* * *

Бына шундай улар – төньяҡ-көнбайыш башҡорттары! Һин башҡорт түгел, тип, баштарына туҡып-туҡып торһалар ҙа асылдарына кире ҡайталар...

Ә бит тарихи документтарҙан мәғлүм булыуынса, Иҫке Ҡарағош та, Яңы Ҡарағош та – тарихи башҡорт ауылдары. Уларға танып ырыуы башҡорттары нигеҙ һалған (Азат Камалов, «Башкирские географические термины и топонимия», «Китап», 1997).

Әнүәр Әсфәндиәровтың «История сел и деревень Башкортостана» тигән китаптар серияһының V томының 134-се битен асып ҡарайыҡ: 1920 йылда Иҫке Ҡарағош ауылында – 1343 башҡорт, Яңы Ҡарағошта 244 башҡорт йәшәгән. Башҡа милләттәр теркәлмәгән!

Башҡорт халҡы үҙ илендә шундай хәлгә төшһөн өсөн ниндәй яңы урҙа ябырылыуын кисерергә кәрәк ине һуң?

Былар туранан-тура ассимиляция һөҙөмтәләре. Ярты Башҡортостанда бөгөнгә тиклем башҡортса гәзиттәр нәшер итмәү, мәктәптәрҙең күбеһендә башҡортса уҡытмау, башҡорт мәҙәниәтен, башҡорт йырҙарын, башҡорт китаптарын киң таратмау һөҙөмтәләре. Әйтәйек, Борай районында 1656 башҡорт балаһының 254-е генә башҡортса уҡытыла, Дүртөйлөлә 2153-төң 125-е генә,

Илештә 2955-тең 261-е генә, Яңауылда 1863-төң 306-һы ғына... Бәлә аяҡ аҫтында! Нефтекама, Октябрьский, Туймазы, Ағиҙел ҡалаларында төп милләт вәкилдәренең балаларын бөгөнгә тиклем маңҡортлаштырыу һәм ассимиляциялау дауам итеਲә. Саҡмағошта, Шаранда башҡорттарҙы бөтөнләй «бөтөргәндәр». Уларҙа бөгөн бер генә башҡорт мәктәбе лә юҡ. Республикала, дөйөм алғанда, 31136 башҡорт балаһының 21204-е үҙ теленән, мәҙәниәтенән, тарихынан бөтөнләй ситләтелгән! Был ҡыҙғаныс һандарҙы мин Башҡортостан Республикаһының Халыҡ мәғарифы министрлығынан алдым. 1999 йылғы мәғлүмәттәр улар.

«Бәхетле һәм татыу милләттәр гөлләмәһенә» әйләнгән, бөткөһөҙ юбилейҙарға һәм байрам кәйеф-сафаларына күмелгән суверенлы Башҡортостанда башҡорттар шулай йәшәй.

Әҙәби тел нормаһын төньяҡ башҡорттарының диалектын иҫәпкә алмайынса ҡабул итеп, төньяҡ-көнбайыштағы аҫаба башҡорттарға, һеҙ татарҙар, телегеҙ татар, тигән фекер башҡорт ғалимдары яғынан да көсләп һеңдерелеп килеүенә, Ҡазан радио-телевидениеһы, ижтимағи-сәйәси ойошмаларының «десанттары» яғынан да көслө баҫым яһалыуына ҡарамаҫтан, 1989 йылғы халыҡ иҫәбен алғанда Аҫҡындағы 63,3%, Ауырғазылағы 10,7%, Балтастағы 22,1%, Бүздәктәге 26,2%, Борайҙағы 39,5%, Дүртөйләләге 24,2%, Илештәге 63,2%, Ҡариҙелдәге 34,8%, Ҡыйғылағы 35,9%, Краснокамалағы 24,1%, Кушнаренколағы 5,5%, Миәкәләге 25,5%, Нуримандағы 28,6%, Тәтешлеләге 53,6%, Туймазылағы 31,3%, Саҡмағоштағы 18,7%, Шишмәләге 12,7%, Яңауылдағы 36,3% һ. б. милләттәштәребеҙҙең һаман да башҡортлоғонан ваз кисмәүе тарихта тиңе булмаған батырлыҡ, ысын мәғәнәһендә милли ҡаһарманлыҡ ул.

Ә бөгөнгө барса милли ойошмаларыбыҙҙың да, Бөтә Донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты филиалдарының да, нигеҙҙә, бик «тешле» һәм әҙерлекле ят милләттәр ояалап алған район үҙәктәрендә генә

ҡоролтайҙар үткәреп, шоу-семинарҙар менән мауығыуы бер тапҡыр файҙаланыла торған медицина шприцы кеүек кенә ул. (Укол ҡаҙап ҡына милләттең ауырыуын дауалап булмай). Улар төп халыҡтар «ҡыҫырыҡланған» ауылдарға барып та етмәй, барһа ла ашығыс ҡына ҡунаҡ була ла ҡайтып та китә. Ә тегеләр яңынан ят донъяға сума.

Төньяҡ-көнбайышта дәүләт кимәлендә эҙмә-эҙлекле эш алып барғанда ғына ниндәйҙер ыңғай һөҙөмтәләргә ирешеп буласаҡ. Ул төбәк мәктәптәрендә башҡорт телен дәүләт теле булараҡ индереү өсөн руноларҙа һәм гуноларҙа башҡорт теле белгестәрен ҡуйыу һәм БР Мәғариф министрлығында ошо төбәктәр менән эшләүсе айырым кабинет асыу ғына маҡсатҡа ярашлы булыр ине. Шул саҡта урындағы «кадрҙар» мәктәптәрҙе башҡорт дәреслектәре менән тәьмин итеүгә аяҡ сала алмаҫ һәм асылған башҡорт мәктәптәрен яптырыуҙы ғына уйлап тормаҫ ине.

Ул яҡ башҡорттар менән махсус эшләй торған бүлектәр шулай уҡ башҡа кимәлдәрҙә лә, бигерәк тә Мәҙәниәт министрлығында, матбуғатта һәм Министрҙар Кабинетында, Бөтә Донъя башҡорттары ҡоролтайының башҡарма комитетенда ла асылырға тейештер.

Әгәр ҙә Башҡортостан Республикаһы, Конституциябыҙҙа яҙылғанса, башҡорт халҡының үҙбилдәләнеш алыуы маҡсатында барлыҡҡа килтерелгән һәм башҡорт теле дәүләт теле тип иғлан ителгән икән, башҡорт халҡын үҙ илендә этноцидтан һәм ассимиляциянан, телһеҙ, ерһеҙ ҡалыуҙан йолоп алып ҡалыу өсөн үрҙәгеләрҙе генә талап итергә хоҡуғыбыҙ барҙыр. Юғиһә беҙ ул хоҡуҡтарҙы Татарстанда, Марий Элда, Мәскәүҙә талап итә алмайбыҙ.

Картаға ҡарағыҙ, ярты башҡорт тел үҙенсәлектәрен һанға һуҡмаған өсөн генә, сит мәмләкәткә «Алла һәппәр!» тип тапшырылып ҡуйылған. Һәм халыҡ иҫәбен алған һайын, теленә ҡарап ҡына, көсләп бүтән милләткә күсерелеп килгән. Беҙҙең башҡорт ғалимдарына һәм сәйәсмәндәренә был хаҡтағы бөткөһөҙ һәм эс бошорғос демагогиянан арынып, эшкә күсергә ваҡыт түгелме? Ҡалаларҙа йылы кабинеттарҙа ултырып ҡына, яңы

башҡорт номенклатураһының ҡоролтай-йыйындарын уҙғарып, йә иһә төньяҡтағы район үҙәктәрендәге семинарҙарҙа ғына фәлсәфә һатыуҙар етәрҙер беҙгә. Айыҡ аҡыл менән фекер йөрөткән һәр кешегә мәғлүм: үҙәктәрҙә, ҡалаларҙа килгән халыҡтар күберәк һәм унда тормош рәүешен һәм сәйәсәтте улар билдәләй. Хәҙер ҙә ҡасаҡтарҙы төпкөлгә түгел, үҙәк ҡалаларҙа күберәк ҡабул итәләр, мәҫәлән 1992–1996 йылдарҙа ғына Өфө ҡалаһына – 6292, Баймаҡҡа – 208, Дүртөйлөгә – 393, Күмертауға – 1020, Бәләбәйгә – 928, Белоретҡа – 495, Илешкә – 150, Борайға – 372, Бүздәккә – 432, Ҡыйғыға – 167, Туймазыға – 1319, Шишмәгә – 1406 һ. б. ҡасаҡ индерелгән. Беҙҙе һаман ана шулай «шыйығайталар». Һаман төпкөлгә, урманға ҡыҫырыҡлайҙар. Ә сәйәсәт бит үҙәктә билдәләнә, маңҡортлашып, эскелеккә бирелеп бөтөп барған башҡорт ауылдарында түгел.

Район үҙәктәрендә генә үткәрелгән ашығыс ҡоролтайҙарға райондың төп халҡы саҡырылығаны ла, улар менән урындағы ҡоролтай филиалдары эшләгәне лә юҡ. Бары тик Сибай, Баймаҡ, Хәйбулла, Әбйәлил яҡтарынан уҡытырға ебәрелгәндәр генә шул сараларға «башҡорт булараҡ» саҡырыла. Исем өсөн генә. Ә беҙ һаман шуны күрмәҫкә, танымаҫҡа тырышабыҙ. Шул йәһәттән уйлағанда, II Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы ла, тәүгеһе кеүек үк, күп милләтле номенклатура байрамы булып ҡына ҡуймағайы. Төньяҡ-көнбайыш районадарына ҡунаҡҡа һәм һабан туйҙарына түгел, ә экспедицияларға юлланырға кәрәк. Улар бит сит республиканыҡы түгел, беҙҙең ерҙәр, беҙҙең территория. Башҡорт ерҙәрен услап-услап сит мәмәләкәттәргә таратыу сәйәсәтен бөгөн дә дауам итергә кем хоҡуҡ биргән әле беҙгә?

Дөрөҫөн генә әйткәндә, рухи, мәҙәни ҡыйралыш төньяҡ-көнбайышты ғына түгел, бүтән төбәктәрҙе лә солғап алғанға оҡшай. Мин быны Башҡортостан «Китап» нәшриәте сығарған китаптарҙы республикала таратыу миҫалында ғына ла айырым-асыҡ күрҙем...

## Милләт китабының ауыр юлдары

Милләт китабын нәшер итеү, уны халыҡҡа таратыу һәм киләһе быуындарға һаҡлап алып ҡалыу проблемаһы ысын мәғәнәһендә милли фажиғәгә әйләнә башланы, тиһәк, һис тә яңылышмабыҙ. Һуңғы ваҡытта ғына республикала тиҫтәләгән китаптар универмаг мөйөштәренә, ауыл хужалығы тауарҙары эргәһенә, һ. б. магазиндарға ҡыҫырыҡлап сығарылды. Яңы заманда яңыса эшләй белмәгән һәм өйрәнергә лә теләмәгән һатыусылар беҙҙең китаптарҙы төйнәп-төйнәп складтарға йәшереп ҡуя ла, алмайҙар уларҙы, бер кемгә лә кәрәкмәй, тип һөрән һала. Мәсьәлә Башҡортостан хөкүмәте кимәлендә хәл итәлергә тейеш, тигән талап ҡуйып, республика гәзиттәрендә туҡтауһыҙ саң һуғыуыбыҙға ҡарамаҫтан, был өлкәлә бер ниндәй ҙә алға китеш булмауына республиканың төньяҡ-көнсығыш райондарын урап ҡайтҡас, яңынан инандым...

**1998 йылдың 25 май көндө Салауат районының Малаяҙ үҙәк ҡасабаһына** килеп еттек. Иң тәүҙә универмагҡа инеп (китап магазины бында бер нисә йыл элек ябылғайны), уның икенсе ҡатында ҡыҫынҡы мөйөштә генә урынлаштырылған китаптар кәштәһе эргәһенә килдек. Ялтырап торған боевиктар, секс төрөндәге «ширпотреб» эргәһендә беҙҙең полиграфкомбинат сығарған, «мәмерйә ысулдары» менән эшләнгән бер нисә төҫһөҙ генә китап ята. Ниңә беҙ нәшер иткән һәйбәт китаптар юҡ бында, тигән һорау башҡа килде. Һатыусы иһә: «Китаптарығыҙҙы алып ҡала алмайбыҙ, уларҙы барыбер бер кем дә алмай», – тип белдерҙе. Дөрөҫ, С. Злобиндың «Салауат» китабын бер нисә бөртөк ҡалдырыуыбыҙҙы һораны. Тик ике һум илле тинлек ике-өс китап өсөн документ төҙөп булмай бит инде. (Нәшриәттең китаптары осһоҙ. Магазиндар ғына ул килтереп биргән китаптарҙы ике-өс тапҡырға ҡиммәтләндереп һата). Үкенескә ҡаршы, ошо универмаг кәштәһендәге «ширпотреб»тан З. Вәлиди «Хәтирәләре»нә,

Ғ. Хөсәйеновтың «Ил азаматтары», Р. Шәкүрҙең «Арҙаҡлы башҡорттар», Р. Ахмедовтың «Одолень-трава» кеүек күҙҙең яуын алып торған китаптарына һатыусы күҙ һалырға ла теләк белдермәне. Ә нәшриәт Салауат төйәгенә өр-яңы китаптарын яңы ғына бешеп сыҡҡан икмәктәй эҫе көйө генә килтереп еткергәйне. Тимер Йосоповтоң 60 йәшлек юбилейына өлгөргән «Беште ер еләккәйҙәре», «Башҡорт халыҡ ижады»ның III томы, «Русско-башкирский иллюстративный тематический словарь», «Шаманизм тарихта һәм бөгөн», «Әлифба», уҡытыусылар өсөн методик әҙәбиәт, дәреслектәр һәм заманса кимәлдә нәшер ителгән, халыҡта ҙур һорау менән файҙаланылған башҡа бик күп китаптар, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Малаяҙ универмагында урын алманы...

Китаптарҙың бер ни тиклем өлөшөн Салауат Юлаев музейында алып ҡалдылар. Уныһы өсөн дә рәхмәт.

Унан һуң, район үҙәге универмагында, китаптарығыҙҙы һатып алмайҙар, тип аптыратҡастары, ошондағы 113-сө СПТУ-ға барғайныҡ. Уның директоры Рәдис Хужәхмәтов беҙҙе бик йылы ҡаршыланы. Китапханасы Светлана Камалетдинова менән уҡытыусы Мөршиҙә Катиналар үҙҙәренә кәрәк тип иҫәпләгән китаптарҙы тиҙ генә күпләп-күпләп һайлап алып, СПТУ уҡыусыларынан ташытып та ҡуйҙы. Светлана Барый ҡыҙының китапханаһы иркен һәм күркәм итеп йыйыштырып ҡуйылған. Унда мине иң ныҡ ҡыуандырғаны Салауат Юлаевҡа арналған егермеләгән китап менән байытылған тарихи күргәҙмә булды, Салауат төйәгендә батыр иҫтәлеген шул тиклем яратып, ҡәҙерләп һаҡлауҙары һоҡландырҙы. Беҙ алып килгән С. Злобиндың «Салауат» китабы ла күргәҙмәлә үҙенең лайыҡлы урынын алды.

26 апрелдә милләт китабы тейәлгән нәшриәт «Газел»е үҙенең юлын төньяҡ-көнсығышҡа табан дауам итте. **Дыуан районының үҙәге Мәсәғүткә** килеп индек. Сауҙа йорто буҫағаһы алдында туҡтап, магазинға керҙек һәм, икенсе ҡатҡа күтәрелеп, йәнә таныш күренешкә тап булдыҡ. Ике яҡтан промтауарҙар менән ҡыҫырыҡланған тар ғына мөйөштә бөгөн бөтә донъяға таратылған тышы

ялтырауыҡлы, эсе шалтырауыҡлы китаптар һәм бер нисә бөртөк кенә Башҡортостан «Китап» нәшриәте баҫмаһы. Бында беҙгә асыҡтан-асыҡ: «Башҡорт китаптарын алмайҙар, уҡымайҙар», – тип белдерҙеләр. Бер генә китапты ла, хатта Тимер Йосоповтоң «Беште ер eләккәйҙәре»н дә алып ҡалманылар. Райпола ла күп айҡаштыҡ – тик фәтеүәһе булманы. Ә ошо көндәрҙә Мәсәғүттә шағирҙың юбилей кисәһе көтөлә ине.

Алйығас, элекке СПТУ бинаһында асылған башҡорт лицей-интернатына алып киттек китаптарҙы. Уның директоры Әнүәр Хиләж улы ҡолас йәйеп ҡаршы алды, күп кенә китаптарҙы шунда китапханаға тараттырҙы. Китапханасылар Светлана Михайловна (әйткәндәй, ул саф башҡортса һөйләште) менән Фаина Фуатовна нәшриәт менән киләсәктә лә хеҙмәттәшлек итергә теләк белдереп ҡалды.

... **Мәсетле районының Мәсетле** ауылындағы урта мәктәп китапханаһына һоҡланып бөтөрлөк түгел ине – нәшриәттә һуңғы йылдарҙа сыҡҡан өр-яңы китаптар һалдаттар кеүек теҙелеп баҫҡан. Бер туҡтауһыҙ уҡыусылар инеп, әле китап тапшыра, әле яңыһын алып китә. Китапханасы Мәүжиҙә һылыу был юлы ла бик күп китаптарыбыҙҙы ҡыуанып алып ҡалды. Тыуған ерем Мәсетлелә булып киткәндән һуң, яҡташтарымдың милли рухына, аҡыл көсөнә һоҡланаһың һәм шундай фекергә киләһең, юҡ, милләт китабын уҡыусылар һәм таратыусылар бөтмәгән әле, башҡорттар бөтмәгән әле.

**Ҡыйғы районының Үҙәгендә** ике башҡорт кешеһен генә осраттыҡ. Мине иң ғәжәпләндергәне «Һаумыһығыҙ!» тиеүебеҙгә яуап ҡайтармауҙары булды. Башҡортса иҫәнләшеүебеҙ бәғзе берәүҙәрҙә ғәжәпләнеү генә уятты. Бына шулай ҡалған китаптарҙы ҡайҙа ҡуйырға белмәй йөрөгәнебеҙҙә 1-се мәктәп уҡытыусыһы Рәйфә апай Хәкимованы осраттыҡ. Ул бик күп баҫмаларыбыҙҙы алып ҡалып, халыҡ араһында таратырға ярҙам итте.

Ҡайтыр юлға сыҡҡаныбыҙҙа, Ҡорғаҙаҡҡа етер алдынан ғына юл буйында урынлашҡан тағы ла бер бик ҙур башҡорт ауылы – **Йүрүҙән буйы Мәсетлеһендә** туҡталмай үтеп китә алманыҡ. Тап-таҙа итеп йыуылған мәктәп

иҙәненә аяҡ баҫыр алдынан аяҡ кейемдәребеҙҙе сисәбеҙ. Китапханасы «Газел»дә ҡалған китаптарҙың барыһын да алды һәм яңыларына заказ биреп, ҡулыбыҙға хат тотторҙо.

* * *

Бына һеҙгә: «Башҡорт китаптарын уҡымайҙар!» Урындарҙа ултырғандарҙың халыҡты алдауы, теленән яҙҙырыуы был. Башҡорт ерҙәрендә, бик күп башҡорт ауылдарын берләштергән оло-оло ҡасабаларҙа юғары-юғары вазифалар биләп ултырған бүтән милләт вәкилдәре беҙгә күҙҙәрен таҫырайтып ҡарап: «Башҡортса китаптар кәрәкмәй беҙгә», – тип яуап ҡайтарҙылар. Рәсәйҙәге урыҫтар, татарҙар, бүтән халыҡтар үҙ илдәрендә тартип урынлаштырғанда беҙ, башҡорттар, үҙ илебеҙҙә һаман ҡараңғы мөйөшкә ҡыҫырыҡланабыҙ. Төпкөлдә, урман эсендә Башҡортостан радиоһы һөйләмәй, телевидениеһы күрһәтмәй, милләт китабы барып етмәй.

*Бөрйән районында*

### Ағас кеүек ҡорорға теләмәйем

Башҡорт халҡының үҙ республикаһында кәмегәндән-кәмеүенең башҡа төрлө рухи-әхләҡи, социаль-иҡтисади һыҙаттары ла бар. Башҡортостанда бүтән милләттәр һаны йылдың-йылы артып тороуға ҡарамаҫтан, төп халыҡ вәкилдәренең ситтән үҙ иленә ҡайтыуы күҙәтелмәй, эшһеҙлек арта, эскеселек көсәйә, ғаиләләр тарҡала, тыуым кәмей, үлем өҫтөнлөк итә. Этностың тарҡалыуының һәм көсһөҙләнеүенең ҡайһы бер сәбәптәрен төпкөлдәге ауыл миҫалында ғына күрһәтергә теләйем. Бының өсөн Бөрйән районы Ырғыҙлы ауылының ҡатын-ҡыҙҙар советы рәйесе Тәнзилә Аллаярова менән осрашып һөйләштем. Ул Салауат исемендәге крәҫтиән хужалыҡтары ассоциацияһының магазинында һатыусы булып эшләй. 2000 йылдың 9 майы – Еңеү байрамы көнө ине.

*– Хөрмәтле Тәнзилә Фәйзрахман кыҙы, бына беҙ бөгөн шәхес үҫеше һәм үҙен төрлө эштә күрһәтеүе, бәхетле киләсәген төҙөүе өсөн ирек, ниндәйҙер мөмкинлектәр асылды. элекке һымак, алма – беш, ауыҙға – төш, тип ятыу юк хәҙер, тибеҙ. Ауылда ошо тәңгәлдә берәй үҙгәрештәр бармы ул?*

– Кире яҡҡа китеп барабыҙ инде хәҙер. Иң йәнемә тейгәне эскелек һәм эшһеҙлек. Элек, исмаһам, йәш ирҙәр урман сәнәғәте хужалығына йөрөп эшләп, бер-ике аҙнаға бер ҡайтып, бүрәнә ағыҙа ине. Нисек тә ғаиләләре туҡ булды. Хәҙер аҡсалары ла юҡ. Әле 25-тән 40-ҡа тиклем эшһеҙ ятҡан ир-ат күп. Ә ҡатын-ҡыҙҙар күбеһе эшкә ылыҡтырылған: Ырғыҙлыла, шулай ҙа, 11 синыфлыҡ мәктәп-интернат, дауахана, балалар баҡсаһы бар. Эшһеҙлек бик аҙ. Ирҙәре эшләмәгәс, эшләргә тырышалар.

*– Ирҙәр проблемаһын нисек хәл итергә, тип уйланған кешеләр юкмы ауылда?*

– Йәш ирҙәргә, бергәләшегеҙ ҙә, үҙебеҙҙең электән ҡалған һөнәрҙе яңыртып, эзбиз яғығыҙ, шуны һатып, аҡса эшләгеҙ, тип тә әйтеп ҡарағаныбыҙ бар инде. Әйҙә, тип ниәтләнгән булалар ҙа, башлаусы юҡ. Әүәл Ырғыҙлыла үҙебеҙҙең мәктәпкә генә түгел, Бөрйән мәктәбенә етерлек эзбиз әҙерләй торғайнылар, хатта ауыл халҡына һата инеләр.

*– Эш һәм акса булмағас, ғаилә корорға ла тырышмайҙар инде?*

– Беҙҙең ауылда ғына егермеләп егет өйләнмәй йөрөй. Шунса уҡ – Ҡотанда, Мәҡсүттә... Армиянан ҡайтҡан егеттәр күп.

*– Башка халыктар бакса үҫтереп тә, мал үрсетеп тә акса табыу юлдарын эҙләй. Шундай мөмкинлектәр юкмы ни?*

– Сығарып һатырлыҡ булмаһа ла, үҙҙәренә етерлек үҫтерәләр инде. Кеше ул ерен дә алыр ине, ләкин бит һатырға алып сығам тиһә, транспорты ла, юлы ла юҡ. Тегеләй барам тиһә лә – 60 саҡрым, былай барам тиһә лә... Автобустар бер яҡҡа ла йөрөмәй. Һата алмай ҡайтырһың. Машина яллаһаң, аҡсаң шуға китә лә бөтә

инде... Малға килгәндә, үҙебеҙҙең айырым сабынлыҡ юҡ. Гел шул ағастан ҡалған диләнкәләр. Бер һыйырҙан, бер нисә баш һарыҡтан башҡа тотоп булмай.

– *Әммә бит ошо эшһеҙлектән ниндәйҙер сығыу юлы булырға тейештер ул барыбер?*

– Әүәл ат санаһы эшләй, дуға бөгә, көрәк саба торғайнылар. 90-сы йылдарға тиклем ихтыяж ҙур булды, сананы машиналап тейәп ебәрә инек. Бына шуны тергеҙеп ебәрергә лә булыр ине ул.

– *Бәлки, эшлеклелек, талапсанлыҡ, йәшәүгә ынтылыш етеңкерәмәйҙер? Әҙергә бәҙер йәшәргә теләүселәр күберәктер, ихтимал?*

– Улай түгел шул. Халыҡта дәрт тә бар, дарман да етерлек. Тик уның проблемаларына ҡолаҡ һалыусы, кәрәккәндә ярҙам ҡулы һуҙыусылар юҡ. 90–93-сө йылдарҙа Ғиниәт Мәжитов, Рәсхәт Сөләймәнов, Ильяс Нуротҡолов «Илгиз» исемле яуаплылығы сикләнгән йәмғиәт ойошторабыҙ тип йөрөнөләр. Нишләптер район үҙәгендә шуларға дөрөҫ итеп документ төҙөүсе булманы. Уставын алып баралар – бер пункты оҡшамай, икенсеһе, кире төҙәттерәләр. Әле эштәр управляющийы, ә ул саҡта ауыл советы секретары Фатима Сәлихова ғына шул уставты ете тапҡыр төҙәтеп баҫты. Егеттәр шулай йөрөнөләр-йөрөнөләр ҙә ҡул һелтәп ҡуйҙылар. Ә уларҙың ниәттәре шәп ине: бура бурау, ҡортсолоҡто үҫтереү, сана, көрәк, балта эшләү...

– *Ырғыҙлыла Башҡортостан телевидениеһы күрһәтмәй, ОРТ программаһын ғына ҡарайһығыҙ, башҡортса радио һөйләмәй, республика гәзиттәре өс көнгә һуңлап килә. Үҙеңдең транспортың булмаһа, бер ҡайҙа ла сыға алмайһың. Балаларыңа эш юҡ. Уҡырға инһә, ҡайтып йөрөргә автобус юҡ. Ғөмүмән, киләсәгегеҙ ҡараңғы. Әгәр йәшәү өсөн бөтә шарттар булған урынға күсеп китеү мөмкинлеге тыуһа, риза булыр инегеҙме?*

– Юҡ, сөнки ошо ерҙә тыуғанмын, ошо ерҙә кендегемдең ҡаны тамған, шунда үҫкәнмен, был олатай-өләсәйемдәрҙең ере. Мин ауыл донъяһында йәшәп өйрәнгән кешемен, башҡаса йәшәй алмаҫ инем. Оҡшат-

майым да, яратмайым да. Китмәҫ инем барыбер... Тамырҙарым ошонда... Юғиһә, ағас һымаҡ корормон, нәҫелем дә бөтөр. Ә мин бөгөн барыбер бәхетлемен. Коштар тауышын ишетһәм, илағым килә. Кыуанам мин ошо ерҙә тыуғаныма, ошо ҡояш тәҙрәмә ҡарап уятҡанына. Юҡ, китмәҫ инем.

– *Ысынлап та, проблемалар мәңге булған, мәңге ҡаласаҡ. Ә кеше ерҙә, тыуған тупрағында нык баҫып тороуы менән генә бәхетле.*

– Иртәнсәк тороп, күрше урыҫтарымдан (Ырғыҙлы ауылында йәшәгән халыҡтың өстән ике өлөшө урыҫтар. – Авт.) һаулыҡ һорашһам, һаумыһығыҙ, тиҙәр, хәл-әхүәл белешәләр. Ҡарай китһәң, ҡалала бит бер подъезда йәшәп тә бер-береһен белмәүселәр бар... Дөрөҫөн әйткәндә, урманға сыҡһам да, бесәнлегемә барһам да – үҙемдең территориям. Мин уны уратып йөрөп, теүәлме-юҡмы икәнлеген ҡарап сығам...

* * *

*Мәсетле районында*

## Ил һәм инәйҙәр

**Бөрйән менән Мәсетле араһы яҡын түгел. Әммә проблемалар уртаҡ. Быны түбәндәгеләр раҫлай.**

**... Зәғиф балалар һаны күбәйә, балалар араһында наркомания, токсикомания, эскелеккә бирелеү, туберкулез сиренең артыуы күҙәтелә.**

**... Тыуым кәмей, балалар үлеме, яман шеш менән ауырыусылар, тыумыштан килгән сирлеләр, зәғиф сабыйҙар һаны ла арта бара, аллергик ауырыуҙар (бронха астмаһы, аллергик дерматит, экзема һ. б.) менән интеккән балалар һаны арта...**

**... Балалар менән үҫмерҙәр араһында енәйәт яһаусылар, ата-әсәһенең насар мөғәмәләһе арҡаһында ғаиләнән ҡасып китеүселәр күп.**

**... Ғаиләләр тарҡалыу күбәйҙе.**

Үрҙәге мәғлүмәттәрҙе Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының «Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары. Ғаилә һәм балалыҡ» секцияһында ҡабул ителгән резолюциянан алдым.

Шунан бирле дүрт йыл ваҡыт үтте. Ә хәҙер бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының 1999 йылғы белешмәһенә мөрәжәғәт итәйек.

**... Ғаиләләрҙең, бигерәк тә башҡорт ғаиләләренең, бөгөнгө хәле бик аянысл һәм йылдан-йыл насарая бара. Республиканың демографик хәле хөртәйгәндән-хөртәйә, үлеүселәр тыуыусыларға ҡарағанда күбәйә. Эскелектең көсәйеүе арҡаһында ғаиләләр тарҡала, аҙғынлыҡ көсәйә, өйләнмәй йөрөгән егеттәрҙең һаны йылдан-йыл арта... зәғиф, етлекмәгән балалар тыуа. Мәҫәлән, Өфө ҡалаһының Совет районында ғына 600 зәғиф бала булыуы теркәлгән.**

**... Республикабыҙҙа 1 миллион 50 мең ғаилә булып, шуларҙың 83521-һендә өс һәм унан күберәк бала бар. 73779 ғаилә тулы түгел, яңғыҙаҡ әсәләр – 33132. Ә 97449 ғаилә инвалид бала тәрбиәләй.**

**... Республикалағы 61580 эшһеҙҙең 43687-һе ҡатын-ҡыҙ.**

Өсөнсө мең йыллыҡҡа беҙ шундай «мираҫ» менән аяҡ баҫабыҙ. Ошо аянысл хәлебеҙ республиканың бик күп райондарында көн үҙәгендә иң сетерекле мәсьәлә итеп ҡуйылды. Шулай уҡ – Мәсетле районында ла.

... Әжекәй ауылында иҫерек әтей менән инәй һигеҙ айлыҡ сабыйҙы баҫып үлтергәндәр. Һәм уларҙың енәйәте ... язаһыҙ ҡалдырылған. Эсеүҙе икәүләшеп дауам итәләр һәм ошо ғаиләлә йәнә ... бала тыуыуы ихтимал.

Ҡыҙылбай менән Ғүмәр ауылындарында, ата-әсәләре ваҡытында медицина ярҙамына мөрәжәғәт итмәгәндәре өсөн, әле йәше лә тулмаған сабыйҙар ауырып үлгән.

Һөҙөмтәлә 1999 йылда Мәсетле районында алты бала үлеп ҡалған, шуларҙың бишәүһе – биш йәшкә тиклем-геләр.

Ә бит «Башҡортостан Республикаһында ғаиләне, әсәлекте, аталыҡты һәм балалыҡты һаҡлау тураһында»

Закон ҡабул ителде. «Әсәлекте һәм балалыҡты һаҡлау буйынса өҫтәлмә саралар тураһында» Указ һәм ҡайһы бер башҡа закондар сыҡты. Ә баланың хоҡуҡтары тураһындағы законды Рәсәй Федерацияһы бынан бер нисә йыл элек үк ғәмәлгә индергәйне. Ниңә уларҙы үтәү талап ителмәй икән?

Иң йәнде өшөткән проблема – халыҡтың хәйерселеккә, өмөтһөҙлөккә, эшһеҙлеккә, эскелеккә батыуы. Райондың ҡатын-ҡыҙҙар йәмғиәте рәйесе Ғәфифә Ҡорбанова был хаҡта йәне өҙгөләнеп һөйләне:

– Беҙ бит һуғыш йылдары балалары. Тамағыбыҙ икмәккә туймаһа ла, бәғерһеҙлек, ҡаты күңеллелек, тотош эскелек, наркомания юҡ ине. Ҡайһы бер әсәләр бит бөгөн балалар аҡсаһын эсеп бөтөрә. Ни эшләргә?

Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, 20 йыл ғүмерен – уҡытыу-тәрбиә, 14 йылын райондың партия комитетының идеология секретары эшенә бағышлаған Ғәфифә Мәғәфүр ҡыҙы бына 15-се йыл инде үҙе үк ойошторған ҡатын-ҡыҙҙар йәмғиәте менән берлектә эскелеккә ҡаршы бөтөн көсөн биреп көрәшә, айыҡ байрамдарҙы тергеҙеү, милләтте уятыу, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, тарихты, өммәт ғорурлығын һәм бәҫен яңыртыу өсөн хәленән килгәнде эшләй. Ләмәҙ-Тамаҡ, Йонос, Мәсетле һәм башҡа ауылдарҙа әүҙем эшләп килеүсе ярҙамсылары менән йыл һайын Кәкүк сәйе, Ҡарға бутҡаһы, Ҡаҙ өмәләре, Ҡорбан байрамдары кеүек сараларҙы йәмле итеп уҙғарып тора. Уларҙың тырышлығы менән «Һалдат әсәләре» тигән сценарий төҙөлгән, шуның менән һалдатҡа оҙатыуҙы һәм һалдат ҡаршылауҙы ла эскеһеҙ үткәреү маҡсаты ҡуйылған. Килендәр менән ҡәйнәләр кисәһе, урам байрамдары, «Өләсәйем һандығы» – бөтәһе лә халыҡты дәртләндереүгә, киләсәккә ышанысын нығытыуға йүнәлдерелгән.

Һәм 70 йәшлек ил инәһе – Ғәфифә апай – бөгөн дә шуларҙың уртаһында.

Мине Оло Ыҡтамаҡта айырым китап магазинының булмауы, «Универмаг»та тик урыҫ китаптарының ғына һатылыуы, урындағы РАЙПО-ның был юҫыҡта ҡыл да

ҡыбырлатмауы, 1996 йылдан бирле бына инде өс йыл буйына Башҡортостан «Китап» нәшриәтенән китаптар килеп алмауы бик ныҡ ғәжәпләндерҙе. Китап һатыу буйынса элекке системаны аяҡҡа баҫтырыу тураһында «Башпотребсоюз»ға хөкүмәт күрһәтмәһе бынан ярты йыл еткерелеүгә ҡарамаҫтан, урындарҙа РАЙПО-лар һаман эшкә лә тотонмаған булып сыҡты. Өс йыл әҙ ваҡытмы ни? Шунан хатта әсә телендә китап уҡыу мөмкинлеген дә мәхрүм ителгән халыҡ, маңҡортлашмай, нимә эшләһен? Был бит үҙҙәренең башҡорт икәнлектәрен күптән онотҡан Ҡорғат, Әжекәй, Ҡыҙылбай, Оло Аҡа ауылдарына ла ҡағыла. Оло Ыҡтамаҡта башҡорт китаптары һатылмағас, Иҫке Мишәр, Яуыш, Ясин, Көршәле, Аҙанғол, Һабанаҡ һәм башҡа ауылдар нимә эшләргә тейеш? Ана шул арҡала халыҡ үткәнен хәтерләмәй йәшәй, ауылдарҙа эскелек, аҙғынлыҡ көсәйеүенең дә тамырҙары, бәлки, шунда яталыр.

Мәсетле районы тураһында һүҙ алып барғанда, ғүмере буйы халҡым тип янып-көйөп йәшәүсе арҙаҡлы яҡташтарымды телгә алмайынса үтеп булмай.

## ТЕЛ ҺӘМ ... ГЛОБУС

Бөгөнгө көндә, бөтөн рухи ҡиммәттәребеҙ арзанайғанда, ә тормош ҡиммәтләнгәндә, халҡымдың өмөтһөҙлөккә, вайымһыҙлыҡҡа бирелеүе, яңы тормош ҡанундарына инеп китә алмай ыҙаланыуы, заман һулышына яраҡлаша алмауы хаҡында күп кенә зыялыларыбыҙ уйланғаны һәм матбуғат биттәрендә фекерҙәре менән уртаҡлашҡаны булды. Ә ҡайһылары, гәп һатып ҡына ҡалмай, республикабыҙ буйлап осһоҙ-ҡырыйһыҙ сәйәхәттәргә юлланды. Башҡорт халҡының арҙаҡлы ҡыҙы, оло шәхес, төрки телдәре буйынса донъя күләменә сыҡҡан ғалимә, Башҡортостандың күренекле йәмәғәт эшмәкәре Нәжибә Мәҡсүтованың Салауат, Балаҡатай, Ҡыйғы, Дыуан, Мәсетле райондарындағы бихисап ауылдарҙа ябай халыҡ менән осрашып әңгәмәләшеүҙәре башҡорт ҡатын-

ҡыҙҙары йәмғиәте рәйесе булараҡ ҡына түгел, ә иң тәүҙә донъя кимәленә сыҡҡан ғалимә булараҡ, иң ауыр һынылыш осоронда халҡына өндәшеүе, мөрәжәғәт итеүе ине.

1994 йылдың аҙағы. Күренекле тел белегесен биш кеше оҙатып йөрөнөк – Нәжибә апайҙың тормош иптәше, Башҡортостан Республикаһы Матбуғат һәм киң информация министрлығының баш белгесе, бөтә ғүмерен матбуғатҡа фиҙакәр хеҙмәт итеүгә бағышлаған Вил Мәҡсүтов; илһөйәр уҙаманыбыҙ, халҡыбыҙға арымай-талмай мәғрифәт илтеүсе, мосолман донъяһына Ҡөрьән нурын сәсеүсе (Ҡөрьәнде сығарыусыларҙың береһе) Баһауетдин Зәйнетдинов; Башҡортостан ҡатын-ҡыҙҙар йәмғиәте эшмәкәре, башҡорт илен арҡырыға-буйға үтеп, әхлаҡ, тарихи хәҡиҡәт өләшеүсе филология фәндәре кандидаты Таңһылыу Кусимова менән Өфө музыка-педагогия колледжы мөғәллимәһе Тамара Сәйфуллина.

Беҙ бик күп ауылдарҙа халыҡ менән осрашып, мәктәп балалары алдында сығыш яһаныҡ.

Нәжибә Хәйерзаман ҡыҙы Мәҡсүтова менән осрашыуға халыҡ осоп-талпынып килде, уның тел тарихы тураһындағы телмәрен, ил яҙмышына бәйле әрнеүҙәрен күҙҙәрен осҡонландырып тыңланы. Ғалим менән бындай осрашыу тарихта тәүге тапҡыр ойошторолалыр, моғайын. Халҡым үҙенең арҙаҡлы улдары һәм ҡыҙҙарын гәзиттән уҡып, телевизорҙан күреп йәки радионан ишетеп кенә түгел, ә яҡындан аралашып, йышыраҡ күрешеп-һөйләшеп, кеше араһында белем-ғилем һәм рухи көс таратып йөрөүҙәренән белергә тейеш. Милләт эштәре шул саҡта ғына алға китәсәк.

Ауыл мәктәптәрендә шуға иғтибар иттем, тел һәм әҙәбиәт кабинеттарында Рәшит Ниғмәти менән Баязит Бикбай, Һәҙиә Дәүләтшина юҡ. Ә милләтем тип йәнен аямаған Зәки Вәлиди, Рәми Ғарипов, Аҡмулла, Шәйехзада Бабичтарыбыҙ ҡайҙа? Ә ниңә һуң 400-гә яҡын ғилми хеҙмәт яҙған, эштәре, тикшеренеүҙәре Голландия, Америка Ҡушма Штаттары, Төркиә, Финляндия, Швеция, Италия кеүек илдәрҙә баҫылып сыҡҡан Нәжибә

Мәҡсүтованың да портретын элмәҫкә? Йәки бөтә ғүмерен мәктәпкә, балалар өсөн дәреслектәр сығарыуға бағышлаған, Рәсәй һәм Башҡортостан мәктәптәренең атҡаҙанған уҡытыусыһы Мәрйәм апай Ғималованыҡын? Ул да бит Мәсетле ҡыҙы. Мин аптырайым, Салауаты, Рәмие, Ҡол Ғәлийе булған әйлеләрҙең ни өсөн һуң Хөсәйен Фәтҡуллины, Ҡотдос Латиповы, Рәшит Әхтәрийе һәм башҡа арҙаҡлы шәхестәре булмаҫҡа тейеш ине лә, ниңә беҙ уларҙы күтәрмәҫкә тейеш инек?..

Әйҙәгеҙ, «рус теллеләр», «российяндар» ҡалыбынан арынайыҡ та башҡортлоҡто иҫкә төшөрәйек, милләтебеҙҙең йөҙөн асайыҡ. Беҙ, әлбиттә, Рәсәйҙәбеҙ, китергә йыйынмайбыҙ ҙа, тик үләнде йәшел тигәндән ул тағы ла йәшелерәк булып китмәй ҙә, күкте зәңгәр тигәндән тағы ла зәңгәрерәк булмай. Шул «российяндарҙы» байраҡ итеп күтәреп йөрөп, бөтөнләй юғалып, бөтөп барабыҙ. Юрматы башҡорто Зәки Вәлиди менән Силәбенән Оло Ҡатай йорто башҡорто Абдулҡадир Инандан ҡала башҡорт телен бөтә донъя кимәленә алып сыҡҡан, 1993 йылдың сентябрендә Анкарала 48 илдән килгән ғалимдар алдында башҡортса сығышы менән бөтә Шәреҡ һәм Европа донъяһын яңғыратҡан Нәжибә Мәҡсүтова кеүек шәхестәребеҙгә ентекләберәк бағайыҡ.

Мин бер генә миҫал килтереп үтәм. Бынан бер нисә йыл элек Татарстандың татар демократтары, суверенитетҡа яҡлауҙы Рәсәйҙә таба алмағас, ярҙам һорап НАТО кабинетына барып ингәндәр. Уларҙы карта алдына баҫтырып:

– Татарстан тигән ил донъяла бармы ул? Ҡайҙа? Булһа, күрһәтегеҙ... – тип белдергәндәр.

Ысынлап та, глобусты ҡырҡ тапҡыр урап сыҡһағыҙ ҙа, һеҙ унда Татар илен дә, Башҡорт илен дә, Ичкерияны ла (Чечня), Абхазияны ла тапмаҫһығыҙ... Бөгөнгө көндә, Рәсәйҙә милли республикаларҙы матбуғат саралары менән дә, газ һәм химия, бомба менән дә юҡ итеү сәйәсәте алып барылғанда, беҙ ҡулға-ҡул тотоношоп, бер-беребеҙҙе яҡларға тейешбеҙ. Мин инанам, тик шунда ғына донъя глобусында Татарстан, Башҡортостан, Яҡутстан, Ичкерия,

Ингушетия һәм башҡа илдәр пәйҙә буласаҡ. Тик беҙ быға бер-беребеҙҙе туҡмап, этәреп, йотоп, бер-беребеҙгә аяҡ салып түгел, ә иңгә-иң терәшеп барырға тейешбеҙ, әлбиттә.

Ә Нәжибә Мәҡсүтова кеүек шәхестәре һәр милләттең бар. Тап ошо ғалимәбеҙ башҡорт телен «Европа телдәренең лингвистик атласы»на индерҙе. Глобусҡа инеү шунан башланмаймы икән, уйлап ҡарайыҡ әле. Илебеҙ суверенитеты, теле, яҙмышы өсөн ғилми нигеҙҙә көрәшеүсе Нәжибә Мәҡсүтованы мин халыҡ-ара симпозиумдарҙа, Пермь, Екатеринбург, Силәбе, Ҡазан һәм Мәскәү ғалимдары алдында тәрән ғилми сығыштар яһап, үҙ фекерен ышаныслы яҡлап сыҡҡанын күреп, сикһеҙ ғорурланғаным бар. 1994 йылда беҙҙең республика йортонда «Башҡортостан этностары буйынса дәүләт законы» проектын тикшергәндә Нәжибә Хәйерзаман ҡыҙының тарихи ерлектәге иҫбатлауҙарынан, кире ҡаҡҡыһыҙ ғилми дәлилдәренән һуң ҙур-ҙур профессор ағайҙар, бер һүҙ ҙә ҡаршы әйтә алмайынса, баштарын эйеп ҡайтып китте. Илебеҙ, телебеҙ шундай ауыр мәл кисергәндә Нәжибә апайҙың бер ҡасан да йоҡлап ятҡаны булманы.

Йонос, Һөләймән, Ләмәҙ-Тамаҡ мәктәптәрендә Нәжибә апайҙың биографияһын шаҡ ҡатып тыңланылар. Һөләймән мәктәбе уҡыусылары беҙгә концерт күрһәтте. Уҡытыусылар коллективы, башҡорт теле белгесе Флорида Мөхәмәтғалина менән ҡурайсы, гармунсы, үҙе йырсы һәм бейеүсе Зөфәр Зәйнетдиновтың иҫ киткес матур фольклор түңәрәгеңен ойоштора алыуы ғәжәпләндерҙе. Ҡайҙан килә шундай рух, илаһи көс? Баһауетдин ағай Зәйнетдиновтың эҙҙәре ярылып ята бында. Беҙ килерҙән алда ғына Һөләймәнгә ҡайтып, мәктәпкә ике мең һумлыҡ яңы китаптар ҡалдырып киткән икән. Уның һүҙҙәренә йәш композитор Артур Туҡтағолов яҙған «Ҡараһаҡал» менән «Һөләймәнем»де малайҙар менән ҡыҙҙар яңғыратып йырлай. Ғөмүмән, бында йыр-бейеүгә маһирҙар. Аптырайһы юҡ, Баһауетдин ағай «Карауанһарай» фольклор-эстрада ансамблен алып ҡайтып күрһәткән икән. Бәләкәй генә каруанһарайсылар шунан тыуған инде.

Тик шуныһы: Һөләймән, Ләмәҙ-Тамаҡ, Йонос, Теләш һ. б. мәктәптәрҙә кластар һалҡын, балалар өшөй, тейешле шарттар булдырылмағайны...

Үкенескә ҡаршы, РОНО мөдире Фуат Ғәләүетдинов менән беҙҙең рәсми осрашыу килеп сыҡманы. Баҡтиһәң, һаман да шул Мәләкәҫ мәктәбен тикшерәләр икән. Беҙ барғанда унда тағы бер комиссия ебәргәйнеләр. Ғәжәп инде, сеп-сей башҡорт илендә, сеп-сей башҡорт ауылында, сеп-сей башҡорттарҙы татарса уҡытмау өсөн дә тағы нисә тикшереү кәрәк булыр икән? Ярты башҡорт үҙ илендә татарса уҡый бит хәҙер.

Беҙҙең Мәсетлелә лә шундай тенденция киттеме әллә – йә балаларҙы сит телдә уҡыталар, йә кластарҙа өшөтөп туңдыралар. Нисек шулай йәшәргә мөмкин? Һыуыҡтан дер ҡалтырап, нисек дәрес уҡымаҡ кәрәк тә, аҙаҡ нисек фән кандидаттары, профессорҙар булмаҡ кәрәк? Ауыл мәктәптәрендә Нәжибә Хәйерзаман ҡыҙы Мәҡсүтоваға шундай һорау бирҙеләр.

Ижади осрашыуҙарҙың һуңғыһына – Ыҡтамаҡтағы мәҙәниәт йортона халыҡ ни эшләптер оҙаҡ һәм яй йыйылды, йәштәр бик әҙ килде. Быныһына ла шөкөр тип ҡыуандыҡ. Башҡортостан XVI быуатта рәсми рәүештә Рәсәйгә ҡушылғандан һуң да ике быуат бойондороҡһоҙ булып ҡалған һәм Аҡ батша, нисек теләһәләр, шулай йәшәһендәр әйҙә, тип ҡул һелтәп ҡуйған әйләләрҙә, дүрт быуат буйы азатлыҡ ихтилалдары менән бөтөн Рәсәйҙе дер һелкеткән был төбәктә XIX быуат аҙағынан алып XX быуат аҙағына тиклем Ыҡ башына махсус күсереп ултыртылған урыҫтар менән Мөслим мишәрҙәре идара итте. (Уларҙың ҡайпылсыҡтары бөгөн дә ҡалған әле һәм ассимиляциялаштырыуҙы дауам итә). Бөгөн килеп кенә беҙ Ыҡтамаҡта тубыҡланып түгел, турайып, үҙ илебеҙҙә һәм үҙ еребеҙҙә тәүге тапҡыр милләтебеҙ менән ғорурланып, күкрәк киреп баҫып торабыҙ.

Нәжибә Хәйерзаман ҡыҙы Мәҡсүтованың тыуған ерендәге ижади кисәләре бына шулай ысын мәғәнәһендә халыҡ менән ижади, рухи, мәҙәни аралашыуға әйләнде. Башҡа ғалимдарыбыҙ һәм арҙаҡлы шәхестәребеҙ ҙә халыҡ

араһына йышыраҡ сыҡһа, милләт күҙҙәренә йышыраҡ баҡһа, бөгөнгөләй тарҡаулыҡ, маңҡортлоҡ, аҙаҡ килеп, эскелек һәм әхлаҡһыҙлыҡ та, бәлки, сигенер ине.

Ә бит Нәжибә апайҙың Беренсе бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы алдынан әйткәндәре, үкенескә ҡаршы, бөгөн дә актуаль яңғырай:

– Башҡорттар үҙ суверенлы илендә бөгөн үлем буйынса – беренсе, тыуым буйынса һуңғы урында тора. Ошо милләттең киләсәге бармы? Тарихтың иң ҡыйын ваҡыттарында ла беҙҙең милләт бөгөнгө кеүек аяныслы хәлдә булмаған. Хатта шул Тәфтиләү ҡырған ваҡытта ла, Ҡараһаҡал ихтилалынан һуң ҡоллоҡҡа таратҡанда ла, бөтә илен тар-мар итеп, өйҙәрен яндырған ваҡытта ла әле башҡорттоң рухы һүнмәгән булған. Бөгөнгө көндәге битарафлыҡ, маңҡортлоҡ бер ваҡытта ла тарихта булмаған. Быңың һис яҡшылыҡҡа илтәһе юҡ. Һәм бөгөн беҙҙең халҡыбыҙ ғына йоҡламай – дәүләтебеҙ маңҡорт. Дөрөҫөн генә әйткәндә, бөгөн мин ситлеккә ябып ҡуйылған ҡош һымаҡ. Ҡанаттарым менән гел тимергә, суйынға бәреләм, ҡауырыйҙарым минең бермә-бер һына тора, бер нимәгә лә өлгәшә алмайым...

(«Йәшлек», 7 май, 1994 йыл).

## ТӨП ХАЛЫҠ ХОҠУҠТАРЫ

Башҡорт этносының абсолют күпселеге Башҡортостанда көн күрә. Беҙҙең милли дәүләтселектә йәшәүсе ҡайһы бер диаспоралар, төп халыҡҡа ҡарағанда күпселекте тәшкил итһәләр ҙә, икенсе бер мөстәҡил дәүләттәрҙәге үҙ этностарының бер бәләкәй өлөшө генәлер. 1989 йылғы халыҡ мәғлүмәттәрен алыу буйынса, Башҡортостанда башҡорттарҙың 64,1 проценты, татарҙарҙың – 20,2, мариҙарҙың – 16,5, сыуаштарҙың – 6,7, удмурттарҙың – 3,3, мордваларҙың – 2,9, украиндарҙың – 1,7, белорустарҙың – 1,3, урыҫтарҙың – 1,3, немецтарҙың – 1,3 проценты йәшәй (I Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы. Стенографик отчет, Өфө, «Китап», 1998 йыл. 208-се б.). Шул уҡ

ваҡытта бөтөн ошо милләттәр Рәсәй Федерацияһына ингәнбеҙ һәм һәр беребеҙҙең үҙ суверенлы дәүләте, Декларацияһы, дәүләт символдары һәм дәүләт телдәре иғлан ителгән... (Ә немецтарҙың, Европала иң үҫешкән һәм иң алдынғы илдәрҙән иҫәпләнгән Германияһынан тыш, Рәсәйҙә автономиялы округы бар). Һәм Башҡортостан йөмһүриәтенә Рәсәй Федерацияһының ошо юҫыҡтағы функцияларын үҙ өҫтөнә алырға кәрәкмәйҙер барыбер. Сөнки был, бигерәк тә бөгөн, федерализмға ҡурҡыныс яһағанда, башҡорт милли дәүләтселеген юҡҡа сығарыуға һәм Рәсәй эсендә ябай урыҫ губернаһы булып ҡалыуға килтереүе ихтимал. Ә Рәсәй Федерацияһын бер милләтле урыҫ дәүләтенә әйләндереүгә ынтылыу РФ Конституцияһындағы преамбулала, «Рәсәй Федерацияһы» һәм «Рәсәй» атамалары бер үк мәғәнәне аңлата, тип нығытып яҙып ҡуйылған.

Тарихи территориялары менән бергә илдән-илгә таратылған, тарҡатылған башҡорт халҡының бөтөнлөгөн тәьмин итеү, уны ассимиляциянан һәм этноцидтан йолоп алып ҡалыу өсөн беҙгә Рәсәй менән төҙөлгән Федератив Килешеү һәм Ҡушымта, Рәсәй Федерацияһы менән Башҡортостан Республикаһы араһындағы ике яҡлы килешеү генә түгел, халыҡ-ара хоҡуҡ документтары төп таяныс булып хеҙмәт итергә һәм шуларға ярашлы закондар республика эсендә лә ҡабул ителергә тейештер, моғайын. Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы 1994 йылдың 24 авгусында ҡабул иткән Төп халыҡтарҙың хоҡуҡтары Декларацияһының I өлөшөнөң 6-сы пунктында, мәҫәлән, төп халыҡтарҙың коллектив йәки шәхси рәүештә этноцидтан һәм геноцидтан һаҡланыу һәм яҡланыу хоҡуҡтары иғлан ителгән. Маҡсаты менән һәм эҙемтәләре буйынса төп халыҡты бөтөнлөгөнән мәхрүм итеүсе сәйәсәт алып барыу, сит мәҙәниәтте йәғни тормош рәүешен көсләп тағыу аша интеграциялау, йә иһә төрлө рәүештәге мәжбүри ассимиляциялау, төп халыҡтың ерҙәрен, территорияһын һәм ресурстарын үҙләштереү, төп халыҡҡа ҡарата күрәалмаусанлыҡты киң таратыу тыйылған.

Ә беҙҙең хәлдәребеҙ ниндәй һуң?

## Бөтөнлөктән мәхрүм ителеү

1989 йылғы халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре 204 мендән ашыу башҡорттоң үҙ республикаһынан ситтә, әммә тарихи ерҙәрендә, йәшәүен күрһәтте. Тағы ла 400 меңгә яҡыны – Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендә һәм Берләшкән Дәүләттәр Берләшмәһендә. Улар Башҡортостан Республикаһының суверенлығын нығытыусы закондар ҡабул итеүҙән, Башҡортостан Президентын һайлауҙан, башҡорт халҡының мәнфәғәтен яҡлап, референдумдарҙа ҡатнашыу хоҡуғынан мәхрүм. Ә бына урыҫтар ҡайҙа йәшәһә лә – Американамы, Израилдәме, әллә БДБ илдәрендәме – үҙ этносының яҙмышы хәл ителгән һәр һайлауҙа, һәр референдумда ҡатнаша ала. Уларҙың был хоҡуғы РФ Конституцияһы менән нығытылған.

> *«Гражданин Российской Федерации может иметь гражданство иностранного государства (двойное гражданство) в соответствии с федеральным законом или международным договором Российской Федерации» (Конституция Российской Федерации, Глава I, Статья 62(1)).*

Бөтә Донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе, Башҡортостан Фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы Нияз Мәжитовтың Рәсәй Федерацияһы субъекттарының мәғариф идаралыҡтары етәкселәре һәм мәғариф министрҙары семинар-кәңәшмәһендә һөйләгәндәре шуны раҫлай:

«... Тураһын әйтәм, хәл мөшкөл. Силәбе һәм Ырымбур өлкәләрендәге бер нисә башҡорт мәктәбен иҫәпләмәгәндә, башҡа бер ҡайҙа ла башҡорт балаларына әсә теле уҡытылмаған... Ватандаштарыбыҙ туған телендә радио һәм телевидение тапшырыуҙарынан, гәзит һәм журналдар уҡыуҙан мәхрүм ителгән... Силәбе, Екатеринбург, Пермь, Ырымбур, Мейәс кеүек ҡалаларҙа ла башҡорт мәктәптәре асыу – күптән өлгөргән мәсьәлә. Телгә алып үтелгән өлкәләрҙә башҡорттар төп халыҡ хоҡуғына эйә, ә төп

халыҡ хоҡуғы халыҡ-ара һәм РФ закондары тарафынан яҡланыла.» («Йәшлек», 11 апрель, 2000 йыл).

Ошо урыҫ өлкәләре менән Башҡортостан Республикаһы араһында ике яҡлы килешеүҙәр төҙәлөүгә йылдар үтеп китеүенә һәм ҡайһы бер урындарҙа хатта илселектәр асылыуына ҡарамаҫтан, ошо юҫыҡта һиҙелерлек алға китеш булмауы асырғандыра. Ә бит башҡорттарҙың 40,4% үҙ республикаһынан ситтә йәшәй – яртыһы тиерлек! Бер яртыбыҙ унда тарҡала, икенсе яртыбыҙ үҙ республикаһында ассимиляцияға, этноцидҡа дусар ителә. Эске һәм Тышҡы башҡорт илдәре лә шулай ҡыйралыш һәм тарҡалыу кисергәс, киләсәктә нимә көтә беҙҙе?..

Ҡайһы берәүҙәр Башҡортостан Конституцияһының Рәсәйҙекенә тап килмәүен тәнҡитләргә бик ярата. Шунан файҙаланып, ниңә башҡорттарға ла, донъяның ҡайһы мөйөшөндә йәшәүҙәренә ҡарамаҫтан, урыҫтар кеүек, ике гражданлыҡ иғлан итмәҫкә? Юғиһә, урыҫ өлкәләре һәм сит республикалар менән хеҙмәттәшлек итеү тураһында килешеүҙәр төҙәү унда йәшәүсе башҡорттарға нимә бирҙе әле? Берәй ерҙә мәктәп асылдымы, башҡортса гәзит сыға башланымы, әллә филармония йә театр эшләйме? Юҡ бит. Бер ниндәй үҙгәреш тә булманы. Ашығыс саралар күрелмәһә, киләсәктә уларҙың сит милләттәр тарафынан бөтөнләй йотолоп бөтөүе ихтимал.

Иң яҡын күршебеҙҙе генә алайыҡ. 1920 йылда, Минзәлә һәм Бөгөлмә өйәҙҙәре Татарстанға бирелгәндә, күрше республикала 355772 башҡорт йәшәгән! Хәҙерге көндә Татарстан Республикаһында ни бары 19 мең 106 башҡорт иҫәпләнә (Ә Минзәлә һәм Бөгөлмә башҡорттары 1926 йылғы иҫәпләмәлә үк, ни бары алты йыл үтеүгә, Татар АССР-ы картаһынан тулыһынса юҡҡа сыҡҡан). Улары ла мәжбүри ассимиляцияға дусар ителә. 1991 йылдың 16 августынан алып Татарстан менән Башҡортостан араһында төҙөлгән килешеүҙәрҙә лә, нигеҙҙә, Башҡортостанда йәшәгән татар диаспораһының ғына мәнфәғәттәре ҡайғыртылды: яңынан-яңы гәзит-журналдар һәм мәктәп-гимназиялар асылды, филармониялар ойошторолдо, театрҙар төҙөлдө... Шулай Башҡортостан татарҙары

үҫтерелде һәм күбәйтелде. Ә Татарстанда үҙҙәренең тарихи ерҙәрендә йәшәгән башҡорттар өсөн быларҙың береһе лә эшләнмәне. (Башҡорттарҙың иң арҙаҡлы шәхестәрен, шул иҫәптән Ҡол Ғәлиҙе, Шәйехзада Бабичты, Мостай Кәримде, Шакирйән Мөхәмәтйәновты, татар тип иғлан иткән «Татарский энциклопедический словарь» (Казань, 1999) нәшер итеүҙән һәм башҡорт халҡының тарихын боҙоп күрһәтеүсе китаптар баҫып сығарыуҙан башҡа, тип өҫтәргә кәрәктер).

Бөгөнгө көнгә килгәндә, Башҡортостандың яртыһында – төньяҡ-көнбайышта – ассимиляциялаштырыу сәйәсәте тамамланыу алдында тора. Унда бер генә башҡорт гәзите лә сыҡмай, күп урында Башҡортостан телевидениеһы күрһәтмәй һәм радиоһы һөйләмәй, башҡорт матбуғаты таратылмай һәм китаптары һатылмай. Төньяҡ-көнбайыш төбәктә бөгөн тоталь ассимиляциянан «тере» ҡалған 31136 башҡорт балаһының 8932 генәһе башҡорт телен өйрәнә (был 28,6% ҡына тәшкил итә), ә ҡалған 22204-е шул хоҡуғынан да мәхрүм ителгән, уларға сит тел һәм сит мәҙәниәт көсләп тағыла. Был төбәктә урыҫ, сыуаш, татар, мари телдәрендә гәзиттәр нәшер ителә. Тик башҡортса түгел.

### Тел һәм мәктәп китһә – ер китер...

БМО-ның төп халыҡтар хоҡуҡтары декларацияһының (1994 йылдың 24 авгусында ҡабул ителгән) VI өлөшөнөң 23-сө һәм 25-се пункттарында төп халыҡтың тарихи ерҙәренә, территорияһына тейелгеһеҙ хоҡуҡтары, хатта быға тиклем ниндәйҙер сәбәптәр менән тартып алынған, сит халыҡтарға бирелгән йә конфискацияланған ерҙәрен ҡайтарып алыу хоҡуҡтары иғлан ителгәнлеге хаҡында әйтеп үткәйнем инде. Был халыҡ-ара хоҡуҡ акты Тоцк атом полигонында атом бомбаһы шартлауҙарынан һәм «Маяк» атом станцияһы шартлауҙан зыян күргән Ырымбур һәм Силәбе аҫабаларына ғына түгел, ғөмүмән, урыҫ өлкәләренә төп халҡы менән бергә киткән тарихи территорияларыбыҙға һәм татарҙарға бирелгән аҫаба

ерҙәребеҙгә лә ҡағыла. 30-сы йылдар башында ғына Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышында йөҙәрләгән башҡорт ауылдарындағы башҡорт мәктәптәре, «башҡорт телендәге дәреслектәр һәм башҡорт теле уҡытыусылары етешмәү сәбәпле», татар телендә уҡытыуға күсерелгән. (Был эксперимент әле лә дауам ителә – урындағы ГУНО-лар һәм РУНО-лар яңы ғына башҡорт теле индерелгән мәктәптәрҙе дәреслектәр менән тәьмин итмәй ыҙалай, башҡорт телен индереүгә төрлөсә аяҡ сала).

Халыҡ мәғарифы комитетының статистика мәғлүмәттәре буйынса 1923–1924 уҡыу йылында Бөрө комитетында (уға Асҡын, Әсән, Байҡыбыш, Борай, Краснохолмск, Ҡыҙыл Яр, Яңы Ҡабан, Иҫке Балтас, Тәтешле, Яңауыл һәм ҡайһы бер башҡа волостар ингән) 131 башҡорт мәктәбе, 10 татар, 112 урыҫ, 47 мари һ. б. I баҫҡыслы мәктәптәр эшләгән. Уларҙа 6959 (40,1%) башҡорт уҡыусыһы һәм 488 (2,8%) татар, 7240 (41%) урыҫ уҡыусылары уҡыған (Госархив БАССР, фонд Р–798, опись 1, д.739, стр.19–20). Ә 30-сы йылдар аҙағында был территорияла бер генә башҡорт мәктәбе лә ҡалмаған – бөтәһе лә татар телендә уҡыуға күсерелгән. Шул уҡ 1923–1924 уҡыу йылында Бәләбәй кантонында – 68, Өфө кантонында 51 башҡорт мәктәбе эшләгән. Улар ҙа һуңынан юҡҡа сығарылған. Ҡариҙел РОНО-һы отчетынан күренеүенсә, 1933 йылдың 1 сентябрендә 40 мәктәптең 13-өндә башҡорт телендә уҡытыу алып барылған, ә башҡаларында – татар һәм урыҫ телдәрендә. 1933 йылда Туймазы районында 14 башҡорт мәктәбе (1190 уҡыусы) һәм 2 башҡорт ШКМ-ы (472 уҡыусы) иҫәпләнгән. Баҡалы РОНО-һы мәғлүмәте: 1933 йылдың 7 февралендә был районда 18 башҡорт мәктәбе һәм 3 ШКМ, 42 татар мәктәбе һ. б. эшләгән. (Проблемы изучения родного языка башкирскими детьми в северо-западных районах БССР, Уфа, 1990, стр. 89–91).

40-сы йылдар башында был территорияларҙа бер генә башҡорт мәктәбе лә ҡалмаған. Ә тел һәм мәктәп менән бергә рух киткән...

Был ни хәл һуң? Диалект та диалект, тибеҙ. Арҙаҡлы ғалимыбыҙ Рәшит Шәкүр һорауҙы дөрөҫ ҡуя: ә бит 1897

йылдағы иҫәпләмә буйынса башҡорттарҙың һаны 1 млн 409 мең кеше иҫәпләнә һәм уларҙың күпселеге, шулай уҡ бөтөн көнбайыш һәм төньяҡ-көнбайыш башҡорттары ла, туған теле итеп башҡорт телен һанай. XX быуаттың 20-се йылдарында нимә булған һуң улар менән? (Теле барҙың – иле бар. Өфө, «Китап», 1995. 78-се бит).

Тағы бер ҙур ғалимыбыҙ Әнүәр Әсфәндиәровтың «История сел и деревень Башкортостана» исемле һигеҙ томлыҡ (әлегә) ғилми хеҙмәттәренә мөрәжәғәт итәйек. Быға тиклем тап Ҡазан дәреслектәре буйынса татарса уҡытылған, татарса гәзиттәр нәшер ителгән төнъяҡ-көнбайыш Башҡортостанда кемдәр йәшәгән һәм бөгөн дә йәшәй һуң?

Бөтөн Мәскәү һәм Өфө дәүләт архивтары, Ырымбур, Пермь, Свердловск, Силәбе һ. б. архивтар, барса тарихи сығанаҡтар, Рәсәй империяһындағы, СССР һәм РСФСР-ҙағы бар булған халыҡ иҫәбен алыуҙар, Башҡортостанда һәм Мәскәүҙә донъя күргән археография йыйынтыҡтары шуны раҫлай – төнъяҡ-көнбайышта бер генә тарихи татар ауылы ла юҡ.

Ҡатнаш типтәр-мишәр-башҡорт-татар ауылдары Ауырғазы, Яңауыл, Борай, Саҡмағош районында ғына бар. (1834 йылғы ревизия материалдары, «Западные башкиры». Өфө, 2001).

Ә Балтас, Краснокама, Йәрмәкәй, Шаран, Туймазы, Илеш, Асҡын, Тәтешле, Кушнаренко, Дүртөйлө, Нуриман районында бер генә татар ауылы ла юҡ, бөтөнөһө лә тарихи башҡорт ауылдары. Шуларҙан «Башҡортостандың үгәй балалары»н һәм «ҡайырылған ҡанаттар» яһау өсөн ниндәй көс һәм дәлил табылды икән? «С» хәрефе менән һөйләшкән башҡорттар өсөн ни нәмә генә эшләмәгәндәр – гәзит-журналдар, институт-университеттарҙа бүлектәр, ҙур-ҙур факультеттар, театр-филармониялар асҡандар... һәм шул халыҡты «башҡорт түгел» тип иғлан иткәндәр. Башҡорт булып тыуған һәм йәшәгән кешенән дә ят милләт яһау өсөн ниндәй мәкерле дәүләт системаһы ҡорорға кәрәк ине? Хатта минең яратҡан шағирым, милләттәшем Муса Сиражи ҡаңғырып йөрөгәс, Яҙыусы-

лар съезының береһендә – башҡортмон, икенсеһендә – татармын, тип иғлан итеп, 2001 йылдың 23–24 февралендә уҙғарылған 13-сө съезда Башҡортостан «Китап» нәшриәтендә татар редакцияһын асыуҙы талап итеп сығыш яһағас, был системанан киләсәккә нимә көтөргә? Ҡайһы милли республикала шул хәлгә барып еткәндәре бар? Шулай барһа, милли республиканан нимә ҡалыр? Губернамы?

Беҙ бөгөн инде етмешен ҡыуалаған Муса Сиражиҙың башҡорт телендәге шиғырҙарын ятҡа уҡып һәм йырҙарын йырлап үҫтек:

Әй моңдарын отоп һайрай,
Таңда һандуғас,
Шул моңдарҙы йырға һалдым,
Өҙөлөп һағынғас...

Ә бөгөн беҙҙең менән нимә булды һәм киләсәктә нимә буласаҡ? Мәсетле халҡының нисәмә быуыны йөрәк түрендә йөрөткән Туймазылағы әй башҡортон тамырынан йолҡоп алып ташлап булмай бит... Ул беҙгә һеңгән, ул беҙҙең менән...

Уның яҡташы, ғүмере буйы Туймазы башҡорттарының телен, мәҙәниәтен, тарихын тергеҙеү өсөн һаулығын аямай айҡашыусы танылған йәмәғәт эшмәкәре, алдынғы мәғрифәтсе Ғәлимйән Ҡунаҡбай улы Шәйәхмәтов (үҙе булмышы менән Дим башҡорто) башҡортта башҡорт эҙләүсе, ниндәйҙер саф, «чиста» милләт айырыусы, башҡортто уртаға бүлеүсе ғалимдарға, чиновниктарға, сәйәсмәндәргә үпкә һүҙҙәрен шулай уҡ шиғыр юлдарына һалған...

**Ҡайҙа, мин кем?**

Яйыҡ һәм Ағиҙел буйында
Татар, тип табылдым,
Ҡай берәүҙәр араһында
Башҡорт булып сағылдым.
Ҡазанда Ҡабан күле буйында
Һоранылар: «Һиндә ниндәй ҡан?
Ғаяз Исхаки, башҡорт бөттө, тине,

Тимәк һин башҡорт – могикан?»
Мәскәү һәм Петербурҙа
Көткән өмөттәрем һыҙылды,
Тарихта юғалған бәжәнәк
Тип табылдым.
Йөҙәр йылдар буйы ырыуым
«Ç» менән һөйләшкән.
Çөйән çикеләргә ултырып,
Çары балдан çыйлашҡан.
Ғилми һүҙлектә уға урын юҡ,
«Ç» нан башланған һүҙ гүрҙә,
Әммә яулап алған унда «С», «Ч», «Щ»-лар,
Оло түрҙә.
Төнъяҡ-көнбайыш башҡортон
Үҙенән-үҙен эҙләтеп ыҙалаталар.
Ситтәргә – ят, үҙендә – сит,
Йәшәй унда тик хәтирәләр.

Розалиә Солтангәрәеваның «Аҡбуҙатҡа атлан, башҡортом!» сценарийындағы Аллаһы Тәғәләнең бәғерҙе телгән һорауы тап ана шул яҡ башҡорттарына төбәлгәндер кеүек:

Эй, минең яратҡан балаларым,
Йыһан нурынан яһалған башҡорттарым.
Ни көндәргә ҡалдың, ни хәлдәргә ҡалдың?
Бәлки, ҡотолор әмәлең барҙыр?
Бәлки, иманға боролор мәлең барҙыр?

*Дүртөйлө районында*

**ҺАУМЫҺЫҒЫҘ, ҺАУМЫҺЫҒЫҘ, МИЛЛӘТТӘШТӘР!..**

**Дүртөйлө районында 56 дөйөм белем биреү мәктәбенең 5-ендә генә башҡорт теле һуңғы осорҙа предмет булараҡ өйрәнелә башлаған. Һөҙөмтәлә ошо райондағы 2153 башҡорт балаһының ни бары 125 бөртөгө башҡорт телендә уҡыу бәхетенә ирешкән. Район гәзите «Юлдаш» рус һәм татар**

**телдәрендә генә нәшер ителә. Ә бит рәсми мәғлүмәттәр буйынса Дүртөйлө районындағы 87 ауылдың 55-е – тарихи башҡорт ауылдары.**

... Дүртөйлө районы территорияһын беҙҙең дәүерҙең VII–VIII быуаттарында уҡ үҙләштереүсе башҡорттарҙың туранан-тура варисҭары булған милләт XIX б. аҙағына тиклем ошо ерҙәрҙең төп халҡын тәшкил итеп йәшәгән. Улар ата-бабаларының үҙҙәрен быуаттан быуатҡа башҡорт тип иҫәпләүҙәрен киләсәктә хәтерендә һаҡлап ҡалырмы, ҡабатланмаҫ мәҙәни ҡомартҡыларыбыҙҙы һәм тел үҙенсәлектәрен балаларына һәм ейәндәренә тапшыра алырмы? Юғиһә бит республикалағы ҡайһы бер айырым көстәр, төнъяҡ һәм төнъяҡ-көнбайыш башҡорттарын бөтөнләй инҡар итеп, Башҡортостан Республикаһының административ сиктәрен үҙгәртеү буйынса ныҡышмалы сәйәсәт алып бара башланы. Был төбәк башҡорттарының социаль-иҡтисади хәленең бөгөнгө ҡатмарлыҡтары дәүләтебеҙҙең Совет власы йылдарындағы хаталы сәйәсәтенең һөҙөмтәһе лә булып тора, сөнки ул осорҙа бөтөн тырышлыҡтар төньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш башҡорттарын ассимиляциялауға һәм милләттең төп өлөшөнән айырып алыуға йүнәлтелгәйне. Бер генә миҫал килтереп үтәйек. Бөгөнгө башҡорт әҙәби теле, төньяҡ-көнбайыш диалектын иҫәпкә алмайынса, көньяҡ һәм көнсығыш һөйләштәре нигеҙендә генә ҡабул ителә. Был етди сәйәси хата була һәм ошо яҡ башҡорттарының теле ғәмәлдә рәсми башҡорт теленән ситтә ҡалдырыла. Йылдың-йылы кәмегәндән-кәмегән башҡорт халҡынан айырмалы рәүештә, бөтөн донъяға һибелгән «ҡарауһыҙ» төркиҙәрҙе берләштереп, 6 млн-ға еткән татар халҡы Башҡортостандағы төньяҡ-көнбайыш башҡорттарын да ситтә ҡалдырмай, уларҙы ла «үҙ ҡанаты аҫтына» ала. Башҡорт йәмғәтселегендә, телдәре татарға яҡын булғас, тимәк, башҡорт түгелдәр, тигән хаталы фекер нығына. Бына шулай ябай аңлашылмаусанлыҡ тотош милләт фажиғәһенең сәбәбенә әйләнгән. Башҡорт халҡының рухи ихтыяждарын ҡәнәғәтләндерергә тейеш булған дәүләт

институттарының тиҫтәләгән йылдар буйына төньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш райондары башҡорттарынан йөҙ бороп, сит дәүләттең көслө экспансияһы алдында япа-яңғыҙы ҡалдырыуын тик шуның менән генә аңлатып булалыр...

1999 йылдың яҙында Дүртөйлөлә уҙғарылған ҡоролтайҙа ошолар хаҡында йән әрнеүе менән һөйләүсе Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының урындағы башҡарма комитеты рәйесе, 1-се мәктәп директоры Ғәли Зәйдуллиндың борсолоу-әсенеүҙәрен йөрәгемде устарыма ҡыҫып тыңлап ултырҙым. Башҡорт халҡын тергеҙеү хәрәкәте башланғандан бирле янып-көйөп, ең һыҙғанып эшләп йөрөүселәрҙең береһе ул Ғәли Нәбиулла улы. Урындағы башҡорт ҡоролтайының яуаплы сәркәтибе, Дүртөйлө ҡалаһы хакимиәтенең мәҙәниәт бүлеге инспекторы Резеда Зарипова тураһында ла шундай уҡ йылы һүҙҙәр әйтеп булыр ине. Әммә үҙәктән, йәғни Өфөнән, хөкүмәтебеҙ һәм дәүләтебеҙ тарафынан төньяҡ-көнбайыш башҡорттарына иғтибарҙың ифрат әҙ бүленеүе йәмәғәт эшмәкәрҙәренең бәкәленә ныҡ һуға, юғары һөҙөмтәләргә ирешергә ҡамасаулай. Ошо йәһәттән Ғәли Зәйдуллин Дүртөйлө ҡалаһында бына ҡасандан бирле 6-сы мәктәптең төҙөлөп бөтөрөлмәүен, хөкүмәттең быға аҡса бүлмәүен әйтеп үтте һәм шуны башҡорт гимназияһы итеп асыуҙы һорап ҡоролтай рәйесе Нияз Мәжитовҡа мөрәжәғәт иткәйне. Нияз Абдулхаҡ улы, үҙ сиратында, ошо мәсьәлә буйынса президентҡа барасағына ышандырғайны. Әгәр Дүртөйлөлә, исмаһам, башҡорт гимназияһы төҙөлһә, дәүләтебеҙҙең һәм хөкүмәтебеҙҙең төп халыҡ тураһындағы ысын хәстәрлеген күрһәтер ине. Әлегә иһә Дүртөйлө районының 55 башҡорт ауылының берәүһендә (!) генә – Исмаилда – башҡорт теле индерелгән. Уҡытыусы Г. Закирова менән ошо мәктәп директоры Р. Шайниязова тураһында бында тик маҡтау һүҙҙәре генә ишетергә мөмкин. Әйткәндәй, Ҡоролтай рәйесе, археолог, академик Нияз Мәжитов архив документтары нигеҙендә төҙөгән Дүртөйлө районындағы башҡорт ауылдары исемлеген һәм Исмаил ауылы шәжәрәһен бүләк итте. Ул башҡорт донъяһында киң таралған шәжәрә байрамын һәр бер башҡорт ауылында,

хәҙерге ваҡытта урыҫ, татар тип яҙылған башҡорт ауылдарында ла үткәреп, милли асылына ҡайтыуҙарына, мәҙәниәттең, әсә теленең яңынан сәскә атыуына теләкышаныс белдерҙе. «Нилектән ғүмер буйы ата-бабалары үҙҙәрен башҡорт тип иҫәпләгән халыҡ һуңғы бер егерме йыл эсендә татар булып киткән? Был беҙҙе, ғөмүмән, Башҡортостан дәүләтен борсорға тейеш... – тине ул. – Беҙ бит Башҡортостандың үҙендә йәшәйбеҙ! Башҡорттар бит райондың төп халҡы! Рәсми документтарҙа улар 25% ҡына тип күрһәтелһә лә, ысынбарлыҡта 60–70% башҡорт Дүртөйлө районының халҡын тәшкил итә...»

Башҡорт тамырҙарын инде онотоп бөтә яҙған был яҡтарҙа 1995 йылда Әсәндә башҡорт халҡының бөйөк шағиры Шәйехзада Бабичтың музейы асылыуы ғына ошо ергә рух, ырыҫ ҡайтарып, тарихи хәтерҙе терелткәйне. Инде башҡорт халҡының икенсе бер һөйөклө улы, Башҡортостандың халыҡ шағиры Назар Нәжмиҙең музейын асыу ҙа хөкүмәт кимәлендәге эшкә әүерелһен һәм бер Минеште мәктәбенең арыҡ яурындарына ғына ҡайтарып ҡалдырылмаһын ине.

Ә бит Дүртөйлө башҡорттарының ҡоролтайында Назар Нәжмиҙең сығышы үҙе бер сағыу тарихи күренеш булды. Ул христиандарҙың «Инжил» китабындағыса, йәғни «Евангелие»лағыса: «Башта һүҙ булған», – тине. Һүҙ, тимәк, тел. Шуға ҡарап милләт билдәләнә. Ул шулай милләт йәшәйешендә телдең әһәмиәтен һыҙыҡ өҫтөнә алды. Шағир, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы делегаты булараҡ, шундай оло милли ҡорҙоң урыҫ телендә барыуы, унда берҙән-бер башҡортса һөйләгән кешенең... Германиянан килгән ҡатын, профессор Маргарет Эрсен-Раш булыуы хаҡында күңел рәнйеүҙәре аша әйтеп үтте. Үҙенең «Ҡапҡалар» поэмаһын хәтеребеҙгә төшөрҙө. Эйе, һәр ҡапҡаның ике бағанаһы бар. Шағирҙың ғүмер биографияһы ла ике бағананан тора: атай һәм әсәй. Атаһы – башҡорт, әсәһе – татар. «Минә ошо ике бағананы мин бер ваҡытта ла ҡаршы ҡуя алманым, – тине ул. – Сөнки улар минең ҡанымда, булмышымда».

«Беҙ ни өсөн ҡоролтайға йыйылдыҡ?» – тигән һорауға Назар ағай: «Үҙебеҙҙең донъяла йәшәүебеҙҙе иҫбат итергә», – тип яуап бирҙе. Был иһә Дүртөйлө ҡалаһы эске эштәр бүлеге етәксеһе урынбаҫары, подполковник Фәрит Кармановтың: «Районда енәйәтселәр күбәйҙе, эскелек, наркомания көсәйҙе, әйҙәгеҙ, дуҫ йәшәйек, милли мәсьәләләрҙе күтәрмәйек», – тигәненә мәғәнәле яуап булып яңғыраны. Башҡортостан халыҡтары фирҡәһе рәйесе урынбаҫары Әлтәф Ғәйфуллин дөрөҫ әйтте: «Әгәр ҙә башҡорттар йыйылышып, ни эшләргә, ниндәй телдә уҡырға, әҙәби телде өйрәнергәме, юҡмы, тип һүҙ күтәрһә, был һис тә милләтселекте аңлатмай. Шуның өсөн Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы ойошторолған, Башҡортостанда йәшәгән татарҙарҙың башҡарма комитеты төҙөлгән, урыҫтарҙың Соборы асылған, һәр милләттең беҙҙең республикала 28 мәҙәниәт үҙәге бар. Беҙҙә бер милләт тә ситкә ҡағылмай. Әммә ләкин, бик күп районларҙы йөрөп сыҡҡандан һуң, шундай күренеш асылды: 200-гә яҡын ауылда, 1979 йылғы халыҡ иҫәбен алыу буйынса башҡорттар йәшәгән ауылдарҙа, икенсе телдә уҡый башлағандар. Ә ниңә, башҡорт балаларының үҙ телендә уҡырға хоҡуғы юҡмы ни? Быны өсөн Халыҡ мәғарифы министрлығы, уның урындарҙа идаралыҡтары бар. Улар шуның өсөн аҡса ала түгелме?..»

Шулай ҙа подполковниктың борсолоуҙары аңлашыла миңә. Уның әтнәкәһе бар шул. Дүртөйлө яҡтарында, бөтөн төньяҡ-көнбайыштағы һымаҡ, башҡорт бөтөрөлөүгә барыу менән милли проблема ла «юҡҡа сыҡҡан». Башҡортса һөйләшкән кешене күрһәләр, папуасты күргән һымаҡ аптырайҙар бында. Менә мин Дүртөйләлә мэрияны эҙләгәндә, күңелһеҙлектәргә тарымаҫ өсөн, тик урыҫса һорашырға тырыштым, ә ҡала советын тапҡас, бында бит әле башҡорт ҡоролтайы бара, тип, шәбәйеп китеп, уңлы-һуллы башҡортса иҫәнләшә башланым. Тик өсөнсө ҡатҡа тиклем күтәрелгәнсе миңә осраған ҡәрҙәштәремдең береһе лә башҡортса биргән сәләмемде алманы... Былтыр йәй ошонда килгәнемдә ҡоҙамдың әйткәндәре дөрөҫ булыуына шунан һуң нисек ышанмайһың? Ул беҙгә, Өфөнән килгән

ҡоҙа-ҡоҙасаларына көнләшеп ҡарап: «Их, һеҙ рәхәтләнеп, ғорурланып үҙебеҙҙең телдә һөйләшәһегеҙ, ә бында бит башҡорт булырға ирек бирмәйҙәр, башҡортса бер һүҙ әйттермәйҙәр, көләп, кәмһетеп кенә торалар,» – тигәйне. Ә НГДУ мастеры Рәүеф Мәкәримов: «Әйтерһең, беҙ икенсе илдә йәшәйбеҙ, – тип көйәләнде. – Ҡалала, ни әйтһәң дә, 6 мең башҡорт йәшәй. Уларҙың балаларын башҡортса уҡытырға кәрәктер бит инде?» Бына шулай, туғандар, машиналарға тейәлешеп килеп, түрәләр оҙатыуында ғына йөрөп, урындағы номенклатура алдында ғына сығыш яһап, халыҡтың әрнешен, ысын хәлен белеп тә, асыҡлап та булмай шул ул...

«Интернационализм», «Күп милләтле республика», «Милләттәр гөлләмәһе» «Милләт-ара татыулыҡ» кеүек ялтырауыҡлы лозунгыларға йәшеренеп, төп халыҡтың милли хоҡуҡтарын танымаҫҡа тырышыу беҙҙе милләт тарҡаулығына килтерҙе. Иҫкелек ҡанундарынан арына алмаған бәғзе бер сәйәсмәндәр һәм хатта дәүләт эшмәкәрҙәре донъя берләшмәһенең төп халыҡтарға ҡарата күптән инде яңы курс алыуын, төп халыҡтарҙы яҡлау буйынса Халыҡ-ара хеҙмәтте ойошторunion 107-се конвецияһының 1957 йылда уҡ ҡабул ителеп, 1959 йылдан ғәмәлгә инеүен, ә 1991 йылда яңыртылып һәм тулыландырылып яңынан көскә инеүен, **1993 йылда төп халыҡтар хоҡуҡтары Декларацияһы** проекты иғлан ителеүен һәм АҠШ-тың 1990 йылда уҡ «Американың төп халҡының теле тураһындағы закон» ҡабул ҡылыуын белмәмеш тә күрмәмеш булып йәшәй.

XX быуатта кешелек донъялағы мораль-этик ҡиммәтлектәрҙе яңынан ҡарап сығып, ерле халыҡтарҙың мәнфәғәттәрен иҫәпкә ала башланы. Мәҫәлән, Халыҡ-ара хеҙмәтте ойошторoуҙың 169-сы конвецияһында бойондороҡһоҙ илдәрҙә ерле халыҡтарға ҡарата ассимиляциялаштырыу һәм интеграциялау сәйәсәтенән баш тартыусы яңы нормалар раҫланды.

Дүртөйлө ҡалаһы хакимиәте башлығының урынбаҫары Р. Сиразов: «1989 йылда башҡорттар ни өсөн татар булып яҙыла? Бөтөн бәлә шунда: ниңә Дүртөйлө башҡорт-

тарының телен башҡорт теленең бер өлөшө тип танымайҙар, ни өсөн, татар теле, тиҙәр?» – тигән һорау ҡуйғайны һәм: «Бына мин ниндәй телдә һөйләшәм, шуны башҡорт теле тип иҫәпләйем», – тип өҫтәгәйне. Әйтергә кәрәк, ул саф татарса һөйләште һәм был раҫлауы бик сәйер яңғыраны. Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының башҡарма комитеты рәйесе Нияз Мәжитов уға былай тип яуап бирҙе: «Беҙ үҙ эшебеҙҙә шунан сығып фекер йөрөтәбеҙ: башҡорттар урыҫса, татарса, инглизсә, ҡытайса, ә ҡайһа берҙәре хатта... башҡорт телендә һөйләшә. Беҙҙең маҡсат – милләтте туплау».

Бер кемгә лә сер түгел, төньяҡ-көнбайыш диалекты бөгөнгө көндә ифрат татарлашҡан, уның айырым элементтары ғына урындағы һөйләштә һаҡланып ҡалған. Быға шикләнгәндәр ғалимдарыбыҙ Таһир Байышевтың төньяҡ-көнбайышҡа тиҫтәләгән экспедиция документтарын һәм Сәриә Миржанованың «Башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалекты» тигән китабын уҡып өйрәнһендәр. Таһир Байышевтар төньяҡ-көнбайыш башҡорттарын танымаған Жәлил Кейекбаевтар менән айҡашҡанда диалект көслө булған әле. Хәҙер инде, Ҡазан дәреслектәре, радиоһы һәм матбуғаты йоғонтоһонда, йәғни туғандаш Татарстан экспансияһы аҫтында, ул ныҡ татарлашҡан. Быны танырға кәрәк. Тарих алға барырға тейеш. Ошо юҫыҡта беҙҙең арҙаҡлы ғалимдарыбыҙ бик аҡыллы фекер төйнәне. 1998 йылдың ғинуарында башҡорт әҙәби теленең хәҙерге хәле һәм киләсәге тураһындағы мәсьәләне тикшереүсе Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының киңәйтелгән ултырышы булды. Унда ҡатнашыусы арҙаҡлы ғалимдар бөтөнөһө, хәҙерге башҡорт әҙәби телен төньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының диалект үҙенсәлектәре иҫәбенә һиҙелерлек байытырға, тигән ҡарарға килде. Шул осраҡта телебеҙ башҡорттарҙың бөтөн этник төркөмдәренең йөрәгенә һәм күңеленә яҡын һәм аңлайышлы буласаҡ. Донъя тәжрибәһенән сығып, шуны әйтергә була: ҡайһы саҡта милләтте туплау өсөн хатта үле телдәр файҙаланылған. Израилдә әҙәби телде тергеҙгәндә йәһүдтәр тап шулай эшләне. Башҡорт ҡоролтайы комиссияһының үрҙәге ҡарары,

БР президентының Тел тураһындағы указына ярашлы рәүештә, дәүләт телен ғәмәлләштереү планына индерелергә тейештер, тип уйлайым мин. Бөгөнгө көндә иң дөрөҫ алым шул булырҙыр. Тап ошо юлды һайлау халыкты бүлгеләүгә түгел, ә берләштереүгә илтәсәк. Филология фәндәре кандидаты, донъяның төрлө төбәктәрендә тел ҡаршылыҡтары проблемалары буйынса фәнни-тикшеренеү проекты өсөн 1998–1999 йылдарҙағы АҠШ-тың Донъя институты (Вашингтон ҡалаһы) гранты лауреаты Илдус Илишев ошо хаҡта былай тип яҙҙы: «Милли характерҙың билдәләнешенә телдән башҡа бер нимә лә шул тиклем көслө тәьҫир яһамай. Бер үк телдә һөйләшергә өйрәтмәй тороп, тимәк, бурыс тойғоһо тураһында бер төрлө фекер тәрбиәләмәйенсә, милләттә теләктәшлек һәм граждандар берҙәмлеге тойғоһон нығытып та булмай» («Язык и политика в многонациональном государстве»).

* * *

Дүртөйлөләге ҡоролтайҙа Назар Нәжми быға тиклем бер кем дә өндәшергә ҡыймаған бик тә сетерекле мәсьәләгә лә ҡағылып үтте. Ул да булһа төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының ике милләт араһында рухи аҙашыуы, икегә бүленеүе, тарҡалыуы фажиғәһе.

– Беҙ, күп милләтле республикала йәшәйбеҙ, тибеҙ һәм ошо милләттәрҙең дуҫлығы өсөн көрәшәбеҙ. Бик әйбәт, – тине шағир. – Ләкин мин һәр ваҡыт уйлайым: беҙ шулай, ярай, ә Америка күп милләтле түгелме ни? АҠШ-та бит күп төрлө милләттәр йәшәй. Беҙ иһә гелән милләт менән халыҡты бутайбыҙ. Американа милләттәр күп, әммә Америка халҡы бар. Францияла милләттәр күп – француз халҡы бар. Ә беҙҙә милләттәр түгел – беҙ халыҡбыҙ. Күп халыҡлы республикабыҙ, шуның өсөн дә милләт менән халыҡтың икеһен бергә ҡуйып (улар бер-береһенә бәйләнгән, әммә айырмаһы бар), ҡайһы саҡта хатта ике теллеклекте алға һөрәбеҙ. Һәм уны беҙҙең йәмғиәттең яҡшы күренеше тип иҫәпләйбеҙ.



*Башкортостандың халык шагиры Назар Нәҗми*

Ул дөрөҫ. Ике теллелек әйбәт. Әммә мин Пушкиндың: «Недаром лик чей двуязычен...» – тигәненә шундай шиғыр яҙҙым:

Кеше йөҙөндә лә күргәндәр бит
Ике теллелекте бөйөктәр,
Беҙ барыбыҙ, урыҫ булмағандар,
Ике телле булған субъекттар.

Ике телле, тимәк, беҙ барыбыҙ
Ике йөҙлөләрбеҙ икән дә...
Нишләйек һуң, улар беҙҙе шулай
Ике телле халыҡ иткәндә?
Күрәләтә беҙ үҙ-үҙебеҙгә
Ҡара яҡмайыҡсы йөҙөбөҙгә...

Шунан шағир, залға ҡарап, дауам итте:

– Күрәһегеҙ, быны уҡығас, тын ҡалдығыҙ. Һәм һеҙгә, бәлки, шиғыр оҡшамағандыр. Ләкин мин ул турала күп уйланам. Ике телле лә, өс телле лә, дүрт телле лә булырға мөмкин, әммә бер ваҡытта ла ике йөҙлө булырға тейеш түгелбеҙ. Беҙ үҙебеҙҙең телебеҙҙе яратырға, ата-бабаларыбыҙ мираҫын ихтирам итергә, һаҡларға һәм дауам итергә бурыслыбыҙ.

* * *

Дүртөйлөләге хакимиәт бинаһындағы ана шул башҡорт ҡоролтайы уҙғарылғандан һуң ярты йыл үткәс тә, шунан һуң ике йыл үткәс тә ундағы хәлдәр үҙгәрмәне. 60-ҡа яҡын башҡорт ауылында бер ниндәй тергеҙеү эштәре башланманы, бер ниндәй шәжәрә байрамдары ла үткәрелмәне, башҡорт балалары өсөн интернат та асылманы, башҡортса гәзит тә нәшер ителә башламаны. Урындағы хакимиәт Өфө ҡунаҡтарын тағы ла йомшаҡ йәйеп, ҡатыға ултыртты. Үҙ илеңдә ҡунаҡ булғас, кемгә үпкәләйһең инде?

Быға мин Дүртөйлө ҡалаһы хакимиәтенең мәҙәниәт бүлегенең баш белгесе Резеда Рәйес ҡыҙы Зарипова менән осрашып һөйләшкәндән һуң тағы бер тапҡыр инандым...

*– Резеда ханым, Дүртөйлө башҡорттарының бик әҙ өлөшө генә башҡорт телен предмет булараҡ өйрәнә бит инде. Ҡоролтайҙа гимназия асыу мәсьәләһе күтәрелеп, урындағы хакимиәт яғынан да хуплау тапҡайны... Эш ниңә туктап ҡалды икән?*

– 6-сы мәктәпте гимназия итеп төҙөү ниәте бар. Бына районға хөкүмәт бюджетынан аҡса бүлеү мәсьәләһе генә тоткарлап тора. Тик, минеңсә, эш мәктәп менән генә сикләнергә тейеш түгел.

Ғөмүмән, республикала башҡорт теленең ҡулланыуы даирәһен киңәйтергә кәрәк. Әгәр башҡорт теле дәүләт теле итеп ҡабул ителгән икән, әгәр ошо татарлашҡан райондарҙы башҡорт әҙәби теленә яҡынайтырға, юғалтҡан халыҡты яңынан үҙебеҙгә ҡушырға теләйбеҙ икән – телевизорҙа ла, радиола ла көнө-төнө башҡортса һөйләп торған каналдар асырға кәрәк, тип уйлайым. Ере, иле, дине, теле өсөн йәнен аямай көрәшкән милләттең бөгөнгө республика халҡы алдында шундай ғына хоҡуғы барҙыр бит? Илебеҙ Башҡортостан түгелме ни? Һәм республика радиоһы, телевидениеһының һәр районда, һәр ауылда һөйләүенә, күрһәтеүенә ирешергә ине. Суверенлы Башҡортостандың үҙ халҡының рухиәтен тәрбиәләүҙе Силәбе өлкәһенә, Ҡазанға тапшырып ҡуйырға хаҡы юҡ.

*– Ә һеҙҙә башҡорт теленең абруйын күтәреү йәһәтенән ҡаршылыҡтар юҡмы?*

– Былай беҙҙең район етәкселәре хәленән килгәнде тырыштыра. Ҡалалағы биш мәктәптең бөтәһендә лә башҡорт теле уҡытыла башланы. Әле бына башҡорт теленә дәүләт статусы бирелгәс, халыҡ та әҙәби телгә йөҙ менән боролдо. Дәүләт теле статусы алыу күптәрҙе уйландыра.

*– Эйе, дәүләт телен ҡабул итеү милләт бөтөнләй юҡҡа сыҡмаһын өсөн ныҡлы таяу булды. Әммә дәүләт кимәлендә ҡабул ителгәс, дәүләт кимәлендә ғәмәлләштерелергә тейеш. Тик әлегә был йәһәттән эштәр бик яй бара. Татарлашҡан төньяҡ-көнбайыш райондар өсөн махсус программа эшләп, эҙмә-эҙлекле тормошҡа ашырырға күптән ваҡыт. Халыҡ ошоға тиклем үҙенең тамырҙарынан, тарихынан ситләшеп килгәс, бары тик иң юғары даирәлә, иң юғары кимәлдә генә быны еңеп буласаҡ.*

– Ябай халыҡ араһынан да битараф булмағандар, бик тәрән фекерле кешеләр осрай ул. Ауылдар буйлап күп йөрөлдө бит инде. Бына яңыраҡ ҡына Байыш ауылында

фольклор байрамы үткәрҙек. Шундағы әбейҙәрҙең барыһының да телдәре үҙенсә – «бармайбыҙ», «ҡайтмайбыҙ», тиҙәр. Башҡорт телендә һөйләшәләр. Күргәҙмәгә сигеү әйберҙәре ҡуйғандар, беҙҙең Салауат районыныҡынан бер ниндәй айырмаһы юҡ. Ерлек бер үк, тарих уртаҡ. Дүртөйлө районында тарихты күтәреп сығыу юҡ әле – Батырша, Кинйә уларға бер кем түгел, белмәйҙәр. Салауат Юлаевты ла, бәлки, белмәҫтәр ине, ярай әле һәйкәле бар, тыуған көнө үткәрелә башланы.

*– Республикабыҙҙың төнъяк-көнбайыш райондарында, ниңә, исмаһам, башҡортса гәзиттәр сыҡмай икән? Нисәмә матбуғат министры алмашынды – береһе лә шуға тотонманы. Күпме чиновниктар армияһын аҫырайбыҙ, юғары-юғары эш хаҡтары түләп, береһе лә был мәсьәлә менән шөғөлләнгәне юҡ. Ниңә Дүртөйлөләге район гәзитенең бер битен «Ҡоролтай» тип атап, башҡортса сығармаҫҡа?*

– Әгәр Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ярҙам итһә, был изге эшкә урында ҡаршы килмәҫтәр, тип уйлайым мин. Халыҡтың тарихын, мәҙәниәтен терелтеүҙең ҡеүәтле сараһы булыр ине. Районда ла тарихсылар бар ул. Бына Әхсән Сәлимов архив материалдары менән ныҡ эшләй, «Дүртөйлө ерендә» тигән китабын сығарҙы. Исмаил ауылында Мәҡсүтов тарихты нык ҡыҙыҡһынып өйрәнә. Яҙып сыҡһалар, үҙ тарихыбыҙға иғтибар һәм ихтирам уяныр ине. «Ҡоролтай» гәзитенә килгәндә, уны Дөртөйлөлә генә түгел, ә бөтөн ерҙә асыр кәрәк. Һәр районда.

*– Башҡортостандың тотош төнъяк-көнбайышында әҙәби башҡорт телендә бер генә гәзиттең дә нәшер ителмәүе – шул ерҙең төп халҡын тәшкил иткән милләткә ихтирамһыҙлыҡ һәм кәмһетеп ҡарау билгеһе ул. Үҙ теленән алыҫайған, ситләшкән халыҡ башҡорт матбуғатына ла теләмәй яҙыла.*

– Уныһы, бәлки, дөрөҫтөр ҙә. Сөнки, Өфө яғынан әллә ни артыҡ көсөргәнешлектәр, килеп өгөтләүҙәр, ҡыҙыҡһындырыу булмаған, башҡорт телендәге гәзит-журналдарға яҙылыу насар бара. Уларға яҙылыусылар һаны

тиҫтәләр менән генә иҫәпләнә. Ә «Өмөт»кә, «Толпар»ға, «Ҡыҙыл таң»ға меңдәрсә кеше яҙыла!

*– Ошоларҙың бөтөнөһөн дә күҙаллаһаң, йөктөң һаман да үҙ урынында икәненә тағы бер тапҡыр инанаһың. Ҡоролтайҙар, төрлө байрамдар үткәрелеп тора, ашыға-ашыға һөйләшәбеҙ ҙә таралышабыҙ, ә урында эҙмә-эҙлекле эш алып барылмай.*

– Беҙҙең хакимиәт башлығы Рауил Шәрифйән улы Дәүләтов ҡоролтай эштәренә ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер генә тора, бары тик үҙебеҙгә нығыраҡ тырышырға, ойошорға, әүҙемләшергә кәрәк. Уның урынбаҫары Ревинер Ниғмәт улы Сиразовтың да ярҙамын ныҡ тоябыҙ. Бөтөн сараларҙы кәңәшләшеп ойоштораБыҙ. Уның эш ысулы миңә оҡшай – өҙөп әйтә, вазифаһын теүәл башҡара, үткер, егәрле кеше. Ойоштороу һәләтенә эйә. Ҡоролтай мәсьәләһе буйынса ла ниндәй генә һорау менән кермә, һәр ваҡыт ыңғай яуап биреп, эшләйбеҙ уны, тип кенә тора. Рәхмәт инде уларға. Ғөмүмән, район хакимиәте бер тапҡыр ҙа һынатҡаны юҡ.

Бына йәй көнө Татарстандан килделәр, Әлфиә Афзалова район буйынса ете концерт ҡуйып ҡайтып китте. Ялһыҙ эшләне, иҫ китмәле булды. Халҡыма йырымды еткерәм, тип йөрөй бит инде. Ә ҡайҙа башҡорт йырсылары, ҡурайсылары? Улар килһә лә район хакимиәте асыҡ йөҙ менән ҡаршылар ине. Һис һүҙһеҙ. Бер ҡасан да бороп ебәргәндәре юҡ. Башҡорт мәҙәниәтенә битараф булмаған колхоз рәйестәребеҙ ҙә күп – «Карл Маркс» колхозынан йырға, моңға ғашиҡ Ирек Камалов, «Әсән» колхозы рәйесе Хәләф Нухов, Исмаил ауылынан йәш кенә етәксебеҙ Марат Камалов. Исмаилда, Алла бирһә, Шәжәрә байрамы үтәсәк. Ундағы мәктәп директоры Рәмилә Шайниязова бик теләп, йүгереп эшләп йөрөй, һәләтле, көслө етәксе. Ярҙамсылары, мәктәп мөғәллимәләре, күңелен һалып уҡыта. Ғөмүмән, һоҡланғыс коллектив. Юғарынан әҙерәк йүнәлтеүсе көс булһа, һәр кем «егелергә» әҙер.

* * *

... Эйе, үрҙеләрҙең бөтәһен күҙаллағандан һуң, шундай фекергә килеп була: тимәк, беҙ үҙебеҙ эшләп еткермәйбеҙ, халыҡтан ситләшәбеҙ, ҡасабыҙ. Ярты Башҡортостанды һанға һуҡмаған думбырасы, ҡумыҙсы, ҡурайсы, йырсы, бейеүселәребеҙҙе тулы көсөнә эшләтерлек Мәҙәниәт министрлығы кәрәк ине. Башҡорт яҙыусыларын һәм тарихсы-ғалимдарыбыҙҙың ҡеүәтен халыҡтың рухын, асылын уятыуға йүнәлтеүсе Яҙыусылар союзы һәм Фәндәр академияһы ҡайҙа икән? Татар һәм урыҫ баҫмаларын ғына түгел, ә башҡорт матбуғатын да киң таратыусы, һәләтле һәм ҡурсаулы журналистары булған министрлыҡ, Журналистар союзы булһасы. Милләтте тарҡатыусы түгел, ә берләштереүсе көстө ҡайҙан алырға? Ярты республикаға ғына ҡаратып ҡуйылған системаны нисек тулы көсөнә эшләтергә?

*Илеш районында*

## МАҢҠОРТЛОҠТАН АРЫНЫРҒА ВАҠЫТ...

1999 йылдың март аҙағы. Үрге Йәркәйҙә Илеш районы башҡорттарының ҡоролтайы бара. Унда Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты ағзалары, урындағы ҡоролтай делегаттары, ауыл хакимиәте башлыҡтары, уҡытыусылар һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре ҡатнашлығында туған телде тергеҙеү, мәҙәниәтте үҫтереү, тарихты юллау буйынса мөһим мәсьәләләр ҡарала.

... Ҡоролтайҙы I **Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Нияз Мәжитов** менән **Илеш районы хакимиәте башлығы Александр Ким** аса.

**Урындағы комитет рәйесе Радик Мөхәмәтғәлиев** район халҡының социаль-көнкүреш һәм ижтимағи-сәйәси

тормошона байҡау йһай: «Бөгөнгө көндә район халҡының 63 процентын тәшкил иткән башҡорттарҙың ғына түгел, ә шул ерҙә йәшәгән һәр кешенең рухи байлығын, урындағы халыҡтың матур ғөрөф-ғәҙәттәрен, телен киләсәк быуын өсөн һаҡлап ҡалыу, уның мәҙәниәтен үҫтереү, тыуған ергә, тәбиғәткә һөйөү тәрбиәләү өлкәһендә ҡоролтайға ҙур бурыстар йөкмәтелә».

**Үрге Йәркәйҙең 1-се мәктәп уҡытыусыһы Ғәлимә Ғәлиева** I Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы йөкмәткән бурыстарҙың районда планлы рәүештә атҡарылмауын, урыҡ-һурыҡ ҡына үтәлеүен, район башҡорттарының ни бары 8 процентының ғына үҙ телен өйрәнеүендә район мәғариф бүлегендә башҡорт теленән методистар булып белгестәр эшләмәүе төп сәбәптәрҙең береһе булып тороуын, Илештә йәшәгән 36 мең халыҡтың 22946-һы башҡорт булып та, ниндәйҙер күҙгә күренмәгән кәртәнең уларҙың рухын тергеҙеүгә ҡамасаулауын, мәктәптә «Башҡортостан мәҙәниәте» дәрестәрен күп осраҡта сәғәте етмәгән теләһә кем уҡытыуын, башҡорт матбуғатын бөтөнләй алдырмаған уҡытыусыларҙың нисек итеп телде, тарихты өйрәтеүен һәм синыф менән эшләүҙәрен, шулай уҡ Өфөнән иғтибарҙың әҙ булыуын, башҡорт артистарының һәм актерҙарының Илешкә һуңғы ваҡытта аяҡ баҫмауҙарын тәрән борсолоу белдереп һөйләй. Әлбиттә, ҡорға йыйылғас, тик шапырынырға ғына түгел, ә уй төйнәп, етешһеҙлектәрҙе бөтөн тәрәнлегендә асып һалырға һәм, сәбәптәрен табып, уларҙы хәл итеү юлдарын эҙләргә кәрәк, тигән фекерҙән сығып эш итә Ғәлимә Мансур ҡыҙы.

I Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайында хупланылған «Башҡорт халҡын тергеҙеү һәм үҫтереү буйынса дәүләт программаһы»н ғәмәлгә ашырыуға ни тиклем тиҙерәк, ең һыҙғаныбыраҡ тотонһаҡ, шул тиклем яҡшыраҡ буласаҡ. Яртылаш урыҫлашҡан һәм ҡалған яртыһы татарлашып бөтә яҙған Илеш башҡорттары өсөн дә аныҡ эштәр башҡарырға ваҡыттыр инде.

Илештә ошо юҫыҡта бер нәмә лә эшләнмәй, тип әйтеп тә булмай. «Тәңре улының шишмәһе» һәм «Кисеүҙә

гармун тауышы» китаптарының авторҙары Рәшит Низамов менән Раил Байбулатов, шағирәләр Гөлфиә Юнысова, Тамара Ғәниева һәм сәсмә тел оҫтаһы Гөлсирә Ғиззәтуллиналар менән осрашыуҙар беҙҙең халыҡ өсөн ысын байрамға әүерелде. Был кисәләр китап һөйөүселәрҙең күңелендә оҙаҡ һаҡланыр», – ти **үҙәк китапхана директоры Зифа Ялалова.** Ул шулай уҡ дәүләт программаһы буйынса «Китап» нәшриәтендә донъя күргән китаптарҙың китапхана коллекторынан даими ебәрелеп тороуына ихлас ҡәнәғәтләнеү белдерә.

– Бер нисә йыл элек, башҡорт теленә иғтибар бирелмәгән ваҡытта, башҡортса уҡымайҙар, тиһәк, хәҙер хәл үҙгәрҙе, – ти директор. – Татарса һөйләшкән һәм татар телендә генә уҡыған кешеләр ҙә, бөгөнгө заман проблемаларын яҡтыртҡан ҡыҙыҡлы китап булһа, башҡортсаһын да алып уҡый.

**Районның милли музейы директоры Виталий Михайлов,** I Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының Башҡарма комитеты рәйесе Нияз Мәжитовҡа мөрәжәғәт итеп, «Башҡортостан ҡыҫҡа энциклопедия»һында Илеш районы буйынса күп мәғлүмәттәрҙең төшөп ҡалыуы һәм был кире хәлде тиҙерәк төҙәтеү кәрәклеге тураһында тәкдим индерҙе.

– «Был башҡорт халҡы өсөн генә» тигән кеүегерәк ҡайһы бер яңылыш фекерҙәрҙең хәҙер инде юҡҡа сығыуы ла матур күренеш. Шулай булырға тейеш тә. Сөнки Башҡортостан – унда йәшәгән халыҡтарҙың уртаҡ йорто, – ти **районның радиотапшырыуҙар редакторы һәм дикторы Фирҙәүес Маликова.** – Башҡорт халҡы үҙенең азат, мул тормошта йәшәргә хоҡуғын бойомға ашыра икән, был Башҡортостан тупрағында йәшәгән башҡа халыҡтарҙың да азатлығы, бәхете ул.

**Нияз Мәжитов** үҙенең сығышында ҡорға халыҡтың әҙ йыйылыуына, рәсми тәртиптең һаҡланмауына – ҡоролтайҙың БР гимнынан башланып тамамланмауына – көйөнөү белдерә. Урыҫ һәм башҡорт телдәренә дәүләт статусын биреүсе закондың ҡабул ителеүе тураһында ҡыҫҡаса мәғлүмәт биреп үтә.

– Башҡорт теле буйынса махсус терминология комиссияһы эшләй, – тине ул. – Унда ла, үҙебеҙҙең Башҡарма комитет ултырышында ла тел мәсьәләләре бер нисә тапҡыр ҡаралғаны бар. Беҙ әҙәби башҡорт теленең нормаһын төньяҡ-көнбайыш диалектын да индереп, яңынан эшләргә кәрәк, тигән ҡарарға килдек. Һәм был фекерҙең дөрөҫлөгөнә инанғанмын. Ә һеҙ, урындағы халыҡ вәкилдәре һәм ҡоролтай комитеты ағзалары, беҙгә ошо йәһәттән тәҡдимдәр әҙерләргә, анык ярҙам күрһәтергә бурыслыһығыҙ.

Халыҡҡа мәғлүм булыуынса, тотош Рәсәйҙә быуаттарҙан-быуаттарға ниндәй ҙур территория биләп ятҡан һәм беренсе булып автономия төҙөгән башҡорт халҡының ғына туған теле – дәүләт теле тип иғлан ителмәгәйне. Бына шул мәсьәлә, ниһайәт, хәл ителде. Ниһайәт, башҡорт халҡы үҙ теләгенә ирешге. Әммә, үкенескә ҡаршы, был хәлгә, шатланыр урынға, «ҡара яныпп» йөрөүселәр ҙә аҙ түгел бөгөн. Мәҫәлән, Башҡортостанда кеше хоҡуҡтары боҙола, тип яр һалып йөрөүсе ҡайһы бер журналистар, Татарстан зыялыларына шуны әйтер инем: сит дәүләт эштәренә ҡыҫылыу ҙа халыҡ-ара хоҡуҡ нормаларына ҡаршы килә. Икенсенән, әйтәйек, **Илеш районындағы 2955 башҡорт балаһының 261-е генә әсә телен өйрәнә.** Һәм был үҙ илендә! **Район халҡының 63,2 процентын тәшкил иткән башҡорттар өсөн ни бары 11 мәктәптә генә башҡорт теле предмет булараҡ уҡытыла.** Ошо түгелме ни кеше хоҡуҡтарының тупаҫ боҙолоуы?! Артабан миҫалдар килтерәм: **Краснокамала 738-ҙең – 38-е, Туймазы районында 702-нең – 53-ө, Нефтекама ҡалаһында 4551-ҙең – 1394-е, Октябрьский ҡалаһында 1425-тең – 276-һы, Туймазыла 2180-дең – 690-ы, Ағиҙел ҡалаһында 441 башҡорт балаһының 4-е (!) генә үҙ телен өйрәнә...** Был бит йөрәк ярғыс мәғлүмәттәр! Беҙ тотош халыҡтың киләсәген ниндәй аяныс хәлгә ҡуйғанбыҙ!

Эйе, Илештәге ҡоролтайҙа бер нисә тапҡыр һыҙыҡ өҫтөнә алып үтелде: районда башҡорт, татар, урыҫ, мари, удмурт халҡы татыу ғаилә ҡороп, матур итеп, тыныс

йәшәй. Ҡунаҡсыл, киң күңелле һәм йомарт башҡорттар ерендә һәр саҡ шулай булған һәм, иншалла, шулай дауам итәсәк. Был күренеш төп халыҡтың бәҫен күтәрә, мәртәбәһен арттыра, уға тәрән ихтирам уята. Шуға күрә, бүтән дәүләттең беҙҙең эске эштәргә ҡыҫылырға тырышыуына сик тә ҡуя белһәк, киләсәктә лә бер-беребеҙгә таяныс һәм терәк булып йәшәйәсәкбеҙ. Был да ҡоролтай алдына ҡуйылған бурыстарҙың береһе булып торалыр.

Йәркәйҙә ҡор асылыр алдынан ғына сығышы менән Илеш районының Дөмәй ауылынан иҡтисад фәндәре кандидаты Хажғәле Муллағәле улы Яппаровтың йылан ырыуы башҡорттарының үткәне һәм бөгөнгө тарихына арналған «Беҙҙең шәжәрә» тигән китабы донъя күргәйне. Был баҫма төньяҡ-көнбайыш милләттәштәребеҙҙең башҡортлоғон танымаҫҡа тырышыусыларға, шәжәрәһен онотҡан һәм тарихи тамырҙарын юйған маңҡорттарға рәнйеүле үпкә һүҙе булып яңғыраны һәм нәҫел-нәсәптәрен, милли асылын юллаусыларға ҡараңғы төндә юл күрһәтеүсе йондоҙ булып балҡыны, тиһәк, һис тә хата булмаҫтыр.

– Беҙ – йылан ырыуы аҫаба башҡорттары, – тине Хажғәле Муллағәле улы ҡоролтайҙа сығыш яһап. – Ата-бабаларыбыҙ XVII быуаттың урталарына тиклем күсмә тормошта йәшәгән һәм республикабыҙҙың хәҙерге Йәрмәкәй, Туймазы, Шаран, Илеш, Саҡмағош, Борай һәм Баулы (Татарстан) райондарының Ыҡ, Өсән (Усень), Сөн, Баҙы, Ағиҙел, Танып йылғалары буйҙарында мал көткән.

Автор ошо райондарҙағы йылан ырыуынан булған милләттәштәребеҙҙең башҡортлоғон ауылы-ауылы менән шәжәрәләрен килтереп һәм архив документтарына таянып иҫбатлай. «Эйе, был региондарҙың башҡорттарын татарлаштырыу күп планлы һәм күп факторлы күренеш... – ти ул. – Татарстан менән күрше йәшәү, туғандаш халыҡ менән тығыҙ аралашыу; икенсенән, башҡорттарҙың үҙ тарихын, ата-бабаларының тормошон белмәүе. Дәрестәр мотлаҡ татар телендә үткәрелде. Ләкин мин, барыһына ла татар теле ғәйепле, тимәйем. Әгәр татарса уҡытып та, Өфөлә сыҡҡан дәреслектәр буйынса башҡорт халҡының

тарихы, мәҙәниәте һәм әҙәбиәте өйрәнелһә, милли рух һаҡланыр ине... Татар телендәге киң информация саралары, матбуғат та үҙ өлөшөн индерә торғандыр».

Беҙҙең юғары кимәлдәге дәүләт һәм хөкүмәт эшмәкәрҙәребеҙ, һайлап ҡуйған депутаттарыбыҙ ошо һүҙҙәрҙе ишетһен ине лә был хаҡта бер ултырып тәрәндән уйланһын ине.

... Шулай ҙа Йәркәйҙәге иркен һәм яҡты «Китап» магазинын (ә бит күп районларҙа уларҙы ябып хилафлыҡ эшләнеләр) һәм ундағы бөгөн «Китап» нәшриәтендә сыҡҡан заманса рухлы, демократик фекерле һәм тарихты тулы дөрөҫлөгөндә сағылдырған китаптарҙы күреп ҡыуандым. Тик уларҙың һатылмай ятыуы ғына ҙур борсолоуға һалды. Бәлки, ҡоролтайҙың урындағы башҡарма комитет ағзалары, шундай ҙур хазина, рухи байлыҡ хәрәкәтһеҙ ятмаһын тиһә, район үҙәгендә китап байрамын ойоштороп ебәрер. Ҡайһы берәүҙәр, араҡыға аҡса әрәм иткәнсе, киләсәктә юғары уҡыу йортона инәсәк балаһына ярҙамға ҡосаҡ тултырып китап алһа, эскелеккә ҡаршы көслө акцияға ла әйләнер ине был сара. Ә район хакимиәте Илештең арҙаҡлы улы Хажғәле Яппаровтың «Беҙҙең шәжәрә» китабын магазиндан һатып алып, район китапханаларына бүләк итеп таратһа, ошо ерҙең тарихын беренсе булып яҙған һәм шәхси аҡсаһына (үҙе ауырыу көйө, бик ауыр матди хәлдә йәшәүенә ҡарамаҫтан) нәшер иткән ғалимға рәхмәт һүҙе булыр ине.

Илештә мин үҙәк китапханала булып, балалар һәм өлкәндәр бүлектәрендә башҡорт матбуғатын береһен дә ҡалдырмайынса уҡыуҙарын, башҡортса иң яңы баҫмаларҙы, китапхана тулы уҡыусыларҙы күреп, тағы бер шатлыҡ кисерҙем. Хәҙер беҙҙең бурыс – башҡортса уҡырлыҡ контингентты булдырыу, тип уйланым. Ошо юҫыҡта ҡоролтайҙа Йәркәйҙә башҡорт гимназияһын асыу тураһында фекер яңғыраны. Бөгөнгө ауыр иҡтисади көрсөк заманында бик дөрөҫ фекерҙер ул. Сөнки, аҡса булмауҙан файҙаланып, бәләкәй ауылдарҙа мәктәптәрҙе ябыу барыбер бара, шул ыңғай яңы ғына асылған башҡорт синыфтары ла йәшәүҙән туҡтай. Ә район үҙә-

гендә гимназия асыуға килгәндә, Радик Мөхәмәтғәлиев әйтмешләй, «Илеш районы республиканың иң алға киткән төбәктәренең береһе иҫәпләнә, көслө етештереү һәм иҡтисади ҡеүәте бар». Райондың байлығы иң тәүҙә урындағы халыҡҡа хеҙмәт итергә тейеш. Шулай булғас, Илештә гимназия асыу мәсьәләһен бөгөндән хәл итергә мөмкин.


*Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре, иҡтисад фәндәре кандидаты Хажғәле Яппаров*

... Илештәрҙең башҡортлоҡҡа шул хәтлем һыуһағанын Ғәлимә Ғәлиева миненең менән осрашҡанда былай тип әйтеп биргәйне: «Ысынлап теләһәң, теләк ҡабул була, тиҙәр, дөрөҫ икән. Профессорҙар ниңә беҙҙең Илешкә килмәйҙәр, килһендәр ҙә милләттәштәремә башҡортлоҡтарын асһындар, башҡорт телен өйрәнеү – башҡа милләттәр өсөн юғары мәҙәнилек билдәһе икәнен дә аңлатып китһендәр ине, тип теләй торғайным».

Милләт проблемаларын иңдәренә күтәреп, янып-көйөп эшләгән, I Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының рәйесе Нияз Мәжитовҡа, уның урынбаҫары Рәйеф Туҡташевҡа, комитет ағзаһы Рәфҡәт Абдуллинға ҙур рәхмәт әйтке килә. Тик улар күтәргән йөктө беҙ ҙә артмаҡлашырға тейеш. Әгәр ошо ҡоролтайға саҡырып та килмәгән Яҙыусылар союзынан берәй шағир йә яҙыусы сығып, ялҡынлы телмәр тотһа йәки шиғыр һөйләһә, Мәҙәниәт министрлығы ебәргән берәй йәштәр төркөмө ҡурай һәм ҡумыҙ мондарын яңғыратһа, ҡорҙоң ҡото артыр, йөрәктәр йөрәккә тиҙерәк бәйләнер ине. Йылы һүҙ бит йән аҙығы.

Башҡортостан «Китап» нәшриәтенә килгәндә, беҙ юҡ мөмкинселекте бар итеп, ҡайҙа ҡоролтай, ҡайҙа конфе-

ренция булған ергә китаптарыбыҙҙы, календарҙарыбыҙҙы тейәп ашығабыҙ. Әле лә Илешкә 7 мең һумлыҡ китап ҡалдырып киттек. Уларҙың бөтәһе лә яңы ғына нәшер ителгәндәр.

**Шулай итеп, бер нәмәне лә күктән көтөп ятырға түгел, ә үҙебеҙгә тотоп эшләргә кәрәк. «Беҙгә манҡортлоҡтан арынырға ваҡыт», – тип тамамлаған үҙенең китабын Хажғәле Яппаров. Был Илеш башҡорттарына ғына түгел, беҙҙең бөтәбеҙгә лә ҡағылалыр.**

* * *

Үрге Йәркәйҙә ҡоролтай булып үткәндән һуң 8 ай уҙғас, декабрь баштарында тағы ла Илешкә юлландым...

Илеш районы Илеш ауылының тел һәм әҙәбиәт уҡытыусылары Минзәлә Хәмиҙуллина һәм Фәүзиә Ғибәҙуллина менән осраштым. Уларҙы яҡындан беләм мин. Йыш ҡына уҡытыусылар конференцияларында, ҡоролтайҙарҙа, китап байрамдарында осратып, уларҙың тынғыһыҙлығына, ныҡышмалылығына, түҙемлегенә һоҡланып бөтә алмайым. Булған мөмкинлектәрҙән файҙаланып, дәреслектәр табырға тырышып, балаларға белем биреүҙә, туған телдәрен өйрәтеүҙә фиҙаҡәрлек күрһәтеп эшләйҙәр. Мәктәптәге йылы, кешелекле мөхит тә, директорҙың ыңғай ҡарашы ла булышлыҡ итеп, 1996 йылдарҙа бында башҡорт телен уҡытыу яйға һалынып киткән.

Әммә ҙур проблема тыуған – дәреслектәр етешмәй. Уларҙы табыу өсөн башҡорт теле уҡытыусыһы Фәүзиә Ғибәҙуллина бик күп көс һалған. 1989 йылда, төньяҡ-көнбайыш башҡорттарын әҙәби туған телдә уҡытыуҙы туҡтатҡас, башҡорт телендәге китаптарҙы сығарып ташларға өйөп ҡуйған ерҙән уларҙы йыйып ҡуйған, әле шуларҙы файҙаланалар.

– Райондың мәғариф бүлегенең методика кабинетына барып йыл һайын китап һорайым, – ти Миңзәлә Хәмиҙуллина. – Быйыл да дәреслектәргә заказ бирҙек. Бына беҙ көн һайын уҡыта торған «Башҡорт теле» (әҙәбиәте шуның эсенә ингән) дәреслегенең 5-се синыфтан 11-сегә тиклем

өр-яңыһы юҡ бит инде. Хәҙер программала, орфографияла үҙгәрештәр бар. Беҙ уҡыған замандағы яҙыусылар ғына түгел. Уларын Фәүзиә ҡайҙа журналдан, ҡайҙа гәзиттән йыйып алып уҡыта. Дәреслек булһа, алдағы көндә лә башҡорт телендә уҡырға теләүселәр булыр бит инде ул. Директорыбыҙ Филүс Хәмитйән улы Миназов та бик тырыш, теләктәре булғандарға ҡаршы төшөп тормай. Өсөнсө директор менән эшләйбеҙ, береһе лә ҡаршы килмәне. Ана шул китап юҡлығы ғына бәкәлгә һуға.

Бындай хәбәрҙе ишеткәс, мин аптырап ҡалдым. Сөнки «Китап» нәшриәтендә ижтимағи-сәйәси, нәфис әҙәбиәт редакциялары бик ныҡ ҡыҫҡартылып, бөтөн көстөң дәреслектәр сығарыуға йүнәлтелеүен яҡшы беләм. Ғәжәпләнеп, нәшриәттең дәреслектәр редакцияһы мөдире Сәүиә Мөхтәруллинаға мөрәжәғәт иттем.

– Башҡортостан «Китап» нәшриәте сығарған китап продукцияһының 60–70 процентын дәреслектәр алып тора, – тине Сәүиә Ғабдулла ҡыҙы. – V синыф өсөн «Башҡорт теле» 20 000 дана, VI синыфҡа – 23 500, VII синыфҡа – 19000, VIII синыфҡа – 17500, IX синыф өсөн – 25500, X синыфҡа 13700 дана нәшер иттек. Әле яңыраҡ ҡына V синыф өсөн 30000 данаға заказ бирҙек. Былар – Халыҡ мәғарифы министрлығынан килгән заказдар. Артығы менән нәшер итәбеҙ, уларын нәшриәт һатыуға сығара.

Халыҡ мәғарифы министры урынбаҫары Миндибай Юлмөхәмәтов конференция һайын, семинар һайын ҡабатлай: «Дәреслектәр менән тәьмин итеүгә айырым иғтибар бүленергә, район, ҡала мәғариф бүлектәре дәреслектәргә заказдарҙы уҡытыусыларҙың ғаризаларына ҡарап һәм яңынан башҡорт синыфтарын асыу киләсәген иҫәптә тотоп төҙөргә тейеш».

Ни өсөн һуң Илеш мәктәбе йылдың-йылы һорап та «Башҡорт теле» дәреслектәрен алдыра алмай ыҙалана икән? Райондың мәғариф бүлеге, Илеш районы хакимиәте һәм, ниһайәт, Халыҡ мәғарифы министрлығы быға ниндәй сара күрергә тейеш?

Ә бит Илеш ауылында балалар башҡорт телен теләп өйрәнә. Илеш башҡорттарының әсе теле – башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш һөйләше, ә улар иһә Ҡазан дәреслектәренән уҡыйҙар. Ул балалар хәҙер Башҡортостандың бер яҙыусыһын да, бер шағирын да, йылға-тауын да белмәйҙәр.

Был көсләп тағылған манҡортлоҡ.

* * *

Илеш районының Дөмәй ауылы башҡорто, илһөйәр азаматы, Хажғәле Яппаров «Наше шежере» («Китап», 1999 й.) тигән китабында йөрәге әсенеп яҙа:

«... Нам очень жаль тех соплеменников, которые записались в последней переписи татарами, предавая дух предков. Язык наших предков был, конечно, близким татарскому, так как это языки из одного корня – тюрки, хотя до сих пор значительно отличается от него. И эта близость и некоторое удаление от общелитературного языка сыграли отрицательную роль в развитии современного языка западных и северозападных башкир. Если бы своевременно, еще в 1924 году, одним из литературных языков был признан язык башкир этого региона, на котором писались бы учебники, издавалась бы художественная литература о героической истории близких и далеких предков, не было бы искусственного сокращения численности башкир в республике за счет записавшихся татарами и искренне, из-за незнания шежере своего рода, истории деревни, считающих себя таковыми. Если бы западные башкиры действительно знали то, что язык, на котором они до сих пор говорят, является языком коренных башкир – вотчинников, этого не случилось бы...»

Илештә яҙ көнө генә үткән ҡоролтайҙа, ниңә дәреслектәргә зар-интизар булып йөрөүселәр сығыш яһаманы икән, тигән һорау тыуҙы.

Баҡтиһәң, иртәгә ҡоролтай була, тип кенә әйткәндәр, кем сығыш яһай, нимә тураһында – бер һүҙ ҙә юҡ.

Минзәлә Хәмиҙуллина менән Фәүзиә Ғибәҙуллинаны ла ҡоролтайға береһе – Бөрйән, икенсеһе Учалы районынан булған өсөн генә саҡырғандар. Ә бит ҡоролтай урындағы башҡорттар менән эшләү өсөн ойошторолған. Унық етәксеһе был хаҡта нимә уйлай икән? Башҡа уҡытыусылар аптыраған бит: ни эшләп беҙҙе лә саҡырмағандар, беҙ ҙә башҡорт та баһа, тигәндәр. Ҡоролтай системаһына төптән уйлап эшләү етеңкерәмәй. Унан һуң, урындағы етәкселәр ҙә, башҡорт тураһында һүҙ сыҡһа, тик әҙәби телдә һөйләшкәнде генә күҙ уңында тоталар, ә бит урындағы халыҡ та башҡорт тип йөрөй үҙен. Кешеләр үпкәләй.

– Бына һин Бөрйәндән килгәнһең. Бындағы башҡорттарҙың башҡортлоғон тергеҙеү юлын нимәлә күрәһең? – тип һораным Минзәләнән.

– Уйлайым-уйлайым да, башҡорт-башҡорт тип өҫтән генә һөйләү етмәй, өгөтләргә кәрәктер, тим. Мәҫәлән, гәзит-журналдарға яҙылыу. Әле килеп күренгәндәре лә юҡ. Унан, беҙҙең артистар Йәркәйгә киләләр ҙә, матур итеп бер концерт ҡуялар ҙа ҡайтып китәләр. Бында килеп етмәйҙәр. Шамил Хәмәҙинуровтың бригадаһы ғына ике тапҡыр концерт менән килде. Бынауы «Карауанһарай» килһен ине берәй тапҡыр, бик ҡыйбатҡа төшһә лә, ул бит беҙҙең йөҙөк ҡашы, бына шуны күрмәй йәшәй урындағы халыҡ. Роберт Тимербаев ижад иткән йырҙарҙы Ҡазан көнө-төнө тапшырып тора, башҡорт композиторы тигән бер һүҙ ҙә юҡ. Үәт татарҙың матур йырҙары бар, үәт улар йырлай исмаһам, тиҙәр. Роза Сәхәүетдинованың йырҙары ла ныҡ матур. Шуларҙы тик татарса тыңлайбыҙ. Башҡорт композиторҙары икәнен беҙҙекеләр белмәй бит. Өс ауылға – Юлдаш, Илеш, Ябалаҡҡа – исмаһам, бер концерт ҡуйып китһендәр ине. Колхоз етәкселәре менән килешеп, ауылдарҙа үткән һабантуйҙарҙа ҡатнашһындар.

Әйткәндәй, Илештә әле шаулатып-гөрләтеп 300 урынлыҡ клуб астылар. (Тик, үкенескә ҡаршы, шунан һуң өс,

дүрт йыл үткәс тә ул башҡорт мәҙәниәтен тергеҙеү трибунаһына әйләнмәне).

Илеш килене Фәүзиә Ғибәҙуллинаның һүҙҙәренә, исмаһам, ҡолаҡ һалайыҡ:

– Бынан 15 йыл элек Илешкә Башҡорт дәүләт педагогия институтынан ғалимдар килеп сығыш яһаған, башҡортолоҡтарын аңлатҡандар. Шуның шикелле осрашыуҙар, исмаһам, биш йылға бер булып торһа, халыҡ әҙерәк үҙенең тарихын белер ине. Район гәзите «Маяҡ»та Илеш башҡорттарының тарихы тураһында мәҡәләләр йышыраҡ баҫылып торһон ине. Халыҡ үҙенең район гәзитен уҡый бит инде. «Ағиҙел» журналында ла ырыуҙар тураһында ҙур-ҙур мәҡәләләр сыға, шуны беҙҙең ауылда алдырып уҡыусылар, беҙ ысын башҡорттармы икән ни, тип тә һораштырып торалар. Гәзит-журналдар аша өгөтләү, яҡындан таныштырыу етешмәй, беҙҙекеләр белмәйҙәр, алдырмайҙар ҙа. «Татарстан яшьләре»н элек программа өсөн алдыралар ине, хәҙер «Өмөт»кә, «Ҡыҙыл таң»ға өҫтөнлөк бирәләр. Өгөтләү булһа, башҡорт баҫмаларына ла яҙылырҙар ине...

Фәүзиәнең әйткәндәренә Минзәлә түбәндәгеләрҙе өҫтәп ҡуйҙы:

– Фәүзиә «Йәшлек» гәзитен, «Аманат» һәм «Аҡбуҙат» журналдарын мәктәптә алдыра, бергә туплап, тегеп бара. Уҡыусылар, минең әтигә лә уҡырға биреп тороғоҙ әле, тип һорап алып ҡайта. Ҡыҙыҡһыныу бар. «Ағиҙел» журналын ныҡ яраталар.

## ХОҠУҠЛЫ ХОҠУҠҺЫҘЛЫҠ

Башҡорт мәктәптәрен, бигерәк тә төньяҡ-көнбайышта, башҡорт дәреслектәре менән тәьмин итеү-итмәүгә килгәндә, мәсьәләнең урындарҙан заявкалар биреү-бирмәүгә генә ҡайтарып ҡалдырылыуы һәр кемгә мәғлүм. Башҡортостанда башҡорт теле, рус теле менән бергә, дәүләт теле тип иғлан ителеүгә ҡарамаҫтан, башҡорт телендә уҡытыу һаманғаса хөкүмәт кимәленә күтәрелмәйсә,

Мәғариф тураһында БР законында яҙылғанса, ата-әсә теләге буйынса ғына атҡарылғас, заявкалар йыйып йөрөргә генә ҡала инде үҙ илебеҙҙә.

2000 йылдың 21 сентябрендә Башҡортостан Республикаһының мәғариф министры Өфөләге Ижтимағи-сәйәси үҙәктә уҙғарылған һәм башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары проблемаларына арналған конференцияла сығыш яһап, президентыбыҙ һәр сығышында һыҙыҡ өҫтөнә алып үткәнсә, республикала һәр мәктәп уҡыусыһы рус телен, туған телен һәм бер сит телде мотлаҡ өйрәнергә тейеш, тигәйне. Мин, ҡолаҡтарым әллә яңылыш ишетәме икән, тип, тәнәфес иғлан ителгәс, президиумға барып белештем. Юҡ, яңылыш ишетмәгәнмен.

Башҡорт теле 1999 йылдың 15 февралендә үк дәүләт теле тип иғлан ителде бит. Шулай булғас, ниңә әлегә тиклем президенттың әллә ҡасан әйткән һүҙҙәренә табынып йәшәргә? Мәғариф министрлығы үҙенең эшен «Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының телдәре тураһында Закон»ға ярашлы рәүештә үҙгәртеп ҡорорға тейеш түгелме икән, тигән һорау яҙып тапшырам.

**Яуап**: Дәүләт телдәре тураһында Закон ҡабул ителһә лә, Мәғариф тураһындағы законға үҙгәреш индерелмәгәс, бер нимә лә эшләп булмай. Мәғариф министрлығы үҙенең тәҡдимдәрен Министрҙар Кабинетына күптән әҙерләп биргән.

Мин Закондың 6-сы статьяһын асып уҡыйым: «Уҡытыу алып барыласаҡ тел (телдәр) ата-әсәләр йәки уларҙы алмаштырыусы кешеләр ризалығы менән уҡыу йортон ойоштороусы тарафынан билдәләнә, был мәғариф учреждениеһының уставы менән нығытыла».

Шулай итеп, тәҡдимдәр әҙерләп бирелгән, әммә эш урынынан да ҡуҙғалмаған. Ул ваҡытта парламентта Законға үҙгәреш индереү тураһында һүҙ ҙә ҡуҙғатылмағайны әле. Тимәк, йөктө урынынан ҡуҙғатыу өсөн арттан этәрергә кәрәк.

Иртәгәһе көндө, 22 сентябрҙә, Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия театрында Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары ҡоролтайы асылды. Башҡа бик күп

көнүҙәк мәсьәләләр менән бер ҡатар, Мәғариф тураһында БР законын БР халыҡтарының телдәре тураһындағы законға яраҡлаштырып, үҙгәрештәр индереү мәсьәләһен, делегат булараҡ, йәнә күтәреп сыҡтым. Халыҡ минең фекеремде геү килеп хупланы һәм резолюцияға индереүҙе талап итте. Тауыш биреп, резолюцияға индерҙек. Беҙ шулай тип уйлағайныҡ. Ул ваҡытта мин үҙем тәҡдим иткән һәм делегаттар ҡул сабып алҡышлаған тәҡдимдәремдең береһенең дә резолюцияға индерелмәүен белмәй инем әле...

Ә бит мин конференцияла һәм съезда күтәреп сыҡҡан мәсьәләләр ҡатын-ҡыҙҙар яҙмышына туранан-тура бәйле. Башҡорт телен дәүләт теле тип иғлан итеү генә етмәй – ғәмәлләштерергә кәрәк. Ә был эш, белеүебеҙсә, тотошлайы менән тиерлек уҡытыусы ҡатын-ҡыҙҙар иңендә.

Әллә хөрмәтле профессорыбыҙ Вадим Сафиндың конференцияла: «Башҡорт теле дәүләт теле итеп тормошҡа ашырылмаҫлыҡ булып ҡабул ителгәндер ул», – тигәне дөрөҫ булып сығамы? Хоҡуҡлы хоҡуҡһыҙлыҡ шул түгелме?

Мин йыш ҡына төрлө ҡоролтайҙарҙа, семинарҙарҙа, презентацияларҙа, тантаналарҙа, президиумдарҙа ҡуҡырайышып ултырыусыларға ҡарайым да үҙебеҙҙе боронғо Египет мумияларына оҡшатам. Тик фараондарҙың ҡырыҫ һәм ғорур сырайҙарынан айырмалы рәүештә, беҙ бер туҡтауһыҙ йылмайған ҡиәфәттә ҡатып ҡалырбыҙ, моғайын.

*Ҡариҙел районында*

## МИН КЕМ ИКӘН? ИХ, БЕЛӘҺЕ КИЛӘ

Сит тел мөхитендә йәшәгән бик күп ҡан-ҡәрҙәштәрем, ватандаштарым бөгөн ошо һорауға яуап эҙләй. 1998 йылдың аҙағында Ҡариҙел районының үҙәгендә төньяҡ-көнбайыш мәктәптәрендә урындағы диалект шарттарында башҡорт телен уҡытыу проблемалары буйынса уҙғарылған фәнни-практик конференция ла ошо проблемаға

арналғайны. Уны Ҡариҙел районы хакимиәтенең ярҙамы менән БР Халыҡ мәғарифы министрлығы ойошторҙо. Конференцияның эшендә Рәсәй дөйөм һәм урта белем биреү министрлығы милли мәсьәләләр институты Башҡортостан филиалының, БР халыҡ мәғарифын үҫтереү институтының һәм БДУ-ның телсе ғалимдары, төньяҡ-көнбайыш мәктәптәренең башҡорт теле уҡытыусылары, Башҡортостан «Китап» нәшриәте хеҙмәткәрҙәре әүҙем ҡатнашты.

БР Халыҡ мәғарифы министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, бөгөнгө көндә республика мәктәптәрендә бөтәһе 14 тел өйрәнелә. Шул уҡ ваҡытта барлығы 173979 бала башҡорт милләтенән иҫәпләнеп, уларҙың 39,5%-ы ғына бөтөн предметтарҙы ла тиерлек туған телдә өйрәнә. Ә 39,04%-ы туған телде предмет булараҡ өйрәнә. Быға тиклем урыҫлашып бөтә яҙған республикала бөгөн килеп балалар баҡсаһына, мәктәпкә һәм юғары уҡыу йортона татар теленең ифрат киң индерелеүен, бүтән милли телдәрҙе үҫтереүҙәге уңыштарҙы һәм башҡорт теленең, уларҙан айырмалы рәүештә, бары тик Башҡортостанда ғына өйрәнелеүен күҙҙә тотҡанда, был бик бәләкәй өлөш, әлбиттә. Әммә БР Халыҡ мәғарифы министрлығының Мәғариф тураһындағы законындағы Башҡортостан республикаһында милли мәктәптәрҙең концепцияһын тормошҡа ғәҙел ашыра барып, татар, мари, сыуаш телдәре менән бергә башҡорт теленә ҡарата ла иғтибарын арттыра барыуын инҡар итеп булмай. Был уҡыу йылына Асҡын районының 29 мәктәбендә 67%-ҡа яҡын бала, Ҡариҙел районында 22 мәктәптә 56%-ҡа яҡын балалар башҡорт телен өйрәнә. Нефтекама, Ағиҙел, Октябрьский, Туймазы, Бәләбәй, Бөрө ҡалаларында башҡорт теленә иғтибар һәм ихтирам тыуҙы. 1995 йылдан башлап башҡорт телен баланың теләге нигеҙендә генә өйрәнеү башланды.

Бәләбәй ҡалаһында башҡорт гимназияһының асылыуы, Благовещенск, Мишкә, Иглин, Бүздәк райондарында башҡорт телен өйрәнеүҙең башҡорттар

тупланып йәшәгән ауылдарҙа ойошторолоуы – ыңғай күренеш. Ә бына Саҡмағошта башҡорт телен индереү буйынса бер нәмә лә эшләнмәүе мәғлүм. Благовар, Йәрмәкәй, Туймазы, Ҡалтасы, Дүртөйлө, Баҡалы, Шаран районданрында ла туған телде өйрәнеү эше насар ҡуйылған. Был районларҙың күбеһендә һәм Яңауыл районы менән Октябрьский ҡалаһында 1998 йылғы уҡыу йылында башҡорт телен өйрәнгән мәктәптәр һаны кәмегән. Бөгөнгө көндә был регионда башҡорттарҙың ни бары 28,6%-ы ғына мәктәптә үҙ телен өйрәнә. Был аянысл хәлдәр шуның менән дә аңлатыла, ата-әсәләр араһында аңлатыу эштәре алып бармайҙар һәм мәктәп етәкселәре педагогик коллективтар алдында анығ бурыстар ҡуймайҙар. Хатта, иҡтисади көрсөктән файҙаланып, ҡайһы бер райондарҙа рус һәм башҡорт телендә уҡыған синыфтарҙы ҡушыу осраҡтары күбәйгән.

Шулай ҙа бөгөнгө көн – төньяҡ-көнбайышта башҡорт теленә юл бөтөнләй ябылған мәл түгел. Бәләбәй педагогия училищеһы һәм Нефтекама педагогия колледжы эшләй. Уларҙа башҡорт бүлектәре асылған. Был уҡыу йорттарында Балтас, Тәтешле, Дүртөйлө, Яңауыл, Борай, Илеш, Бөрө райондарынан күпләп уҡыһалар, Баҡалы, Бәләбәй, Бүздәк, Йәрмәкәй, Шаран, Туймазы, Мишкә райондары һәм Ағиҙел ҡалаһынан уҡырға инеүселәрҙең һаны бик аҙ. Шуны ла әйтергә кәрәк, Бөрө педагогия институтында башҡорт теле уҡытыусыларын әҙерләү бүлеге асылыуға ҡарамаҫтан, унда ошо төбәктән әҙ инәләр. Ә бит регион мәктәптәрендә башҡорт теле уҡытыусыларының етешмәүе билдәле. Бигерәк тә Ҡалтасы һәм Яңауыл райондарында, Нефтекама, Октябрьский, Туймазы, Ағиҙел ҡалаларында. Ҡыҫҡаһы, проблема бик ауыр хәл ителә һәм йылдар буйы килгән сәбәптәр арҡаһында башҡорт халҡы һаман да үҙ илендә, үҙ тарихи ерендә ассимиляцияға дусар ителә. Теленән айыртылған халҡынан да, милләтенән дә яҙа. Әйтәйек, 1989 йылғы халыҡ иҫәбен алыу буйынса Октябрьский ҡалаһында 9,4% кеше башҡорт тип яҙылһа, 1998 йылғы

уҡыу йылында 7,9% ҡына ата-әсә балаһын башҡорт тип яҙҙырған. Шундай уҡ күренеш Бөрө, Бәләбәй ҡалаларында, Борай, Саҡмағош райондарында күҙәтелә. Башҡорт телен тергеҙеү эше айырыуса Дүртөйлө, Илеш райондарына һәм Октябрьский ҡалаһына йүнәлтелергә тейеш, сөнки Дүртөйлөлә 5,8%, Илештә – 8,83%, Октябрьскийҙа 19,36% ҡына бала үҙенең туған башҡорт телен өйрәнә.

БР Халыҡ мәғарифы министры урынбаҫары Миңдибай Юлмөхәмәтов конференциялағы инеш һүҙендә үрҙә килтерелгәндәрҙе бөтә тәрәнлегендә асып һалды.

Тимәк, төньяҡ-көнбайыш башҡорттарын татар телендә уҡытыу, улар үҙҙәрен башҡорт тип иҫәпләһәләр ҙә мәктәптә татар телендә уҡырға теләйҙәр, тип тәкрарлау һаман дауам итә. Күп кенә ауылдарға Башҡортостан радиоһы һәм телевидениеһы тапшырыуҙары барып етмәүе, уларҙа сит дәүләттең дөйөм информация сараларының өҫтөнлөк итеүе башҡорт теле хатта индерелгән осраҡта ла уны ҡыҫырыҡлап сығарып тора. Илеш районының Илеш ауылында ғына ла башҡорт теленең бер индерелеп, йәнә бөтөрөлөүе шуның менән аңлатыла. Ҡариҙелдә булған конференцияла ла райондың мәғариф бүлеге идаралығы етәксеһе Сәүиә Исмай ҡыҙы Зәйнуллина Ҡариҙелдең һул ярында ятҡан ауылдар халҡының телевидениеның икенсе программаһын ҡарай алмауына, уҡыусыларҙың әҙәби башҡорт телен ишетмәүенә һәм быниң башҡорт телен өйрәнеүгә ныҡ ҡамасаулыҡ итеүенә зарланды... (Ә Өфөлә, нефть университетында, уҡыу йылы башында йәмәғәтселек менән бәйләнеш тотоу факультетында, туған тел индерәбеҙ тип, бөтә талиптарға, шул иҫәптән башҡорттарға һәм урыҫтарға ла көсләп татар телен уҡытҡандар, ә кем башҡорт телен өйрәнергә теләй, үҙегеҙ уҡытыусы табығыҙ, тип ҡырт киҫкәндәр. Башҡорт дәүләт университетында ла башҡорт теле факультетынан тыш бер генә факультетта ла башҡорт телендә лекция уҡымайҙар. Шулай тел үҫтереп буламы?..)

... Һуңғы ваҡыттарҙа айырым ғалимдар үҙҙәрен башҡорт тип һанаусы, ләкин мәктәптәрҙә татар телен өйрәнергә теләүсе 200 меңләп кешенән торған ниндәйҙер халыҡ төркөмө хаҡында һүҙ йөрөтәләр, – тине министр урынбаҫары Миндибай Юлмөхәмәтов. – Быңдай фекер тарихи ысынбарлыҡҡа тура килмәй һәм төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының фекерен сағылдырмай. Сөнки был төбәктәрҙә уҙғарылған ҡоролтайҙар шуны күрһәтә, халыҡ үҙенең милли билдәләнешен, гәйнә, балыҡсы, уран, гәрә, йылан... кеүек башҡорт ырыуҙарына ҡарағанлығын белә һәм уларҙы һис тә инҡар итмәй.

БДУ доценты, филология фәндәре кандидаты Мирас Иҙелбаев төньяҡ-көнбайыш башҡорттарын диалектта түгел, ә мотлаҡ әҙәби телдә генә уҡытырға кәрәклегенә баҫым яһаны. Ул, тарихи башҡорт ерҙәрендә йәшәгән һәм бығa тиклем мәктәптә татар телендә уҡыған башҡорттар ни өсөн татар теленә яҡын ғына булған башҡорт телен өйрәнеүҙә ҡыйынлыҡ кисерергә тейеш, тигән һорау ҡуйҙы. Башҡорт телен Германия, Венгрия, Төркиәлә, һ. б. илдәрҙә өйрәнеүҙәрен, немец профессоры Эрсен Раштың Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайында саф башҡортса сығыш яһауын хәтеребеҙгә төшөрҙө.

– Үҙенең туған телен белгән һәм шул телдә яҙған кеше генә ысын мәғәнәһендә әҙип була ала, – тине Мирас Хәмзә улы. – Был яҡта яҙыусылар бар икән, улар әҙәби телде өйрәнергә тейеш.

... Үрҙә килтерелгәндәргә шуны өҫтәйһе килә. Ысынлап та, төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының айырымланыуына һис тә юл ҡуйып булмай һәм уларҙы Төмән, Тубыл, Омскиҙағы – Тара, Новосибирскиҙағы – Бараба, Томскиҙағы – Чулым төркиҙәре менән һис тә сағыштырырлыҡ түгел, сөнки тәүгеләре үҙенең тарихи Башҡортостан ерҙәрендә һәм үҙенең республикаһында боронғо башҡорт халҡының айырылғыһыҙ бер өлөшө булып йәшәп ята.

Башҡортостан мәғарифын үҫтереү институтының башҡорт теле һәм әҙәбиәте кафедраһы мөдире, филология фәндәре докторы, профессор Салауат Галин көнбайыш райондарҙа башҡорт милләтенең үҙаңы бик түбән булы-

уына, быға бигерәк тә башҡорт балаларын тиҫтә йылдар инде татар телендә уҡытыу һәм тарихыбыҙҙы белмәүебеҙ сәбәпсе булыуына баҫым яһаны һәм көнбайышта башҡорт сәсәндәре традициялары тураһында һөйләне.

– Кушнарен районы ҡаңны башҡорттарының төп төбәк ауылдарының береһендә – Ҡарасай йылғаһында – Әсәҙулла Ғәтиәтуллин йәшәгән, – тине ғалим. – Ул диалектта яҙып, үҙен башҡорт, хатта ҡара башҡорт тип таныған.

Атам ҡара башҡорт булған,
Залим батша йәберһеткән,
Язалаған сәбәпһеҙ.
Ҡара башҡорт кәрәкмәй,
Ул, тигән, эшкә һәләтһеҙ.
Элек башҡорт булғанына
Уфтанған минең атам.
Хәҙер башҡорт халҡы менән
Маҡтана беҙҙең ватан.

Эйе, Салауат ағай әйткәнсә, хәҙер Ҡарасай йылғаһы буйында йәшәгән ейәндәре беләме икән олаталарының кем булғанлығын? Сәсәнлеген, башҡортлоғон?..

Профессор көнбайыш башҡорттары араһынан тағы ике сәсәнде атаны. Улар Ғиндулла Усманов менән Кирәй Мәргәндең атаһы Нурмөхәмәт Йомрани. Салауат Галин Ғиндулла сәсән тыуған Ғүмәр ҙә ҡанны ырыуы башҡорттарының төп ауылдарының береһе булыуы, боронғо башҡорт ауылдары Ҡарасай йылға менән Ғүмәрҙән Ыласын тау ауылы бүленеп сығыуын бәйән итте. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һуңғы ваҡытта унда ла башҡорт телен ташлап, татар телен уҡытыуға күскәндәр...

Рәсәй дөйөм һәм урта белем биреү министрлығының милли мәсьәләләр институты Башҡортостан филиалының филология фәндәре кандидаты, БР халыҡ мәғарифының атҡаҙанған хеҙмәткәре, диалект шарттарында башҡорт телен уҡытыу мәсьәләһе менән оҙаҡ шөғөлләнеүсе Рафаэль Аҙнағолов көнбайышта боронғо тарихты, ер-һыу атамаларын, тамғаларын тәрән өйрәнеүе, боронғо төрки халыҡтарының иң боронғо яҙмаһы булып иҫәпләнгән (V

быуатҡа ҡарай) Орхон-Йәнәсәй яҙмаһының алфавиты менән сағыштырып ҡарап һәм беҙҙең тамғаларҙың шуға тура килеүен асыҡлап, Ҡариҙел һөйләше боронғо башҡорт теле һөйләштәренән һаналыуын иҫбатлауы тураһында әйтте. Был тамғалар төрки халыҡтарының береһендә лә һаҡланмаған, ләкин башҡорт теленең Ҡариҙел һәм урта һөйләштәрендә һаҡланып ҡалған.

Шул уҡ милли мәсьәләләр институты Башҡортостан филиалының өлкән ғилми хеҙмәткәре, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы Ишмөхәмәт Шарапов уҡыусыны мәктәптән алып юғары уҡыу йортона инергә әҙерләү буйынса эш тәжрибәһе менән уртаҡлашты. Был өлкәлә лә башҡорт милләтенең бүтәндәрҙән ифрат артта ҡалғанлығы һәр кемгә мәғлүм инде. 1989 йылғы халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса башҡорттар араһында 1000 кешегә юғары белемле 32 башҡорт ҡына тура килә. Ә республикала йәшәгән башҡа милләт вәкилдәренең бөтәһе лә тиерлек 40 һәм 40-тан юғары нисбәттә тора.

Илеш районында ғына түгел, ә бөтөн республикала билдәле, 1998 йыл уҡытыусыһы исемен яулаусы Ғәлимә Ғәлиеваның сығышы тулҡынландырҙы. Ул егерме йыл Илеш районының Үрге Йәркәй 1-се урта мәктәбендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләй.

– Беҙҙең мәктәптә башҡортса уҡытыу бүтән ерҙә башҡорт теле бөтөрөлгәндә лә туҡтатылманы, – тине ул. – 1988 йылда беҙҙең мәктәптәр татарсаға күскәндә башҡорт телен һәм мәҙәниәтен уҡытыу һаҡланып ҡалды. Бөгөн килеп, шундай аяныслы хәл – бөтөн Илеш районында ни бары 330 бала башҡорт телен өйрәнә. Яртыһынан күберәге башҡорт милләте тип иҫәпләнгән төбәктә был диңгеҙҙәге бер тамсыға ла тормай...

Ҡариҙел районының Яңы Бәрҙәш мәктәбенән Зилә Ғиндуллина менән Бағаҙы мәктәбенән Әнисә Ишмөхәмәтова, Борай районының Бигәнәй мәктәбенән Хәлисә Закирьянова һәм Асҡын районының Ҡарткиҫәк урта мәктәбенән Таңсулпан Ғәзимуллина башҡорт теленә программала әҙ сәғәт бирелеүенә, башҡорт сәнғәтен сағылдырған картиналар булмауына, башҡорт халҡының күренекле

шәхестәренең рәсемдәре юҡлығына зарланды. Күп кенә уҡытыусылар етәкселектең мәктәптә туған телде индереүгә артыҡ мәшәҡәт тип ҡарап, ҡаршы тороуына әсенде. Быға ҡаршы БР Халыҡ мәғарифы министры урынбаҫары Миңдибай Юлмөхәмәтов: «Әгәр ҙә кәрәк икән, ике тел түгел, хатта биш тел өйрәнергә тура киләсәк. Халыҡтың ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү – беҙҙең бурыс», – тип яуап бирҙе. Миңдибай Бәхтейәр улы ҡайһы бер уҡытыусыларҙың, бөтә мөмкинлектәр тыуҙырылып та, үҙ эшенә һалҡын ҡарауын, үҙ телендә бер генә баҫманы ла алдырмауын, нәшер ителгән методик ҡулланмаларҙы ла ҡайтармауҙарын ҡаты тәнҡитләне. Асҡын районы мәктәптәренең тәжрибәһе ныҡлап өйрәнелмәй һәм практикаға индерелмәй, тине ул. Ә бит Асҡында башҡорт теле предмет булараҡ ҡына өйрәнелмәй, ә 14 мәктәптә бөтә предметтарҙы уҡытыу әҙәби башҡорт телендә алып барыла. Министр урынбаҫары дәреслектәргә заказдарҙың дөрөҫ тултырылмауының ғына ла ҙур проблема тыуҙырыуын әйтте. Заявкалар биреү Асҡын, Бүздәк, Туймазы, Ҡариҙел райондарында, Ағиҙел, Бәләбәй, Нефтекама, Туймазы ҡалаларында һәйбәт ойошторолоуын билдәләне. Ә Баҡалы, Бәләбәй, Краснокама, Шаран райондарында һәм Бөрө ҡалаһында был эшкә тейешле иғтибар бирелмәүен һыҙыҡ өҫтөнә алды.

* * *

Абдулла урта мәктәбендә башҡорт китаптары өйөп ҡуйылған китапхананы күреп, башҡорт көнкүреше әйберҙәре һәм тарихи документтар, Салауат эҙҙәре буйлап сәйәхәт ҡағыҙҙары (Елдәк ҡәлғәһе яҡында ғына) тупланған музейҙы, унда «Өләсәйем һандығы» спектаклен күрһәтеү өсөн әҙерләп ҡуйылған сигелгән таҫтамал-ҡашмауҙарҙы, ҡатын-ҡыҙ кейемдәрен, биҙәнеү әйберҙәрен күреп, башҡорт балаларының тырыша-тырыша бик теләп туған телен өйрәнеүен үҙ ҡолаҡтарыбыҙ менән ишетеп ҡыуандыҡ. Яңы Бәрҙәш мәктәбе уҡыусыларының үҙе-

беҙҙең милли уйындарҙы күрһәтеүе, туған телебеҙҙә шиғыр һөйләүе һәм йырлауы, үҙебеҙҙең бейеүҙәрҙе оҫта башҡарыуы, ғөмүмән, башҡортса йәшәүе шатландырҙы. Милләттәштәребеҙҙең тарихи тамырҙарына, үҙ булмышына ҡайта башлауына кинәндек.

Танылған балалар композиторы Мөхәррәм Сәлимов менән Башҡортостан «Ҡурай» йәмғиәте етәксеһе, әлеге көндә йөҙәрләгән уҡыусылары булған Әҙһәм Исҡужинды балалар баҡсаһында һәм мәктәптәрҙә күҙҙәренә мөлдөрәп ҡарап торған, ҡурай менән мандолинанан ҡарашын алалмаған кескәй өйрәнсектәре уратып алды. Башҡортостан «Китап» нәшриәте хеҙмәткәрҙәре Флүзә Ишбулатова менән Азат Хәбибуллин мөғәллимдәргә һәм уларҙың тәрбиәләнеүселәренә яңы ғына нәшер ителгән уҡыу әсбаптарын, нәфис әҙәбиәт, балалар китаптарын тәҡдим итте. Ҡариҙелдә тыуып-үҫкән яҙыусы, журналист Рәис Рияндың «Ҡара дарья» китабына һәм Нефтекама педагогия колледжы уҡытыусыһы Әминә Раҡаеваның кесе йәштәге балалар өсөн нәшер ителгән «Бармаҡ уйындары» китабына ихтыяж айырыуса ҙур булды. Ҡариҙел башҡорттары ла үҙенең теленә, китабына, йырына, ҡурайына һыуһап йәшәй икән. Яңы Бәрҙәш ауылынан йәш шағирә Гүзәлиә Тимершина яҙғанса, шул халыҡтың сарсаған күңелен, һыуһынын ҡандырырлыҡ итеп эшләй алырбыҙмы беҙ киләсәктә:

Мин кем икән? Их! Беләһе килә
Тел- милләтте, ата-бабаны,
Улар әкиәтен ишетәһе,
Улар йырын эҙләп табаһы...

## ТАМҒАЛЫ ҠАЯЛАР

Ҡариҙел районы тураһында һүҙ алып барғанда яҙыусы, шағир, публицист, татар һәм башҡорт телдәрендәге бер нисә китап авторы Рәис Риян тураһында ентекләберәк туҡталып үтке килә. Тыуған еренең һыу-шишмәләренә,

тау-урмандарына, һәр ташына һәм үләненә мөкиббән ғашиҡ булған ошо кеше миндә һәр ваҡыт ҙур һоҡланыу тойғоһо уята. Уның бар ижады тыуған яғының тәбиғәтенә, халҡына бағышланған. «Ҡара дарья» романы – яҡындағы тарих булһа, «Тамғалы ҡаялар» исемле яҙмалары Ҡариҙел районының тарихындағы аҡ таптарҙы яҡтыртыуға арналған. Рәис Мәсәлим улының ошо яҙмаларын мин әһәмиәте яғынан Илеш районынан Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған иҡтисад белгесе, иҡтисад фәндәре кандидаты Хажғәле Яппаровтың «Беҙҙең шәжәрә» тигән китабына, Тәтешле районынан журналист, яҙыусы, тарихсы Рауил Исламшиндың «Башҡорттарҙың аҙ билдәле илдәре» исемле романына, Асҡын районының арҙаҡлы улы, ғүмеренең һуңғы һулышынаса төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының тарихын яңыртыу, телен йәшәтеү өсөн көрәшеп йөрөгән һөйөклө Шаһийән ағай Миңлегәлиевтың фиҙаҡәр эшмәкәрлегенә тиңләйем.

... 1998 йылдың ҡояшлы ҡышында Рәис ағай менән минең арала урындағы тел һәм тарих темаһына түбәндәге һөйләшеү булғайны.

– *Мине Һеҙҙең «Ҡара дарья» китабының яҙылыу теле һоҡландырҙы, әсир итте. Нигеҙендә йәнле, тере, йәшәмеш халык теле ята. Менә мин Ҡариҙел районына күрше генә яткан Мәсетле районы кыҙымын. Ул минең телем, урындағы халыктың һутлы һөйләше... Шундай телде инкар итеп буламы инде?*

– Минең дә инанған фекерем бар инде. 65 йәшкә етеп барам бит инде. 70 йыллап элек ошо диалектҡа татар теле килеп кергән. Шул татар телен өйрәнгәндән һуң да менә өйгә ҡайтабыҙ ҙа үҙебеҙҙең диалектта һөйләшәбеҙ. Менә әле 20 йыллап әҙ-мәҙ башҡорт теле индерелә башланы. Урал аръяғының теле, тиҙәр бындағылар, өйрәнәләр. Башҡортса уҡыйҙар ҙа, урамға сыҡҡас, үҙҙәренсә һөйләп алып китәләр. Беҙҙең диалект татар теле түгел. Ул меңәр йыл буйы формалашып килгән тел. Менә, Себер татар теле төрки телдәренең иң боронғоһо, тиҙәр. Ҡаты тел. Беҙҙең һөйләш тә башҡорт әҙәби теленә ҡарағанда күпкә ҡаты. Бында бит инде «һ», «ç» юҡ, «ҙ» бар –

«д»лаштырып әйтелә. «Ш» бик һирәк осрай. «С» ҡаты, мишәрҙәргә тартым, йомшаҡ «с» өнө бар. Шулар ҙур роль уйнайҙыр беҙҙең телдә.

Татар ғалимдары яғынан да, башҡорт ғалимдары яғынан да беҙҙең диалекттың айырым көслө әҙәби тел даирәһенә үҫеп барыуын иҫәпкә алып еткермәйҙәр. Әҙәби тел нигеҙҙәре итеп, бер яҡлы ғына фекерләп, Урал аръяғы башҡорттарының телен генә алғандар. Ә татар әҙәби теле, «әйтмим», «килмим», «китмим», ти. Красноуфимдан алып Ҡазан яҡтарына тиклем барса ерҙә бөтәһе лә беҙҙең телдә, «килмәйем», «китмәйем», «бармайым», тип һөйләшә. Ул, ғөмүмән, башҡорт теленә генә түгел, балҡарҙарға, Ҡырым татарҙарына ла хас. Төрки телдәренең күпселегендә бар ул. Ә минә «эсмим», «килмим» тигәнде беҙҙекеләр нисектер ятыраҡ ҡабул итә. Мин үҙем дә, ҡайҙа ғына йөрөһәм дә, Ҡазанға барһам да, рәхәтләнеп үҙемдең телемдә һөйләшәм – мин уны туған телем тип иҫәпләйем инде. Кем уны ҡайҙа ҡайтарып ҡалдыра торғандыр инде...

*– Боронғо башҡорт теленең бик күп ерле һөйләштәре инкар ителгәнлектән, «Мәсетлелә башкорттар бармы?», «Дәүләкәндә башкорттар бармы?», «Миәкәлә...» тигән мәғәнәһеҙ һорауҙар күбәйә лә инде һәм ассимиляциялаштырыу бөгөн төньяҡ-көнбайышты ғына түгел, тотош Башҡортостанды ялмай башланы. Тел бит ул халыҡтың күңел көҙгөһө, һаҡ ҡыланмаһаң, ватылырға ғына тора.*

– Шулай. Анан, килгән кешеләр – тураһын әйткәндә, килмешәктәр – беҙҙең тамырҙы киҫәләр, ер-һыу атамаларын боҙалар. Бына Бәрҙәш – борон-борондан Бәрҙәш. Бәрҙәш йылғаһы буйында. Урыҫ «Широкий Лог» тип атай ҙа халыҡ та шулай йөрөтә. Болмызы ауылы Балмазыға әйләнә. Ҡариҙелдең уң яғында оҙон ҡул буйы – Жилмезе болоно ята. Урыҫ аны ла «Широкий Лог» тигән. Шунан, Песмән – ағастары киҫеп алынған болондоң башы. Песеү, киҫеү, ҡырҡыу мәғәнәһендә. Уразбахтынан Мари ауылы Чәпәшкә уҙған ерҙә Бибәҙек тигән ер бар. Бала сағымдан хәтерләүемсә, шунда гел арыш, тары сәсәләр ине. Бәҙек – ҡойто, нескә, ә «би» инҡар итеүҙе аңлата. Шишмә-Арал

яғында Биәз бар. Яҙ ҙа түгел, йәй ҙә түгел, көҙ ҙә түгел, мәғәнәһендә. Апрель айында ҡар яуһа, шул бик оҙаҡ иремәй ята беҙҙең яҡтарҙа. Шуға әйткәндәрҙер инде. Бына шундай этимология серҙәре. Шундай көслө телде нисек онотмаҡ кәрәк? Әгәр беҙҙең тел башҡорт әҙәби теленең нигеҙе итеп алынһа, хәҙер Урал аръяғы башҡорттары беҙҙең телде өйрәнер ине. Һәм Әбйәлилдәр, Баймаҡтар Ҡариҙел һөйләшен «татар теле» тип атамаҫ ине. Һәр кемдең күлдәге үҙенә яҡын...

* * *

Ҡариҙел. Башҡорт легендалары һәм мифтары бишеге. Ыласынташтар, мөһабәт ҡырсынташтар һәм тамғалы ҡаялар иле. Аҫылташтарға бай ошо уңдырышлы ерҙәрҙе беренсе булып үҙләштергән балыҡсы, танып, һун башҡорттары бынан меңәрләгән йылдар элек уларға үҙ тамғаларын һуғып, эйәләп ҡуйғандар инде. Телдәре лә тамғалы, үҙенсәлекле уларҙың. Донъяға билдәле этнологыбыҙ һәм хаҡлы рәүештә «башҡорт халҡының тамғаһы» тигән исем алған Раиль Кузеев йыйған ете-һигеҙ мең төрки халҡы тамғаларының бер ете меңе башҡорт тамғалары булғас, шуларҙың араһында Ҡариҙел районы башҡорттарының ата-бабаларыныҡы ла барҙыр бит инде. Шуларҙы исраф итергә бер ниндәй ҙә хаҡыбыҙ юҡ беҙҙең.

Рәис Риян менән әңгәмәләшеү ҡапыл бынан бер йыл элек булған ваҡиғаны хәтергә төшөрҙө. Ул саҡта Өфө йәмәғәтселегә, зыялылар башҡорт теленең ижтимағи функцияһының тарайыуы, милләттең тарҡалыуы, төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының бүтән милләт тарафынан «йотолоп» бөтә барыуы Рәсәй халҡының иҫәбен алыу алдынан милли дәүләтселегебеҙҙе ҡурҡыныс алдына ҡуя, тип саң һуҡҡайны.

## ҺАНДЫҠ ТӨБӨНДӘГЕ ХАЗИНА

1997 йылдың башында, 6 ғинуарҙа, Башҡорт дәүләт университетында Бөтә донъя башҡорттары комитеты менән «Башҡортостан республикаһы халыҡтарының телдәре» тураһында закон проектын эшләүсе хөкүмәт комиссияһы ҡатнашлығында конференция уҙғарылды. Конференцияны филология фәндәре докторы, БДУ профессоры Марат Зәйнуллин асты. Профессор төньяҡ һәм көньяҡ башҡорттарын берләштереү өсөн әҙәби башҡорт теленә ниндәйҙер үҙгәрештәр индереү, уны демократлаштырыу мәсьәләһен дә ҡарарға тәҡдим итте. Конференцияла ҡатнашыусы ғалимдар, яҙыусылар, сәйәси эшмәкәрҙәр был фекерҙе хупланы.

«Ағиҙел» журналының баш мөхәррире, яҙыусы **Булат Рафиҡов**:

– Әҙәби телде көнбайышта индереү дауам итһә, халыҡ иҫәбен алыу алдынан милли проблеманы ҡырҡыулаштырыу булыр ул. Шуға күрә башҡорт һөйләштәрен берләштереүгә йүнәлтелгән эш алып барырға кәрәктер. Әҙәби телде яңыртмай, камиллаштырмай тороп, уға дәүләт статусын талап итеү милләттең икегә бүленешен тәрәнәйтә төшәсәк. Асҡындар бит беҙгә: «Етер һеҙгә, башҡорттар Баймаҡта ғына йәшәй, тип тылҡырға, беҙгә лә иғтибар итергә ваҡыт», – тине.

Бөтә Донъя башҡорттары ҡоролтайының башҡарма комитеты рәйесе, академик **Нияз Мәжитов:**

– Башҡортостанда башҡорт халҡы, ысынлап та, икегә бүленгән. Ярым татарса, ярым башҡортса һөйләшкән төньяҡ-көнбайышта йәшәүсе ҡәрҙәштәребеҙҙе башҡорттар тип һанамау кеүек хата ҡараш көндән-көн нығый. Был – бик тә хәүефле күренеш. Тел халыҡты берләштерергә тейеш. Башҡорт телен байыҡтырырға, әйтәйек, гәйнә теле менән тулыландырырға кәрәк. Йәһүдтәр бит үлгән тарихи телде дәүләт кимәленә күтәрҙе. Ә ниңә беҙ йәшәп ятҡан телде дәүләт кимәленә күтәрә алмайбыҙ?

Яҙыусы, ғалим **Рәшит Шәкүр:**

– Телгә үҙгәреш индереү һәйбәт идея. Тик берләштереү кимәленә еткерә торған үҙгәреш кенә кәрәк. Төньяҡ-көнбайыш башҡорттары төшөнсәһе Свердловск, Татарстандағы Минзәлә һәм Бөгөлмә райондарына тиклем тарала. Халыҡ иҫәбен алыу алдынан иң ныҡ эшләнмәгән Свердловск өлкәһе тороп ҡалды, унда бит 45 башҡорт ауылы бар. Шул өпәй, һыҙы, ҡошсо башҡорттарын да юғалтмаҫҡа кәрәк. Ә төньяҡ-көнбайыш диалектҡа килгәндә, дәреслектәрҙе төрлө һөйләштәрҙәге миҫалдар менән тулыландырырға кәрәк. Ул саҡта баймаҡтар, беҙ генә башҡорттар, тип ултырмаҫ ине.

Оҙаҡ йылдар «Башҡортостан» гәзитенең баш мөхәррире булып эшләгән күренекле журналист, ғалим **Абдулла Ғиниәт улы Исмәғилев**:

– Эйе, милләттең һанын арттырыу, халҡыбыҙҙы берләштереү өсөн беҙгә, бәлки, ысынлап та башҡорт әҙәби телен өлөшләтә үҙгәртергә кәрәктер. Башҡорт теле миңә һандыҡ төбөндә ятҡан хазинаны хәтерләтә. Уның ҡулланыу даирәһе шул тиклем тар бөгөн, ғаиләлә лә олатай-өләсәй аралығында ғына тороп ҡалған. Бөгөн төрлө йыйылыштарҙа башҡортса белмәгән бер-ике кеше өсөн генә бөтәһенең дә тик урыҫ телендә һөйләргә тырышыуы ла башҡорт теленең бәҫен төшөрә.

Тел һандыҡта ята. Ул хазина, алтын булһа ла тут баҫа, беҙҙең күҙ алдыбыҙҙа юҡҡа сыға. Бөгөн бит телселәр үҙҙәре телде белмәй, сөнки ул ҡулланылмай...

Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының телдәре тураһында закон проектын әҙерләүсе комиссия етәксеһе, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры, академик **Зиннур Ураҡсин:**

– «Телде үҙгәртеү» төшөнсәһе бер аҙ ҡурҡыта, өркөтә. Ысынында башҡорт теленең функцияларын киңәйтеү, үҫтереү тураһында һүҙ барырға тейеш.

Башҡортостан Республикаһының Геология һәм ер аҫты байлыҡтарын файҙаланыу буйынса дәүләт комитеты рәйесе **Басир Мәһәҙиев**:



*Республикалағы күренекле йәмғиәт эшмәкәрҙәре, ғалим-профессорҙар Зиннур Ураксин менән Нияз Мәжитов*

– Төньяҡ-көнбайыш проблемаһы хаҡында бик ныҡлы уйлашырға кәрәк. Уртаҡ тел уйлап сығарып, уны индерергә тырышһаҡ, отолоп ҡалмаҫбыҙмы? Был һөйләшеү дауам итергә тейеш. Телде байытыу мотлаҡ кәрәк. Ләкин бының менән генә сикләнеп ҡалыу башҡорт теленең ҡулланыу даирәһен киңәйтерме икән? Төньяҡ-көнбайыш һөйләшен рәсмиләштереү яҡшыраҡ түгелме?

Башҡортостан Республикаһының мәғариф министры урынбаҫары **Миңдибай Юлмөхәмәтов:**

– Төньяҡ-көнбайыш башҡорттарын туған телдә уҡытыу мәсьәләһе ике этапта тормошҡа ашырылырға тейеш. Беренсенән, дәреслектәрҙе улар теленә яҡынлаштырып сығарырға кәрәк. «Ул саҡта Ҡазан дәреслектәренән баш тартыр инек», – тиҙәр бит төньяҡ-көнбайыштар. Шуға ла ҡаршы сығыусы ғалимдар булды. Ләкин быны эшләргә кәрәк.

Профессор **Дамир Вәлиев:**

– Бәлки, хәҙер ике тел позицияһын алырға кәрәктер. Ниңә «Башҡорт әҙәби теленең матди ҡиммәттәре» тигән

материал эшләмәҫкә? Төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының һөйләше татар түгел, ә башҡорт теленең диалекты тигән проблеманы күтәреп сығырға кәрәк. Төньяҡ-көнбайыш теленә рәсми статус бирергә, шул телдә китаптар баҫтырырға кәрәк, тип уйлайым... Башҡорт халҡының милли аңы түбән, ахырыһы. Юғары кимәлдәгеләрҙең дә, беҙҙең дә, халыҡтың да. Дәүләт телебеҙ булмауынан әйтәм быны. Беҙ, ғалимдар, университетта ғына үҙ телебеҙҙе уҡыта алабыҙ бит. Этиканы өс йыл башҡортса уҡыттым, бәрәү ҙә тыйманы. Беҙҙең үҙебеҙгә лә ныҡышмалылыҡ кәрәк.

БДУ профессоры, яҙыусы **Роберт Байымов**:

– Дөйөм башҡорт теле тураһында һүҙ алып барайыҡ. Курган, Силәбе, Пермь өлкәләрендә һәм башҡа төбәктәрҙә йәшәүсе башҡорттарҙың телен дә ошо контекста ҡарарға кәрәк. Төньяҡ-көнбайыш – шуларҙын бер өлөшө генә.

БДУ профессоры **Ирек Аҡманов**:

– Беренсенән, башҡорт теленең дәүләт теле булыуын көтөп тормаҫтан элек, уның ижтимағи функцияларын туҡтауһыҙ киңәйтеү эшен алып барырға тейешбеҙ. Башҡортостан Республикаһының педагогия юғары уҡыу йорттарының бар булған факультеттарында ла башҡорт төркөмдәре асып, башҡорт мәктәптәрендә бөтә фәндәрҙе лә башҡортса уҡытыу өсөн белгестәр әҙерләргә ваҡыт етте. Шундай төркөмдәр БДУ-ның тарих һәм юридик факультеттарында ойошторолған да инде. Әммә был мәсьәләлә БР халыҡ мәғарифы министрлығының тәҡдим менән сығыш яһауы кәрәк. Ул республиканың педагогия вуздарына урта мәктәптәр өсөн уҡытыусылар әҙерләү маҡсатында факультеттарҙа башҡорт төркөмдәре асыуҙы һорап мөрәжәғәт итергә тейеш. 1998 йылда уҡ студенттарҙы ошо юҫыҡта уҡытыу төркөмдәренә алыу өсөн быны тиҙерәк эшләргә кәрәк. Республика кимәлендәге бик күп ижтимағи-сәйәси сараларҙы, әйтәйек, яҙыусылар съездарын, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары ҡоролтайҙарын, фән, әҙәбиәт эшмәкәрҙәре, ветерандар менән осрашыуҙарҙы башҡорт телендә уҙғарып булыр ине.

Ошолай телдең ижтимағи даирәһен киңәйтеү халыҡ өсөн бик яҡшы үрнәк буласаҡ.

Икенсенән, хәҙерге әҙәби башҡорт теле ике диалектҡа нигеҙләнгән, ул беҙҙең телдең бөтә байлыҡтарын да сағылдырмай. Бөгөнгө көндә уны бар диалекттар, йәғни төньяҡ-көнбайыш һәм көньяҡ һөйләштәр иҫәбенә тулыландырыу һәм байытыу бурысы ҡалҡып сыҡты. Был тәҡдимде бойомға ашырыу төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының телен тергеҙеүҙе, ошо төбәктә башҡорт мәктәптәрен асыуҙы еңеләйтер.

Өсөнсөнән, бына биш йыл инде башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектында урта мәктәп өсөн дәреслектәр нәшер итеү мәсьәләһе күтәрелеп килә. Һүҙҙән эшкә күсергә ваҡыт, төньяҡ-көнбайышты ғына түгел, Пермь өлкәһе мәктәптәрен дә шундай дәреслектәр менән тәьмин итергә кәрәк. Шуның менән беҙ төньяҡ-көнбайыш башҡорттарын туған телендә уҡытыу, йәғни, Конституцияла яҙылған хоҡуҡтарын ҡәнәғәтләндереүгә булышлыҡ итербеҙ.

* * *

... Мин бынан бер йыл элек «Йәшлек» гәзитендә үткәрелгән «Түңәрәк өҫтәл»де иҫемә төшөрҙөм. Ул саҡта Башҡортостандың төрлө төбәктәренән йыйылған башҡорт теле уҡытыусылары әсә телебеҙгә һаманғаса дәүләт статусы бирелмәүенә тәрән ризаһыҙлыҡ белдереп сығыш яһағайны. Шунда Тәтешле районынан тарихсы Рауил Исламшин: «Башҡортостанда башҡорт, урыҫ һәм татар телдәре түгел, ә башҡорт, урыҫ телдәре һәм башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалекты дәүләт телдәре булырға тейеш», – тип белдерҙе. Күптәр уны ишетмәмешкә һалышты. Мин дә ҡапылғара тертләп киткәйнем. Ә хәҙер былай тип уйлайым: башҡорт илендәге диаспоралар телдәренә дәүләт статусы даулағанда, ниңә һуң ерле халыҡ, төп халыҡ, колонизаторҙарға ҡаршы күтәрелеп, ерен, илен, телен яҡлап, ике быуат ихтилалдарға

күтәрелеп көрәшеүсе, диңгеҙҙәй ҡан түгеүсе балыҡсы, йылан, гәрә, гәйнә башҡорттары үҙ теленән яҙырға тейеш һуң? Беҙгә бит икегә бүленгән башҡорт халҡын берләштереүҙең төрлө юлдарын эҙләргә кәрәк. Ҡол Ғәли, Салауат һөйләшкән телдең, боронғо шәжәрәләребеҙ теленең бөгөнгө әҙәби телгә инеп китеүенән ниңә ҡурҡырға? Һандыҡ төбөндәге хазинаны яҡты донъяға сығарыра, нурға ҡойондорорға, күптән балҡытырға ваҡыт.

Әммә телде демократлаштырыу башҡорттар йәшәгән төбәктәрҙә туған телдә радио һөйләүе, телевидение тапшырыуҙары күрһәтелеүе, милли мәҙәниәттең үҫтерелеүе, мәктәптәр, гимназиялар асылыуы, башҡорт милләтен тергеҙеү буйынса дәүләт кимәлендә төрлө саралар күрелеүе менән бер ҡатар алып барылырға тейеш. Шунһыҙ, ҡоро һүҙ менән генә, бер нәмә лә килеп сыҡмаясаҡ.

*Октябрьский ҡалаһында*

## «ТУҒАН ТЕЛДЕ ЯРАТМАҒАН КЕШЕ БАШҠАЛАРҘЫҢ ТЕЛЕН ҮҘ ИТМӘЙ»

Шулай тигәйне Октябрьский ҡалаһының халыҡ мәғарифы идаралығы методисы Сания Ғәзиева 1999 йылдың апрель айында. Ә теленән яҙҙырылған кешелә ундай һөйөү нисек һаҡланһын? Бына Октябрьский ҡалаһының үҙендә **1425 башҡорт балаһының 276-һы ғына башҡорт телендә уҡый, ҡалған 1149-ы ассимиляцияға дусар итељә.** Үҙ илебеҙҙә телебеҙ бөтөнләй бөтөрөлгән ҡалалар, ауылдар, тотош райондар һәм төбәктәр барлыҡҡа килтерелеүен бер ҡасан да, бер нисек тә аҡлап булмаҫтыр ул! Һәм бөгөн килеп, әҙ генә шарттар тыуҙырылғас, телде тергеҙеү эшенең ни тиклем ауыр икәнен шул өлкәлә егелеп тир түгеүселәр генә аңлайҙыр.

Октябрьский ҡалаһында бөтәһе **10 мең башҡорт йәшәй (дөйөм халыҡтың 9,4 проценты).** Ҡала советы башҡарма комитеты балалары мәктәптәрҙә уҡыған

башҡорттарҙың исемлеген йыйған. Анализ яһау ҡалала йәшәүсе милләттәштәребеҙҙең белем һәм профессиональ кимәленең түбәнлеген асыҡлаған. Башҡорт милләтенән бер нисә кешенең ҡаланың ҙур ғына предприятиеларына һәм ойошмаларына етәкселек итеүен иҫәпкә алмағанда, рухи өлкәлә – белем биреү, мәҙәниәт һәм фән өлкәләрендә – уларҙың бик әҙ эшләүе мәғлүм булды. Шунлыҡтан урындағы башҡорт ҡоролтайының эшмәкәрлеге лә ҡатмарлаша. Шуға ҡарамаҫтан, уның етәксеһе, ҡаланың Муниципаль милеккә идара итеү комитеты рәйесе Анатолий Абдрахманов һәм башҡарма комитеттың башҡа ағзалары, булған мөмкинлектәрҙе файҙаланып, хәленән килгәнде эшләргә тырыша. Комитет ҡала мәктәптәрендә башҡорт телен уҡытыу торошон даими күҙәтеп бара. Быны ул үҙенең эшенең иң мөһим йүнәлеше тип иҫәпләй. Халыҡ мәғарифы идаралығы, ҡала хакимиәте, уның башлығы Юрий Корольков, башҡорт телен индереүгә ҡаршы көстәрҙең ифрат әүҙем эш итеүенә ҡарамаҫтан, ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә ҡалаға башҡорт теле уҡытыусыларын йәлеп итеүҙе бойомға ашырған. Шулай ҙа кадрҙарға ҡытлыҡ көслө әле. Ҡаланың тыуған яҡты өйрәнеү музейы хеҙмәткәрҙәре һәм уның директоры Альмира Комшакова Башҡортостан мәҙәниәте тарихы буйынса махсус класс йыһазландырған, 37-се балалар баҡсаһында музейҙың филиалын асҡан. Уҡытыусылар өсөн өс йыл буйына даими рәүештә семинарҙар үткәрелә, унда иң ауыр темалар – мәҫәлән, орхон-енисей яҙмаһы, башҡорт орнаменттары һәм тамғалары – тәрәндән өйрәнелә. Бына шулай музейҙағы һәм архивтарҙағы тарихи хазина менән музей хеҙмәткәрҙәренең фәнни-методик ҡеүәһе ҙур мәғрифәт эшенә егелгән һәм ысын мәғәнәһендә кадрҙар сүкеү урынына, Октябрьский ҡалаһының ғорурлығына әйләнгән.

4-се мәктәп нигеҙендә асылған башҡорт гимназияһын ҡаланың көҙгөһө тип йөрөтәләр. Унда төрлө милләт балалары белем ала һәм уҡытыу башҡорт, татар, урыҫ телдәрендә алып барыла. 1–11-се синыфтарҙа, төбәк компонентына ярашлы, аҙнаһына 3 сәғәт башҡорт теле

уҡытыла. Гимназияла Башҡортостан Республикаһының мәғариф алдынғыһы Фәриҙә Әминева, уҡыу-уҡытыу эштәре мөдире Гәүһәр Шакирова, башҡорт телен һыу кеүек эсеүсе сыуаш ҡыҙы Татьяна Максимова, Әлмира Иҡсановалар бөтөн тырышлығын һалып уҡыта. Был мәктәптә 1996 йылдан алып «Йәйғор» фольклор төркөмө уңышлы эшләп килә, етәксеһе – Тамара Сәйфуллина. Сағыу милли кейемдәрҙәге бейеүселәрҙе, йырсы, ҡумыҙсы, ҡурайсыларҙы ҡалала булған барлыҡ тантаналарға һәм байрамдарға саҡырып, һоҡланып тамаша ҡылалар. Урындағы ҡоролтай комитеты данлыҡлы ҡурайсы Азат Айытҡоловтың балаларҙы ҡурайҙа өйрәтеүен ойошторған. 4-се мәктәптең иң шәп ҡурайсыһы Сабитов Руслан, Азаттың өйрәнсеге, әле Салауат ҡалаһының музыка училищеһында уҡый, ул тиҙҙән тыуған ҡалаһына профессиональ ҡурайсы булып ҡайтасаҡ.

Азат Айытҡоловтың Октябрьский ҡалаһының мәктәптәрендәге осрашыуҙарын, үҫмерҙәрҙе ҡурайҙа уйнарға өйрәтеүҙәрен бөгөнгә тиклем легенда итеп һөйләйҙәр. Бәйән итеүҙәренсә, 20-се мәктәпкә ул ни сәбәптәндер һуңлап барған. Балалар ярты сәғәт таралышмай көткән. Ниһәйәт, Азат күренгәс, ҡаршы алғанда: «Һеҙ Айытҡоловмы? Ниңә һуңланығыҙ? Беҙ бит һеҙҙе көтәбеҙ!» – тиҙәр ҙә: «Ура-а-а, Айытҡолов килде!» – тип, һөрәнләй-һөрәнләй, алдан сабалар. Ҡурайсы: «Ҡайҙа ғына, ниндәй генә илдәрҙә, ерҙәрҙә булып, кемдәр менән генә осрашманым һәм баланың минең килеүемә шул тиклем ҡыуанғанын тәүге күреүем», – тип шаҡ ҡата.

Ә бына Башҡорстан энциклопедияһы бында тере ҡомартҡыға әйләнгән. Ҡала хакимиәте уны күпләп алдырып, һәр мәктәпкә таратҡан. Шул китаптар хәҙер күп ҡулланыуҙан сепрәккә әйләнеп бөтөп бара. Ҡала башлығы Юрий Корольков: «Әгәр кәрәк булһа, беҙ тағы алдырырбыҙ, бюджет өсөн был әллә ни ҙур юғалтыу түгел», – тип ышандырҙы. Күптән түгел генә Октябрьскийҙа тәүге энциклопедияның баш мөхәррире, филология фәндәре докторы Рәшит Шәкүр булып киткән һәм 8-се мәктәптә өлкән синыф уҡыусылары менән осрашҡан.

Шығырым тулы залда был киң мәғлүмәтле, энциклопедик белемле ғалимды тын да алмай тыңлағандар.

Бөтә был яҙғандарым халҡыбыҙ шағиры Рауил Бикбайҙың, илемдә илемде һағынам, тигәненә көйөнөслө дәлил булып тора инде. Октябрьскийҙа, төньяҡ-көнбайыштағы бүтән ҡалаларҙағы һәм район үҙәктәрендәге һымаҡ, башҡорт телендә гәзит тә сыҡмай бит, ә бары тик башҡорт, татар һәм урыҫ телдәрендә генә нәшер ителә.

4-се мәктәп-гимназия директоры Римма апай Мофаззалова тураһында айырым әйтке килә. 1995 йылда ул Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайынан ҡалала башҡорт гимназияһын асыу теләге менән ҡанатланып ҡайта. Һәм дәртләнеп эшкә тотона. Бөгөнгө көндә ул ошо гимназияны асыу ғына түгел, уны ҡаланың иң өлгөлө уҡыу йортона әйләндергән. Октябрьскийға килгән бер генә танылған шәхес тә башҡорт гимназияһында булмайынса китмәй. Урындағы ҡоролтай комитеты саҡырыуы буйынса килгән ғалимдар, яҙыусылар һәм шағирҙар Нәзир Ҡолбахтин, Салауат Галин, Сафуан Әлибай, Муса Сиражи, Әнғәм Атнабаев, Рәшит Низамов, Рауил Шаммас, Динә Булгакова тураһында бында бөгөн дә һағынып иҫкә алалар.

Әммә башҡорт телен үҫтереүсе гимназия йәшәһен өсөн шул башҡорт телендә тәрбиәләүсе балалар баҡсалары эшләргә тейеш. 14-се балалар баҡсаһы нигеҙендә баҡсаларҙа башҡорт телендә уҡытыу буйынса методик үҙәк эшләй башлаған.

«Тыуған яҡ тарихын, Ыҡ йылғаһы үҙәненең башҡорттарҙың аҫаба ерҙәре булыуын, тик XVII–XVIII быуаттарҙа ғына бында припущенниктар – татар, типтәр, мишәр һәм урыҫ крәҫтиәндәренең – күсеп килеп урынлаша башлауын ҡала халҡының күпселеге белмәй, – тине Анатолий Абдрахманов. – Әлегә тиклем халыҡта, ысын башҡорттар Дим һәм Ҡариҙел йылғалары бассейндарынан көнсығыштараҡ йәшәй, тигән яңылыш фекер йәшәп килә». Тап ошоға бәйле урындағы ҡоролтай комитеты «Башҡортостандың Көнбайыш төбәгенең этномәҙәниәт тарихы һәм рухи үҫешенең заман проблемалары» тип аталған ғилми-ғәмәли конференцияға әҙерлек алып бара. Әммә ҙур

эштең Бөтә донъя татарҙары конгресы башҡарма комитеты етәксеһе Индус Таһиров менән тығыҙ бәйләнештә эҙерләнеүе Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының ышанмаусанлыҡ белдереүенә һәм был сараны «сәйәси авантюраға» тиңләүенә килтергән. Сөнки 1993 йылда шул уҡ профессор Индус Таһиров етәкселегендә ошоға оҡшаш темаға арналған һәм тотошлайы менән псевдофәнгә ҡоролған конференция булып үткәйне. Унда Татарстан ғалимдарының Барҙылағы гәйнә башҡорттарының мәҙәниәтен һәм тарихын тотошлай инҡар итеүе Нияз Мәжитов, Әхмәт Сөләймәнов, Нәжибә Мәҡсүтова, Нәзир Ҡолбахтин, Роза Буканова кеүек ғалимдарыбыҙҙың ҡорос дәлилдәренә бәрелеп селпәрәмә килгәйне. Тарих тағы ҡабатланамы? Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесенең беренсе урынбаҫары Рәйеф Туҡташев был хаҡта: «Конференция бик юғары кимәлдә, йәғни башҡорт халҡының тарихына, Башҡортостан Республикаһына, милләттең рухи яңырыуына, шулай уҡ Башҡортостанда йәшәүсе бүтән милли төркөмдәргә тәрән ихтирам шарттарында уҙғарыласаҡ», – тине.

Ҡала башлығы Юрий Корольков әйтеүенсә, Октябрьский, ысынлап та, һәр ваҡыт юғары мәҙәниәтле ҡала булыуы менән айырылып торҙо. Шулай ҙа милли мәҙәниәттең быға тиклем үҫтерелмәүе уның ҙур етешһеҙлеге ине. Хәҙер шул хаталар төҙәтелә башланы, тип әйтергә була. Ҡалала Милли музей һәм Милли китапхана эшләй . Музейҙың милләтте тергеҙеү эшендә ниндәй ҙур өлөш индереүе хаҡында әйтеп үткәйнем инде. Ә бына Милли китапханала миңә Сергей Руденконың 1936 йылда нәшер ителгән һәм хәҙер таушалып, теткеләнеп бөткән «Башҡорттар» исемле китабын күрһәттеләр. Уны бында күҙ ҡараһылай бик ҡәҙерләп һаҡлайҙар икән. Бөгөнгө көндә Башҡортостан мәҙәниәте тарихын уҡытыуҙа уның алыштырғыһыҙ ҡулланма булыуын, уға ҙур ихтыяж барлығын, уҡыусыларҙың шул китапты йыш һорауын әйттеләр һәм Башҡортостан «Китап» нәшриәтенең тиҙерәк яңынан баҫтырып сығарыуын үтенделәр. Шул ваҡыт-

та башҡорт авторҙарының урыҫ теленә тәржемә ителгән әҫәрҙәрен даими баҫтырыуҙы юлға һалыуҙы ла һоранылар. Ҡасандыр ул сериялап сыҡҡан һәм ифрат уҡымлы булған. Ҡала башлығы Юрий Васильевич Һәҙиә Дәүләтшинаның «Ырғыҙ»ын, Мәжит Ғафуриҙың «Ҡара йөҙҙәре»ен, Ибраһим Абдуллиндың «Хуш, Рим!» романын, уларҙың урыҫсаға тәржемәһен яҡшы белеүен һәм ғүмере буйы хәтерендә һаҡлауын әйтте. «Милләттең ғөрөф-ғәҙәттәрен генә түгел, ә әҙәби мираҫын белеү ҙә халҡыбыҙҙың мәҙәниәтен ифрат байыта», – тине ул.

... Ә башҡорт теленә һөйөү тәрбиәләүҙе иң тәүҙә үҙ милләттәштәребеҙҙән башларға ине. Юғиһә, беҙ һаман да әле ҡаранғылыҡтан, сикләнгәнлектән, ғәмһеҙлектән сыға алмай яфаланабыҙ. Әгәр шулай булмаһа, минең менән бергә Рәми Ғарипов гимназияһын тамамлаған, ҡасандыр өлгөлө коммунист булған синыфташымдың: «Һинең телең кемгә кәрәк ул, мин балаларымдың башҡорт булыуын да теләмәйем, улай тормошта нимәгә ирешәһең?» – тигәнен мин бер нисек тә аңлай ҙа, аңлата ла алмаҫ инем. Тик шуны беләм, әгәр ҙә беҙ киләсәктә лә бүтәндәргә үпкәләп, милләт бәхетен кемдеңдер беҙгә әҙер килеш килтергәнен көтөп йәшәһәк, ысынлап та, бер нәмәгә лә ирешмәйәсәкбеҙ. Был юҫыҡта башҡорт теленең дәүләт кимәленә күтәрелеүе, бәлки, беҙҙең өсөн бөтә өмөтһеҙлектәрҙән һәм башҡортлоҡтан ваз кисеүҙән арыныу өсөн һуңғы ышаныс һәм һуңғы таяныстыр.

*Нефтекама ҡалаһында*

## ТЕЛЕ БАРҘЫҢ – РУХЫ БАР

Нефтекамала хәл бигерәк аяныслы: башҡорт милләтенән булған уҡыусыларҙың ни бары 30% ғына башҡорт телен предмет булараҡ өйрәнә. Ҡала халҡының яртыһынан күберәге – 51,6%-ы татарса уҡый. Урыҫ, татар, мари телдәрендә гәзиттәр нәшер ителә, ә башҡортса – юҡ. Ошо проблемалар яҡтылығында Нефтекама ҡалаһында 1999 йылдың май уртаһында «Төньяҡ-көнбайыш башҡорттар: тарих, тел, мәҙәниәт» темаһы буйынса фәнни-ғәмәли конференция уҙғарылды.

... Конференцияны Нефтекама ҡалаһының хакимиәт башлығы Игорь Лим һәм унын урынбаҫары Руслан Ғафаров асты. Халыҡ Мәғарифы министры урынбаҫары Миндибай Юлмөхәмәтов, иң тәүҙә һүҙ алып, төньяҡ-көнбайыш төбәктең мәктәптәрендә башҡорт телен уҡытыу мәсьәләһенә байҡау яһаны. Министрлыҡтың урындарҙа саф милли мәктәптәр асыуға ҙур иғтибар бүлеүен әйтеп үтте. Һәр район үҙәгендә һәм һәр ҡалала башҡорт мәктәбе йәки гимназияһы асылыуын, бары тик Нефтекама менән Дүртөйлө ҡалаларында ғына уларҙың юҡлығын билдәләне. Башҡортостандың иҡтисади яҡтан ифрат нык үҫешкән ике ҡалаһында башҡортса гәзит тә нәшер ителмәүе, башҡорт мәктәптәре лә булмауы ғәжәпләндерҙе.

Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Нияз Мәжитов башҡорт халҡын туплау һәм берләштереү, бигерәк тә төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының милли үҙаңын күтәреү, уларҙы башҡорт телендә уҡытыуҙы ойоштороу буйынса үҙҙәренә ҙур бурыс йөкмәтелеүен һыҙыҡ өҫтөнә алды.

– 1979 йылғы рәсми мәғлүмәттәргә ҡарағанда Краснокама районында 38 башҡорт ауылы иҫәпләнгән һәм уларҙың халҡы үҙен ышаныслы рәүештә башҡорт тип атаған. Әммә 1989 йылғы халыҡ иҫәбен алыу буйынса башҡорт ауылдарының һаны өстән бер тапҡырға кәмегән, йәғни улар үҙҙәрен татар тип йөрөтә башлаған, – тине Нияз Абдулхаҡ улы. – Был төп халыҡтың көслө ассимиляцияға дусар ителеүенән килә. Улар урыҫ, татар, мари милләтенә күсә бара. Башҡорт халҡының милли ойошмаһы булараҡ, беҙ был хаҡта тәрән борсолоу белдерәбеҙ. Ассимиляцияны мотлаҡ туҡтатырға һәм милләтте һаҡлап алып ҡалыуҙы тәьмин итергә кәрәк.

Нияз Мәжитов Ҡоролтай органының үҙ эшмәкәрлеген иң изге ниәткә – халыҡтар араһындағы дуҫлыҡты нығытыуға йүнәлтеүен һәм Башҡортостанды тыуған йорто итеп һайлаған урыҫ, татар, мари, удмурттарҙың да башҡорт халҡын тергеҙеү һәм һаҡлап алып ҡалыу өсөн яуаплы икәнлеген, ауыр мәлдә уларҙың ата-бабаларын үҙ

ерендә һыйындырған милләттең хәҙер үҙенең ярҙамға мохтаж булыуын әйтеп үтте.

Тарих фәндәре докторы, профессор Марат Ҡолшәрипов Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш районынан сыҡҡан башҡорт милли хәрәкәте юлбашсылары тураһында архив документтарына таянып һөйләне. Бына улар.

Краснокама районының Таҡталачык ауылынан Илдархан Мутин. 1917 йылдан алып, Февраль революцияһынан һуң, I Бөтә Рәсәй мосолмандарының съезы делегаты булғанда уҡ башҡорт халҡы бюроһына ингән. 1917 йылдың июлендә Ырымбурҙа уҙған I Бөтә донъя башҡорт ҡоролтайын әҙерләүҙә ҡатнашҡан. Иң мөһиме, туғаны Ғәриф Мутин менән бергә башҡорт милли хәрәкәтенең етәксе органы булған Башҡорт үҙәк шураһында торған. Артабан – башҡорт хөкүмәте ағзаһы, эске эштәр комиссары... КГБ материалдарынан күренеүенсә, Илдархан Мутин, «башҡорт буржуаз милләтсеһе» булараҡ, 1933 йылда уҡ ҡулға алынған.

Дүртөйлө районының Әсән ауылында тыуып үҫкән Шәйехзада Бабич та башҡорт милли хәрәкәтен ойоштороусыларының һәм идеологтарының береһе булған. 1919 йылдың мартында большевиктар тарафынан ҡырағайҙарса үлтерелә. Ғүмеренең аҙағына тиклем үҙ халҡының азатлығы һәм үҙбилдәләнеше өсөн ялҡынлы көрәшсе булып ҡалған. Әхмәтзәки Вәлиди уның үлемен башҡорт халҡының тарихында иң ҙур фажиғә тип атаған.

Бүздәк районының Аҡтау ауылынан Муллайән Халиков милли хәрәкәттә айырым урын тота. Башҡортостан автономияһы өсөн көрәштә Зәки Вәлиди уны иң ҙур шәхестәрҙең береһенә тиңләй. Ул Үҙәк менән Килешеү төҙөүсе делегацияға ингән, йәғни Башҡортостан автономиялы республикаһының Үҙәк власть менән Килешеүе аҫтында Муллайән Халиковтың ҡултамғаһы тора. 1921–1925 йылдарҙа БАССР Халыҡ Комиссарҙары Советы рәйесе булып эшләй. 1925 йылда Мәскәүгә эшкә ебәрелә һәм 1937 йылда репрессиялана. Был арҙаҡлы шәхес. Уны Зәки Вәлиди менән йәнәшә ҡуйып була, сөнки 1920 йылдың икенсе яртыһынан алып башҡорт милли

хәрәкәтенә етәкселек итә, тине Марат Мәхмүт улы. 1937 йылда, вәлидовсылыкта ғәйепләнеп, репрессияға эләгә.

Благовар районының Өйҙрәкбаш ауылынан батша армияһының генерал-майоры Хажиәхмәт Ишбулатов башҡорт милли армияһын, милли аҡ корпусты төҙөүҙә ҡатнаша, шунның командующийы була. Репрессияларҙы күрмәй – 1921 йылда 70 йәшендә вафат була. Әммә большевиктар аҡ башҡорт генералын онотмай: 1937 йылда уның улын – «Париж коммунаһы» исемле һыу аҫты кәмәһе командиры Рөстәм Ишбулатовты ҡулға алып, аталар.

– Шулай итеп, төньяҡ-көнбайыш башҡорттары араһынан милли хәрәкәттең ғәййәр юлбашсылары сыҡҡан һәм Сталин репрессиялары ҡорбандары булған, – тине профессор. – Әммә уларҙың халҡы өсөн ҡылған бөтөн эштәре онотолорға тейеш түгел һәм батырҙарыбыҙҙың яҡты иҫтәлеген мәңгеләштереү өсөн сара күрергә кәрәк.

Икенсе бер ғалим-тарихсы, профессор Нәзир Ҡолбахтин бөгөнгө көндә башҡорттар бүтән милләт тарафынан «йотолоп» бөтөп барған төньяҡ-көнбайышта XVIII быуаттың тәүге яртыһында ла, башҡорт ерҙәрен колонизациялау көсәйгәнгә тиклем, тик башҡорттар йәшәгәнен тарихи мәғлүмәттәрҙә килтерҙе.

... 1708 йылда Ҡазан губернаторының туғаны генерал-адмирал С. Ф. Апраксинға яҙған хатынан: «Башҡорттар арҡырыға һәм буйға мәңәрләгән саҡрымдарға һуҙылған ғәйәт ҙур территорияны биләй. Ошо бик иркен ерҙәрҙә йөҙәр саҡрымдарғаса бер генә урыҫ төйәген дә, бер генә суҡынған кешене лә тапмаҫһың». Икенсе Ҡазан губернаторы А. П. Волынскийҙың 1730 йылда Сенатҡа ебәргән докладынан: «30 йыл элек кенә әле башҡорттар йәшәгән территорияла бер генә урыҫ төйәге лә юҡ ине. Әммә башҡорттар эргәһенә Ҡазан, Нижегородка, Сембер татарҙары күсеп ултыра башланы. Улар башҡорт ерҙәрендә ҡырҡ меңгә етеп бара». Ләкин XVIII быуат аҙағында уҡ Өфө провинцияһында һәм бигерәк тә төньяҡ-көнбайыш Башҡортостанда ҡатнаш ауылдар ифрат күбәйә. Шуға күрә Нәзир Мырҙабай улы милли рухты уятыу өсөн иң

тәүҙә төньяҡта башҡорт ауылдарын тергеҙергә, уларҙың тарихын асыҡларға, шәжәрәләрен эҙләп табырға тәҡдим итте. Бының өсөн конференцияла ҡатнашыусы башҡорт теле һәм әҙәбиәте, Башҡортостан мәҙәниәте тарихы уҡытыусыларына түбәндәге сығанаҡтарҙы тәҡдим итте.

«Южноуральский археографический сборник», II томы. Унда башҡорт һәм мишәр кантондары һәм кантон етәкселәре исемлеге бирелгән. Күпме башҡорт, типтәр, мишәр һ. б. ихата бар, кем ерендә урынлашҡан – бөтәһе лә күрһәтелгән. Ошо сығанаҡҡа таянып, Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш райондарының күпселеге ингән Уса даруғаһы территорияһында бөтөнөһө 83 башҡорт ауылы булған. XVIII быуат аҙағы өсөн был бик ҙур һан. Был йыйынтыҡтан һәр кем йәшәгән урынын эҙләп табып, ата-бабаларының кем булыуын асыҡлай ала.

Н. М. Ҡолбахтин М. М. Ҡолшәриповтың сығышына үҙенсәлекле өҫтәмә индереп, XVIII быуат аҙағында төньяҡ-көнбайыш төбәктән сыҡҡан арҙаҡлы башҡорттар, күренекле дәүләт эшмәкәрҙәре тураһында бәйән итте.

Пермь өлкәһенең Барҙы районынан Туҡтамыш Ишбулатовтың исеме бөтәһенә лә яҡшы таныш. Профессор уны үҙенең «Из истории гайнинских башкир» (Өфө, 1996) тигән китабында Салауат Юлаев менән йәнәшә ҡуя. Мәғдән сәнәғәтен етәкләүсе ҙур шәхес, 20 йыл тиерлек башҡорттарҙың иң күп халыҡлы, иң алдынғы гәйнә өлкәһенең старшинаһы була. Кәрәҫтиәндәр һуғышы башланғас, төньяҡ-көнбайыш халҡы Туҡтамыштың Пугачевҡа ярҙам иткәнен белгәс, баш күтәреүселәр яғына күпләп сыға. Шул тиклем абруйлы кеше була. 1774 йылдың йәйендә ул хәрәкәттән ситләшә, ләкин бер меңлек ғәскәрен Буй йылғаһында туплай һәм язалау отрядтарында ҡатнашыусы бөтөн татар, башҡорт, мишәр старшиналары бер-береһенә: «Һаҡ булығыҙ, төйәгегеҙҙе ташлап китмәгеҙ, Туҡтамыш Буй йылғаһында», – тип хәбәр ебәрә. Тимәк, унан дошмандары ҡурҡып торған.

Туҡтамыш Ишбулатов – Уложенная комиссия депутаты. Өфө провинцияһы башҡорттарының наказдары авторы. Башҡортостандың Рәсәйгә ингәндән алып XVII

быуатҡа тиклемге тарихын һәм закондарын үҙләштергән. Башҡорт һәм рус телдәрендә уҡый-яҙа белгән. Наказдарҙы ул рус телендә әҙерләгән. Өфө дворяндары башҡорт ерҙәренә дәғүә иткәндә: «Башҡорт ерҙәрен талау етер һеҙгә! Һеҙ шул тиклем күп таланығыҙ, хатта, башҡорттарҙың үҙҙәренә ер ҡалманы», – тип белдерә. Күҙ алдына килтерегеҙ: XVIII быуат, Екатерина II заманы. Ниндәйҙер башҡорт, Петербургҡа килеп, шулай сығыш яһаһын әле!

Өфө сауҙагәрҙәре Өфө провинцияһында сауҙала монополияға эйә булыуҙы талап иткәндә: «Һеҙ Өфөнө лә хеҙмәтләндереп өлгөрмәйһегеҙ. Бер генә урыҫ сауҙагәре лә беҙҙең Гәйнә өлкәһенә килеп етә алғаны юҡ. Үҙебеҙҙең хужалыҡ продукттары менән үҙебеҙгә сауҙа итергә рөхсәт бирегеҙ!» – тип шарт ҡуя.

1836 йылдың 11 февралендәге Указ менән башҡорт старшиналарын күҙәтергә мишәр писарҙарын ҡуялар. Ошо ваҡиғанан һуң 30 йыл үткәс, Туҡтамыш Петербургтағы Дума бинаһында былай тип сығыш яһай: «Беҙҙең, башҡорттарҙың, үҙебеҙҙең уҡымышлы кешеләребеҙ етерлек, беҙгә башҡорт писарҙарын ҡуйығыҙ, башҡорт старшиналарын күҙәтеп, провинция канцелярияһына ошаҡлау етер».

Бына шундай кеше. Атта сабып, ҡылыс һелтәп түгел, ә аҡылы һәм киң яҡлы белеме менән милләтен яҡлаған, һаҡлаған. Төньяҡ-көнбайыш башҡорттары халҡымдың ошо бөйөк улының тамырҙарын эҙләп тапһа, ете-һигеҙ быуынын асыҡлаһа, ниндәй ҙур сауап булыр һәм үҙебеҙгә күпме бәҫ өҫтәр ине!

Тағы бер гәйнә башҡорто – Исмәғил Тасимов. Башҡортостандың мәғдән сәнәғәтен үҫтереүсе, тау училищеһына (ул һуңынан Петербург тау институтына әйләнделгән) нигеҙ һалыусы. Донъяла ул бөгөнгө көнгә тиклем грамота белмәгән башҡорт булараҡ билдәле. Институттың 100 йыллығына бер студент шиғыр яҙа һәм, нисек инде 100 йыл элек ниндәйҙер белемһеҙ башҡорттоң тау институтын асырға башы еткән, тип ғәжәпләнә. Һәм бөгөн килеп, профессор Нәзир Ҡолбахтин архив сығанаҡтарында бик ҡыҙыҡлы бер документ тапҡан. XVIII

быуаттың 50-се йылдарында Елизавета Петровна яңы ҡанундар сығарыу өсөн Уложенная комиссияны саҡырырға була һәм төрлө яҡҡа Указдар ебәрә. Урындарҙа кешеләр һайлап, наказдар проекттарын әҙерләргә ҡарар итәләр. Һәм, күҙ алдына килтерегеҙ, Пермь тау ведомствоһының бөтөн завод хужалары һәм мәғдән сәнәғәтселәре исеменән 28 төп һәм 16 өҫтәмә пункттан торған наказдар проектын «грамотаһыҙ» башҡорт Исмәғил Тасимов әҙерләгән.

Ошо легендар шәхестең вариҫтарын табыу – беҙҙең бурыс.

– Мин кемделер башҡорт йәки татар булып яҙылырға саҡырмайым, – тине ғалим, – мин һеҙгә ата-бабаларығыҙҙы белергә, ете быуынығыҙға тиклем тикшерергә кәңәш итәм. Бына, мәҫәлән, минең ете быуын нәҫелем, Ҡолбахты фамилияһын биргән олатайым, рус армияһының сит илгә походында – Парижды яулауҙа ҡатнашҡан һәм көмөш миҙал менән бүләкләнгән. Мин шуның менән ғорурланам һәм ошо тойғоно уландарыма ла еткерергә тырышам.

Нәзир Мырҙабай улы ата-бабаларыбыҙҙы нисек юллап табыу юлдарын да өйрәтте. Быны өсөн профессионалдар нәшер иткән йыйынтыҡтар бар: «Крестьянская война 1773–1775 гг. на территории Башкирии» (Өфө, 1975), «Документ ставки Е. И. Пугачева, повстанческих властей и учреждений» (Мәскәү, 1975). Китаптың артына урынлаштырылған исем һәм географик күрһәткестәр менән эшләргә кәрәк. Кеше ниндәй өйәҙҙән, ауылдан, ниндәй һуғыштарҙа ҡатнашҡан һ. б. – бөтә мәғлүмәттәр килтерелгән. Быларҙан тыш, «Китап» нәшриәтендә ғалимдарыбыҙ Ә. З. Әсфәндиәров, Ю. М. Әбсәләмов, М. И. Роднов төҙөгән уникаль йыйынтыҡ – «Западные башкиры по переписи 1795–1917 гг.» китабы нәшер ителде.

Мәғрифәтте үҫтереү институтының башҡорт теле һәм әҙәбиәт кафедраһы мөдире, ғалим-фольклорсы Салауат Галин да төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының ассимиляцияға бирелеүе, телен, рухын милләтен юғалтыуы хаҡында әсенеп һөйләне. «Быны сәбәптәренең береһе –

милли әҙәби тел менән диалект мәсьәләләрен дөрөҫ аңламауҙа, – тине ул. – Беҙ бөтәбеҙ ҙә бәләкәйҙән әсә һөтө менән тәрбиәләнгән милли телебеҙҙә һөйләшәбеҙ. Милли тел диалекттар рәүешендә йәшәй. Диалект – телдең биҙәге. Саф әҙәби телдә бит бер кем дә һөйләшмәй. Ул беҙҙең яҙма телебеҙ».

Ысынлап та, «сез» йәки «сеҙ» тип әйткәндәре өсөн генә Аҫҡын, Ҡариҙел, Илеш, Тәтешле, Туймазы, Балтас, Яңауыл һ. б. башҡорттарынан баш тартырға беҙҙең ни хоҡуғыбыҙ бар ине? Үзбәк, ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ, төрөк, әзербайжан, төркмән – бөтөнөһө лә «сез» ти. Салауат Әхмәҙулла улының: «Беҙ быға тиклем диалектҡа ҡаршы көрәштек, – тийеүен мин ғалимдың ысын батырлығы тип иҫәпләйем. Хаталарҙы таныу өсөн дә ҡыйыулыҡ кәрәк. – Диалект һүҙҙәрен файҙаланыуға ҡаршы мәҡәләләр яҙҙыҡ, китаптар сығарҙыҡ. Шуның менән беҙ йәнле һөйләү теленә, әсә телебеҙгә ҡаршы торҙоҡ. Әҙәби тел бит ул яһалма рәүештә барлыҡҡа килтерелгән яҙма әҙәби тел..»

Ғалим беҙҙең милли һәм әҙәби телде бутауыбыҙҙа төп бәләләрҙең береһен күрҙе. Алжирҙар бит бөгөнгә тиклем француз әҙәби теленән файҙалана, тине ул. Һиндостанда – инглиз теле. Быуаттар төпкөлөндә тамғалар менән яҙған, һуңынан иҫке төрки теленән, Октябрь революцияһынан һуң 1924 йылға – үҙебеҙҙең яҙма милли телебеҙ барлыҡҡа килтерелгәнгә тиклем – татар яҙма теленән файҙаланған башҡорттар ҙа бер ҡасан да башҡорт булыуын туҡтатмаған.

– Беҙ гелән тел менән милләтте бутайбыҙ, – тине Салауат Галин. – Бына төньяҡ-көнбайыш башҡорттары «татарса һөйләшә» тип, уларҙы татар тиҙәр. Ә чили теле бармы? Ә куба теле? Уругвай менән Мексиканыҡы ла юҡ. Ә милләттәр – мексикандар, куба халҡы – йәшәй. Испания менән бергә уларҙың бөтәһе лә испан телендә һөйләшә. Америка менән Канада телдәре лә юҡ – американдар һәм Канада халҡы сәскә ата...

Эйе, әҫәрҙәрен иҫке төрки телендә һәм татар телендә яҙған бөйөк башҡорттар – Аҡмулла менән Шәйехзаданы ла бит татарға ҡаратып ҡуйырға маташыусылар бар хатта.

Сыңғыҙ Айтматов гел русса яҙа. Кем уны урыҫ яҙыусыһы тиһен? Ә русса яҙыусы Ғәзим Шафиҡов, Талха Ғиниәтуллин?..

Башҡорт дәүләт университетының тарих факультеты доценты Фәрит Ғәлиев арҙаҡлы Әнүәр Әсфәндиәровтың «История сел и деревень Республики Башкортостан» хеҙмәттәренә таянып, Краснокама районындағы Яңы Аҡтанышбаш, Иҫке һәм Яңы Аткүл, Яңы Балтач, Иҫке һәм Яңы Бөртөк, Иҫке һәм Яңы Йәньегет, Иҫке һәм Яңы Ҡабан, Иҫке һәм Яңы Ҡайынлыҡ, Ҡуҙғау, Ҡуян, Яңғыҙнарат кеүек бик күп ауылдарға ҡырғыҙ, гәрәй, йылан, йәнәй ырыуҙары башҡорттарының нигеҙ һалыуы, аҫаба башҡорттарҙың ғәйәт ҙур ерҙәр биләп йәшәүе тураһында һөйләп үтте. Мәҫәлән, Түбәнге Гәрәй волосы – 90 мең дисәтинә ергә, ә Урман-Гәрәй волосы 67,465 мең дисәтинә ергә хужа булған (Белешмә өсөн: бер дисәтинә яҡынса бер ярым гектарға тиң). Бөгөнгө көндә Краснокама районында 70 пунктта төрлө милләттән булған 26 мең кеше йәшәй.

... Баш ҡаланан килгән ғалимдар, профессор-академиктар сығыш яһап бөткәндән һуң залдан яҙып ебәрелгән һорауҙарға яуаптар бирелде.

**Һорау:** Төньяҡ-көнбайыш төбәктә башҡорт ауылдарында телде тергеҙеүҙе нисек күҙ алдына килтерәһегеҙ? Быны мәктәп кимәлендә генә ғәмәлләштереп булалыр, моғайын. Ә ғаиләлә нисек?

**М. Б. Юлмөхәмәтов:** Әлбиттә, иң ҙур өмөт – мәктәптә. Сөнки тап мәктәптәрҙе татар теленә күсереү һөҙөмтәһендә урындағы халыҡ татарлашып бөттө. Һеҙ быны бик яҡшы беләһегеҙ. Ә ғаиләгә килгәндә, был иң тәүҙә ата-әсәләргә ҡағыла, милли үҙаң тик ғаиләлә тәрбиәләнә. Балалар баҡсаһы һәм мәктәп кенә тырышып, ғаилә ситтә ҡалһа, бер нәмә лә килеп сыҡмаясаҡ.

**Һорау:** Башҡорт әҙәби теле менән төньяҡ-көнбайыш һөйләшен яҡынайтыу буйынса эш алып барыласаҡмы?

**М. Б. Юлмөхәмәтов**: Был йүнәлештә ниндәйҙер эш алып барыла ла инде. Тик тулыһынса яҡынайтыу, оҡша-

тыу булмаясаҡ – фонетик һәм лексик үҙгәрештәр индереләсәк.

**Һорау:** Хәҙер беҙҙең балалар башҡорт телен генә өйрәнәсәкме?

**М. Б. Юлмөхәмәтов:** Ә кем шулай тине? Рус һәм башҡорт телдәрен, дәүләт телдәре булараҡ, һәр бала өйрәнәсәк, бынан тыш, һәр милләт үҙенең туған телен өйрәнәсәк.

**Һорау:** Исәнмесез, башкорт теле дәүләт теле булгач, хәзер безнең укучылар ничә тел өйрәнергә тиеш булалар инде?

**М. Б. Юлмөхәмәтов:** Татарстанда ниндәй хәл – беҙҙә лә шулай.

**Һорау:** Краснокама районында башҡорт телен уҡытыу нисек алып барыла?

**М. Б. Юлмөхәмәтов:** Ғалимдарыбыҙ бөгөн был төбәктә бик күп башҡорт ауылдары булыуын тарихи яҡтан иҫбатлаһалар ҙа, үкенескә ҡаршы, ике мәктәптә генә өйрәнәләр. Бөгөн беҙ башҡорт ауылдарында мотлаҡ башҡортса уҡытыу мәсьәләһен ҡуябыҙ. Әлегә был регионда дөрөҫ булмаған сәйсәт алып барыла, бары тик татар телен уҡытыу өсөн генә шарттар тыуҙырыла. Ошо территорияла йәшәгән башҡорт милләтенән булған кешеләрҙең хоҡуҡтарын ҡыҫыу был. Беҙ ҡайһы саҡта хәҡиҡәтте танымаҫҡа тырышһаҡ та, ошо ерҙәрҙә үҙҙәрен башҡорт тип белгән халыҡ йәшәй.

**Һорау:** Нимә тиһәгеҙ ҙә, бер татарбыҙ – шулай ҡалабыҙ.

**М. Б. Юлмөхәмәтов:** Ә кем һеҙгә татар булыуҙы тыя? Бер кем дә һеҙҙе башҡортҡа әйләнергә саҡырмай. Бында нисек итеп башҡорт халҡының ассимиляциялашыуын туҡтатыу һәм милләтте һаҡлап алып ҡалыу мәсьәләһе ҡуйыла. Беҙ, киреһенсә, һәр милләт вәкиле туған телен өйрәнә алһын өсөн шарттар тыуҙырабыҙ. Башҡортостанда татар, сыуаш, мари – һәр кем үҙ телендә уҡыу хоҡуғына эйә.

**Һорау:** Нефтекамала 14-се мәктәптә ата-әсәләрен татар ижтимағи үҙәге ярҙамында эшкәртеп, башҡорт балаларын татар телендә уҡытырға мәжбүр итәләр.

**Н. А. Мәжитов:** Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, башҡорт балаларын урыҫ, татар, мари, сыуаш телдәрендә уҡытыу Нефтекамала ғына түгел, башҡа райондарҙа ла урын алған. Беҙ, йәмәғәтселек һәм Ҡоролтай, быға ҡәтғи рәүештә ҡаршыбыҙ. Был проблеманы асыҡлау өсөн Халыҡ мәғарифы министрлығына мөрәжәғәт итербеҙ һәм һәр факт менән яҡындан ҡыҙыҡһынырбыҙ.

**Һорау:** Беҙҙе, төньяҡ-көнбайыш башҡорттарын, көньяҡ һәм көнсығыш райондарҙан килгән коллегаларыбыҙ гел ситләтәләр, кәмһетәләр, телебеҙҙе татарса тиҙәр...

**Н. А. Мәжитов:** Республика халҡы араһында ысынлап та шундай яңылыш фекер таралған. Мәсьәләне улай ҡуйыу бөтөнләй мәғәнәһеҙ. Һәр халыҡтың этник төркөмдәре төрлө телдә һөйләшә ала: татарса, украинса, ҡытайса... Ләкин беҙҙең өсөн республикабыҙҙа һәм унан ситтә лә йәшәгән милләттәштәребеҙҙең ниндәй телдә һөйләшеүҙәренә ҡарамаҫтан, башҡортлоғонан ваз кисмәүе мөһим. Ваҡыт үтеү менән, төрлө сәбәптәр арҡаһында, урта мәктәптә татар, сыуаш һәм башҡа телдәрҙә уҡыған туғандарыбыҙ әсә телебеҙгә әйләнеп ҡайтыр, тип өмөтләнәбеҙ. Ошоларҙан сығып, өгөтләү һәм ойоштороу эштәрен алып барабыҙ.

**Һорау:** Ағиҙел һәм Нефтекама ҡалаларында ике-өс мәҙрәсә эшләй, дин дәрестәре татарса алып барыла. Шулай булғас, ассимиляция ла дауам итеlә. Нефтекамала һәм Краснокама районларында урыҫ, мари, татар телдәрендә гәзиттәр сыға, ә башҡортса – юҡ.

**Н. А. Мәжитов:** Беҙ быны беләбеҙ. Нефтекамала башҡорттар бик күп йәшәй. Башҡорт уҡыусыларының һаны ғына 4551-гә етә. Тиҙҙән был төбәктә лә башҡорт телендә гәзиттәр сыға башлар, тип ышанам. Тик түҙемле булырға кәрәк.

* * *

... Яҙма рәүештә һорау биреүҙән тыш, трибунаға сығып телмәр тотоусы уҡытыусылар ҙа булды. Ағиҙел ҡалаһынан Гөлниса Ғәзизова, Өфөнән Сәкинә Билалова һәм башҡалар халҡыбыҙ проблемалары тураһында күңелдәре һыҙланып, вайымһыҙлығыбыҙҙы тәнҡитләп һөйләне. Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы делегаты, Нефтекама ҡоролтай башҡарма комитетында тел секцияһын етәкләүсе, Нефтекама педагогия колледжының башҡорт теле бүлеге мөдире Әминә Раҡаева колледжда урыҫ, татар, удмурт телдәре менән бергә башҡорт теле лә өйрәнелеүен, Башҡортостан тарихы, мәҙәниәте, географияһы һәм экологияһы предметтары индерелеүен, бында төньяҡ-көнбайыш мәктәптәре өсөн 10 йыл эсендә 214 башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы әҙерләнеп сығарылыуын бәйән итте. Быларҙың бөтәһе лә – уҡыусыларҙың һәм уҡытыусыларҙың уңыштары – колледждың директоры Николай Плоховтың тырышлығы, булышлығы һөҙөмтәһендә генә мөмкин булыуын билдәләп үтте. Ул башҡорт теле кабинетын астыра һәм, рәссам яллап, шаҡ ҡатырлыҡ матур башҡорт көнкүреше картиналары менән биҙәттерә. Николай Плохов Башҡортостан йәштәренең яратып уҡыған «Йәшлек» гәзитен тотош синыфтарға яҙҙыртырға ла аҡса йәлләмәй. Ул Башҡортостан «Китап» нәшриәте менән тығыҙ бәйләнештә эшләп, яңы ғына нәшер ителгән китаптарҙы машиналап ташыттыра һәм финанстар күсерттерә. Тотош Нефтекамала бер генә китап магазинында ла башҡортса продукция һатылмағанда, ҡалаға килтерелгән осраҡта ла складта йәки ҡайҙалыр гаражда серетелгәндә, бер колледж директорының, саф урыҫ кешеһенең, бер кемгә лә инәлмәйенсә, проблемалар булдырмайынса, үҙенән торғанды ең һыҙғанып эшләүе һоҡландыра.

## ТОРМОШТА ҮҘ УРЫНЫБЫҘҘЫ ЯУЛАРҒА ВАҠЫТ

1999 йылдың июль баштары... Бәләбәй ҡалаһының үҙәк урамдарының береһендә «Урал батыр» исемендәге милли йорт (элекке Төҙөүселәр клубы) алыҫтан уҡ иғтибарҙы үҙенә тартып ултыра. Ап-аҡ бинаның эсе лә өр-яңынан – Европа стилендә биҙәлгән. Шундай ҡытлыҡ заманда ҡала хакимиәтенең аҡсаны йәлләмәй урыҫ, татар, сыуаш, мари һәм башҡорт милли ойошмаларына төрлө мәҙәни саралар үткәрһендәр өсөн бынауындай бина әҙерләүе һоҡланыу ғына уята. Ғөмүмән, урындағы етәкселек милли мәсьәләгә етди иғтибар бүлә. Бында төньяҡ-көнбайышта тәүгеләрҙән булып татар һәм башҡорт гимназиялары асылған, урындағы педагогия училищеһында бик күптәнән урыҫ, татар, сыуаш бүлектәре эшләй һәм биш йыл элек башҡорт бүлеге ойошторолған. Мәктәпкә тиклемге 52 тәрбиә йортоноң 6-һы милли статуста эйә һәм 2-һендә башҡорт теле индерелә. Ҡала, район мәктәптәрендә Башҡортостан тарихы, мәҙәниәте, географияһы, тәбиғәте өйрәнелә, шуларҙың 12-һендә программаға башҡорт телендә уҡытыу керетелгән. Төбәктә 1014 уҡыусы башҡорт телен өйрәнә. Бер үк ваҡытта шаҡ ҡатырғыс түбәндәге мәғлүмәткә иғтибар итәйек: Бәләбәй ҡалаһы һәм районы буйынса бөтәһе 920 башҡорт балаһының 348-е генә (38 проценты) әсә телен өйрәнеү мөмкинлеген алған. Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты референты Рәфҡәт Абдуллин Бәләбәйҙә уҙғарылған йыйында ошоға ҡағылышлы былай тип әйткәйне:

– Туған телде белеү – һәр башҡорттоң намыҫ эшелер ул. Бигерәк тә бөгөн, башҡорт теле дәүләт статусын алғанда. Ә беҙҙең ата-әсәләрҙең күбеһе балаһының әсә телен белеүен дә, өйрәнеүен дә теләмәй. «Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» Закон ғәмәлләштерелеп, айырым бер профессия кешеләре өсөн

башҡорт телен белеү мотлаҡ, тип табылһа, үҙебеҙ телебеҙҙе белмәй, бүтәндәрҙе нисек өйрәтербеҙ уға. Шуға ҡарамаҫтан, республикалағы башҡорт булмаған күп милләттәр төп халыҡтың мәҙәниәтен, тарихын һәм телен белергә кәрәклекте бик яҡшы аңлай, 100 мең башҡа милләт балаһы башҡорт телен өйрәнә. Уларҙы бит бер кем дә мәжбүр итмәй!

Рәфҡәт Фәтҡулла улының был сығышы, Бәләбәйҙә башҡорт гимназияһы була тороп та, бик күп башҡорт ата-әсәләренең балаларын эргәләге урыҫ мәктәбенә биреүенә үпкә һүҙҙәре булып яңғыраны.

Телгә төп иғтибарҙы йүнәлтеү, киләсәктә баланың мотлаҡ телсе, филолог, журналист, йәғни башҡа гуманитар белем генә алыуын аңлатмай ул. Беҙ йыш ҡына үҙ сикләнгәнлегебеҙҙән арына, милли кадр әҙерләүҙең асылына төшөнә алмай ыҙаланабыҙ. Әгәр киләсәктә үҙ илебеҙҙә үҙебеҙ хужа булып йәшәргә теләһәк, башҡорт милли кадрҙарын һәр өлкәлә – банктар системаһынан алып юриспруденция менән дәүләт һәм хөкүмәт аппаратына тиклем – әҙерләргә тейешбеҙ. Республиканың иң өлкән уҡыу йорттарының береһе булған Бәләбәй педагогия училищеһында башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытыусы Мөнирә Сәлихова хаҡлы: «Тирмәләр ҡороп, сабаталар элеп, балаҫтар йәйеп кенә беҙ XXI быуатҡа инә алмайбыҙ. Үҙебеҙҙе алдамайыҡ. Милләттәштәребеҙ төрлө өлкәләрҙә үҙ урынын яулап алырға тейеш... Уйланаһы нәмәләр, башҡараһы эштәр күп. Инглиз телен өйрәнеп, донъя кимәленә сығырға, компьютерҙы киң индерергә кәрәк. Юғиһә, гел, филология ла филология, тибеҙ. Был да насар түгел, ләкин беҙгә башҡа милләттәр араһында артта ҡалырға ярамай. Ауыл мәктәптәрен нығытырға, китапханаларҙы байытырға, мәсеттәрҙе тергеҙергә, мәҙәниәт йорттарын төҙөкләндерергә кәрәк. Спектаклдәге кеүек йәшәмәйек: ауыл балаһы ҡалаға килә лә, уҡырға, эшкә урынлаша алмай ҡайтып китә. Беҙ баланы фәҡәт ауылда ҡалһын өсөн генә үҫтермәйек. Ҡалаларға китһендәр, ҙур эштәргә тотонһондар».

Эйе, бына Бәләбәйҙә генә машиналар эшләү техникумы, ауыл хужалығы техникумы, медицина училищеһы бар, һамар архитектура академияһының филиалы һәм башҡорт дәүләт педагогия университетының филиалы асылған. Шунда уҡыусылар араһында башҡорттар күпме икән? Юҡ дәрәжәһендә. Ҡыҫҡаһы, урындағы ҡоролтай башҡарма комитеты менән «Аҡмулла» милли-мәҙәни ойошмаһы һәләтле балаларҙы эҙләп табыу һәм уҡырға урынлаштырыу, милли кадрҙар әҙерләү проблемаларын ла иғтибар үҙәгенә ҡуйһын ине.

Бәләбәйҙәге башҡорт гимназияһының хәле лә бик сетерекле булып сыҡты. Унда уҡыусыларҙың ни бары 30 проценты ғына башҡорт милләтенән. Гимназияның директоры Айгөл Биктимерова Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетена һәм Халыҡ мәғарифы министрлығына гимназияның статусын күтәреүҙе, төньяҡ-көнбайыштағы тирә-яҡ райондарҙан да килеп уҡый алһындар өсөн, төбәк интернат-гимназиһына әйләндереүҙе һорап мөрәжәғәт итте.

Бәләбәй педагогия училищеһында 1965 йылдан бирле тәүҙә – директор, аҙаҡ – уҡыу-уҡытыу эштәре мөдире, ә хәҙер мөғәллим булып эшләүсе Тәлғил Әминев бәйән итеүенсә, гимназияны баштан уҡ ошо төбәктәге интернат-гимназия итеп асыу ҡаралған булған. Уның кәрәклеген Тәлғил Исмәғил улы түбәндәгеләр менән аңлатты:

– Абруйлы ғалимыбыҙ Раиль Кузеев башҡорттарҙың меңәр йыллыҡ халыҡтар үҫеше дәүеренән үк тап Уралда – Бәләбәй һәм Бөгөлмә ҡалҡыулығында, Ыҡ бассейнында – нығыныуын ышаныслы итеп иҫбатланы. Үкенескә ҡаршы, бик күп тарихи сәбәптәр арҡаһында башҡорттар Бәләбәйҙән ситкә ҡыҫырыҡланған, ассимиляцияға дусар ителгән. Өфөгә яҡын 40–50 саҡрым аралыҡта башҡорт ауылдарын табып булмаған кеүек, Бәләбәйҙән 30–40 саҡрым алыҫлыҡта ла уларҙы күрмәҫһегеҙ. Быға хәҙерге быуын ғәйепле түгел – батша самодержавиеһының колонизаторлыҡ сәйәсәте шундай булған. Шулай ҙа Бәләбәй яҡтарында башҡорттар тырым-тырағай һаҡланып ҡалған. 5380 кеше – әҙ һан түгел. Әммә уларҙың күбеһе

үҙенең туған телен онотҡан. Тап ана шундайҙар телде өйрәнһен өсөн тел мөхитен булдырыу кәрәк. Юғиһә, гимназияла уҡыусыларҙың 30 проценты ғына башҡорт, уларҙың да күбеһе урыҫ, татар телле. Ошондай мөхиттә нисек тел өйрәнмәк кәрәк? Ҡала етәкселеге хәленән килгәнде һәм килмәгәнде лә эшләй. Мәсьәләне инде республика хөкүмәте хәл итергә тейеш. Беҙгә күптәнән буш вәғәҙәләр биреп киләләр. Интернат-гимназия бер Бәләбәй өсөн генә түгел, беҙгә Дәүләкән, Бишбүләк, Әлшәй, Миәкә һәм башҡа райондарҙан килеп уҡыйҙар. Шуны ла иҫәпкә алһын ине улар.

* * *

Ошо төбәктә бөгөнгә тиклем урыҫлашмай, татарлашмай һәм сыуашҡа әйләнмәй, башҡортлоғон һаҡлап алып ҡалған 6 меңгә яҡын милләттәштәребеҙ өсөн башҡорт телендә гәзит сығарыу мәсьәләһен дә көн үҙәгенә ҡуйырға ваҡыт килеп етте. Юғиһә, нисек итеп уларҙы Бөтә донъя башҡорттары Ҡоролтайы башҡарма комитетының «Ватандаш» журналын һәм «Ҡоролтай» сығаралашы даими баҫылған «Йәшлек» гәзитен уҡырға ылыҡтырмаҡ кәрәк? Нисек итеп магазиндағы башҡорт китаптарын алдырып уҡытырға, нисек ошо төбәктә әҙәби телде йәшәтергә?

*Балтас районында*

## МИШӘР БАШҠОРТТАРЫ

Йәмле йәй көндәренең береһендә, 1999 йылдың июль урталарында Балтас районы Үрге Ҡарыш ауылында Башҡортостандағы 1755–1756 йылдарҙағы ихтилал етәксеһе Батырша астырған мәҙрәсәгә 250 йыл тулыуға арналған ғилми конференцияла башҡорттоң бер этник төркөмөн тәшкил иткән мишәрҙәр, йәғни мишәр башҡорттары тураһында сенсацион асыш яһалды. Конференцияла абруйлы ғалим-профессорҙар Раиль Кузеев, Нияз Мәжитов, Ғайса Хөсәйенов, Әнүәр Әсфәндиәров, Ирек Аҡманов, Дамир Вәлиев, Нәзир Ҡолбахтин,

Марат Ҡолшәрипов, Рәшит Шәкүр, Салауат Галиндар ҡатнашты. Филология фәндәре докторы, профессор, Башҡорт дәүләт педагогия университетының урыҫ әҙәбиәте кафедраһы мөдире Рәйеф Әмиров ғилми йыйындың хөрмәтле ҡунағы булды.

Күренекле этнолог, профессор Раиль Кузеев ҡыҙыҡлы мәғлүмәткә иғтибарҙы йүнәлтте: башҡорт менән мишәр араһында бик тәрән мәҙәни уртаҡлыҡ бар. Уралда табылған археологик ҡаҙылма ҡомартҡыларҙа – ошо ике этник төркөмдөң кейем-һалымдарында, биҙәнеү һәм көнкүреш әйберҙәрендә ул асыҡ күренә.

Сөнки улар XV–XVII быуаттарҙан алып бергә көн итә. Хатта исемдәрҙәге «ас» элементы ла боронғо төрки халыҡтарыныҡына хас: «Балтас», «Ҡалтас»...

– Мишәрҙәр менән башҡорттарҙың этногенезы бергә булырға тейеш, – тине Раиль Ғүмәр улы, – ул да булһа шул Төньяҡ Кавказда барғандыр... Улар – яҡын халыҡтар. Һуңынан башҡорттар Уралда нығына, ә мишәрҙәр – Волга менән Ока араһында. Уларҙы айырыусы икенсе бер хәлваҡиға: мишәрҙәр XV быуаттан башлап христиан диненә күсә. XVI быуатта был сәйәсәсәт тағы ла нығыраҡ көсәйтелә: Петр Беренсе Указы буйынса йә улар православие диненә күсергә тейеш була, йә иһә Рәсәй дворянлығынан яҙалар...

Ғалим Өфөлә ана шул мишәр мырҙалары тураһында урыҫ телендә «Очерки истории татарского дворянства» тигән китап сығып килеүен дә хәбәр итте. Әйткәндәй, Раиль Кузеев менән Башҡортостан «Китап» нәшриәте директоры Ҡәҙим Аралбаевтың берлектәге ныҡышмалылығы һәм тырышлығы һөҙөмтәһендә күптән түгел генә донъя күргән Рәсәй Фәндәр академияһының беренсе мөхбир ағзаһы Петр Рычковтың баһалап бөткөһөҙ ҡиммәтле тарихи сығанаҡ булған «Топография Оренбургской губернии» (шулай уҡ урыҫ телендә) китабында ла Башҡортостан мишәрҙәре хаҡында мәғлүмәттәр күп.

Фольклорсы, профессор Салауат Галин да үҙенең ҡайһы бер фараздары менән уртаҡлашты. Мишәрҙәрҙең

бер өлөшө урыҫлашҡан, ә икенсеһе Урал төбәгендә төркиләшеп киткән, тине ул. Ғалим XIX быуат әҙәбиәтендә лә башҡорт-мишәр бөтөнлөгөнөң урын алыуын әйтте.

Башҡортостан ауылдарының тарихы тураһында китаптар серияһын нәшер итеүсе БДУ профессоры Әнүәр Әсфәндияров Башҡоростандағы мишәрҙәр хаҡында мәғлүмәттәр биреп, бер ғалимдар уларҙың уғыр телле булыуҙарын һәм мадъярҙарҙан (венгр) килеп сығыуын иҫбатларға тырышыуын, ә икенселәре, мишәрҙәр төркиҙәр нигеҙендә формалашҡан, тигән теорияны алға һөрөүен бәйән итте.

... Мишәрҙәр 1482 йылда үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылған. 1552 йылдан урыҫ батшаһы Иван Грозный яғында Ҡазанды баҫып алыуҙа ҡатнашҡандар. Батша хөкүмәте мишәрҙәрҙе Башҡортостан ерҙәрен колонизациялауҙа һәм XVIII быуаттағы башҡорт күтәрелештәрен баҫтырыуҙа ла йыш файҙалана. Батшаға күрһәткән хеҙмәттәре өсөн уларға түләүһеҙ ер бүленгән, ҡаҙнаға яһаҡ түләүҙән азат ителгәндәр, Рәсәй дворянлығына һәм мырҙалыҡҡа эйә булғандар һәм башҡа социаль-иҡтисади өҫтөнлөктәр менән файҙаланғандар. Ләкин кантондар бөтөрөлөү менән мишәрҙәр күп кенә өҫтөнлөктәрҙән мәхрүм ителгән һәм уларҙың хоҡуҡтары башҡа дәүләт крәҫтиәндәре (мәҫәлән, татарҙар) менән тиңләшкән, әкренләп мишәрҙәр айырым халыҡ булыуҙан да туҡтаған.

Ошоларҙы һәм мишәрҙәр тураһындағы бик күп башҡа мәғлүмәттәрҙе Әнүәр Әсфәндияровтың 1996 йылда баҫылған «Олатайҙарҙың бар тарихы» тигән китабынан да уҡып белергә мөмкин.

– Әммә мишәр халҡынан Рәсәйҙең данын күтәргән бынамын тигән ир-егеттәр ҙә үҫеп сыҡҡан, – тип өҫтәне Әнүәр Закир улы. – Шуларҙың береһе – Батырша. Рәсәйҙең көнсығышында Батыршаның тотҡан урынын беҙ һаман да баһалап еткермәйбеҙ әле...

Әлбиттә, Балтас районындағы йәмле тантаналарҙы тик Батырша һыны нурландырҙы, рухландырҙы. Бынан 250 йыл элек ул нигеҙ һалған мәҙрәсә – бөгөн Ғабдулла Ғәлиев, йәғни Батырша исемен йөрөтөүсе алдынғы урта

мәктәп. Унда – Батыршаға арнап таҡтаташ асылды. Мәктәптең коридорҙары тыуған яҡ тарихына бағышланған стендтар менән биҙәлгән. Салауат яуын һүрәтләгән карта ғына тотош стенаны алып тора. Ни тиһәң дә, Елдәк ҡәлғәһе бынан алыҫ түгел. Салауаттың һуңғы алыш урындарының береһе Нөркә – эргәлә генә. Бында, ғөмүмән, Башҡортостан тарихын һәм мәҙәниәтен өйрәнеүгә айырыуса ҙур иғтибар бирелә. Китапхана һуңғы йылдарҙа «Китап» нәшриәтендә донъя күргән баҫмалар менән тулы. Ун йылға яҡын ошонда китапханасы булып эшләүсе Нәсимә Хәйҙәрова былтыр һәм быйыл башҡорт телендә китаптарҙың бигерәк күп ҡайта башлауына, тарихсы ғалимдарҙың хеҙмәттәренә ихтыяжыдың ҙур булыуына, дәрестә лә йыш ҡулланылыуҙарына һөйөнөп бөтә алманы. Тәрбиә эштәре буйынса директор урынбаҫары, тыуған яҡ тарихын өйрәнеүсе һәм район гәзитендә даими рәүештә мәҡәләләр баҫтырыусы, ошо мәктәптә утыҙ йыл эшләүсе Наил Хажиев тырышлығы менән бихисап мәғлүмәттәр, документтар йыйылған. Хәҙер Батырша исемендәге тарихи музей асырға әҙерләнәләр.

Үрге Ҡырыш мәктәбенә ифрат егәрле һәм булдыҡлы кеше, һоҡланғыс педагог Рәмил Мансуров етәкселек итә. Ул Батыршаның исемен һәм идеяларын ауылға һәм мәктәпкә ҡайтарыу өсөн хәленән килгәнден бөтәһен дә эшләй. Сабыр һәм тыйнаҡ холоҡло булыуы, иҫ киткес ябайлығы, ихласлығы менән айырылып торған район хакимиәте башлығы Айрат Мәғзүмов та һәр яҡтан ярҙам итергә тора. Ауыл халҡы хәҙер Батыршаға һәйкәл асырға һәм мәсетте тергеҙергә хыяллана. Иншалла, улары ла булыр, тик түҙемлек кенә кәрәк. Академик, филолог-профессор, яҙыусы, «Ватандаш» журналы мөхәррире Ғайса Хөсәйенов әйтеүенсә, 20–25 йыл элек был ауылда Батыршаның кем икәнен дә белеүсе булмаған. Бөгөн иһә Ғайса Батыргәрәй улы ғына Батырша тураһында өс китап яҙҙы: «Письмо Батырши императрице Елизавете Петровне» (Өфө, 1993), «Ҡанлы илле биш» тарихи-документаль романы (Өфө, «Китап», 1996) һәм «Ил аҙаматтары» әҫәре (Өфө, «Китап», 1998). «Батыршаны

Батырша иткән әйберҙәр – ихтилалға өндәмәһе һәм батшабикәгә хаты», – тине академик.

Шулай итеп, иң тәүҙә – өндәмә тураһында. Уны яҙырға Батыршаны нимә мәжбүр иткән һуң? Быны асыҡлар өсөн 1999 йылдың башында Башҡортостан «Китап» нәшриәтенең ижтимағи-сәйәси редакцияһында донъя күргән «Законы Российской империи о башкирах...» йыйынтығын (төҙөүсеһе – тарих фәндәре кандидаты Фәрит Ғүмәров) асып ҡарайыҡ.

... XVIII быуатта батша хөкүмәте колонизаторлыҡ сәйәсәтен тағы ла аяуһыҙыраҡ итә: башҡорт ерҙәрен талау көсәйә, йәйләүҙәр, һунар биләмәләре тартып алына... 1753 йылдың 7 майындағы һәм 1754 йылдың 16 мартындағы Указдар менән хатта тоҙға яһаҡ һалына. 1734–1770 йылдарҙа Башҡортостанды колонизациялауҙың терәк пункты булған Ырымбур ҡалаһын төҙөү тураһында һәм Рәсәйҙең баҫҡынсылыҡ сәйәсәтен көсәйтеүсе башҡа Указдар ҡабул ителә. 1736 йылдың 11 феврале: Өфө өйәҙендә һәм башҡорт ауылдарында тимерлектәр төҙөү тыйыла. 1737 йылдың 7 майы: болала ҡатнашыусы меңәрләгән башҡорттарҙы алыҫтағы Рәсәй төбәктәренә күсерергә ҡушыла. 1740 йылдар аҙағында көсләп суҡындырыу киң йәйелдерелә, быының өсөн уларға төрлө өҫтөнлөктәр вәғәҙә ителә: православиеға күскән мырҙаларға һәм татарҙарға поместьелар һәм вотчиналар мәңгелеккә бирелә, суҡынғандарҙы рекрутлыҡҡа алмаҫҡа, Казан губернаһында мәсеттәр төҙөтмәҫкә, суҡынғандарға яҡын урында башҡорттарға мәсеттәр һалдыртмаҫҡа Указдар бирелә...

Ошондай бөткөһөҙ ыҙа-яфаларҙан халыҡтың сабырлығы юйылып, үс-асыуы ҡабара бара.

Ә хәҙер башҡорт ихтилалдары тураһындағы китаптар авторы, тарих фәндәре докторы, профессор Ирек Аҡмановтың Үрге Ҡарыш ауылындағы ғилми конференцияла һөйләгәндәренә ҡолаҡ һалайыҡ:

– 1755–1756 йылдарҙа Башҡортостан, Ҡаҙағстан, Урта Волга буйының бөтөн мосолман халыҡтарын ихтилалаға күтәреү һәм бойондороҡһоҙ дәүләт төҙөү өсөн тағы бер ынтылыш яһала. Нуғай даруғаһы Бөрйән олоҫо башҡорт-

тары ихтилалды башлаусылар була. Һуңынан уларҙы бүтән олоҫтарҙа ла күтәреп алалар. Башҡортостан ул дәүерҙә дүрт өлкәгә – Нуғай, Себер, Ҡазан, Оса даруғаһына – бүленә. Ихтилалды ойоштороусылар 1755 йылдың яҙында Себер даруғаһы Ҡарыш ауылы муллаһы Батыршаға баш күтәреүселәргә ҡушылырға тәҡдим итә. Ил гиҙгән мишәр муллаһының халыҡтың аһ-зарын йөрәге менән тойған ҡыйыу йөрәкле, тирә-яҡта ифрат ихтирамлы һәм юғары абруйлы кеше булыуын улар яҡшы белә һәм уның ярҙамында төньяҡ-көнбайыш Башҡортостанды ихтилалға күтәрергә теләй. 46 йәшлек Батырша ул саҡта ауыл муллаһы һәм мәҙрәсәнең мөдәрисе була. Уҡымышлы ир уҙаманы ихтилалдың ҡотолғоһоҙ икәнен аңлай һәм халыҡҡа туғыҙ битлек өндәмә яҙа. Юғары кимәлдәге ғилми хеҙмәт итеп аталырлыҡ өндәмәһендә Батырша халыҡтарҙың ҡот осҡос йәшәү шарттарына байҡау яһай, батша хөкүмәтен ҡолатыу һәм азат мосолман дәүләтен төҙөү ҡотолғоһоҙ икәнен дәлилләй. Бының өсөн бөтәһен дә берләшергә һәм көрәшкә күтәрелергә әйҙәй. Батша сәйәсәтенең төп маҡсаты – мосолман халыҡтарын ассимиляциялау, урыҫлаштырыу һәм милләт булараҡ юҡ итеү, тип асыҡтан-асыҡ яҙа. Ихтилалды изге һуғыш тип атай, беҙ йә көрәшергә, йә юҡ булырға тейешбеҙ, бүтән юл юҡ, ти ул. Көстәрҙең тигеҙ булмауын, әммә йыш ҡына ҡыйыулыҡ һәм тәүәккәллек еңеп сығыуын иҫкәртә. Изге һуғыш ҡорбанһыҙ булмай, ләкин бер нәмә лә бушлай бирелмәй, шәһит булғандарҙың йәндәре ожмахта рәхәтләнәсәк, тип өмөтләндерә.

Тик ихтилал ҡапыл тоҡанып китә. Бөрйән ырыуы ерҙәренең Талҡаҫ күле буйында алтын-көмөш эҙләп йөрөгән геолог Брагиндың 44 һалдаты менән ҡылған яуызлыҡтары, халыҡты рәхимһеҙ мәсхәрәләүҙәре Батыршаның өндәмәһендә тәғәйенләнгән ваҡыттан алда көрәшкә күтәрелергә мәжбүр итә... Батыршаның өндәмәһен уның уҡыусылары ауылдар буйлап тарата. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә бөтөн төньяҡ-көнбайыш Башҡортостан яуға күтәрелә. Ихтилал, нигеҙҙә, төньяҡ-көнсығышты, Нуғай даруғаһын ялмап ала. Көрәш уты Иҫке Балтас, Үрге

Ҡарыш тирәһендә лә көслө генә була, тине Ирек Ғайса улы, әммә ҡеүәтле күтәрелешкә әйләнмәй. Ойошҡанлыҡ етеңкерәмәй, Батыршаның һәм уның өйрәнсектәренең хаталары ла бәкәлгә һуға. Нисек кенә булмаһын, ихтилал тарихта үҙ урынын ала. Уның етәкселәре һәм көрәшселәре аяуһыҙ язалана.

Динен, ерен, халҡын яҡлап яуға күтәрелгән батырҙың ғаиләһе яртылаш суҡындырылып, яртылаш һәләк ителгәс, халҡы телһеҙ, ерһеҙ һәм танау-ҡолаҡһыҙ ғына түгел, ә йәнһеҙ ҡалдырылғас та, Батырша көрәште туҡтатмай: батшабикә Елизавета Петровнаға 100–130 биттәр самаһында ғәйепләү хаты яҙа. Ғайса Хөсәйенов нәшер иткән һары тышлы китапты ҡулыбыҙға алайыҡ: «Письмо Батырши императрице Елизавете Петровне».

... Ҡиммәтле был яҙма ҡомартҡыла Батырша XVIII быуат уртаһында башҡорттарҙың һәм мишәрҙәрҙең ауыр социаль-иҡтисади хәлен һүрәтләй, батша чиновниктарының урындағы халыҡты ҡыҫыуын һәм мәсхәрәләүен аныҡ миҫалдарҙа күрһәтеп иҫбатлай. Уларҙы ихтилалға килтереүсе сәбәптәр тип дәлилләй. Хат авторы быға тиклемге башҡорт ихтилалдары тураһында бер нисә тапҡыр хәтергә алып үтә, 1705–1711 йылдарҙағы ихтилал етәксеһе Алдар Иҫәкәевты халыҡ исеменән ыңғай баһалай. Ул батша хөкүмәтенең 1747–1754 йылдарҙа ҡабул иткән һәм башҡорттар менән мишәрҙәрҙең иҡтисади хәлен насарайтыуға килтергән Указдарҙың асылын фашлай. Батырша социаль-сәйәси мәсьәләләрҙе күтәреп сыға. Уның фекерләүҙәрендә дини-фәлсәфәүи, мораль-этик проблемалар киң сағыла.

Философ Дамир Вәлиев Батыршаның милли сиктәрҙе емереп сығып, төрлө милләт халыҡтарының ил, донъя күләмендәге һөйөклө улы һәм легендар батыры булып йәшәүен әйтте.

– Батыршаны мишәр этносына ғына бикләп ҡуйып булмай, ул азатлыҡ көрәшендәге донъяуи бәһлеүәндәр – Уралдағы Салауаттар һәм Кавказдағы Шамилдар затынан, – тине ул.

Һәм тағы шуны өҫтәп әйтке килә: Батырша беҙгә тап Башҡортостан мишәре булыуы менән ҡәҙерле. Әгәр башҡорт ере булмаһа, унда мәсеттәр һәм дин йәшәмәһә, әгәр яусыл һәм азатлыҡ һөйөүсән башҡорт халҡы ирек осҡонон дөрләтмәһә, Батырша ут булып тоҡаныр инеме лә, хәҙер Башҡортостан күгендә яҡты бер йондоҙ булып балҡыр инеме?

Конференцияла ҡатнашыусы ғалимдар Батыршаның үҙ дәүеренең иң уҡымышлы һәм иң алдынғы кешеләренең береһе – социолог, политолог, философ, филолог булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Ғабдулла Ғәлиевтың юғары ғилми һәм сәйәси кимәлдә яҙып ҡалдырған изге ҡомартҡылары – өндәмәһе менән батшаға хаты – шулай фекерләргә нигеҙ бирә. Эйе, шағир, публицист, ғалим-фольклорсы Рәшит Шәкүр раҫлауынса, Батырша – шиғырға, йырға, поэмаларға, легендаларға торошло шәхес. Рәшит Закир улы уға арнап яҙған бәйет тантанала һағышлы йыр булып яңғыраны:

Батырша ла тигән батыр ирҙе,
Таш зинданға япты батшалыҡ,
Батыршаның яҙған хатынан
Батшалыҡтар үҙе ҡаҡшарлыҡ...

Мон дауам итте. Ә минең күңелем ҡыуаныс менән тулды: батырҙарының һәм шағирҙарының ҡәҙерен белгән ил көс-ҡеүәтен туплаясаҡ әле, тағатылған хәтерен һәм юғалтылған тарихын ғына түгел, онотолған батырҙарын һәм тарҡатылған халыҡтарын берәмтекләп йыйып аласаҡ.

Быуаттар теҙемендә башҡорттар менән мишәрҙәр тығыҙ аралашып йәшәгән, бер үк кейемдәрҙе кейгән, бер үк аҙыҡ ашаған, ҡатын-ҡыҙҙары бер төрлө биҙәнеү әйберҙәрен таҡҡан, ир-егеттәре уртаҡ ғәскәр төҙөп, дөйөм халыҡ бәхете өсөн яу сапҡан. Ысынында улар ҡасандыр бер халыҡ булып ойошоуға яҡын булғандар. Тарих фәндәре докторы, профессор Нәзир Ҡолбахтин был хаҡта ошолай тине:

– Башҡортостан – ул башҡорттоң тыуған ере, ләкин шул уҡ ваҡытта бик күп халыҡтың да тыуған төйәге. Ике-өс быуат беҙ бер ерҙә, бер батша ҡулы аҫтында бергәләшеп йәшәйбеҙ, эшләйбеҙ, бергә язаланғанбыҙ, бергә еңгәнбеҙ...

Башҡорт ғалимы туғандаш мишәр халҡының Батырша кеүек үк дан һәм шөһрәт яулаған бүтән батырҙары – 1773–1775 йылдарҙағы крәҫтиәндәр һуғышы етәкселәре Абдулла Даушев һәм Пугачевтың дан ҡаҙанған баш полковнигы Бәхитәр Ҡанҡаев хаҡында бәйән итте.

– Улар араһындағы иң билдәлеһе – минең яҡташым, Ҡырмыҫҡылы районының Боҙаяҙ ауылынан Ҡәнзәфәр Усаев, – тине Нәзир Мырҙабай улы, – йөҙ башы, бригадир, йәғни баш полковник. 1773 йылдың декабрендә – 1774 йылдың ғинуарында бына ошо һеҙҙең тирәлә, Красноуфим, Көңгөр эргәһендә ихтилалға етәкселек итә. Ул Башҡортостан халҡына бигерәк тә шуның өсөн ҡәҙерле: ихтилал баҫтырылып, етәкселәр яза алғас, Ҡәнзәфәр Усаев Салауат һәм уның атаһы Юлай менән бергә утыҙ йылға яҡын Рогервикта, каторгала ыҙа сигә. Башҡорт халҡының арҙаҡлы улы Салауатты һуңғы юлға оҙатыусы, баш осонда йыназа уҡып, күҙен йомдороусы яҡташы, көрәштәше, фекерҙәше бына ошо мишәр полковнигы була.

Башҡортостан мишәрҙәре һәм Батырша тураһындағы яҙмаларымды Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Нияз Мәжитовтың телмәре менән тамамлап ҡуйғым килә:

– Мишәрҙәр бит ысын мәғәнәһендә XV–XVII быуаттарҙа ниндәйҙер ҙур халыҡ булып формалашҡан этник төркөм булған. XIX–XX быуаттарҙағы сәйәси шарттар арҡаһында мишәрҙәр бөтөн халыҡ булараҡ тарҡала, күп өлөшө татар халҡына күсә, байтаҡ өлөшө башҡортҡа әйләнә, шуға күрә башҡорттоң бер этник төркөмөн тәшкил иткән мишәрҙәрҙе һәм Башҡортостанда, Балтаста йәшәгән мишәрҙәрҙе лә мишәр башҡорттары тиергә хоҡуғыбыҙ бар. Сөнки республикала 1979 йылға тиклем булған халыҡ иҫәбен алыу буйынса Балтас районында 74 процент башҡорт йәшәгән. Ә 1989 йылдағы халыҡ иҫәбен алыу буйынса башҡорттарҙың һаны 22 процентҡа яҡын ғына тороп ҡалған. Әлбиттә, бында ниндәйҙер сер бар: ҡайҙа булған һуң башҡорттар? Ниндәйҙер кимәлдә мишәр башҡорттарының ил тарихын белмәүенең, үҙенең тамырҙарына һүлпән ҡарауының һөҙөмтәһелер был, тип тә уйлайым. Шуға район башҡорттарының

ҡоролтайы артабан һәр ауылдың, һәр ғаиләнең тарихын асыҡлауға бағышланған кисәләр, ғилми конференциялар ойоштороуҙы, мәктәптәрҙә ғалимдар менән осрашыуҙы үҙенең планына индерһен дә шуны даими рәүештә тормошҡа ашырһын ине, тигән уй бар. Татарға әйләнеп киткән мишәрҙе башҡортлаштырыу түгел минең теләгем, ләкин ата-бабалары быға тиклем үҙҙәрен башҡорт тип иҫәпләгән, тик ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында татарға әйләнгән, йәғни башҡортлоғонан баш тартҡандарға шуны әйтке килә: туғандар, милләттәштәр, һеҙҙең быуындарығыҙ, һеҙҙең балаларығыҙ, бүләләрегеҙ ниндәйҙер кимәлдә һеҙгә һәр ваҡыт үпкә белдерәсәк. Шуның өсөн, әйҙәгеҙ, тәүбә итәйек, үҙебеҙҙең тарихыбыҙға, быуындарыбыҙға, ҡаныбыҙға, милләтебеҙгә хыянат итмәйек...

## ҠАСАҠТАР

Төп халыҡҡа ҡаршы быуаттар буйына алып барылған этноцид, геноцид, мәжбүри ассимиляция, ерҙәрен һәм территорияларын тартып алыу, этносты бүлгеләү һәм күрше республика һәм өлкәләргә таратыу сәйәсәте генә етмәгән, замана афәте – миграция аяуһыҙ ҡыҫырыҡлай башланы.

**Башҡортостан Республикаһы буйынса халыҡ миграцияһы***

| Йылдар | Килеүселәр һаны | | Китеүселәр һаны | | Миграция үсеше | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 1997 | 99357 | 27831 | 88195 | 25601 | 11162 | 2230 |
| 1998 | 91772 | 26664 | 81361 | 24328 | 10411 | 2336 |
| 1999 | 91655 | 27509 | 80951 | 24665 | 10704 | 2844 |
| 2000 | 85142 | 25009 | 81152 | 24066 | 3990 | 943 |

*(БР Дәүләт статистика комитетының демография статистикаһы һәм халыҡ иҫәбен алыу бүлеге мәғлүмәттәре)

XVI быуаттың яртыһында Рәсәйгә ҡушылғандан бирле ябырылған ҡасаҡтар ағымы XX быуаттың аҙағында, XXI быуатҡа аяҡ баҫҡанда ла цивилизациялы форма алманы. Иң бай һәм иң тыныс, тотороҡло, асыҡ йөҙлө, шар асыҡ ишекле ҡунаҡсыл башҡорт иленә килмешәктәр бөгөн дә дан һәм

байлыҡ артынан, ер алырға ашығып, ашҡынып килә. Күскенселәр араһында тарихи ватанына ҡайтыусы башҡорттар ифрат әҙ. Башҡортостандың статистика идаралығы мәғлүмәттәре буйынса, 1992–1996 йылдарҙа ғына республикаға 6174 урыҫ, 11987 татар күсеп килгән һәм ... 4904 кенә башҡорт ҡайта алған. 1999 йылда күсенеүселәрҙең 16,2% – башҡорттар, 30,4% – татарҙар, 33,9% – урыҫтар, ҡалғаны башҡа милләт вәкилдәре. 2000 йылда күсенеүселәрҙең 40% – урыҫтар, 25% – татарҙар, 15–17% ҡына башҡорттар.

2000 йылда мәжбүри күскенселәрҙе урынлаштырыуға килгәндә, республикала бөтәһе 459 ғаилә (1110 кеше) төрлө райондарға һәм ҡалаларға таратылған. Ҡалаларға йәмғеһе 287 ғаилә (669 кеше) ҡабул ителһә, иң күбеһе Өфөлә урынлашҡан – улар 154 ғаилә (326 кеше).

Һунғы бер нисә йыл эсендә генә 11578 ҡасаҡ (5536 кеше ҡала ерендә һәм 4042 кеше – ауылдарҙа) тупланған. Милләттәр нисбәте түбәндәгесә: башҡорттар – 2130, урыҫтар – 2839, татарҙар – 4891, ҡалғандары башҡа милләттәр.

Был һандар һәм проценттар аша ҡайһы милләттең берләшеүе һәм көс туплауы, яңынан-яңы территориялар үҙләштереүе, ә ҡайһы этностың хәлһеҙләнеүе, тарҡалыуы, тарихи ерҙәрен юғалтыуы һәм кәмеүе айырым-асыҡ күҙаллана. Юғиһә, башҡорт ерҙәренә шул хәтлем ябырылыр өсөн урыҫ өлкәләрендә һәм Татарстанда ниндәй ҡыйралыш булған һуң, ниңә тарихи ватандарына ҡайтмайҙар? Тимәк, был шул турала һөйләй: суверенлы Башҡортостанда төп халыҡтың демографияһын һәм генофондын һаҡлау өсөн бер ниндәй хоҡуҡи акттар ҙа юҡ һәм эшләнмәгән дә. Тимәк, башҡорттарҙың интернациональ дәүләтендә улар үҙҙәре түгел, ә бүтәндәр нығыраҡ яҡлана, һаҡлана һәм үҫтерелә. Быуаттар буйы алып барылған ошо мәкерле сәйәсәт һөҙөмтәһендә башҡорттар үҙ республикаһында 22,965% ҡына тәшкил итә лә инде (урыҫтар – 37,754%, татарҙар – 28,957%).

Бына ошолай махсус рәүештә күбәйтелгән халыҡтар һуңынан Башҡортостан дәүләтселегенең, уның төп халҡының яҙмышын һәм үҙбилдәләнешен хәл итәсәк.

## ИКЕ ДУҪТЫҢ БЕРЕҺЕ ҠОЛ ТҮГЕЛ

«Хәл итә» башланылар ҙа инде. 1998 йылдың декабрендә БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай – депутаттары «Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының телдәре тураһында»ғы закон проектын тәүге уҡыуҙа ҡабул иткәс тә, Татарстан Республикаһы Дәүләт Советы (рәйесе Ф. Мөхәмәтшин) беҙҙең депутаттарға мөрәжәғәт менән ҡарар сығарҙы:

Хөрмәтле коллегалар, дуслар!

Сезнең «Башкортстан Республикасы халыклары телләре турында»гы закон проектын беренче укылышта татар теле статусын исәпкә алмыйча кабул итеүегез Татарстан Республикасы халкында киң ижтымагый кайтаваз тудырды.

Халыкларыбызның күп гасырлардан бирле килгән дуслык традициясе буенча һәм тугандаш республикаларыбыз арасында хезмәттәшлек турындагы договор нигезендә, Татарстан Республикасының закон чыгару һәм башкарма органнары Башкортстан Республикасының социаль-икьтисадый, мәдәни үсешенә һәм үз дәүләтчелеген үстерүгә юнәлдерелгән курсын яклыйлар.

Без, Татарстан Республикасы халык депутатлары, Башкортстан Республикасы Дәүләт Жыелышы-Корылтае кабул итә торган карарлар нәтижәсендә тугандаш халыкларыбыз арасындагы үзара мөнәсәбәтләрдә киеренкелек килеп чыкмавын телибез.

Хөрмәтле Башкортстан Республикасы Дәүләт Жыелышы-Корылтае депутатлары! Без, «Башкорстан Республикасы халыклары телләре турында» Башкортстан Республикасы законында Башкортстан Республикасында яшәүче күп милләтле халыкның шактый зур өлешен тәшкил иткән татар халкы теленең дәүләт статусы билгеләнер, дип ышанабыз.

*«Шәһри Казан», 1999 елның 20 гыйнвары.*

Унан тыш, Башҡортостан президентына ла баҫым яһалыуы тураһында күрше республика матбуғатында хәбәрҙәр баҫылып сыҡты:

*«Вечерняя Казань», 26.01.1999 г.*

«... По неофициальной информации, президент Татарии Минтимер Шаймиев и спикер республики Фарит Мухаметшин лично просили президента Башкирии Муртазу Рахимова максимально учесть национально-культурные интересы татарского народа при принятии закона... А накануне голосования, 20 января к депутатам башкирского парламента официально обратились Госсовет Татарии и Всемирный конгресс татар (главная татарская общественная организация, базирующаяся в Казани). Они призвали их придать статус государственного и татарскому языку во избежание напряженности «между двумя братскими народами».

*«Шәһри Ҡазан», 23.01.1999:*

Декабрь азагында Уфадан яңа коточкыч хәбәр килеп житте: Башкортостан Дәүләт Жыелышы «Тел турында»гы законны тикшереп, республиканың дүрт миллион халҡы теләгенә каршы килде һәм ике миллионга якын татар жәмәгатьчелегенең туган теленә дәүләт статусы бирүдән баш тартып, бу дәрәжәне бары тик башкорт һәм рус телләренә генә бирүне рәсмиләштерү юлында хәлиткеч адым ясады.

«Время и деньги», 20.01.99:

**Рафаиль Хакимов,** советник Президента РТ:

«Как показывает практика, вопрос о государственных языках всегда был чрезвычайно щепетильной проблемой. Достаточно вспомнить о том, насколько накалялась атмосфера в Молдове и Казахстане, когда там пытались внедрить лишь по одному государственному языку. Всем известно, сколько сил пришлось впоследствии приложить, чтобы поправить критическую ситуацию.

Сейчас, конечно, поздно сожалеть о том, что в далеком 1922 году обошлись без референдума, присоединяя к Башкирии два района с татарским населением. Но ведь можно понять и взволнованную интонацию тех, кто вспоминает о прошлом опыте «башкиризации» татарских школ и опасается повторения уже пройденного.

На мой взгляд, есть только один выход из создавшегося положения – поправка при рассмотрении законопроекта во втором чтении, где речь идет не о двух, а о трех государственных языках – башкирском, татарском и русском. Такой шаг со стороны законодателей был бы позитивно воспринят большинством башкортостанцев, которые ценят мир, взаимопонимание, доверие в своем доме».

Эйе, ғүмер буйы беҙҙән татар-башҡорт республикаһы яһарға хыялландылар, ғүмер буйы башҡорт телен татар теленең диалекты итеп күрһәтергә тырыштылар. Ленинға, Сталинға, Лигачевка, Ельцинға ошаҡ яҙҙылар... Был амбицияларға ҡаршы тороу Башҡорт автономияһының «атаһы», мөстәҡил башҡорт йөмһүриәтенең беренсе етәксеһе, юлбашсыбыҙ Зәки Вәлидигә еңел булмаған, Башҡортостан Республикаһының беренсе Президенты Мортаза Рәхимовҡа ла еңел түгел.

Әммә беҙҙең республика парламенты айыҡ аҡыл менән эш итте, ете үлсәп, бер киҫте – 21 ғинуарҙа Законды II һәм III уҡылышта тикшереп ҡабул итте.

Шулай итеп, Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡортостан Республикаһының Төп закондарын боҙоуға юл ҡуйылманы. Сөнки Рәсәй Конституцияһының 65-се статьяһында яҙылғанса, Башҡортостан бер ҙә, Татарстанға инә, тиелмәгән, ә, киреһенсә, улар икеһе лә, башҡа субъекттар менән бергә, Рәсәй Федерацияһына инә, тип яҙылған. Ә 68-се статьяһында, татар теле түгел, ә урыҫ теле дәүләт теле булып иҫәпләнеүе нығытылып ҡуйылған.

Хәҙер ҙә, быуатҡа яҡын ваҡыт үткәс тә, цивилизациялы мөнәсәбәттәр төҙөй алмағанбыҙ булып сығамы? Ниңә Башҡортостан менән Татарстан араһында 1997

йылдың 27 августында төҙөлгән Договор үтәлмәй. Уның 1-се статьяһында уҡ былай тип яҙылған бит:

«Һөйләшеп Килешеүсе Яҡтар дәүләт суверенитетын һәм территориаль бөтөнлөктө, тиң хоҡуҡлылыҡты һәм эске эштәргә ҡыҫылмауҙы үҙ-ара ихтирам итеү, кеше хоҡуҡтарын һәм төп азатлыҡтарын һаҡлау, ҡабул ителгән йөкләмәләрҙе намыҫлы үтәү принциптарын һәм нормаларын эштә ҡулланма итеп алып, дуҫ, яҡшы күршелек мөнәсәбәттәрен ҡорасаҡ һәм хеҙмәттәшлекте үҫтерәсәк.

Һөйләшеп Килешеүсе Яҡтар мөнәсәбәттәрҙең тотороҡлолоғон тәьмин итеү өсөн законлылыҡты, йәмәғәт тәртибен һәм именлекте һаҡлау буйынса үҙ-ара килешелгән кисектергеһеҙ саралар күрәсәк.»

Ярты тарихи Башҡортостан – тотош төньяҡ-көнбайыш – тик татар мәктәптәре, гәзиттәре һәм театрҙары, Ҡазан китаптары, саф татар мөхите менән уратып алынғанда, Башҡорт иленең үҙәгендә Татар дәүләт «Нур» театры төҙөлгәндә, татарса республика гәзиттәре, журналдары һәм китаптары нәшер ителгәндә, тағы нимә кәрәк икән? Ҡәрҙәштәребеҙгә ярарға шул хәтлем тырышҡаныбыҙ өсөн 1989 йылғы халыҡ иҫәбен алыу буйынса көнбайыш һәм төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының 20,7 проценты (180 мең) татар телен туған теле тип таныны бит инде. Был бәләкәй ҡорбанмы? Күпме ер «бүләк итеүебеҙгә» ҡарамаҫтан, тағы нинләй «ике район», тағы ниндәй «референдум» тураһында һүҙ бара?

Ә Татарстанда башҡорттар өсөн нимә эшләгәндәре бар әле? 1920 йылда Минзәлә һәм Бөгөлмә өйәҙҙәрен Татарстанға биргәндә, күрше республикала йәшәгән 355772 башҡорт ҡайҙа булып бөткән? Ниң уларға бер генә мәктәп тә, гәзит тә, театр ҙа асмағандар? Хәҙер унда «тере» ҡалған 20 меңгә яҡын башҡорт өсөн Татарстан парламенты, Дәүләт Советы һәм Президенты ниндәй саралар күрә йә иһә берәй нәмә эшләргә йыйынамы? Ни өсөн Татарстан менән Башҡортостан араһында төҙөлгән Килешеүҙәр гел бер яҡлы ғына – татар халҡын үҫтереү һәм татар дәүләтселеген нығытыу өсөн генә эшләй?

Беҙ бит ҡәрҙәштәребеҙҙең күңелен күреү өсөн хәлебеҙҙән килгәнден барыһын да эшләйбеҙ, хатта, үҙебеҙгә зыян килтереп булһа ла. Мәҫәлән, Башҡортостан дәүләт «Китап» нәшриәтендә татар телендә татар китаптарын нәшер итеү бик ныҡ артҡан: 1998 йылда был үҫеш 33,3% тәшкил итһә, 2000 йылда 46,1%-ҡа күтәрелгән. Шул уҡ ваҡытта башҡорт китаптарын нәшер итеү 1999 йылда 22,16%-ҡа һәм 2000 йылда 8,3%-ҡа кәмегән. (Башҡортостан Республикаһының Дәүләт китап палатаһының 2001 йылдың 19 февралендә БР Матбуғат һәм киң информация саралары министрлығының коллегияһында биргән рәсми мәғлүмәтенән алынды).

Ә Татарстан Республикаһы Яр Саллыһында ғына йәшәгән 10 мең башҡорт өсөн дә бер нәмә эшләгәне юҡ, уларҙың һоранып йөрөп асҡан йәкшәмбе мәктәбен генә лә китаптар менән тәъмин итә алмайҙар. Сөнки Татарстанда китап түгел, башҡортса гәзит тә сыҡмай. Ә бит Яр Саллыһы башҡорттары Милли-мәҙәни автономия иғлан иткән. Шул хәтлемгә барғас, закондар үтәлешен күҙәтергә кәрәктер. Сөнки 1996 йылдың 17 июнендә ҡабул ителгән «Милли-мәҙәни автономиялар» тураһындағы закондың «Милли-мәҙәни автономияның финанс-иҡтисад нигеҙе» тигән V главаһында, милли-мәҙәни автономияның эшмәкәрлеген федераль бюджет, автономия иғлан ителгән РФ субъекты бюджеты һәм урындағы бюджет финанслай, тиелгән. Тимәк, Яр Саллыһы автономияһының Башҡортостандан түгел, ә өс кимәлдән – Мәскәүҙән, Ҡазандан һәм иң тәүҙә Яр Саллыһы хакимиәтенән финанстар һорап, милли-мәҙәни ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереүҙе талап итергә тулы хоҡуғы бар. Әйтәйек, 1999 йылда ғына күп һандағы милли-мәҙәни автономиялар ихтыяждарына бөтә Рәсәй буйынса 200 млн һум аҡса тотонолған (Независимая газета, 08.02.2001).

Ниңә Башҡортостан ғына федераль бюджетҡа икеләтә һалым түләргә тейеш әле? Мәскәү Башҡортостандан һалымды ҡайырып ала бит. Һәм Ҡурған, Һамар, Һарытау, Силәбе, Свердловск һ. б. бик күп сит өлкәләрҙәге мил-

ләттәштәребеҙҙең милли-мәҙәни ихтыяждарына бер тин бүлмәй. Татарстан ғына ошонан күпме ота: ҡасандыр Татарстанда ҡалдырылған ярты миллион башҡорт өсөн ҡыл да ҡыбырлатмай йәшәй һәм ул башҡорттар хәҙер Татарстан картаһынан эҙмә-эҙлекле юҡҡа сығып бөтөп бара.

Бөткөһөҙ байрамдарҙа Өфө-Ҡазан юлын тапаған зыялыларыбыҙ, сәйәсмәндәребеҙ ниңә ошо мәсьәләләрҙе ҡабырғаһы менән килтереп ҡуймай икән? Бигерәк тыйнаҡ шул беҙ...

Ә бына бүтәндәр, ғәзиз яҡташыбыҙ булып та, үҙ иленең уңыштары өсөн ғәрләнеп йәшәй.

Татарстандың атҡаҙанған сәнғәт эшлеклеһе, 1990 йылдан алып Татарстандың халыҡ депутаты һәм Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, беҙҙең Илеш районы егете Роберт Миңнуллин 1999 йылда Ҡазанда нәшер ителгән «Мин – нечкә күңелле сәячәтче» исемле китабында былай тип эсе бошоп яҙған:

«... Күптән түгел Бакалы районында өр-яңа зур куәтле телевышка куелды. Хәзер Татарстанның алты районы Уфа тапшыруларын һәм НТВ программаларын карый башлады. Бу безне аҙ булса да гаръләндерергә тиеш. Киресенчә, безнең үзебезгә Башкортостанның татар районнары карарлыҡ һәм тыңларлык радиотапшырыулар оештырырға кирәк. Бу мәсьәләдә безнең төгәл уйланылган идеологиябыз булырға тиеш...»

Башҡортостанда ниндәйҙер «татар райондарын» уйлап сығарыу өсөн ысынлап та «нескә күңелле сәйәсмән» булырға кәрәктер ул.

... Ошоларҙың бөтәһен күҙаллаһаң, ирекһеҙҙән 1991 йылдың 16 авгусы хәтергә килеп төшә. Ул көндө Башҡортостан Совет Социалистик Республикаһы тормошонда мөһим ваҡиға булды – тарихи документҡа ҡул ҡуйылды. Башҡорт ССР-ы менән Татарстан ССР-ы араһында Дуҫлыҡ һәм хеҙмәттәшлек тураһындағы Килешеүгә ул ҡуйыу тантанаһынан һуң ике республика етәкселәре Минтимир Шәймиев менән Мортаза Рәхимов журна-

листар менән матбуғат конференцияһы уҙғарҙы. Мортаза Ғөбәйҙулла улы шунда, инеш һүҙендә, былай тигәйне:

– Үҙ-ара килешеү төҙөү беҙҙең, башҡорт һәм татар халыҡтарының, быуаттар буйы нығытылып килгән дуҫлыҡ мөнсәбәттәренең тәбиғи дауам ителеше ул. Бының менән дәүләт-ара бәйләнешкә, хеҙмәттәшлеккә күпер һалынды.

Матбуғат конференцияһында ике республиканы ла борсоған милләт-ара ҡайһы бер аңлашылмаусанлыҡтарға ла мөнәсәбәт белдерелде. Мин үҙем күреп, үҙем ишеткәндәрҙе ҡыҫҡаса ғына бәйән итмәксемен.

**М. Шәймиев:**

– Ике туғандаш халыҡ был Килешеүҙән башҡа ла дуҫлашып һәм килешеп йәшәне, бөгөн дә йәшәй һәм йәшәйәсәк. Әммә ике ил араһындағы быға тиклем ирешелгәндәрҙе хоҡуҡи нигеҙҙә нығытыуҙы тормош үҙе ашыҡтырҙы. Йәмғиәтте киң демократлаштырыу шарттарында беҙҙең республикалар территорияларында йәшәүсе һәр кешенең, бигерәк тә айырым милләт вәкилдәренең ихтыяждары өҫкә ҡалҡып сыҡты. Ошоларҙы иҫәпкә алып, бөтә көсөбөҙҙө ике республиканың суверенитеттары, беҙҙең дәүләттәр араһындағы дуҫлыҡты нығытыуға йүнәлтәсәкбеҙ. Килешеүҙең төп мәғәнәһе шунда.

**Һорау:** Юридик, иҡтисади, сәйәси мәсьәләләрҙең ҡайһыһылыр Килешеүҙә өҫтөнлөк итәме?

**М. Рәхимов:** Ике туғандаш халыҡтың үҙ-ара мөнәсәбәттәре тарихи үҫешкән. Һәм, әле килеп, уларҙы ниндәйҙер айырым мәсьәләләргә генә ҡайтарып ҡалдырып, сикләргә йыйынмайбыҙ. Килешеү төҙөп, үҙ-ара дуҫлыҡҡа һәм хеҙмәттәшлеккә юридик көс бирҙек.

**Һорау:** Ошо Килешеүҙән һуң киләсәктә ниндәй өлкәләрҙә айырым килешеүҙәр төҙөләсәк?

**М. Шәймиев**: Килешеүҙең һәр пункты дәүләт кимәлендәге башҡа килешеүҙәрҙе әҙерләүҙе һәм имзалар менән нығытыуҙы күҙҙә тота. Иң беренсе нәүбәттә, экономик хеҙмәттәшлек тураһында килешәсәкбеҙ һәм унан һуң беҙҙең халыҡтар өсөн тағы ла бер бик мөһим мәсьәлә – мәҙәниәттәребеҙҙе, телдәребеҙҙе үҫтереү.

**Һорау:** Эйе, ике халыҡтың да дөйөм проблемалары етерлек, Башҡортостандағы Татар ижтимағи үҙәгенә һәм, атап әйткәндә, ул уҙғарған «Ыҡ йылғаһы – Берлин стенаһы» акцияһына мөнәсәбәттәрегеҙ ниндәй?

**М. Шәймиев:** ТИҮ менән быға тиклем таныш түгел инем. Әммә күптән түгел генә уның лидеры Рамазанов Ҡазанда булды һәм минең менән осрашты. Беҙҙең арала бик яҡшы һөйләшеү булды. Күп йәһәттән айыҡ фекер йөрөтөүе менән оҡшаны ул миңә. Плюрализм шарттарында бер генә фекергә килеү ҡыйынлашты хәҙер. Төрлө хәрәкәттәр, ойошмалар менән эшләргә, хеҙмәттәшлек итергә кәрәк. «Ыҡ йылғаһы – Берлин стенаһы» акцияһын мин хупламайым. Унда дуҫлыҡ байрамы, һабантуй уҙғарыу өсөн йыйылырға кәрәк, ә бындай лозунгылар һәм саҡырыуҙар менән түгел. Килешеү бындай эштәрҙе тейешенсә баһалау өсөн ҙур хоҡуҡтар бирә. Бөтә саралар ике халыҡ араһындағы дуҫлыҡты нығытыуға хеҙмәт итергә тейеш.

**Һорау:** Татарстан матбуғатында, әйтергә кәрәк, рәсми баҫмаларҙа күптән инде Башҡортостандың эске эштәренә ҡыҫылыу бара, бигерәк тә милләт-ара мөнәсәбәттәрҙә һәм территориялар мәсьәләһендә. Был ике халыҡтың дуҫлыҡ мөнәсәбәттәренә тап төшөрә. Ошоларға Президенттың мөнәсәбәте ниндәй?

**М. Шәймиев**: Президент булып һайланғас, журналистар менән матбуғат конференцияһы уҙғарҙым. «Миләт-ара мөнәсәбәттәр – иң изге, иң ҡәҙерле һәм иң нескә тойғолар, белмәгән көйө ҡағылмағыҙ уларға», – тигәйнем шунда. Әле килеп, әйтелгәнде инҡар итә алмайым. Шуға ла үҙебеҙҙә тейешле документтар әҙерләйбеҙ. Был мотлаҡ кәрәк. Дөйөм алғанда, мәҙәниәтте күтәрергә кәрәк. Демократияға әҙер булмай сыҡтыҡ. Бөгөнгө Килешеү көсөргәнешлекте кәметеүгә булышлыҡ итәсәк.

... Шулай итеп, бынан ун йыл элек аҡ теләктәр менән ҡабул ҡылынған пак ниәттәргә бөгөн дә тап төшмәһен һәм татар менән башҡорт мөхите киләсәктә лә тик хоҡуҡи, цивилизациялы юлдан атлаһын ине.

## БЕРӘҮ ЯНА...

Үҙ илебеҙҙә әсә телебеҙҙе ғәмәлләштереүгә ҡаршылыҡтың ни тиклем көслө һәм рәхимһеҙ булғанын тағы ла нығыраҡ аңлау өсөн яҡындағы 90-сы йылдарҙа ғына уның өсөн йәнтәслим көрәшеүсе заманабыҙ Аҡмуллаһы – Мөхәммәт ағай Исҡужиндың яҙмышына һәм эшмәкәрлегенә күҙ һалайыҡ.

... Ул 1927 йылда Көйөргәҙе районының Урта Мотал ауылында, тарихи Кинйә ауылынан өс саҡрым ғына алыҫлыҡта, крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Һуғышҡа тиклем 4 кенә класты башҡортса бөтөргән. 5-се класты йыраҡ түгел Васильевка ауылында русса уҡыған. 6-сы класта Абдул ауылында ул ваҡытта уҡ яртылаш татарлаштырылған мәктәптә «белем» алған. Артабан 1944 йылда уларҙың ғаиләһе ситтә бәхет эҙләргә, Үзбәкстандың Сәмәрҡәнд өлкәһенә күсеп китә. Инде хәҙер үзбәксә уҡырға тура килә уға. 1947 йылда Кәттәҡурған ҡалаһында педагогия училищеһын тамамлап, үзбәк балаларын уҡыта башлай. 1954 йылда Сәмәрҡәнд дәүләт университетының физика-математика факультетының физика бүлеген тамамлай, 1963 йылда, ниһәйәт, Башҡортостанға, Өфөгә ҡайтып, 210-сы заводта ете-һигеҙ йыл инженер-конструктор булып эшләй. Бына ошо осорҙа Мөхәммәт Исҡужин, башҡортса уҡый алмаған бик күп милләттәштәре кеүек үк, исмаһам, инде балалары өсөн Өфөлә милли мәктәп асыу теләге менән яна башлай. Ул ваҡытта Рәми Ғарипов, Ноғман Мусин, Йыһат Солтановтар ошоноң өсөн көрәшеп йөрөй. Бына улар, йәғни баш ҡалалағы 91-се мәктәптең башҡорт телле ата-әсәләре, Мөхәммәт ағайҙы – башҡорт мәктәбен ойоштороусы вәкил, ә Иҙел Агишевты уның урынбаҫары итеп һайлайҙар. Башҡорт интеллигенцияһы вәкилдәренең 20-се мәктәпте астырыу өсөн йөрөгәндә нindәй бөткөһөҙ ҡаршылыҡтарға осрауҙары, төрлө кәмһетелеүҙәргә һәм мәсхәрәләнеүҙәргә дусар ителеүҙәре, нисек эҙәрлекләнеүҙәре хаҡында тәфсилләп һөйләп тороуҙың кәрәге лә юҡ.

Мөхәммәт Исҡужин ошо мәктәптә 16 йыл өлкән кластарҙа физика һәм математика уҡыта. Пенсияға сыҡҡас

та, 1989 йылдан алып «Урал» үҙәгендә халыҡ мәғарифы буйынса инструктор булып эшләй. Башҡорт йәштәре иттифағының мәғариф йүнәлешен етәкләй. Унын Черниковкалағы бер мәктәптә нисек башҡорт кластары булдырыуы һәм башҡорт балалары өсөн балалар баҡсаһы төҙөтөүе тураһындағы тарих бигерәк ғибрәтле.

... Тәүҙә улар рәссам Әлфәт Ҡобағошов менән Өфөнөң Киров районында балалар баҡсаһы ойоштороу артынан йөрөйҙәр – килеп сыҡмай. РОНО мөдире Лидия Мурманская ҡаршы була.

– Һеҙ милләтсе! – ти ул Исҡужинға. – Айырым милләттәр өсөн балалар баҡсалары булмай!

Аптырағас, беҙҙең вәкилдәр ул ваҡыттағы Киров район башҡарма комитеты рәйесе Юрий Деминға инәләр.

– Нимәгә кәрәк улар? – тип ғәжәпләнә Демин. – Демократия тигән булып ҡына кәрәк булды бит улар, быға хәтлем булмаған, бынан һуң да кәрәк булмаҫ. Үтә торған шау-шыу...

Беҙҙең «өлкән ағай»ҙарҙың ошондай «эшмәкәрлеге» хаҡында «Ағиҙел» журналында яҙылып сыҡҡандан һуң, Деминды Башҡорт иленең иң юғары власына – Юғары Советҡа һайлайҙар! Ошо уҡ кешенең тәүҙә суверенитетты ла дөрөҫ аңламай, ҡаршы көрәшеүе, башҡорт флагы элгән өсөн Рәсүл Арыҫлановты ҡурҡыныс енәйәттә ғәйепләүгә барып етеүе тураһында халыҡ яҡшы белә инде.

... Ә бына Калинин РОНО-һы мөдире Аида Ишмаева «Урал» БХҮ инструкторын бик ыңғай ҡабул итә.

– Инорста башҡорттар күп, – ти ул. – Шунда эшләргә кәрәк.

Ә Черниковкалағы 15-се балалар баҡсаһының хужаһы – УМПО. Унын мәктәпкәсә учреждениелар идаралығы бар. Шунын етәксеһе Крючкова менән һөйләшеп ҡарай Мөхәммәт ағай. Тегеһе яҡын да килмәй:

– Инорста балалар баҡсалары ныҡ тулған, башҡорт төркөмдәрен асыу мөмкин түгел!

Ул саҡта айырым баҡса түгел, ә төркөмдәр асыу тураһында ғына һүҙ бара. Крючкова ҡәтғи ҡаршы килһә лә, Исҡужин үҙе баҡсалар буйлап һорашып йөрөй башлай.

316-сы бақса мөдире, йыйылыш үткәрҙек, теләүсе юҡ, ти. Бүтән ерҙәрҙә лә шулай килеп сыға. 13 баҡсала бер генә әсә балаһын башҡорт төркөмөндә тәрбиәләргә теләй, тип яуап бирәләр. Аптырағас, Мөхәмәт ағай 59-сы баҡсаға киске 5-тәргә үҙе бара. Белешә торғас, бер сәғәт эсендә 5–6 кешенең теләүе асыҡлана. Исемлеккә ҡул ҡуялар. Ойоштороусы дәртләнеп китә – бына бит, теләүселәр бар! Тимәк, уны алдағандар. Ҡыҫҡаһы, ике-өс аҙна йөрөп, 315-се, 58-се, 59-сы баҡсаларҙа 150 кешенең ризалығын ала. Йәнә УМПО-ға, идаралыҡҡа йүнәлә. Ҡала РОНОһынан, йә Халыҡ мәғарифы министерствоһынан рөхсәт алып килергә ҡушалар был юлы. Алып килә. Уғаса Крючкова отпускыға китә.

– Юҡ, башҡорт төркөмдәрен асмайбыҙ, – ти ярҙамсыһы. – Сөнки ул баҡсаларҙың мөдирҙәре башҡортса белмәй!

Бына ул бөйөк рус шовинизмы! Уға ҡаршы көрәшеүе ҡот осҡос ауырға төшә. Ул саҡта партия үҙ көсөндә әле. Мөхәммәт Исҡужин УМПО-ның партком секретарына мөрәжәғәт итә – идаралыҡ, нигеҙҙә, шул парткомды тыңлай. Унда ла йыйылыш үткәреп, асмаҫҡа, тигән ҡарарға киләләр. Профком да хупламай.

Мөхәммәт ағай был хаҡта бик әрнеп иҫкә ала:

– Мин һаман даулашам, хәҙер инде ата-әсәләр йөрөй башланы.

УМПО идаралығы, йәғни Крючкова менән методист Палаева, контрһөжүмгә күсә – ата-әсәләр теләмәй, тип 315-се баҡсала йыйылыш үткәрергә йыйына. Исҡужин был хаҡта осраҡлы рәүештә генә белеп ҡала. Килә, сығыш яһай, үҙенсә аңлатып бирә. Шунан Палаева һөйләй, төрлө сәбәптәр табып, ата-әсәләрҙе төңөлтөргә тырыша. Әммә йыйылған халыҡ бирешмәй, бөтәһе лә Исҡужинды яҡлай, хатта бер рус ҡатыны килеп, мин дә баламды башҡорт төркөмөндә тәрбиәләргә теләйем, башҡортса белһен, тип белдерә.

Иртәгеһен Мөхәммәт ағай үҙенең өҫтөнән партия өлкә комитетына ялыу ебәрелеүен һәм, Исҡужинды, ғөмүмән, балалар баҡсаһына яҡын йөрөтмәҫкә, тигән күрһәтмә

бирелеүен ишетә. Был УМПО-ның партком эше инде! «Урал» үҙәге рәйесе Рәшит Шәкүргә лә, Мөхәммәт Исҡужин милләтселек, шовинизм менән шөғөлләнә, тип ялыу яҙыла. Баҡтиһәң, теге йыйылыш бөткәс тә, Палаева, хәле бөтөп, партком секретары Рәшит Насировтың өйөнә барған:

– Ҡотҡарығыҙ, юғиһә, Ҡарабах!

Ниндәйҙер методист Палаева үҙ илендә йәшәгән башҡортҡа ҡаршы бына ниндәй Ҡарабах ойоштороп маташҡан! Рәшит Насиров та эшмәкәрлеген етеҙ йәйелдергән.

Шунда Исҡужинды өлкә комитетҡа саҡырып алып, «милләтсе», «экстремист» ярлығы тағалар. «Урал» үҙәгендә лә бик ныҡ эләгә үҙенә. «Эшкәртеү» ижтимағи-сәйәси үҙәктә дауам ителә. Егерме-утыҙлаған интеллигенция вәкилдәренең алдына килтереп баҫтырыла ағайыбыҙ. Шунан коммунист Рәшит Насиров сәғәт ярым унын өҫтөнә бысраҡ ҡоя. Ниһайәт, «милләтсе»гә һүҙ бирәләр – ул бөтә документтарын күрһәтеп, нимә эшләп йөрөгәнен һөйләп бирә. Теге йыйылышта «Башҡортостан» гәзите журналисы Гөлсирә Ғиззәтуллина ла ҡатнашҡан була – ул да Черниковкала йәшәй һәм балаһын башҡорт төркөмөнә бирергә теләй. Әле Гөлсирә сығыш яһап, йыйылышта Мөхәммәт ағай Исҡужиндың үҙен шундай тыныс тотҡанын, ата-әсәләрҙең уға шундай ышанғанын һөйләп бирә.

– Ғәйеп шунда, ул дөрөҫөн һөйләне, ата-әсәләр ҙә уға ныҡ таяндылар, яҡланылар, – ти ул.

Эштең этнәкәһен йыйылған халыҡ та аңлай инде, үҙҙәренең фекерҙәрен әйтәләр. Насиров сәғәт ярым башын да күтәрмәй оялып ултыра.

– Мөхәммәт Ғәлиевич, иртәгә миңә килегеҙ, – тип үтенә һуңынан.

Исҡужин үҙенә ҡаршы тағы нимәлер ойошторғандарын һиҙеп, унда Халыҡ мәғарифы министерствоһы, ҡала РОНО-һы, Калинин РОНО-һынан вәкилдәр менән бергә бара. Килһәләр, халыҡ ҙур залға йыйылған, өҫтәлгә диктофон ултыртылған. Сценарий алдан әҙерләнелгән.

Парткомдың пропаганда бүлегенең йыйылышы икән. Бер татар, бер урыҫ, бер украин сығыш яһай. Балалар баҡсаһында башҡорт бүлеген асыуға бөтәһе лә ҡаршы:

– Был дөрөҫ түгел, был милләтселек, шовинизм! – Тағы әллә нимәләр...

Башҡорт ерендә ирәйеп китеп йәшәгән бөтә интернационалистар үҙ илендә меҫкен хәленә төшөрөлгән башҡорт «милләтселегенә» ҡаршы бына нисек берҙәм көрәшә!

Әммә Исҡужин менән килгән вәкилдәр – мәғариф министерствоһы инспекторы Владимир Ширишов, методист Роза Әминева, Калинин район комитетынын вәкил, Калинин РОНО-һы мөдире Аида Ишмаева, ҡала РОНО-һы мөдире Салауат Монасипов – «шовинист»ы яҡлап сығалар һәм унын хаҡлы икәнен иҫбат итәләр. Насиров шунда бөтәһе алдында Исҡужиндан ғәфү үтенә:

– Ғәфү итегеҙ, һеҙ балалар баҡсаһына барып йөрөй алаһығыҙ...

Асырға рөхсәт юҡ әле! Өлкә комитетынан, министерствонан, РОНО-нан – бөтә ерҙән рөхсәт бар. Бары УМПО ҡаршы! Тик бер ни тиклем ваҡыттан һуң ғына УМПО администрацияһының берлектәге йыйылышы башҡорт балалары өсөн 240 урынлыҡ айырым баҡса асырға ҡарар ҡабул итә. Декабргә тиклем теләүселәр исемлеген төҙөргә ваҡыт бирәләр. Ни хәтле тапһағыҙ, шул тиклем башҡорт төркөмдәре буласаҡ, тиҙәр.

Исҡужин үҙенең фекерҙәштәре – Азат Камалов, Фәсхетдин Илбудин һәм Тимерхан Миңлеғәлиевтар менән ай ярым эсендә 240 ғариза йыя. Етәкселеккә күрһәткәс, етте-етте, әле үҙебеҙ 50 кешегә урын бирәбеҙ, тиҙәр. Исемлекте һорап алалар. Бының сираттағы хәйлә икәнен кем белһен инде! Исемлекте биреүҙәре була, 37-се йылдағы һымаҡ, ата-әсәләрҙе эҙәрлекләү башлана. Ҡурҡытып, янап, кирегә күндерергә тырышалар, саҡыртып әрләйҙәр. Һөҙөмтәлә 240 кешенең 150 генәһе үҙ фекерендә ҡала. Ҡалғандары кире уйлай.

Ләкин шуныһы, беҙҙәге «интернационалистар» ысын Ҡарабах сығарырға нисек кенә тырышмаһын – баҡса

барыбер асыла! 1990 йылда 329-сы балалар баҡсаһы эшләй башлай. Әлеге көндә унда биш башҡорт төркөмө эшләй. Шуныһы үкенесле, Мөхәммәт ағай Исҡужин әйтеүенсә, былтыр тағы ике төркөм асыу мөмкиинлеге булған, тик рус төркөмө итеп асҡандар. Баҡсала бөтәһе 12 төркөм эшләүен иҫәпкә алһаҡ, шуның яртыһы ла юҡ бит! Ә 24 тәрбиәсенең 20-һе башҡорт. Әгәр ҙә баҡсаның мөдире, ошо тәрбиәселәр башҡорт төркөмдәрен күберәк ойоштороуҙы тырыштырмаһа, Калинин РОНО-һы, ҡала РОНО-һы һәм халыҡ мәғарифы министерствоһы берәй нәмә эшләмәһәләр, ары үҫтереүе ҡыйын буласаҡ.

– Беҙҙең милләт киләсәге – балалар баҡсаларында, мәктәптәрҙә, – тип Мөхәммәт ағай бик дөрөҫ әйтте.

Милләттәштәр, шуны бөтәбеҙ ҙә аңлаһаҡ икән. Юғиһә, беребеҙ эшләгәнде икенсебеҙ юҡҡа сығарып торһа, нимәгә генә килербеҙ икән?

Ә Мөхәммәт ағай, шулай ҙа, бик бәхетле кеше. Эт күрмәгәнде күрһә лә... Сөнки балаларының балалары хәҙер яңғыратып башҡорт телендә һөйләшә, бик күп фекерҙәштәре менән ул көрәшеп астырған башҡорт төркөмдәрендә уҡый һәм тәрбиәләнә. Ә бит улар ҙа милләтебеҙ киләсәге. Уның ҡурайсы улы Рәмил Исҡужин ысын мәғәнәһендә милләтебеҙ ғорурлығы. Таланты менән тамашасыларҙы шаҡ ҡатырған ҡурайсы. «Карауанһарай» ансамбле солисы Рәсүл Ҡарабулатов – Рәмилдең уҡыусыһы!

Әйткәндәй, Мөхәммәт Исҡужин шул уҡ Черниковкала, ДОК-та, 121-се мәктәптә башҡорт кластары астырған, 14-се баҡсала башҡорт балалары өсөн түләүле әҙерлек төркөмө ойошторған.

Бер уйлаһаң, Мөхәммәт Исҡужинға шул хәтлем интегергә кәрәк инеме? Исеме Башҡортостан булған илдә башҡорттар өсөн мәктәптәр, баҡсалар астырыу өсөн шул тиклем көрәшергә тейешме беҙ? Үҙ илебеҙҙә йәшәмәйбеҙме ни? Башҡорт илендә башҡорттар үҙҙәре кем хәлендә?

Дәүләт именлеге министерствоһында эшләүсе бер подполковниктан, беҙҙә диссиденттар булғанмы, тип һорағаным хәтерҙә. Ул көлөмһөрәп:

– Сахаровтар беҙҙә булмаған инде! – тип яуап биргәйне.

Ә мин хәҙер үҙемдең шундай ахмаҡ һорау биреүемдән көләм. Тотош халыҡ үҙ илендә, үҙ ерендә ситкә тибелеп, хоҡуҡтары ҡыйырһытылып, ишетмәһен өсөн – ҡолағы, өндәшмәһен өсөн теле ҡырҡылғанда, тотош халыҡ диссиденттарға әйләндерелгәндә, был айырым күренеште кем шәйләһен инде?!

(«Йәшлек», 11 февраль, 1993 й.)

... Әммә ил ағаһының мажаралары бының менән генә тамамланманы. 1995 йылдың август айы. Өфөлә халыҡ Мәғарифы мәсьәләләре буйынса республика кәңәшмәһе бара. Элекке Министрҙар Советының ҙур залы. Фойела художестволы әйберҙәр, сувенирҙар, картиналар, мәктәпкә кейем-һалым, дәреслектәр һәм башҡа төрлө бик күп күргәҙмәләр ойошторолғайны. Бында бигерәк тә республика художество мәктәбе айырылып торҙо – ул үҙенең картиналарын, көнкүреш әйберҙәрен алып килгәйне. Беҙ ҙә «Китап» нәшриәте сығарған Башҡортостан мәҙәниәте, тарихы тураһында китаптар алып барғайныҡ. Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына арналған «Теле барҙың – иле бар» фәнни-популяр йыйынтығын Президентыбыҙ Мортаза Рәхимов менән премьер-министрыбыҙ Рим Баҡыевтың ҡулдарына тапшырҙыҡ. Ни тиһәң дә, көнбайыш башҡорттарына телен, мәҙәниәтен, тарихын ҡайтарып биреү бөгөн тик дәүләт кимәлендә генә хәл ителә ала. Ошо хаҡтағы китап дәүләт етәкселәренең өҫтәленә һалыу өсөн нәшер ителгәйне лә инде.

Бына кәңәшмәгә килгән мәғариф хеҙмәткәрҙәре, хакимиәт башлыҡтары, төрлө тармаҡ министрҙары, ойошма етәкселәре залға инә башланы. Тәүҙә үк шуны әйтергә кәрәк: унда теләгән бер кешегә юл асыҡ булманы – алдан бирелгән исемлек буйынса ғына гәзит мөхәррирҙәре, төрлө кимәлдәге етәкселәр пропуск менән кереттелде. Шунан ауыр ишектәр ябылды ла бәһлеүәндәй таҙа ирҙәр һаҡҡа баҫты. Фойе уртаһында бары тик бер кеше баҫып ҡалды. Уны залға индермәнеләр.

## КЕМ ҺУҢ УЛ?

30 йылдан ашыу ғүмерен башҡорттоң үҙ телендә мәктәптәр, балалар баҡсалары асыу өсөн йәнтәслим көрәшеүсе, ғүмере буйы башҡорт телен йәшәтеү өсөн дәғүәләшеүсе заманабыҙ Аҡмуллаһы Мөхәммәт Исҡужин ине ул.

Ирекһеҙҙән, 60-сы йылдар хәтергә килеп төшә. Республикабыҙ ҡалаларында, бигерәк тә баш ҡалала башҡортҡа морон төртөр урын да булмаған осор. Башҡорт телендә мәктәптәр юҡ, эш урындары бармаҡ менән һанарлыҡ, ҡыҫҡаһы, башҡорт телендә һөйләшкән кешегә, бигерәк тә ауылдан килеүсегә, бөтә ҡыҫымдарға түҙә алмайынса, ғәрлектән илде ташлап сығып китергә генә ҡала. Улар шулай эшләй ҙә – төнъяҡ-көнсығыштан (Мәсетле, Дыуан, Ҡыйғы, Балаҡатай, Салауат райондары) сыҡҡан талантлы йәштәр, Өфөгә килеп аяҡ баҫа алмағанлыҡтан, Силәбе, Һатҡы, Златоуст ҡалаларына китеп урыҫлашты. Ә Ҡазан дәреслектәре буйынса уҡытылған төнъяҡ-көнбайыш халҡы (Асҡын, Ҡариҙел, Тәтешле, Нуриман, Илеш, Борай һ. б.) татар яғына тартылды. Меңәрләгән башҡорт үҙ телен, тарихын, мәҙәниәтен онотоп, тамам маңҡортлашты.

Милләтебеҙ өсөн бына шундай ауыр осорҙа, 1968 йылда Өфөлә бер төркөм ата-әсәләрҙең 20-се мәктәпте асыуы хаҡында бәйән иткәйнек инде.

Илдә үҙгәртеп ҡороуҙар башланғас, уларҙың лидеры Мөхәммәт Исҡужиндың тырышлығы менән Инорста балалар баҡсаһы, Сипайловола 136-сы мәктәп-лицей асыла.

Бынан тыш, ошо уҡ кешенең ныҡышмалығы менән 1994 йылда Күмертау ҡалаһында мәктәп ойошторолған, 6 төркөмлө балалар баҡсаһы асылған. Шулай уҡ Салауат ҡалаһында ла мәктәп эшләй башлаған. Уның эргәһендә «Йәншишмә» исемле балалар баҡсаһы ойошторолған.

Үҙ илеңдә үҙең булып ҡалыу өсөн нисек кенә эҙмәэҙлекле һәм туҡтауһыҙ көрәшергә кәрәклеген Мөхәммәт ағай бик һәйбәт белә.



*Мөхәммәт Искужин*

1995 йылда тағы ата-әсәләр менән эшләп, ҡултамғалар йыйып, Инорс микрорайонында мәктәп төҙөтөргә ниәтләйҙәр. Хөкүмәт башлығы һәм Президентҡа мөрәжәғәт иткәндәр. Һөҙөмтәлә Инорста төҙөләсәк мәктәпте башҡорт мәктәбе итергә ҡарар сығарылған.

Бөтәһенән элек Мөхәммәт Исҡужин Сипайловоның һәр мәктәбендә башҡорт синыфтары асырға тырышҡан. Әммә уларҙы бер йыл ойоштороһа, икенсе йылына бөтөргәндәр. Эйе, ҡаршылыҡ ҙур, синыфтарҙы йәшәтеүе ҡыйын. Иң яҡшыһы – айырым мәктәп асыу.

Үҙенең ошондай изге эштәре менән замандаштары устарында ғына йөрөтөрҙәй, киләсәк быуындар баш эйерҙәй кешеләрҙең береһе ни өсөн ишек төбөндә етемһерәп баҫып тора һуң?

Ә бит уның фекерҙәштәре һәр урында, һәр ерҙә бар, иле, теле өсөн янған һәр кеше уның көрәштәше. Ҡала хакимиәттәрендә, мәғариф системаһында, хөкүмәт даирәләрендә уны аңлап ҡабул итеүселәр күп. Шулай булмаһа, күпме мәктәп һәм баҡса асыуға ирешә алыр инеме ул? Эйе, бөтә кимәлдәрҙә лә ярҙам итеп торалар, бөтәһе менән дә уртаҡ тел табып эшләй. Ул бит әле залға ирәйеп кереп киткән түрәләрҙең ҡайһы берҙәренән күберәк тә эшләй! Һәм бер тин аҡса алмайынса! Йәмәғәт башланғысында. Дөрөҫ, уға «Урал» башҡорт халыҡ үҙәге лә, Йәштәр иттифағы ла ярҙам иткеләгән. Ул быны өсөн бик рәхмәтле. Тик кемдәрҙеңдер уның эшен юҡҡа сығарырға тырышып, мәғариф мәсьәләләре ҡаралған ишектән индермәүҙәре генә...

Ә бит ул ошо кәңәшмәлә ҡатнашасаҡ кешеләрҙең исемлеген төҙөүсе мәғариф министры урынбаҫарына бер нисә тапҡыр мөрәжәғәт иткән. Мәғариф министрлығына ярҙам итеүсе «Аҡтамыр» халыҡ үҙәге (етәксеһе – Мөхәммәт Исҡужин) Башҡортостандың Юстиция министрлығында теркәлгән. Рәсми һәм законлы дәүләт ойошмаһы вәкилен тап ул шөғөлләнгән мәсьәлә буйынса кәңәшмәгә индермәҫкә, уның алдында бөтә ишектәрҙе бикләргә кемдең ниндәй хоҡуғы бар?

Эйе, Мөхәммәт Исҡужин – 60-сы йылдарҙан бирле «ҡара исемлек»тә, «милләтсе» ярлығы тағылған, гел ситләтелеп килгән кешеләрҙең береһе.

... Бынан 33 йыл элек 20-се мәктәпте тантаналы асҡан ваҡытта шул мәктәпте ойоштороусы Мөхәммәт Исҡужинға һүҙ бирелергә тейеш була. Партия өлкә коми-

тетының идеология секретары Таһир Ахунйәнов рөхсәт итмәне тип, уны микрофонға яҡын ебәрмәйҙәр.

Икенсе хәл – 1994 йылда, хәҙерге заманда, Сипайловола лицей асҡанда ла ошо мәктәпте ойоштороу өсөн йәнен бирерҙәй булып көрәшеп йөрөүсене халыҡ алдында һөйләтмәҫкә тырышалар, бер ҡайҙа ла исемен телгә алмайҙар, яңы асылған мәктәп директоры уға, һеҙгә һүҙ бирергә ҡушманылар, тип әйтә.

... Башҡорт милли мәғарифын үҫтереүгә ғәйәт ҙур өлөш индергән, бөтә ғүмерен башҡорт мәктәптәрен асыуға арнаған оло йөрәкле, рухлы шәхескә ҡарата беҙ үҙе тере саҡта менә шундай мөнәсәбәттә булдыҡ. 20-се мәктәпте астырғанда уны партия һәм КГБ эҙәрлекләһә, «билдәлелек һәм фекер төрлөлөгө» заманында «демократтар» һыйҙырманы. Шуға ҡарамаҫтан, ул үҙенең һуңғы һулышына тиклем башҡорт телен йәшәтеү өсөн йәнен аямай айҡашты. Уның арымай-талмай эшләүе һөҙөмтәһендә Өфө ҡалаһының Калинин районында – 140-сы башҡорт гимназияһы, 122-се башҡорт гимназияһы, 252-се башҡорт балалар баҡсаһы, Киров районында – 144-се башҡорт мәктәбе, Дим районында, 102-се мәктәптә – башҡорт синыфтары, 7-се башҡорт балалар баҡсаһы-башланғыс мәктәбендә башҡорт төркөмдәре асылды.

2000 йылдың яҙында, 73-сө йәшендә, уның йөрәге тибеүҙән туҡтаны. Бөйөк Аҡмулланың эшен хәҙер кем дауам итер?

* * *

Рәсәй Федерацияһына ингән Башҡортостанда башҡорт теле, татар, сыуаш, мари һәм башҡа диаспораларҙың телдәренән айырмалы рәүештә, Башҡортостан Республикаһын барлыҡҡа килтереүсе милләттең, төп халыҡтың теле булып тора. Һәм уның телен дәүләт теле тип иғлан итеү – башҡорттарҙың Конституцияла яҙылған үҙбилдәләнешен бойомға ашырыу, үҙ дәүләтселеген төҙөү хоҡуғы. Рәсәй Федерацияһының субъекттарында урыҫ һәм төп халыҡтар телдәренән башҡа бүтән телде бер нисә тапҡыр

дәүләт теле тип иғлан итеү федератив мөнәсәбәттәрҙе, уның нигеҙҙәрен ҡаҡшатыу һәм Рәсәй Федерацияһын тарҡатыу ҡурҡынысы менән янай.

Рәсәй Федерацияһының иң тотороҡло, иң ҙур һәм иң бай республикаларын барлыҡҡа килтергән төп халыҡтарҙың Рәсәй Конституцияһында һәм халыҡ-ара закон акттарында нығытылған хоҡуҡтары яҡтылығынан ҡарағанда, «Известия Башкортостана» хәбәрсеһе Индира Квятковскаяның «эшмәкәрлеге» тап ана шул беҙҙең дөйөм йортто «ҡаҡшатыуға» йүнәлдерелгәйне лә инде:

«Не лишне напомнить также о диалектике развития природы и общества. Когда меньшинство (башкиры в РБ представляются как раз таким меньшинством – по языку около 16 процентов, по национальности – около 22 процентов) начинает брать верх над большинством (русские и татары составляют свыше 2/3 всего населения республики), как правило, дело завершается стрессом в крупном масштабе, всплеском, говоря по-другому, отрицательным эффектом. Ведь достаточно недовольным ста тысячам русских и татар собраться на большой площади в Уфе, от идей министра ничего не останется. Лучше спуститься на реальную землю раньше».

*(«Известия Башкортостана», 21.03.98 г.)*

Ошо уҡ осорҙа был гәзиттә генә түгел, ә «Молодежная газета» һәм республикаға килтереп таратылған «Отечество» баҫмаларында ла Башҡортостан мәктәптәрендә башҡорт телен индереүгә ҡаршы төп халыҡты төрлөсә мыҫҡыллау, кәмһетеү вакханалияһы башланды. Хәйер, уларҙы аңларға ла була ине, сөнки башҡорт үҙ илендә ғүмер буйы теле, рухы, хоҡуҡтары киҫелеп йән аҫраған. Ҡурай уйнаһа, һындырып ташлағандар, китап яҙһа, утҡа яҡҡандар...

Башҡорт теле бейек кәртәләрҙе емереп, халҡымдың әсе күҙ йәштәре аша дәүләт теле итеп ҡабул ителгәс тә әле хөкүмәт структураларына, парламентҡа, республиканың ижтимағи тормошона уның юлын быуыу өсөн йәнтәслим көрәш дауам ителде. 2000 йылдың 13 апрелендә «Молодежная газета»ла башҡорт теленең ижтимағи-сәйәси функцияларын кәметеүгә йүнәлтелгән сират-

тағы мәҡәлә донъя күргәс, шуға яуап рәүешендә, РФА Өфө фәнни үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре, Милләттәрҙе өйрәнеү буйынса Америка ассоциацияһы ағзаһы Илдус Илишев менән әңгәмә ҡорҙом. Бәхеткә ҡаршы, шул көндәрҙә генә Башҡортостан «Китап» нәшриәтендә уның урыҫ телендә «Язык и политика в многонациональном государстве» тигән китабы донъя күргәйне.

Беҙҙең арабыҙҙағы был бик фәһемле һөйләшеү «Молодежная газета»ла рус телендә баҫылып сыҡты...

*– Ильдус Губайдуллович, начнем с главного: что означают права человека и как они ассоциируются с такими понятиями, как свобода, демократия и права народов?*

– В международном праве дано четкое определение прав человека. Среди основных документов можно назвать Всемирную Декларацию ООН по правам человека 1948 года или Декларацию ООН по правам лиц, принадлежащих к национальным или этническим, религиозным и языковым меньшинствам 1992 года. И эти правовые нормы могут иногда отличаться от того, что хранится в памяти отдельных людей, формируется в кабинетах. Ведь каждый человек может иметь собственные представления о правах человека. Иван может относить к сфере прав человека то, что для Махмута является их вопиющим нарушением. Здесь существует именно правовое поле и разнобоя, как мне мыслится, нет.

*– Теперь мы приблизимся к основным правовым проблемам в нашей республике. Это прежде всего касается Закона «О языках народов Республики Башкортостан». Право башкир на пользование родным языком в области государственной службы не вступает ли в конфликт с правом всех граждан республики на участие в управлении делами государства?*

– Я считаю, что равный доступ к государственной службе, независимо от национальности, должен быть обеспечен в Башкортостане всем гражданам. Но если же, допустим, иногда кто-то говорит о том, что требование к

кандидатам в президенты Республики Башкортостан предусматривает среди прочих владение одним из государственных языков, то есть башкирским, я бы хотел обратить внимание на то, что вообще в законе о выборах президента республики написано «лицо, владеющее русским и башкирским языками». Когда речь акцентируется только на башкирском языке, у человека, совершенно не знакомого с ситуацией в Башкортостане, живущего, например, в Москве, Петербурге или еще где-то в России, может создаться ложное впечатление, что здесь речь идет вообще о чисто башкирском языке, а русского как бы нет и в помине. Вот у меня был такой случай в США. Директор Института Кеннана стратегических российских исследований Доктор Блэр Рубл удивленно спросил у меня: «Президент у Вас должен знать только башкирский?» Значит, такую информацию имеют из России. Я говорю, что речь идет о владении двумя государственными языками – русским и башкирским. Точно так же применяется это требование в цивилизованном мире. Возьмем Испанию, там четыре автономных области, в том числе одна из них наиболее известная – Каталонская, где живут каталонцы; одним из официальных языков является каталанский и им обязательно должны владеть служащие государственных органов. А в Швейцарской конфедерации, когда речь идет о контактах населения с органами государственной власти, применяются государственные языки страны, а вот в пределах каждого отдельного кантона действует исключительно местный официальный язык. Точно такая же картина в Канаде. Там два официальных языка – английский и французский, и любое лицо, обратившееся в какой-то орган государственной власти или в органы правосудия на французском языке, как представляющее национальное меньшинство, получает ответ на этом же языке. То есть Российская Федерация не придумала ничего из ряда вон выходящего. Я имею в виду статью 68 пункт 2 Конституции России, где прописано положение о государственных языках в национальных республиках.



*Ильдус Илишев, Америка Кушма Штаттары, Нью-Йорк, август, 1999 йыл*

*– Ильдус Губайдуллович, Вы изучили опыт цивилизованных стран в области языковых прав. Как Вы думаете, нельзя ли реализовать право башкир на пользование родным языком, создавая систему синхронного перевода на уровне деятельности государственных органов.*

– Я хотел бы видеть президента, который общается со своим народом через переводчика. Это разные уровни применения государственного языка в органах государственной власти и правосудия. Например, Верховный Комиссар ОБСЕ по делам национальных меньшинств господин Макс Ван дер Стул в 1996 году провел опрос 51 государства о соблюдении ими языковых

прав меньшинств. И среди девяти вопросов, вошедших в вопросник, был и такой: осуществляется ли доступ национальных меньшинств к органам государственной власти, чиновникам или органам правосудия на их языках. И является ли данное право правом, предусмотренным специальными законами. И это специально оговорено. Этот доклад опубликован в марте 1999 года в Гааге. Там фигурирует именно этот вопрос и отдается предпочтение именно законодательному оформлению языковых прав коренных народов и меньшинств. В случае с Башкортостаном республика, как это отмечается в статье 69 Конституции РБ, «Образована в результате реализации права башкирской нации на самоопределение...» И в своем ответе на те вопросы по соблюдению языковых прав в странах ОБСЕ заместитель министра иностранных дел России Афанасьевский отметил – и это официальный ответ России – что в Российской Федерации, согласно Конституционному положению, в республиках в составе России государственными языками являются языки республикообразующих народов, проживающих в данных субъектах. То есть здесь имелись в виду коренные или титульные народы. Выходит, Башкортостан все сделал в соответствии с нормами Российской Конституции, если ничего не говорить о международно-правовых документах. Но с другой стороны, в Основном законе России написано, что международные правовые нормы являются составной частью Российской Конституции.

*– Какие международно-правовые документы по языковым правам народов могли бы Вы назвать?*

– На сегодняшний день самым важным считается так называемый Копенгагенский Документ, где прописаны основные языковые права и предусмотрен целый ряд мер по развитию языков национальных меньшинств и коренных народов. Полностью он называется документ Копенгагенской Конференции по человеческому измерению 1990 года. Далее, Рамочная Конвенция 1995 года по правам национальных меньшинств. Там рассматри-

вается целый ряд языковых прав, которые в целом соблюдаются в Российской Федерации. Потому что у нас в национальных республиках соответствующие коренные народы – данный термин, нравится нам или нет, прописан в международно-правовых документах – имеют неотъемлемое право на государственный язык. И, слава богу, на сей день практически все национальные республики у нас, исключений не знаю, имеют положения о государственных языках. Последним к ним, наконец-то, присоединился Башкортостан, тем самым полностью реализовав право башкирского народа на самоопределение. Потому что без государственного языка не может быть государственного образования, а Республика Башкортостан, согласно Договору о разграничении предметов ведения и полномочий между органами государственной власти РФ и органами государственной власти РБ от 3 августа 1994 года, является суверенным государством в составе Российской Федерации. Другой вопрос, что федеральный центр как бы денонсировал данный договор. Но с другой стороны это серьезный юридический прецедент. И мы не можем вести себя так, как будто живем в Пермской, Челябинской, или Оренбургской ... областях.

Таким образом, я не считаю, что татары, чуваши, русские в Башкортостане отсечены от государственной службы. Дело в том, что государственная служба состоит из ряда должностей, но когда речь идет о высшей конституционной должности, то здесь имеется в виду, что президент республики как глава государства, обязан быть знакомым с одним из самых важнейших его атрибутов и символов, то есть государственными языками этой республики. Любое лицо небашкирской национальности – татарин, русский, еврей, чуваш... – при владении башкирским может стать президентом Башкортостана. Почему? Потому что в Законе не написано, что он должен быть этническим башкиром.

*– Ильдус Губайдуллович, значит, в любом цивилизованном и правовом государстве, в том числе и в России, государственные языки обладают особым статусом?*

– Разумеется. Например, в Нью-Мексико, одном из штатов США, официальными языками являются испанский и английский. Человек, который избирается для того, чтобы общаться с большим электоратом испаноязычных граждан, должен владеть испанским языком. Ну, извините меня, если кто-то хочет быть президентом республики и ленится выучить государственный язык, то какой он президент вообще? Владея языком, владеешь обстановкой. В республике проживает более 50% тюркоязычного населения. Зачем ломать себя и изучать ненавистный язык, как говорится, отдыхай и работай в другой сфере. Тут я уже не говорю о том, что нужно отходить от традиций прошлого. Я знаю многих русских, которые лучше, чем я, владеют башкирским языком. В том же Сибае, Бурзянском районе, Зилаире, в той же администрации президента, где я раньше работал. Какие проблемы, если, допустим, такие люди будут выдвигаться? Спокойно себя можно чувствовать тогда, когда знаешь, что президент, скажем, русский, но знает твой язык и культуру. Если Вы хотите избираться президентом одной из мощнейщих республик не только России, а на всем постсоветском пространстве, и при этом не можете или не хотите выучить государственный башкирский язык, тогда зачем вам такая ноша в таком сложнейшем регионе?

*– Но мы постоянно забываем о другом государственном языке – русском, который охватывает более широкий электорат населения.*

– Да-да, и я считаю, что аналогичное препятствие должно быть всегда на пути любого кандидата в президенты РБ, который по тем или иным причинам плохо владеет русским языком. Такой человек не сможет адекватно себя выражать, достойно представлять республику в центре.

*– Мне думается, в любом правовом государстве прежде чем принять какой-либо закон, заранее должен продумываться механизм его реализации? Взять хотя бы*

*такой вопрос: какие должности предусматривают знание башкирского языка, какие – нет?*

– Разумеется, в цивилизованных обществах так и делается. Что касается перечня должностей, то, на мой взгляд, это должны быть президент, премьер-министр, государственный секретарь, глава администрации президента, но и, по-видимому, спикер парламента, часто выезжающий в регионы, общающийся с народом. Вот эти должности, на мой взгляд, должны предусматривать владение в той или иной степени башкирским языком. Уровень же владения должны расписать ученые-языковеды. Потом, как установить факт знания или незнания башкирского языка кандидатом в президенты РБ? Какой-то орган, может быть не постоянно действующий при Центризбиркоме, возможно, будет решать этот вопрос.

*– Но где же выучить башкирский язык небашкирам?*

– Нужно активнее реализовывать закон – это уже вопрос к Кабинету Министров. Президент неоднократно ставил вопрос о трудном и медленном характере реализации закона о языках. Администрация президента пытается жестко контролировать данный вопрос, но у нас все вязнет в министерствах и ведомствах и здесь нужно строго спросить с соответствующих служб. Я думаю, что этот закон, в том виде, как он сейчас реализуется, не удовлетворяет ни башкир, ни другие этнические группы. Действительно, где же русскому, татарину или чувашу выучить башкирский язык? Для желающих должны работать ускоренные курсы по месту жительства. Это очень серьезный вопрос.

*– Башкиры в республике составляют всего 22% населения, русские же – 39% и татары – 28%. Так правомерно ли в этих условиях придание официального статуса башкирскому языку?*

– Конечно, ведь международные стандарты применяются безотносительно количества той или иной этнической группы или народа. Законом о языках народов РБ пугают непросвещенную публику, как нас в детстве мамы, бабушки запугивали Бабой Ягой или Кащеем. Что




плохого в том, что башкиры возрождают свою государственность, язык и культуру. Ведь никто не заинтересован в том, чтобы иметь рядом злого, несчастного башкирца с отрезанным языком. От его благополучия и уверенности в сохранности своего лингво-культурного

бытия зависит в немалой степени гармония, межнациональное согласие в республике. А в заключение хотел бы привести слова великого немецкого ученого Гумбольдта, который высказал такую мысль: «Язык – это душа народа. Овладевая языком, мы раскрываем душу другого народа».

И последнее. Совет Европы недавно отметил важность владения каждым человеком двумя или более языками для укрепления доверия и взаимопонимания между представителями различных народов и культур.

## II. МАЖОРИТАР ПРИНЦИПТАРҘАН – КОНСОЦИАЛЬ ДЕМОКРАТИЯҒА

### АҠШ МЕНӘН РӘСӘЙ АРАҺЫ

Тел тураһында ғына түгел, ғөмүмән, милләттәрҙең халыҡ-ара хоҡуҡтары, демократия һәм федерализм тураһында һүҙ йөрөткәндә, Илдус Илишев тураһында берике һүҙ генә әйтеү етмәй. Иң алға киткән һәм үҫешкән Европа илдәрендә юғары сәйәси даирәләрҙә абруй яулаған был йәш һәм өмөтлө ғалим, АКШ-тың Вашингтондағы Донъя институтының өлкән эксперты булараҡ, халыҡ-ара тыныслыҡты нығытыу эшенә тос өлөш индергән.

АҠШ. Вашингтон. Донъя институты. Был институт, этносәйәси ҡаршылыҡтарҙы хәл итеү буйынса АҠШ хөкүмәтенә кәңәштәр биреүсе бойондороҡһоҙ рәсми йорт булараҡ, 1984 йылда АҠШ Конгресы ҡарары менән ойошторолған. Институтҡа АҠШ Президенты тәғәйенләгән һәм Сенат раҫлаған президент идара итә. Ул үҙенең эшмәкәрлегендә Директорҙар Советы алдында яуап тота. Институттың Директорҙар Советы ағзаларын да АҠШ Президенты ҡуя. Улар бөтәһе лә арҙаҡлы сәйәсмәндәр, ғалимдар, дипломаттар. Мәҫәлән, улар араһында АҠШ-тың Дәүләт секретары Мадлен Олбрайт та бар, ә Донъя Институтының президенты доктор Дик Соломон Көнсығыш Азия һәм Тымыҡ океан эштәре буйынса АҠШ-тың Дәүләт секретарының урынбаҫары булған. Институт етәкселеге йыл һайын бөтә донъянан унлаған ғалимды саҡырып ала, улар йыл буйы Вашингтонда йәшәп, төрлө темаларға ғилми эштәр алып бара. Ҡағиҙә

булараҡ, 6–7 американлы, бер канадалы, яҡын Көнсығыштан бер (ғәрәп йәки Израиль кешеһе) һәм Европанан бер ғалим (ғәҙәттә элекке Советтар Союзынан йәки Көнсығыш Европанан). Илдус Илишев 1999 йылда Европанан вәкил була. Был ғәйәт ҙур еңеү. Конкурс шарттары бик ҡаты ҡуйылған – һәр кандидат тәҡдим иткән фәнни проект унлаған тикшереү стадияһын үтә. Әйтәйек, 1999 йылда меңгә яҡын дәғүәсе булған, тимәк, бер урынға 100 кеше тура килгән. Илдустың проекты «Тел ҡаршылығы – этнос-ара ирекһеҙләү һәм сәйәси хакимлыҡ сығанағы» темаһына арнала. Был проектта ул Канадалағы, АҠШ-тағы, Украиналағы һәм Рәсәйҙәге – Башҡортостанға айырыуса ҙур иғтибар биреп – тел-этнос мәсьәләләрен тикшерә. Уның төп мәғәнәһе шунда: донъяла бөтөн милләттәрҙең, һәм иң тәүҙә төп халыҡтарҙың, телгә хоҡуҡтарын нығытыу өсөн хәрәкәт көсәйгәндән-көсәйә бара. Ул ошо проблема өҫтөндә 1994 йылдан алып өҙлөкһөҙ эшләй һәм быға тиклем элекке СССР-ҙа бер кем дә шөғөлләнмәгән теманы күтәреп сыға. Америкала уның эшмәкәрлегенә ҙур иғтибар уяна.

Донъяның төрлө илдәрендәге телгә ҡағылышлы хәл-ваҡиғаларҙы тикшереп һәм сағыштырып ҡараһаң, милләт-ара ҡаршылыҡтарҙың күп осраҡта төп халыҡтың теле йәберләнеүенән килеп сыҡҡаны асыҡлана. Туған теленән мәхрүм ителгән, уҫал, яуыз милләт күршеләре өсөн дә хәүеф тыуҙырып йәшәй. Мәҙәни хоҡуҡтары яҡланған халыҡ, киреһенсә, тыныслыҡ һаҡлай. Проблема этностарҙың үҙенсәлекле булыуында түгел, ә уларға үҙҙәре булып ҡалыуҙы тыйыуҙа. Мәҫәлән, Югославияның тарҡалыуын төрлө сәбәптәр менән аңлатып була, әммә тап Белградтың словендарҙың, Косово албандарының тел һәм мәҙәни талаптарын үтәргә һис тә теләмәүе 1990–92 йылдарҙа һуғыш тоҡандырҙы. Хорватиялағы аҙ һанлы сербтар ҙа тап шундай мөнәсәбәтте үҙ тиреһендә татыны. Канада менән Рәсәйҙе алайыҡ. Башҡортостан, Татарстан, Яҡут-Саха етәкселәре бөгөн федераль үҙәк алдына ҡуйған һорауҙар менән Квебек юлбашсылары Оттаваны (Француз Канадаһындағы «тыныс революциянан» бирле) быуа инде

40 йыл буйы ҡаңғырта. Канаданың тарҡалыуы ла ихтимал, әммә «Квебек проблемаһын» көс ҡулланып хәл итергә тырышыу бер кемдең башына ла инеп сыҡмай. Тотош Квебекты сепаратизмда һәм бандитлыҡта ғәйепләп, бомбалар шартлатып һәм ғәскәр индереп, геноцид актын үткәреү кеүек ҡырағайлыҡҡа бармайҙар. Киреһенсә, ауыр хәлдән сығыуҙың демократик һәм хоҡуҡи юлдарын эҙләйҙәр. Рәсәйҙә лә, Канадала ла федерация субьекттарының бер өлөшө милли принцип буйынса төҙөлгән. Һәм Квебек провинцияһын, Башҡортостан, Татарстан һәм Яҡут-Саха республикаларын бөтөргән осраҡта ла Квебекта француз телле канадалар, ә беҙҙә башҡорттар, татарҙар, яҡуттар һәм уларҙың шул уҡ хәл ителмәгән мәсьәләләре ҡаласаҡ... Ғалим ғилми хеҙмәттәрендә ошо хәҡиҡәтте күтәреп сыға.

1998 йылдың декабрь айы. Америка Ҡушма Штаттары. Вашингтон ҡалаһы. Илдус Илишев АҠШ-тың Дәүләт Департаменты саҡырыуында Рәсәй Федерализмына арналған конференцияла ҡатнаша. Уны ойоштороуҙа АҠШ-тың Разведка советы ла ҡатнаша. Көн үҙәгендә бер һорау: Рәсәй тарҡалырмы, юҡмы? Федерализмдың киләсәге бармы? Башҡорт ғалимының конференциялағы сығышы түбәндәгеләрҙән ғибәрәт.

Башҡортостан менән Рәсәй араһындағы бөгөнгө мөнәсәбәттәр хөкүмәт-ара вәкәләтлектәрҙе бүлешеү тураһындағы Килешеүгә нигеҙләнгән. Конституция унитар булыуға ҡарамаҫтан, ошондай Килешеүҙәр ярҙамында милли төбәктәрҙең үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып эш итеү мөмкинлектәре бар. Килешеү ысынында Рәсәй Конституцияһына Ҡушымта ул. Әгәр шундай Килешеү төҙөлһә һәм ул эшләһә, ул ваҡытта Рәсәйҙең тарҡалмаясағына, Башҡортостан, Татарстан, Яҡут-Саха, Ингушетия һәм башҡа милли республикаларҙың проблемалары хәл ителәсәгенә һәм үҙ-ара мөнәсәбәттәр киҫкенләшмәйәсәгенә өмөтөбөҙ ҙә йәшәйәсәк. Чечня менән шундай Килешеү төҙөлгән булһа, һуғыш та туҡанмаҫ ине, моғайын.

Әммә Рәсәй хөкүмәте эргәһендәге эске сәйәсәт буйынса совет рәйесе Федоровтың сығышы Илишевтыҡына ҡапма-ҡаршы була. Федоров, беҙ Рәсәй хөкүмәтенә Федерация субъекттарын ҡыҫҡартырға тәҡдим иттек, тип иғлан итә. Улар бигерәк күбәйгән. 89 губернатор менән президентты Рәсәй президентына һәм премьер-министрына ҡабул итеп бөтөрөүе ҡыйын, йәнәһе. Американдар бер нимә лә аңламай ҡалалар: шаҡ ҡаталар!

Илдус Илишев тора ла үҙ дәғүәләрен белдерә: АҠШ-та 50 штат һәм 50 губернатор, ләкин был уларҙың Билл Клинтон менән күрешеп һөйләшеү өсөн Вашингтонда сиратта тороуын аңлатмай. Уларға был кәрәкмәй, сөнки илдә иҡтисади закондар эшләй, ҡулдарын һоноп аҡса һорап йөрөмәйҙәр. Рәхим итегеҙ, Рәсәй өлкәләрен ҡыҫҡартығыҙ – бына, мәҫәлән, Мәскәү менән Мәскәү өлкәһен. Орел, Киров, Тамбов, Липецк кеүек бәләкәй өлкәләрҙе бергә ҡушығыҙ. Ә беҙҙе кемгә ҡушаһығыҙ, Һамар өлкәһенәме ни? Әллә Татарстан менәнме? Был юҫыҡта бер эшегеҙ ҙә килеп сыҡмаясаҡ. Халыҡ күтәрелеп сығасаҡ.

* * *

83–85% урыҫтар (күбеһе урыҫлаштырылған милләттәр) йәшәгән Рәсәйҙә 15–17% урыҫ булмаған халыҡтарҙың мәнфәғәттәрен бөгөнгө мажориттар демократия шарттарында бер нисек тә яҡлап булмай, тине Илдус Ғөбәйҙулла улы. Һәм Рәсәй Дәүләт Думаһын миҫалға килтерҙе. 90%-ҡа яҡын урыҫтар тәшкил иткән парламентта милли төбәктәр файҙаһына ниндәй генә мәсьәлә күтәрелһә лә, әҙ генә тауышты күпселек еңеп сыға.

Күпселек тауышҡа ҡарап ҡына билдәләнгән мажоритар демократия беҙҙең мәнфәғәттәрҙе яҡларға бер ниндәй ҙә мөмкинлек бирмәй. Милли республикаларҙың күпселегендә күберәк тауыш йыйыу өсөн консоциатив демократия кәрәк. Башҡортостанға килгәндә лә баҫҡынсылыҡ сәйәсәте һөҙөмтәһендә 21% ҡына ҡалған башҡорт

халҡының хоҡуҡтарын яҡлау өсөн Илдус Илишев мотлаҡ консоциатив демократия элементын индерергә тәҡдим итә. Парламентта көн үҙәгенә ҡуйылған мәсьәләләрҙең бөтөнөһө лә башҡорт депутаттары тауыш биргәс кенә үткәрелергә тейеш. Улар ҡаршы тауыш бирә икән, тимәк, үтмәй. Был әҙселектә ҡалған төп халыҡтың мәнфәғәттәрен яҡлауҙың берҙән-бер юлы, ябай арифметика ярҙамында ғына бындай мәсьәләләрҙе хәл итеп булмай. Башҡорт халҡының иң сетерекле мәсьәләләре хәл ителмәй икән, суверенитет, ниндәйҙер үҙаллылыҡ алыуыбыҙҙан шатлыҡ һәм ҡыуаныс та кисереп булмай. Халыҡ-ара хоҡуҡ күҙлегенән ҡарағанда, төп халыҡҡа ниндәйҙер махсус хоҡуҡтар, льготалар бирелә икән, ул башҡа халыҡтарҙың хоҡуҡтарын ҡыҫыу тип ҡабул ителергә тейеш түгел. Был иң артта ҡалған милләтте бүтән халыҡтар кимәленә күтәреү сараһы ғына.

Мажоритар демократия принцибының бар донъяла аҙсылыҡта ҡалған төп халыҡтарға ҡаршы эшләүе бәхәсһеҙ хәҡиҡәт. БР Фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы Дамир Вәлиев был хаҡта түбәндәгеләрҙе яҙа:

**«Онтологическим фундаментом права на национальный суверенитет является самоценность этноса и его культуры, означающая, что любой этнос уже фактом своего существования обладает естественным правом на достойную жизнь и ничуть не в меньшей степени, чем крупные господствующие этносы, которые по отношению к малым часто выступают как доминирующие, нередко диктуют, как должны жить малочисленные этносы, и навязывают им свой образ жизни и социальные институты. Подтверждением тому может быть множество примеров из жизни бывшего СССР, а также из российской действительности.**

**Приведу конкретный пример из жизни башкир. В январе 1934 года волевым решением ВЦИК были переданы Челябинской области два района Башкирской АССР (Аргаяшский и Кунашакский), причем это было сделано без согласования с населением этих районов, с органами государственной власти республики. Было**

**лишь в Постановлении ВЦИК оговорено условие о том, что эти два района будут преобразованы в Аргаяшский башкирский национальный округ. Однако это оказалось обманом. В том же 1934 году, спустя 10 месяцев, ВЦИК отменил свое решение. Это было вопиющим нарушением, с одной стороны, прав человека, а с другой – права народа на национальный суверенитет».** (Коллектив авторов. Суверенная республика как правовое государство. Уфа: «Гилем», 1998).

БМО-ның да донъя милләттәренең түгел, ә көслө дәүләттәр берләшмәһенең органы булыуы һәм Рәсәй Дәүләт Думаһы менән Дәүләт Советында (Элекке Федерация Советы) Рәсәйҙәге этностарҙың тигеҙ вәкәләтлеге тәьмин ителмәүе лә шул уҡ мажоритар демократия бәләһе. Бының нимәләргә килтергәнен күҙаллау өсөн РФ Дәүләт Думаһының ҙур залына инәйек. 1995 йылдың 12 августы. Чечняла һуғышты дауам итергәме, әллә һөйләшеүҙәрҙе башларғамы, тигән мәсьәлә хәл ителә. Чечен халҡының үҙенән башҡа! Фекер алышыуҙарҙа бер генә мосолман да, милли республикаларҙан бер генә вәкил дә ҡатнаштырылмай. Сығыш яһайҙар: Иван Рыбкин (рәйеслек итеүсе), Владимир Жириновский, Виктор Илюхин, Егор Гайдар, Станислав Говорухин, Сергей Быстров, Галина Паршенцева, Михаил Бурлаков, Виктор Миронов, Анатолий Шабад, Николай Лысенко, Валентин Леднев, Константин Затулин. Әйтергә кәрәк, радикалдарҙан Жириновский, Илюхин, Лысенко бер нисә тапҡыр тороп һөйләй. Шулай булғас, Рәсәйҙә һуғыш ниңә тынһын? Бына ул ялған «демократия»!

Ә бынан бер ай ғына элек, 21 июлдә Думаның Федерация һәм төбәктәр сәйәсәте буйынса Комитет рәйесе Сергей Шаповалов милли мәсьәләне туранан-тура «бүлгелә һәм хакимлыҡ ит» принцибына таянып хәл итергә саҡырҙы: Чечен Республикаһының Наурский, Надтеречный һәм Шелковской райондарын бүлеп алып, Ставрополь крайына ҡушыу тураһындағы закон проектын көн үҙәгенә ҡуйырға тәҡдим итте. (Государственная Дума. Стенограмма заседаний. Том 20. Москва-Известия – 1996).

Бына ҡайҙа беҙҙең яҙмыштар хәл ителә! Был һеҙгә беҙҙең Минзәлә һәм Бөгөлмә өйәҙҙәрен Татар АССР-ына ҡушҡан 1920 йыл да һәм Арғаяш менән Ҡоншаҡты Силәбе өлкәһенә «бүләк иткән» 1934 йылда түгел бит әле, ә «демократия үҫеш алған» Рәсәйҙәге 1995 йыл ваҡиғалары!

## «ХАЛЫҠТАР АЛҒА КИТКӘН, БЕҘ ҠАЛҒАНБЫҘ, ДУҪТАРЫМ...»

Урман башҡорто Ғәли Соҡоройҙоң улы Ғәрифулла Кейеков әйткән быны. Беҙ бөгөн дә шундайбыҙ. Илдус Илишевтың миңә Вашингтондан яҙған хатынан өҙөк килтерәм: «... Татарҙар шәп егеттәр, мин уларҙы бында йыш осратам. Вашингтонда махсус татар вәкиле ултыра. Ә бына Башҡортостан вәкилдәрен Америкала осратҡаным булманы. Миңә Өфөнән түгел, ә Ҡазандан шылтыраталар ине. Ҡайҙан телефонды алғандар? Белмәйем. Улар менән ҡыуанып осраштым, ҡайһы бер мәсьәләләрен хәл итергә ярҙамлаштым... Шуныһы үкенесле, үҙебеҙҙең республиканан миңә бер кемдең дә мөрәжәғәт иткәне, ҡыҙыҡһынғаны булманы».

1999 йылдың көҙөндә Илдус Илишев Израилдә, Тель-Авив университетының Рәсәй һәм Европа буйынса тикшеренеүҙәр үҙәге уҙғарған «Элекке Советтар Союзының мосолман төбәктәрендә демократия һәм күп фекерлелек» тип аталған халыҡ-ара ғилми конференцияла ҡатнашып, Рәсәйҙә аҙ һанлы халыҡтарҙың хоҡуҡтары тураһында телмәр тотто. Форумда Израиль, Америка, Бөйөк Британия, Төркиә, Норвегия, Швеция университеттары ғалимдары Төньяҡ Кавказ һәм Хорезм Халыҡ Совет республикаларында (1920–1924 йылдар) демократия башланғыстары, Ҡырғыҙстандағы сәйәси кландар, Ҡаҙағстандағы демографик хәл, Үҙәк Азиялағы авторитаризм сығанаҡтары, Рәсәйҙең мосолман төбәктәрендә демократлаштырыу проблемалары, Төньяҡ-көнбайыш Кавказдағы сәйәси тотороҡһоҙлоҡ, БДБ-ла ислам һәм демократия темалары буйынса фекер йөрөтә. Элекке Советтар

Союзынан – Ҡаҙағстандан, Үзбәкстандан, Ҡырғыҙстандан, Әзербайжан, Тажикстандан, Дағстандан, Мәскәүҙән барған вәкилдәр сығыш яһай. Конференцияла чечен һуғышына мөнәсәбәт белдерелә, Рәсәйҙә милли республикалар яҙмышы төҫмөрләнә. Саҡырылған вәкилдәр килә алмауға ҡарамаҫтан, Чечня темаһы барыбер көслө генә яңғырай.

... Бер кем дә терроризм яҡлы түгел. Башҡортостанда ваһһабитлыҡты бер кем дә ҡабул итмәй, беҙҙә ислам һәр ваҡыт тыныс һәм баҫалҡы юҫыҡта үҫеште. Бер мосолмандың да урта быуатта йәшәргә теләге юҡ. Ләкин бит Чечняла тотош этносҡа ҡаршы һуғыш алып барыла, ә бының менән беҙ һис тә килешә алмайбыҙ... 50 мең террорсы буламы? Халыҡтың 95–97 проценты бандит була аламы? Рәсәй хөкүмәте 2–3 мең террорсы өсөн тотош халыҡты юҡ итергә хаҡлымы? «Рәсәй» һүҙе Көнбайышта хәҙер коррупция, кеше һәм халыҡ хоҡуҡтарын ҡыҫырыҡлау, бөтә нәмәне тотошлай емереп килеүсе хәрби машина һәм үҙебеҙҙең эске мәсьәләләребеҙҙе хәл итеүҙәге аҡланмаған ҡанһыҙлыҡ һәм шәфҡәтһеҙлек аша күҙаллана. Илишев конференцияла ике славян дәүләте – Беларусь менән Рәсәйҙең ҡушылыуына ҡарата борсолоу ҙа белдерә. Ошо йәһәттән Башҡортостан Президенты Мортаза Рәхимовтың фекерен тулыһынса яҡлай: был тормошсан килешеү түгел, унан һуң, беҙҙең республиканың, ғөмүмән, милли дәүләттәрҙең статусы ниндәй буласаҡ? Хөкүмәт-ара вәкәләттәрҙе сикләү тураһындағы ике яҡлы килешеүҙәр менән ни эшләргә? Беҙ бит Рәсәй менән Килешеү төҙөнөк, ә ул хәҙер «Рәсәй-Беларусь дәүләте» тип аталһа, үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе яңынан ҡарап сығырғамы? Әллә Татарстан президенты Минтимер Шәймиев фараз итеүенсә, Татарстан менән Башҡортостан ул союзға ирекле дәүләттәр булып инерме? Беларусь президенты Александр Лукашенко Украинаны ла союзға индерергә саҡырҙы. Шундай һорау тыуа: ул саҡта ни өсөн һуң 1991 йылдың 8 декабрендә Беловежская Пущала шул уҡ өс славян дәүләте СССР-ҙың бөтөрөлөүе тураһында Килешеүгә ҡул ҡуйғайнылар?

Ә хәҙер нимә килеп сыға, славяндарҙың мосолмандарға ҡаршы берләшеүеме?

Мәсьәләнең шул яғы ла бар бит әле: әгәр Рәсәй үҙенең славян булмаған халыҡтарға ҡарата алып барған кешелекһеҙ сәйәсәтен үҙгәртмәһә, Гаагалағы халыҡ-ара суд Ельцин менән Путинды ла енәйәтселәр тип иғлан итеүе ихтимал. Көнбайыш илдәре бөгөн юғары рухи ҡиммәттәргә йүнәлеш тотоп йәшәй.

Милли республикалар мәсьәләһенә килгәндә, халыҡ-ара кимәлдә Башҡортостан менән Татарстан суверенитеттың локомотивтары итеп ҡарала. Әммә хәҙер сәйәси мөхиттең хөртәйеүе һәм федерализацияның тонсоға башлауы һыҙыҡ өҫтөнә алына. Элекке СССР һәм Рәсәй ғалим-сәйәсмәндәре, нигеҙҙә, шундай фекергә килә: әлеге осорҙа Рәсәйҙең берҙәм дәүләт булып йәшәүенең һәм федерализмдың киләсәге күренмәй. Сөнки милли йөмһүриәттәрҙе юҡ итеү буйынса маҡсатҡа ярашлы һәм оҙайлы сәйәсәт алып барыла, ә әлегә уларҙы телһеҙ автономиялар кимәленә төшөрөргә тырышалар... Ильдус үҙенең сығышында быларҙың асыҡ миҫалы итеп Башҡортостан тураһында күп һөйләй. Рәсәй Конституцияһын, хәҙерге дәүләт ҡоролошон тәнҡитләй, милли республикаларҙың мәнфәғәттәрен яҡлау өсөн бер ниндәй мөмкинлек юҡлығын, демократияның кире юл алыуын әйтә. Бер Мәскәүҙән генә дәүләт төҙөп булмай, уны милли төбәктәр менән бергәләшеп төҙөргә кәрәк, быны өсөн беҙҙе «туземецтар» итеп түгел, ә тиң хоҡуҡлы партнерҙар тип танырға кәрәк, тип белдерә.

Элекке Советтар Союзының мосолман төбәктәренән конференцияла ҡатнашыусыларҙың күбеһе Урта Азиянан була. Уларҙы беҙҙең менән рухи тамырҙар, төрки сығышыбыҙ берләштерә. Донъя кимәлендәге форумда шул үҙен нык һиҙҙерә. Күңелгә май булып яғылған бер хәл була. Үзбәкстан, Тажикстан, Ҡырғыҙстан, Ҡаҙағстандың президент структураларынан килгән вәкилдәр, шулай уҡ Ҡаҙағстан президенты эргәһендәге Стратегик тикшеренеүҙәр институты ғалимдары Урта Азия республикаларына нигеҙ һалыусы шәхестәр араһында беҙҙең Әхмәтзәки

Вәлиди Туғандың исемен дә телгә алып үтә. Уның Башҡортостандың ғына түгел, ә Урта Азия халыҡтарының дәүләтселеген булдырыуға ғәйәт ҙур өлөш индереүе, иң мөһиме, ғөмүмән, Рәсәйҙәге этнотерриториаль федерализмға нигеҙ һалыусы икәнлеге бөтәбеҙгә лә мәғлүм. Хатта Үҙәк Рәсәй матбуғатында ла һуңғы осорҙа уның хеҙмәттәрен ыңғай баһалаған мәҡәләләр сыҡҡылай. Шуныһы үкенесле, үҙенең тыуған илендә, баш ҡалабыҙҙа Вәлиди исемендәге урам түгел, тыҡрыҡ та юҡ.

Башҡа дәүләттәрҙә, бүтән мәмләкәттәрҙә уны таныйҙар, ғилми хеҙмәттәре тураһында ауыҙ тултырып һөйләйҙәр, ә беҙ, нисектер, вайымһыҙыраҡбыҙ. Дөрөҫ, Зәки Вәлиди исемендәге китапхана һәм тыуған яғында музейы бар, «Китап» нәшриәте күп кенә әҫәрҙәрен һәм иҫтәлектәрен нәшер итте. Әммә былар барыбер аҙ әле...

Илдус Илишев бәйән иткәндәрҙән шул да айырымасыҡ күҙаллана: йәһүдтәрҙең дәүләте милләтте һаҡлап алып ҡалыу йәһәтенән ныҡлы, ышаныслы, тотороҡло. Уларҙың бөтә эштәре шуға хеҙмәт итә.

Йәһүдтәр нәҫел ептәре, ғаилә мөнәсәбәттәре менән дә көслө. Унан һуң, Израилдә, ғөмүмән, эсмәйҙәр, бик әҙләп кенә ҡыҙыл шарап эсәләр. Матур итеп күңел аса беләләр. Бөтөн ғаиләләре менән – өләсәһе, олатаһы, килен-кейәүҙәре, ейән-ейәнсәрҙәр – йыйылышып йылға буйына сығалар ҙа, шунда ашап-эсеп, уйнап-көлөп, ял итәләр. Уларҙың бына ошо ғаилә берҙәмлеге, туғанлыҡ тойғоһоноң көслө булыуы ныҡ оҡшай... Ә беҙҙең, башҡорттарҙың, үҙ тыуған илебеҙҙә йәшәйбеҙ бит, тигән тойғобоҙ юҡ. Бына ҡайҙа беҙҙең бәләбеҙ. Башҡортостан – квазимилли дәүләт. Был Илдустың шәхси фекере. Башҡорт бында үҙен тыуған өйөндә тип тоя ла, тоймай ҙа. Сөнки кабинеттарҙа ултырған ҡайһы берәүҙәр дәүләт телен, мәҙәниәтен үҫтереү өсөн шарттар кәрәклеген аңларға теләмәй.

Төп милләттәрҙе кәмһетеп ҡараусы империя ҡалдығы әле лә күптәрҙең ҡанында. Шуға башҡорт үҙ илендә һәр саҡ көсөргәнешле, һағайыусан хәлдә. Бәлки, улай уҡ түгелдер, әммә иллюзияларға бирелергә ярамай.

## ЫҘҒЫШ «АЛМА»ҺЫ

1994 йылдың 11 ғинуарында Мәскәүҙә Рәсәй Федерацияһының ике палаталы парламенты – Федерация Советы менән Дәүләт Думаһы эшен башлағайны. Демократиянан алып фашизмға тиклем идеяларҙы алға һөрөүсе төрлө партиялар ингән Дәүләт Думаһының составы беҙҙе бер аҙ ҡурҡытһа, республикалар, крайҙар һәм өлкәләр етәкселәре, йәғни Кремль менән диалогҡа әҙер, региондарҙағы хәлде контролдә тоторға һәләтле кешеләр өҫтөнлөк иткән Федерация Советы иһә яңы парламенттың таянысы булмаҡсы ине. Шулай ҙа Федераль йыйылыштың ултырыштар залы барыбер үҙәк менән региондар мәнфәғәттәрен килештереү өсөн көрәш майҙанына әйләнде. Сөнки күп кенә Рәсәй сәйәсмәндәре Центризм идеяһын республикалар суверенитетына ҡаршы ҡуйҙы. Көстәр ҙә тиң булманы. Әйтәйек, Федерация Советында 88 (Чечнянан башҡа) губернатор, президент ултырҙы. Бөтөнөһө 20 милли республика (+ Чечня). 67 субъект саф административ берләшмә, өлкә. Шәймиев, Рәхимов йәки Аушев ниндәйҙер мәсьәләне көн үҙәгенә ҡуйһа, 67 тауыш 20 тауышҡа ҡаршы сыҡты. Бына шундай «демократия» хөкөм һөрҙө...

11 ғинуарға әйләнеп ҡайтайыҡ. Киске ултырышта уҡ янъял ҡупты. Жириновский арҡаһында! Ваҡытлыса Дума рәйесе итеп һайланған ЛДПР вәкиле Г. Лукаваны тәжрибәлерәк кешегә алмаштырыу мәсьәләһе ҡалҡҡас та Владимир Вольфович Г. Лукаваға «бер ҡайҙа ла китмәҫкә, микрофондарҙы һүндерергә һәм трибунаға бер кемде лә үткәрмәҫкә» күрһәтмә бирә. Милиция саҡырырға ҡуша. ЛДПР лидерын тынысландырыуы еңел булмай... «Комсомольская правда»ның 1994 йылдың 12 ғинуарҙағы һанында Жириновскийҙың сит илдә рус фәхишәләре менән ҡанлы мажаралары тураһында уҡыһағыҙ, парламенттағы хәлдәрҙе яҡшыраҡ күҙ алдына килтерерһегеҙ.

Либерал-демократтар, коммунистар һәм аграрниктар тәүге ултырыштың тәүге минуттарынан уҡ палатаға идара итеүҙе үҙ ҡулдарына алыу өсөн йәнтәслим көрәшә

башлағайны. Һуңынан улар тамам ярһыны. Иң тәүҙә үҙенең еңелерен һиҙгән Жириновский сығырынан сыҡты. «һеҙ әле нормаль парламент өсөн өлгөрөп етмәгәнһегеҙ... – тине ул депутаттарға. – Психиатр тикшереүенә ризамын... Минең ике көн Европала булыуым бөтәһен дә ҡуҙғытты. Мин диспетчер роленә (йәнәһе Дума рәйесе вазифаһына) яраҡлы түгелмен, Чубайс, Козырев, Федоровтар сәләмәтлегемде ҡаҡшатасаҡ... Ә минең сәләмәтлегем бөтә рус халҡына кәрәк. Чубайс әфәнде, сәғәтегеҙгә ҡарамағыҙ, Лефорт камераһында ваҡыт һанарһығыҙ... Шымығыҙ! (Трибунаға йоҙроҡ менән һуға). Залдан сығып китегеҙ, барығыҙ, бөтәгеҙ ҙә! Мин президент һайлауҙарын көтәм! Шунда күрһәтермен һеҙгә!».

Хәйер, дөрөҫөн генә әйткәндә, Дума элекке Юғары Советтан бер нәмәһе менән дә айырылмай тиерлек. Шул уҡ власть өсөн көрәш, шул уҡ ыҙғыш, талаш, йоҙроҡ һуғыштары... Эйе, эйе, яңы парламент ағзалары берберeһен дөмбәҫләй ине.

... 14 ғинуарҙа төшкө аш ашағанда депутат В. Жириновскийға, официанттар уға вайымһыҙлыҡ күрһәткәндәй, ә күрше өҫтәлдәге депутат М. Горячевҡа күберәк иғтибар биргәндәй тойола. Тиҙҙән әрепләшеү йоҙроҡ һуғышына күсә. Горячев әфәнде Жириновскийҙың битенә бер-ике тапҡыр һуға. Дума депутаттарын милиция саҡ айырып ала. ЛДПР лидеры Марк Горячевҡа Лефорт төрмәһендә койка вәғәҙә итә...

Һуңынан беҙ телевизор аша Владимир Жириновскийҙың парламенттағы тәнәфестә депутат ҡатын-ҡыҙҙы сәсенән өҫтөрәтеп йөрөтөп туҡмауын, Еңеү көнөндә Александр паркы янындағы «Мәңгелек ут» эргәһендә журналист ҡатын-ҡыҙҙы елтерәтеп килтереп машина эсенә ташлауын, үҙәк матбуғатта уның йәш ҡыҙҙарҙы һәм малайҙарҙы көсләүе тураһындағы ҡот осҡос мәҡәләне уҡып шаҡ ҡаттыҡ. Ғөмүмән, ул Рәсәйҙең ысын йөҙөн билдәләне – гәзит биттәренән, телевизор экрандарынан төшмәне. Бына ул ҡатыны менән сәй эсә, бына баҡсала эшләп йөрөй, йә митингыла сығыш яһай, йә иһә дуҫтары Саддам Хусейн менән Слободан Милошевич эргәһенә ашыға...

Ни эшләйһең, депутат бит. Тейергә лә, ҡулға алырға ла, төрмәгә ултыртырға ла ярамай.

1999 йылдың ғинуар башында Рәсәй думаһының икенсе бер депутаттары Голов менән Моисеев Өфөгә килеп, урындағы «Яблоко» ижтимағи ойошмаһы ағзаларын «аҡылға ултыртырға» маташҡайны һәм шулай уҡ Дума депутаты Александр Аринин менән уның Сергей Фуфаев кеүек ярҙамсыларын «Яблоко-Башкортостан»ға көсләп тығырға тырышҡайны.

Ул йыйылышта туранан-тура ҡатнашып, Голов менән Моисеевтың үҙҙәрен Алланың ҡашҡа тәкәләре кеүек тотоуҙарын күреп, шаҡ ҡатҡайным. Төпкөлгә килеп, Гөргөрәй батша сатраптары булып ҡыланыусылар урындағы халыҡҡа түбәнһетеп ҡарап, былай тип ҡысҡырынды:

– Беҙ Мәскәүҙән нимә ҡушабыҙ, шуны тайпылышһыҙ үтәргә тейешһегеҙ, юғиһә ойошмағыҙҙы ябабыҙ!

– Буйһонорға теләмәһәгеҙ, икенсе илгә күсеп китегеҙ!

– Һеҙ нимә, урыҫ телен аңламайһығыҙмы әллә? Сығып китегеҙ бынан!

Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовтың икенсе тапҡыр президент булып һайланғанына шартларға етешкәйне улар. Быға тиклем үҙен гел демократ һәм ғәҙел сәйәсмән итеп күрһәтергә тырышҡан «Яблоко» лидеры Григорий Явлинскийҙың Башҡортостанда милләт-ара ыҙғыш сығара алмай интеккән Александр Аринин ни өсөн ярһып яҡлауы, беҙҙең республиканың эске эштәренә килеп ҡыҫылыуы, хатта 1998 йылдың 18 июнендә «Яблоко» ижтимағи ойошмаһы исеменән Башҡортостанға бөткөһөҙ бысраҡ өйөп, Рәсәй президентына асыҡ хат менән мөрәжәғәт итеүе күптәрҙе аптыратты, халыҡ алдында абруйын төшөрҙө.

... Голов менән Моисеевҡа ҡушылып, Арининдың ярҙамсыһы, «Вечерняя Уфа» гәзитенең хәбәрсеһе Сергей Фуфаев та республика президенты Мортаза Рәхимовҡа әллә күпме ғәйеп яғып, уны һайлауҙа ҡатнашҡандары

өсөн урындағы «Яблоко» ойошмаһын һәм уның башлығы Ринат Солтановты[1] төкрөк сәсеп тәнҡитләне.

Бына шулай. Явлинскийҙың эйәрсәндәре менән Арининдың ярҙамсылары демократияны шулай аңлайҙыр, күрәһең. «Яблоко – Башкортостан» ағзалары, ниндәй милләттән булыуҙарына ҡарамаҫтан, республикала шундай бысраҡ сәйәсәт алып барыусы Александр Аринин төркөмөн үҙ араларына алырға теләмәне, абруйҙарын юғалтыуҙан һәм халыҡтың үҙҙәренән янтайыуынан ҡурҡты. Голов менән Моисеев шуға туҙынды ла инде. «Яблоко – Башкортостан» ысын мәғәнәһендә ыҙғыш алмаһына әйләнде. Тәүҙә ПРЕС-та, шунан НДР-ҙа сәйәси карьера эшләргә ынтылыусы Арининдың «Яблоко» ойошмаһына үтеп инергә ынтылыуы был юлы ла килеп сыҡманы. «Көрәш яланын беҙ мародерҙарға бирмәнек», – тине Ринат Солтанов был хаҡта. Шулай ҙа уның үҙен Мәскәүҙәге «Яблоко» Үҙәге Советынан алып ташланылар. Ә Өфөләгеһенә көстәре етмәне һәм «Яблоко – Башкортостан» үҙаллы, суверенлы ойошма булып ҡалды. Өҫтәүенә, «РБ демократик көстәр берләшмәһе» төҙөлдө. Азатлыҡ көрәшенең сетерекле һәм бәләкәй генә өлөшө был.

1999 йылда ла Рәсәй Дәүләт Думаһында региондарҙың тауышы көслөрәк ишетелмәне һәм федерализм хәрәкәтенең әүҙемләшеүенә булышлыҡ итмәне. Сөнки федерализм буйынса иң ҙур эштәр закондар ҡабул итеүгә туранан-

[1] Ринат Солтанов 1954 йылдың 9 майында Сибай ҡалаһында тыуған. Баш ҡалала Рәми Ғарипов исемендәге башҡорт гимназияһын алтын миҙалға бөтөргән. 1976 йылда М. В. Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университетының философия бүлеген, ә 1998 йылда РФ Президенты эргәһендәге Рәсәйҙең Дәүләт хеҙмәте академияһының юриспруденция курстарын тамамлаған. Профессор, философия фәндәре докторы. Көнсығыш философияһы, дин һәм этика белгесе. 1992–95 йылдарҙа Мәскәүҙең Маймонид исемендәге Дәүләт Академияһының философия тарихы кафедраһын етәкләгән, философия һәм юриспруденция факультетының деканы, Рәсәй Фәндәр академияһы Философия институтының Көнсығыш философияһы үҙәгенең баш белгесе вазифаларын үтәгән, Милләт эштәре һәм төбәктәр сәйәсәте министрлығында эшләгән. 1995 йылдан алып РФ Федераль йыйылышының Дәүләт Думаһы депутаты булды.

тура бәйле. Ә Закондар Думала ҡабул ителә. Унда иһә һаман мәскәүҙәр, йәғни, унитаристар көслө. Думалағы күпселек республикалар яҡлы түгел, ә үткәндәргә кире ҡайтыуҙы ғына теләй. Улар, республикалар үҙенә үҙаллылыҡты артығы менән алды, шулар Рәсәйҙе тарҡата, тип ҡысҡырышалар.

Ринат Солтанов президентыбыҙ Мортаза Ғөбәйҙулла улы һәм беҙҙең республиканан тағы бер нисә депутат менән Рәсәй Думаһына яңынан һайлауҙар алдынан «Вся Россия» блогын ойоштороу йыйылышында ҡатнашып ҡайтҡас, беҙҙең арала шундай һөйләшеү булғайны:

*– Үҙәк телевидениенан Виктор Шендеровичтың: «Оказывается, Москва с Ельциным – это еще не Россия, а вот Минтимер Шаймиев с Муртазой Рахимовым, да еще с Русланом Аушевым – это уже Россия», – тип көлгәне һеҙҙең турала булған икән.*

– Иронияға ҡарамаҫтан, бик мөһим һәм етди ваҡиға ул. Сәйәси өлкәлә сиктән тыш идеологияға бирелгән көстәрҙең өҫтөнлөк итеүенән арыныу хаҡында һүҙ бара. Был иң тәүҙә КПРФ-ҡа һәм ниндәйҙер кимәлдә «Яблоко» хәрәкәтенә ҡағыла, сөнки улар етәкселеккә, башҡарма власҡа гелән оппозицияла тора, ләкин ысынында икеһе лә башҡарма властың нимәнелер яҡшы яҡҡа үҙгәртеүендә һис тә ҡыҙыҡһынмағандар. Бигерәк тә һайлау осоронда улар Рәсәйҙе тотороҡһоҙлоҡҡа илтеүсе көстәргә әйләнеүсән, шуға күрә лә беҙ, регионларҙан һайланған вәкилдәр, «Вся Россия» блогын ойоштороу инициативаһы менән сығыш яһаусы Федерация субьекттары етәкселәре – Башҡортостан, Татарстан һәм Ингушетия президенттары Рәхимов, Шәймиев һәм Аушевты яҡлап сығыуҙы кәрәкле тип таптыҡ. Был блок Рәсәйҙең артабанғы үҫешендә хәл иткес урын тоторға тейеш. Беҙ ҡайһы саҡта федерализацияның үтә етди, хатта кире ҡаҡҡыһыҙ көскә әүерелеүен онотоп ебәрәбеҙ. Күптәр уны Суверенитет тураһында декларация ҡабул итеү һәм федерация субъекттарының ҙур үҙаллылыҡ алыуы менән генә сикләй. Йәнәһе, субъекттар үҙ эштәре менән шөғөлләнергә, ә сәйәсәтте Үҙәк, Мәскәү генә билдәләргә тейеш.

Сер түгел, бөгөнгө көнгә тиклем Дәүләт Думаһында, ғөмүмән, сәйәси тормошта, ғәмәлдә Мәскәү вәкилдәре өҫтөнлөк итте. Беренсе Думала улар 75%-ты тәшкил иткәйне. Хәҙер ҙә яртыһынан күберәктәр. Тимәк, финанс ресурстарының биштән дүрт өлөшө, йәғни 85%-тан күберәге Мәскәүҙә туплана. Сәйәсәттә тик мәскәүҙәр хәл иткес тауышҡа эйә. Шуға күрә «Вся Россия» блогын ойоштороу ғәҙеллекте аяҡҡа баҫтырасаҡ. Рәсәй шул осраҡта ғына субъекттарҙа йәшәүсе һайлаусыларының тауышын ишетәсәк. Федерализация процессы дауам ителергә, Үҙәк менән Федерация субъекттары араһында вәкәләтлектәр бүлешеү ғәҙел алып барылырға, сәйәсәт айырым кешеләр ҡулында ҡорал булыуҙан туҡтарға, халыҡ үҙ фекерен белдереү һәм сәйәсмәндәргә йоғонто яһау хоҡуғына эйә булырға тейеш. Халыҡтар, ысынлап та, тотош Рәсәйҙә, Мәскәүҙән тыш, Федерацияның 88 субъектында йәшәй. Тап ошо халыҡтар Рәсәйҙә реаль көскә эйә булырға тейеш, тип уйлайым мин.

*– «Вся Россия» блогы ойошоуына Федерациялағы башҡа сәйәси берләшмәләр һәм хәрәкәттәр нисек ҡараны?*

– Етди көс булараҡ, «Вся Россия» шунда уҡ «Отечество» һәм «Голос России» хәрәкәттәренең иғтибарын йәлеп итте. Уларҙың етәкселәре, Мәскәү мэры Юрий Лужков менән Мәскәү өлкәһе губернаторы Константин Титов берләшеп эш итергә тәҡдим яһап сыҡтылар.

*– Ринат Ишбулды улы, сәйсәттәге тағы бер мөһим проблема – Рәсәй президенты Борис Ельцинға импичмент белдереү тураһында нимә әйтерһегеҙ?*

– Тәүҙә уҡ шуны әйтергә кәрәк, импичмент мәсьәләһе, бигерәк тә Компартия ҡулында, һайлау алды эшмәкәрлеге ҡоралына, башҡарма власты ҡурҡытып тотоу ысулына әйләнде. Шуға ҡарамаҫтан, импичменттың хоҡуҡи нормалары бар. Әйтәйек, махсус комиссия импичменттың биш хоҡуҡи эпизодын Дәүләт Думаһы ҡарауына сығарҙы. Улар араһында СССР-ҙың тарҡалыуы, Беловежская пуща килешеүе, 1993 йылдың сентябрендә парламентты атып

таратыу, Чечнялағы һуғыш, Ҡоралло Көстәрҙең тарҡалыуы.

*– Республикаларҙың сәйәси һәм иҡтисади үҙаллылығын ҡыҫыу көсәйгәндә, шуға булышлыҡ итеүсе закондарҙы этәреүселәр күбәйгәндә, икенсе республикаларҙан һәм өлкәләрҙән фекерҙәштәрегеҙ бармы һеҙҙең?*

– Бар, әлбиттә. Артыҡ ныҡыштар, тип әйтә алмайым, сөнки тауыш биреүҙәренә ҡарағанда, урыҫтар араһында айыҡ фекер йөрөтөүселәр күп түгел, ә республикалар вәкилдәренең күбеһе, тураһын әйтергә кәрәк, ҡурҡаҡтар. Үҙегеҙ аңлап тораһығыҙ, күп республикалар элек өлкәләр йәки иң түбән статуслы автономиялар ине. Азатлыҡтың ҡәҙерен белмәйҙәр. Уларҙы беҙҙең республика менән сағыштырып та булмай – Мәскәүҙән килгән хәйергә йәшәйҙәр.

Ысынлап та, Ҡарасәй-Черкесияны ғына алайыҡ, улар бит әле береһе, әле икенсеһе, үҙ-ара һыйыша алмайынса, Ставрополь өлкәһенә ҡушылабыҙ ҙа ҡуябыҙ, тип янай. Азатлыҡтан баш тартып буламы ни?

Беҙ уларҙан ныҡ айырылабыҙ. Беҙҙә азатлыҡ мәҙәниәте үҫешкән. Һәм шуны һаҡлап алып ҡалырға кәрәк. Ни өсөн, суверенитет менән ғорурланырға кәрәк, тибеҙ? Сөнки тура баҫып атлап йөрөү мөмкинлеге бирелгән. Яңынан тубыҡланырға хоҡуғыбыҙ юҡ беҙҙең. Азат йәшәргә күнеккән яңы быуын үҫеп сығасаҡ. Улар, Мәскәү нимә тиер әле, тип фекерләмәйәсәк, ялағайлана һәм тәрилкә тота белмәйәсәк. Беләһегеҙме, мин ҡоллоҡ тойғоһо юҡҡа сығырға тейеш, тип уйлайым. Һәм был бик мөһим. Думала эшләүем ниндәйҙер кимәлдә шуға булышлыҡ итер, тип өмөтләнәм.

... Бына шулай. Суверенитетты, демократия ҡаҙаныштарын һәм ысын федерализмды яҡлау өсөн аҡыл һәм ҡыйыулыҡ кәрәк. Пушкин хаҡлы: ҡолдарға азатлыҡ ләззәте нимәгә? Үҙебеҙҙәге меҫкелектән, ҡурҡып йәшәүҙән арынайыҡ.

* * *

Депутаттар һәм парламент тураһында һүҙ йөрөткәндә, мажоритар демократия шарттарында, аҙ һанлы халыҡтарға унда үтеп инеүе, депутат булып һайланыуы ни тиклем ауыр икәнлеген үҙенең башынан үткәргәндәр генә нығыраҡ аңлайҙыр. Ошо йәһәттән 1995 йылда республика парламентына һайлауҙар башҡорт милләте өсөн ғибрәтле лә, михнәтле лә булды. Ул бөгөн дә беҙҙең күңелдәрҙә көйөнөслө иҫтәлек булып һаҡлана. Мин ул саҡта Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышының Закондар сығарыу Палатаһына 33-сө һанлы Усть-Икин һайлау округы буйынса депутатлыҡҡа кандидат Нәжибә Мәҡсүтованың ышанысла кешеһе булып йөрөнөм. Депутатлыҡҡа ошо округтан тағы өсәү – Юғары Советта ойоштороу бүлеге мөдире, Секретарит етәксеһе урынбаҫары Рафаил Мирсаев, Салауат районының продукция һатып алыу һәм сифат буйынса баш дәүләт инспекторы Риф Вахитов менән Башҡортостан Журналистар союзы рәйесе Ризван Хажиев – дәғүә итте.

Нәжибә апайҙың уй-ниәттәре 1995 йылдың 3 мартында Ҡыйғы районының «Район тормошо» гәзитендә баҫылып сыҡҡан икебеҙҙең үҙ-ара әңгәмәбеҙҙән айырым-асыҡ күҙалланыр, тип уйлайым.

## ҠАТЫН-ҠЫҘҒА ЮЛ БИРЕГЕҘ

*– Нәжибә Хәйерзамановна, һеҙ нескә күңелле ҡатын-ҡыҙ заты, бынауындай ирҙәр – элекке аппаратсы һәм депутатҡа, юғары власҡа эйә булған дәүләт чиновнигына ҡаршы көрәшкә сығырға нисек батырсылыҡ иттегеҙ ?*

– Илдә барған сәйәси һәм ижтимағи хәлдәр бер кемде лә тыныс, вайымһыҙ ҡалдырырға тейеш түгел. Сөнки ил тарҡала бара. Беҙҙең ҡатын-ҡыҙҙар социаль яҡтан иң яҡлауһыҙ ҡатлам. Уларҙы әлегәсә иҙеү, ҡырағайҙарса туҡмау, ҡыйнап үлтереү күренештәре бар. Тарихтан бер хәл хәтеремә төшә. Беҙҙең эраға тиклем V быуатта ошо

тирәлә агрипиндар йәшәгән. Ҡатын-ҡыҙҙарҙы мал урынына туҡмап, егеп, уларҙа йөк ташығандар. V быуаттан алып XX быуаттың аҙағына тиклем мин ҡатын-ҡыҙҙарҙың хәлендә бер ниндәй үҙгәреш тә күрмәйем. Һаман да улар йөк ташый, тимер юлдарында эшләй, асфальт түшәй, боҙ вата, урам һеперә, тоҡ күтәрә, ит һата. Шул уҡ ваҡытта улар бала ла таба, тәрбиәләй ҙә һәм ире менән бер тиң эшләй ҙә. Ауылда мөғәллимәләр ғаиләләрен туйындырыу өсөн аҙнаһына 28 дәрес уҡыта! Ә шәфҡәт туташтары? Ә сусҡа ҡараусылар, быҙау үҫтереүселәр?

Ауылда ат урынына эшләгән һәм һуҡыр тин дә алмаған ошо халыҡты иртәрәк пенсияға ебәреүҙе ҡайғыртырға кәрәк. Ни өсөн һуң ҡатын-ҡыҙҙың эш көнөн бер сәғәткә булһа ла кәметмәҫкә? Шул уҡ түләүҙе ҡалдырып? Шунан, Түбәнге Ҡыйғыла булған хәл мине ныҡ тетрәтте. Ул бит беҙ барғанда булды. 26 ғына йәшлек әсәне, ике бәләкәй генә балаларын етем ҡалдырып, эскесе ире сәнсеп үлтерә. Бөтә ауыл ҡарап торҙо микән ни? Ауылда бит бөтәһе лә унын хәлен белгәндәр. Туҡмалыуҙан тәндәре ҡап-ҡара көйөп, нисәмә тапҡыр больницала ятҡан. Ни өсөн һуң уны ҡурсаламағандар?

Икенсенән, әле хәҙер Рәсәйҙә милли республикаларҙы губерналарға әйләндереү тураһында һүҙ бара. Беҙ бөгөн 100 йылға кире киттек. Батшаларҙың, аҡһөйәктәрҙең һөйәген йыябыҙ, уларҙы кәрәкле урынға ҡуябыҙ. Тарих бер ваҡытта ла кире атлауҙы ғәфү итмәй. Губерналарға ҡайтыу мөмкин булмаған хәл. Сөнки ул ваҡытта беҙҙең республикала йәшәүсе халыҡтарға үҫеү өсөн бер нимә лә ҡалмай. Беҙ һаман да ошо көслө милләттең ҡолона әйләнәбеҙ. Мин бит ҡатын-ҡыҙ, сәйәсмән, профессор. **Былдай хәлдәргә нисек түҙеп торайым? Парламентта ҡатын-ҡыҙ, ғалимдар һәм сәйәсмәндәр булмаһа, бер ирҙәр генә илде көрсөктән сығара алмаясағын үҙегеҙ күреп тораһығыҙ. Тарихҡа бағайыҡ. Индира Ганди, Беназир Бхутто, Маргарет Тэтчер, Гольда Мейер кеүек аҫыл заттар һуғыштан да ҡотҡарған, дәүләтте лә һаҡлап**

**алып ҡалған. Бына әле ауылдар буйлап йөрөйбөҙ. Ниндәй хәлдә халыҡ йәшәй? Уға бер нимә лә кәрәкмәй. Клубҡа ла йыйып килтереп булмай. Килһәләр ҙә шул хәтле асыу көслө уларҙа, ташлап сығып китәләр. Ауыл ерендә улар тыныс ҡына тыңлап ултыра алмай. Реформалар тигән булып, халыҡты ергә сүктергәнсе талау ғына етмәне. Рәсәй эсендә граждандар һуғышы тоҡандырҙылар, һалым түләүсе халыҡтың аҡсаһын һуғыш йотоп тора хәҙер. Мин бит ғәзиз улдарын һуғышҡа оҙатҡан инәй, әсәйҙәрҙең күҙ йәштәрен түктермәҫ өсөн, яңы ғына өйләнгән һөлөктәй егеттәребеҙ үҙ халҡына ҡаршы һуғышта баш һалмаһын, йәш кәләштәре менән яңы тыуған бәпестәре етем ҡалмаһын тип парламентҡа ашығам. Тик шулар хаҡына өс ир менән көрәшергә баҙнат иттем.**

– *Үкенмәйһегеҙме?*

– Мин, ғөмүмән, бик түҙемле кеше, сөнки бәләкәстән етем ҡалып, «әтей» тип бер ваҡыт та әйтмәгән килеш шул хәтлем уҡып, донъя ғилемлегенә күтәрелгәнмен. Бер ни тиклем үкенеп тә ҡуям. Сөнки мин хәҙер ҡарап йөрөйөм дә беҙҙең парламент та бер нимәгә лә ирешә алмаясаҡ тип уйлайым. Шул Закондар сығарыу Палатаһына киләсәк кешеләрҙе ҡарағыҙ – кинопрокат директоры, элекке депутаттар, коммерсанттар, банкирҙар, һаман да хужалыҡ эшмәкәрҙәре, инженерҙар ынтыла. Ә минеңсә, Закондар сығарыу Палатаһында әҙерлекле ғалимдар – иҡтисад белгестәре, юристар, философтар – эшләргә тейеш. Әгәр депутат булһам, сираттағы һайлауҙар тураһындағы законға ошо пунктты бермә-бер кертер инем. Сөнки парламентҡа киләсәк 40 кешенең кемдәре эшләр, кемдәре эшләмәҫ, кемдәре ҡаршы килеп ултырыр. **Донъя кимәленә сыҡҡан тюрколог булараҡ, үҙемде татар һәм башҡорт милләттәренә, ғөмүмән, Башҡортостанда йәшәүсе халыҡтарға хеҙмәт итеүсе тип таныйым. Бөгөнгө көндә тик беҙҙең илдә генә 32 төрки телдәре араһында татар, башҡорт телдәрен донъя кимәленә сығармаһам, уларҙы Европаның лингвистик атласына**

**индермәһәм – мин бит һәр күренештә ике телде сағыштырып барҙым – улар нимә эшләрҙәр ине? Унда бәләкәй генә Коми халҡының теле, хатта Балтик буйындағы 4 меңдән торған милләттәрҙең теле инер, беҙ генә булмаҫ инек. Насармы ни? Әгәр ҙә башҡорт теленә дәүләт статусын биреү, башҡорт дәүләтселеген һаҡлап алып ҡалыу өсөн парламент трибунаһынан тороп көрәшергә ынтылам икән, насармы ни?**

*– Ошо төньяк-көнсығышта йәшәгән халыҡтарҙың киләсәген нисегерәк күҙ алдына килтерәһегеҙ?*

– Был ерҙәге халыҡтар ҙа Башҡортостандың башҡа төбәктәрендәге халыҡтар кеүек йәшәһендәр ине. Башҡа райондарға ғилми экспедицияларға күп йөрөнөм бит. Мин кермәгән бәләкәй генә ауыл да ҡалманы. Республикала бөтәһе 200 мәктәп авария хәлендә булһа, шуның күбеһе беҙҙең төньяҡ-көнсығышта. Бына Мәсетле районы буйынса Яуышта, Төрпкилделә бөтөнләй мәктәп юҡ, өйҙә уҡыйҙар. Һөләймәндә терәүле мәктәп. Ошоларға ҡарап йөрөйһөң дә – унан ниндәй балалар сығырға тейеш? Уларҙың нисек сәләмәтлеге булһын? Пальто, бүрек, быйма, бейәләй кейеп тә туңып ултырғас? Белем ҡайғыһымы ни? Ошо төбәктә йәшәүселәр – башҡорт, татар, мари – башҡа халыҡтармы, улар ҙа республиканың төньяҡ-көнбайыш райондары һымаҡ йәшәһендәр ине. Юлдары төҙөкләндерелһен, газ, һыу үткәрелһен ине. Ошолар өсөн көрәшәсәкмен. Был төбәктән балалар уҡырға инә алмай. Бына Ҡыйғы районының Арыҫлан, Туғыҙлы, Йыланлы, Вәҡиер ауылдарында булдыҡ, мәктәп уҡытыусылары менән осрашып һөйләштек. Уларҙың уҡыусылары Силәбе өлкәһенең Златоуст, Һатҡы, Бакал ҡалаларына барып, иң бысраҡ, иң түбән квалификациялы эшкә урынлашалар икән. Гел генә эшсенән торған халыҡ булмай бит ул. Ғүмер буйы ҡол хәлендә йәшәп буламы? Медпункттар, больницалар юҡ, булһа ла һыуыҡ. Төньяҡ-көнсығыш райондары бик ныҡ артта ҡалған бит.

*– Йәмғиәт икегә бүленде – муллыҡ һәм байлыҡ та, хәйерселек тә бар. Тәүге яртыһы бөгөнгө көндә тотошлай тиерлек парламентҡа инеү өсөн генә көрәшә.*

*Һеҙ, бөгөн хәйерсе хәленә төшкән профессор, быға нисек итеп каршы тормаксы булаһығыҙ ҙа, нисек итеп түләүһеҙ белем алыу, түләүһеҙ медицина хеҙмәтләндереүен булдырыу, бөлгөнлөккә төшкән ауылды яклау, колхоз-совхоздарҙы һаклау, ерҙе һаттырмау өсөн көрәшмәк булаһығыҙ? Һеҙҙең бит үҙегеҙҙе рекламалау өсөн миллиондарығыҙ ҙа, ауылдар буйлап өгөтләп йөрөргә «Волга»ғыҙ ҙа юк.*

– Мин халыҡҡа таянам. Халыҡ аҡыллы ул, үҙенә кәрәкте аңлап һайлар барыбер.

– *Үҫешкән илдәрҙәге парламент кешегә кағылған бөтә мәсьәләләрҙе – әсәлек хокуғын, хатта аборт мәсьәләһен уртаға һалып тикшерә, хатта Рим папаһы килеп кыҫыла. Америка, Япония, Францияла эш урынында иҫереп йөрөү түгел, тәмәке тартырға ярамай, Ирак Президенты Саддам Хусейн аракыны бөтөнләй тыйҙы. Беҙҙең татар, башкорт тыйнак бит ул, тағы күпме телевизор экрандары алдында балалар янында ер тишегенә керерҙәй булып битебеҙҙе кулдарыбыҙ менән каплап ултырырбыҙ икән?*

– Әгәр депутат булып үтһәм, был мәсьәләгә,ысынлап та,бик ныҡ иғтибар итергә уйлайым. Тарихтан беләбеҙ, әхлаҡһыҙлыҡ бик күп халыҡтарҙы, милләттәрҙе һәләк иткән. Йәмғиәт тарҡала, әтей-инәйҙәрҙең абруйы төшә, балалар енәйәтселегә арта. Америка сүплеккә ташлаған фильмдарҙы ҡарап, үҫмерҙәр бер-береһен сәнсеп, яндырып үлтерә башланы. Порнография башҡа республикаларҙа юҡ бит. Уларҙы тыйырға, тараткан өсөн хөкөмгә тарттырырға кәрәк. Катын-ҡыҙ һәм өс бала әсәһе булараҡ, эскелеккә, әхлаҡһыҙлыҡҡа һәм әҙәпһеҙлеккә ҡаршы быға тиклем дә ҡаты көрәштем һәм киләсәктә лә көрәшәсәкмен.

– *Үҙегеҙ барып етә алмаған ауылдарҙың халыктарына нимә тип әйтер инегеҙ?*

– 165 ауыл. Бөтәһен дә урап сығыу мөмкин дә түгел. Улар бит минең күҙ алдымда ғына тора. Йәш кенә ҡыҙ сағымда экспедицияларҙа йөрөгәнемдән алып ыңғай яҡҡа бер нимә лә үҙгәрмәгән, киреһенсә, кире китеш ҙур. Тормошта ла, әхлаҡта ла. Һайлаусыларға шуны әйтер

инем, бөгөн һеҙгә барып вәғәҙәләр биреүселәргә ышанып, күҙегеҙҙе асмай, кешенең кемлеген айырмайынса, һайларға ярамай.

Алтын тауҙар юҡ ул. Ныҡ уйлағыҙ. Парламентҡа, ысынлап та, лайыҡлы кешеләр үтергә тейеш.

*– Беҙ, бөтә йәштәр, бөтә ҡатын-ҡыҙҙар һәм йәмғәт ойошмалары, бер нисә бөртөк кенә ҡатын-ҡыҙ кандидаттарыбыҙҙы: Нәжибә Мәксүтованы, Светлана Еникееваны, Фирҙәүес Хисаметдинованы, Гөлфиә Юнысованы, Эльза Хореваны Дәүләт Йыйылышына үткәреү өсөн хәлебеҙҙән килгәнсе көрәшәсәкбеҙ. Суверенлы йәмғиәттә ислам парламенты түгел, демократик парламент эшләргә тейеш.*

* * *

Оло өмөттәр бағлап көтөп алынған һайлау көнө күҙ асып йомған арала үтеп тә китте. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уйниәттәребеҙ бойомға ашманы, бар өмөттәребеҙ бер көн эсендә селпәрәмә килде... Суверенитет өсөн, халҡыбыҙҙың яҡты киләсәге хаҡына фиҙакәр көрәшкән арҙаҡлы кешеләрҙең береһе лә тиерлек Дәүләт Йыйылышына депутат булып үтә алманы. Фәнил Фәйзуллин, Дамир Вәлиев, Марат Ҡолшәрипов, Рауил Ниғмәтуллин, Марат Аҙнабаев, Нәжибә Мәҡсүтова, Гөлфиә Юнысова, Сафуан Әлибай, Ринат Байымов... Был исемлекте тағы ла дауам итеп булыр ине, тик ни мәғәнә?

БР Дәүләт йыйылышының Закондар сығарыу Палатаһына 33-сө Оло-Устикин округынан депутатлыҡҡа кандидат Нәжибә Хәйерзаман ҡыҙы Мәҡсүтованың ышаныслы кешеһе булараҡ, был һайлау түгел, ә сираттағы номенклатура уйындары һәм депутаттарҙы юғарынан тәғәйенләү булды, тип матбуғат һәм бөтә донъяның «Азатлыҡ» радиостанцияһы аша асыҡтан-асыҡ белдереп, бер нисә тапҡыр сығыш яһаным.

Ошо округтан яңы парламенттың Закондар сығарыу палатаһына бер урынға дәғүә иткән дүртәүҙең өсәүһе

элекке парламентерҙар ине. Алдан фараз итеүебеҙсә, төп дәғүәселек партияның Салауат район комитетының элекке беренсе секретары, яҡын-тирәлә абруйы юғары булған ауыл хужалығы эшмәкәре Риф Вахитов менән профессор Нәжибә Мәҡсүтова араһында ғына барырға тейеш ине һымаҡ. Әммә ошоға тиклем төнъяҡ-көнсығышта исеме бигүк билдәле лә булмаған икенсе бер кандидатура еңеп сыҡты. Хәйер, башҡаса булыуы мөмкин дә түгел ине. Сөнки парламентты парламент һайланы. Һайлауҙар тураһындағы закон – уны ла парламент үҙ мәнфәғәтендә ҡабул иткәйне – шуға ҡоролғайны.

Шулай итеп, был демократик һайлауҙар түгел, ә иҫ киткес бысраҡ һәм алдан ойошторолған номенклатура уйындары ғына булды. Беҙҙең, ябай һалым түләүселәрҙең, хәйерселеккә төшөрөлгән халыҡтың аҡсалары бына ҡайҙа китте... Берәүҙәр, көнө-төнө дәүләт машиналарында йөрөп, агитациялау мөмкинлегенә эйә булғанда, икенселәр, көндәр буйы транспорт бүленгәнен көтөп, ваҡытты әрәм үткәргәндә, ниндәй тигеҙ шарттар тураһында һүҙ барыуы мөмкин? Халыҡ елкәһендә ултырып байыған дәүләт чиновниктарының кеҫәләре миллиондар менән тулы булғанда һәм улар тиҫтәләгән ышаныслы кеше, иномаркалар яллай алғанда, 4-әр миллион һумлыҡ агитация ҡағыҙҙары баҫтырып сығарғанда, ә Марат Ҡолшәрипов, Нәжибә Мәҡсүтова, Дамир Вәлиев менән Фәнил Фәйзуллин кеүек кеүек фән эшмәкәрҙәре шул уҡ дәүләт тарафынан хәйерсе сигенә еткерелгәндә, ниндәй тиң хоҡуҡлы һайлауҙар хаҡында һүҙ алып барыуы мөмкин? Ҡулында власть тотоусы етәкселәр бер-береһен парламентҡа үткәрешкәс, ниндәй демократия был?

* * *

Һайлауҙарҙан һуң бик оҙаҡ ваҡыт үткәс тә әле Нәжибә апай менән милләт һәм ҡатын-ҡыҙ проблемалары тураһында сәғәттәр буйы һөйләшеп туя алмайынса, серләшеп ултырған саҡтарыбыҙ күп булды. Шуларҙың бер бәләкәй генә өлөшөн китап уҡыусыларыма тәҡдим итмәксемен...

– Минең уйымса, беҙҙең республикала әле башҡорт халҡының интеллигенцияһын, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙарын баһалау башҡа илдәрҙәгесә, башҡа ерҙәгесә түгел. Шул хәтлем дин ҡанундарын һаҡлаған илдәрҙә лә – Төркиә, Пакистан, Һиндостан, әле килеп, Ҡырғыҙстан, Тажикстанда – ҡатын-ҡыҙҙы үрләтәләр. Ә беҙҙең дәүләт парламентында ҡатын-ҡыҙ юҡ кимәлендә, – тигәйне Нәжибә апай.

*– Ә улар ҡайҙан булһын? Хәтерегеҙҙәме, үткән һайлауҙарҙа Һеҙҙе үткәреү өсөн йәнтәслим тырышҡайныҡ. Бөтә район түрәләре – шул уҡ башҡорттар – башҡорт ҡатын-ҡыҙына ҡаршы көрәште. Һеҙҙе, бөтә ғүмерегеҙ буйы милләттегеҙ өсөн көрәшеүсене, милләтсе тип атап, улар еңеп сыҡты. Сөнки юғарылағы исемлектәрҙә ниндәй «йогонтоло» ирҙәрҙе үткәреү тураһында алдан һөйләшеп ҡуйылғайны. Улар бөтәһе лә үҙ кешеләр ине. Беҙ номенклатура «аҡҡоштары» араһында өйрәктәр булып ҡына йөрөнөк. Ә Балаҡатайҙа һайлаусылар менән осрашыуҙа тағы бер башҡорт ире ҡатын-ҡыҙҙарҙы ирҙәр менән тиң хоҡуҡлы сәйәси көс итеп түгел, ә «декоратив үҫемлек» тип атаны. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының сәйәси юҫыҡта шулай түбән ҡуйылыуына ситтәр түгел, ә иң тәүҙә үҙебеҙҙең башҡорт ирҙәре, уларҙың фекерләү кеүәһенең шулай сикләнгән булыуы ғәйепле.*

– Уныһы ла дөрөҫ, сөнки беҙ һеҙҙең менән бик күп һынауҙар үттек. Һайлау алды марафонында Һеҙ минең ышаныслы кешем булдығыҙ. Парламентҡа үтеү ҙә алдан килешелгәнсә башҡарыла торған эш икәненә мин дә инандым. Беҙ әле, ысынлап та, бик ныҡ баҫылып йәшәйбеҙ. Милләтебеҙ ҡатын-ҡыҙҙары ролен күтәреү бурысы бөтәбеҙ алдында тора. Ошонан сығыу юлдарын төрлөсә уйлағаным бар. Тик бер ниндәй яҡтылыҡ күрмәйем, сөнки бөтә урында, ҡайҙа ғына ҡарама, ирҙәр хакимиәте. Беҙгә һаман да бисәләр тип ҡарау... Диалектолог буларaҡ, шуны беләм, «бисә» «бейсә» тигән һүҙҙән килеп сыҡҡан, тиһәләр ҙә, Силәбе, Арғаяш һөйләштәрендә ул кешене мыҫҡыллау итеп ҡулланыла. Әгәр ҙә ҡатын йәмғәтенә «бисә» тип әйтһәләр, ҡайһы бер ауылдарҙа шул тиклем

ғәрләнәләр. Әгәр ҙә шул ғорур ҡатын-ҡыҙ бөгөн юбка урынына салбар кейгән икән, тормоштоң тамырынан үҙгәреүен, ҡараштар ҙа бөтөнләй икенсе төрлө булырға тейешлеген аңларға ваҡыттыр. Беҙгә һаман да ҡатын-ҡыҙҙың аҡылын, зиһенен, ойоштороу көсөн, бөтә талантын файҙалана белеү етмәй. Был хаҡта Ҡоролтайҙа һөйләгән докладымда ла әйттем, сөнки XX быуат бер ҡасан да булмаған кеүек ирҙәр хакимиәте менән тасуирлана. Ә был илде көрсөккә килтереп еткерҙе бит инде. Ошо урында беҙҙең Президентҡа һәм үҙенең ҡулында хакимлыҡты тотҡан иргә ныҡ уйланыу кәрәк. Киләсәктә ҡатын-ҡыҙҙар менән ярышырға, сағышырға түгел, ә уларҙы үҙҙәре менән бер сафта, бер рәттә күреп баһалай белеү кәрәк. Шулай булмағанда, беҙ бер ҡасан да көрсөктән сыға алмаясаҡбыҙ.

*– Һайлау алды марафонында Һеҙҙең менән дәғүәләшеүсе бик ҙур түрә Балакатай мәҙәниәт йортонда: «Парламентка хәҙер енси айырмалыктарға карап һайларғамы ни?» – тип сығыш яһағайны. Улайға китһә, Пекинда халык-ара катын-кыҙҙар йыйыны уткәреүҙе нисек аңлатырға? Был да беҙҙең кайһы бер түрәләрҙе кыйырһытамы икән?*

– Бына эстондар әҙ генә, ә ҡатын-ҡыҙҙары ниндәй! Уларға ҡарата йәмғәтселек фекере ниндәй юғары! Ә беҙҙә берәй нәмә булһа, һеҙ республикала аҙ һанлы, процентығыҙ бәләкәй, фәлән дә фәсмәтән, тиҙәр. Аҙ һанлы халыҡ вәкиле булараҡ, бер ваҡытта ла, бер ҡайҙа ла үтергә тейеш түгелебеҙ булып сыға. Әгәр ҙә һәр нәмәне процентҡа һалып үлсәйбеҙ икән, бөгөнгә көндә шул уҡ Шахрай, Жириновскийҙар идеяһына хеҙмәт итәбеҙ.

*– Һеҙҙең был әйткәндәрегеҙ әлеге лә баяғы шул һайлау алды марафонындағы вакиғаларға барып тоташа. Түбәнге Ҡыйғыла һайлаусылар менән осрашканда өс дәғүәсегеҙҙең берәүһе – һуңынан депутатлыkkа тап ул үтте – былай тип белдергәйне: «Республикала аҙ һанлы һәм күп һанлы милләттәр йәшәй. Власть органдарына, парламентка һайлағанда ошо нисбәт тигеҙлеге*

*һакланырға тейеш». Бөгөн шул кеше Закондар сығарыу палатаһында республика мәҙәниәтен етәкләй. Унынса, парламентка «енси айырмалыктар буйынса түгел», ә енси артымға карап үтергә тейештәр, күрәһең.*

## ЛЕБЕДЬ, ШАХРАЙ ҺӘМ... БАШҠОРТТАР

1995 йылдың көҙөндә-ҡышында Рәсәй Дәүләт Думаһына һайлау кампанияһы тағы ла ҡыҙғанысыраҡ булғайны. Ринат Солтанов менән Михаил Бугеранан башҡа, беҙ һайларға теләгән бик күп кандидаттарыбыҙ депутатлыҡҡа үтмәй ҡалғайны ул саҡта. Үҙебеҙҙең республика буйынса элегерәк уҙғарылған номенклатура һайлауҙарында ауыҙы бешкән башҡорт зыялылары был юлы икенсе ысул һайлағайны. Рәсәй блоктары һәм фирҡәләре менән уртаҡ йүнәлештәр, уртаҡ маҡсаттар табып, Думаға инеү өсөн улар сафында бергәләп көрәшергә булды. Ошо йәһәттән Башҡортостан дәүләтселеге өсөн ал-ял белмәй көрәшеп йөрөгән «Урал» башҡорт халыҡ үҙәге рәйесе Марат Ҡолшәриповтың Рус общиналары конгресына (КРО) һәм Ринат Солтановтың «Яблоко» хәрәкәтенә инеүе аңлап ҡабул ителде. Халыҡ алтын тауҙары вәғәҙә итеп йөрөүселәрҙе түгел, ә башҡорт теленә дәүләт статусын биреү һәм ерҙе һаттырмау өсөн быға тиклем дә иң һыҙғанып көрәшеүселәрҙе һайларға тейеш ине. Беҙгә, дәүләтселеген, телен һәм милләтен юғалтып барған халыҡҡа, иң тәүҙә шул мөһим ине.

Беҙҙең республикала Рәсәй Премьер-министры Виктор Черномырдин етәкләгән «Йортобоҙ – Рәсәй» блогының төбәк ойошмаһы – «Яңы Башҡортостан өсөн» хәрәкәте барлыҡҡа килде. Башҡортостан халыҡ фирҡәһе лә шул хәрәкәткә ҡушылғас, уның рәйесе урынбаҫары Әлтәф Ғәйфуллин менән ҡыҙып-ҡыҙып бәхәсләшкәйнек...

*– Әлтәф Әтрәф улы, ни өсөн «Яңы Башкортостан» блогына инергә булдығыҙ?*

– Быға тиклем һайлауҙа ҡатнашып, кандидаттарыбыҙҙы күрһәтеп ҡараныҡ, профессормы, академикмы –

ниндәй генә арҙаҡлы ғалим булмаһын – береһе лә үтмәне. Ләкин бит маҡсатҡа ирешеү өсөн, әгәр бер юл көрсөккә илтһә, икенсеһен һайларға кәрәк. Шуға ошо блокҡа инеп көрәшергә булдыҡ та инде. Дөрөҫ, «Йортобоҙ – Рәсәй» блогын партократтар, бюрократтар, партия номенклатураһы ояһы, тегеләй ҙә, былай, тиҙәр. Мин шуны әйтер инем: ситтән ҡарап тороп тәнҡитләүе генә еңел ул, ә шуларҙың араһына инеп, берлектә эшләп, үҙ фекерҙәребеҙҙе, талаптарыбыҙҙы яҡлап көрәшергә кәрәк. Әлбиттә, Мәскәүҙәге лидерҙарҙың сәйәсәте беҙгә оҡшамай. Әйтәйек, вице-премьер Сергей Шахрай сәйәсәте. Ул бит Рәсәй эсендә милли республикаларҙы бөтөнләй күрмәй. Ә унын менән ситтән тороп нисек көрәшмәк кәрәк? Шул блокҡа инеп, уның программаһын, платформаһын үҙгәртеүгә ирешергә кәрәк беҙгә.

*– Улар һеҙҙе сакырып кәңәшләшәсәктәрме һуң?*

– Шуның төбәк ойошмаһы булғас, мотлаҡ саҡырасаҡтар, әле Мәскәүгә конференцияға 6 делегатыбыҙ барып ҡайтты. Башҡортостан мәнфәғәттәрен Мәскәү трибунаһынан тороп ҡуйҙылар. Милли республикалар булырға тейеш, тинеләр. Әгәр Мәскәү хата юл менән китһә, һаман тарҡала барасаҡ, һәм был Кремль хужаларының Федерацияны тарҡатыуы буласаҡ. Элек бит беҙҙе гел яманлап, ғәйепләп килделәр, имеш, һеҙ Рәсәйҙән сығаһығыҙ, тип. Сығып ҡайҙа бараһың инде? Дөрөҫөн генә әйткәндә, шулай бит? Әммә беҙҙең милли дәүләтселек нығынып килә, үҙенең дәүләт символикаһы – гимны, гербы бар, үҙенең Президенты, Конституцияһы... Беҙ яңырасаҡ Рәсәй эсендә үҙаллы дәүләт булырға тейешбеҙ.

*– Рәсәй эсендә милли дәүләтселекте танымаусылар, мәҫәлән, шул уҡ Сергей Шахрай, Федерация Советы рәйесе Владимир Шумейко – бөтәһе лә һуғыш партияһынан, улар Чечняла барған һуғышта ғәйепле кешеләр, шул уҡ ваҡытта бик ҡеүәтле, йоғонтоло көстәр. Һеҙҙең улар менән дәғүәләшерлек көстәрегеҙ бармы?*

– Ил төкөрһә – күл була. Мин уйлайым, Татарстанды алһаҡ та, Сыуашстанмы, Марий Элмы, Яҡут-Сахамы – бөтә милли хәрәкәттәр ҙә Юрий Скоков блогына инеп

бөтмәгән бит. Ҡалған икенсе яртыһы беҙҙең менән булһа, һуғыш партияһын еңеп сығыр инек. Юрий Скоковтың блогы иһә «Рәсәй халыҡтары конгресы» тип атала. Унда генерал Александр Лебедь та ингән. Мин уның телевизорҙан сығыштарын йыш ҡарайым. Ул да бер ҡасан да, Рәсәйҙә йәшәгән халыҡтар, тип һөйләгәне юҡ. Бөтә һөйләгәне – урыҫтар...

*– Генерал Лебедь, Молдова Республикаһын бүлеп алып, яңы Карабах – яһалма Днестр буйы дәүләтен пушкалар һәм бомбалар ярҙамында төҙөүсе кеше. Уға ниндәй өмөт бағламаҡ кәрәк?*

– Шулай ҙа беҙҙең милли хәрәкәттәр Юрий Скоков блогына инеп ҡайтты. Сөнки бөтәбеҙ ҙә йыйылышып, бер блокҡа инһәк, хата буласаҡ. Рәсәйҙә йәшәйбеҙ икән, бөтә кимәлдәрҙә лә башҡалар менән үҙебеҙҙе тиң ҡуйып, үҙ сәйәсәтебеҙ өсөн көрәшә белергә тейешбеҙ.

*– Рәсәй Дәүләт Думаһында урыҫ общиналары (шул уҡ Лебедь, Говорухиндар), айырым фракция төҙөп, тик урыҫ мәнфәғәттәрен өҫтөн ҡуймаҡсы. Аҙ һанлы халыҡтарҙың мәнфәғәтен кем яҡлар? Ниндәй хоҡуҡи юл бар?*

– Әйтәйек, Сыуашстан йәки Татарстан, йә башҡа республиканың милли хәрәкәттәре үҙ мәнфәғәтен генә яҡлап ятһалар, беҙ бер нимәгә лә ирешә алмаясаҡбыҙ. Шуның өсөн беҙҙең вәкилдәр Мәскәүҙә бүтән милли республикаларҙы ла яҡлап сыҡһа ғына урыҫ булмаған милләттәрҙә яҡлау табасаҡбыҙ. Юғиһә, айырым-айырым бер генә республика ла маҡсатына ирешмәйәсәк.

(«Йәшлек», 22 август, 1995 йыл).

* * *

Һайлау алды марафоны иң ҡыҙған мәлдә, Урал аръяғында йөрөгәндә, көләмәс һөйләп көлдөрҙөләр...

Бер түрә машинаһында елгәндә юлда колхозсыны осрата. Ул тиҙ генә машинаһын туҡтата ла, йүгереп сығып, тегене бәреп йыға, бер нисә тапҡыр типкеләй ҙә, бер ни булмағандай, машинаһына ултырып, юлын дауам

итә. Эргәһендә килеүсе, ниңә улай итәһең, тип һорағас, теге түрә:

– Паразит, гәзиткә яҙылмаған, – тип яуап бирә...

Ә ауыл ҡарттары бөгөн килеп:

– Думаға шуны һайларға кәрәк, Жириновский менән һәйбәт һуғышыр ине, – тиҙәр...

Беҙ һаман Зәки Вәлиди менән Шәйехзада Бабичтың: «Беҙ ҡыҙылдар ҙа, аҡтар ҙа түгел...» – тигәнен онотабыҙ. Вәлидиҙе кемдәр иленән ҡыуған, Бабичты кемдәр үлтергән? Коммунистар яуынан һуң былай ҙа аҙ ҡалған халҡыбыҙ һаман бүленеп, һаман алданды. Милләтебеҙ бер мандатлы 6-сы Сибай һайлау округы буйынса депутатлыҡҡа күрһәтелгән алты кандидат араһындағы берҙән-бер иҡтисад белгесен, профессор, Союз һәм Федератив Килешеүҙәрен әҙерләүҙә ҡатнашыусы, Рәсәй менән Башҡортостан араһындағы ике яҡлы Килешеүҙе иҡтисади нигеҙләүсе, Рәсәй кимәлендә аяҡ терәп республика иҡтисадын яҡлаусыны түгел, ә республикала бөтөнләй танылмаған кешене коммунист булғаны өсөн һайланы. Кимәлебеҙ, асылыбыҙ, аҡылыбыҙ шуға бәрәбәр ине.

Ул саҡта юғарыла ултырған бер түрәнең район етәкселәренә көслө баҫым яһауы һәм халыҡтың да, коммунистарҙы һайлайбыҙ, тип, аныҡ шәхесте онотоп ебәреүе арҡаһында депутатлыҡҡа үтмәй ҡалған БДУ проректоры, Башҡортостандың атҡаҙанған иҡтисад белгесе Хәлил Әбүбәкер улы Барлыбаев тураһында әйтәм. Республикабыҙҙың Дәүләт Йыйылышына һайлауҙарҙа ла юғарыла ултырған түрәләр «фатиха» бирмәү арҡаһында башҡорт ғалимдары парламентҡа үтә алмаған кеүек, Хәлил Барлыбаевтың да уңышһыҙлыҡҡа осрауы – милләтебеҙҙең еңелеүе ине. Улар беҙгә дәүләтебеҙҙе көсәйтерҙәй юғары кимәлен, белемен тәҡдим иткәйне – баһалай һәм аңлай алманыҡ...

14 декабрҙә Мәләүез ҡалаһының мәҙәниәт йортонда коммунистар алдында сығыш яһап, Хәлил Әбүбәкер улы былай тигәйне:

– Мин Рәсәй халҡын бер-береһенә махсус ҡаршы ҡуйыуға, яһалма рәүештә бөткөһөҙ партиялар барлыҡҡа

килтереүгә ҡаршымын. Киреһенсә, бөтәһен дә бер маҡсатта, халыҡ мәнфәғәтендә берләштереү яҡлымын. Әгәр ҙә мин, Башҡортостан Республикаһының Дәүләт милкенә идара итеү буйынса дәүләт комитетына етәкселек иткәндә, үҙебеҙҙәге акцияларҙың 60 проценттан артығыраҡын дәүләткә ҡалдырыу өсөн көрәшкәнмен икән – ә Рәсәйҙә ни бары 20 проценты ғына ҡалдырылған – мин коммунист түгелме ни? Беҙҙә иҡтисад менән дәүләт идара итә, колхоз-совхоздар һаҡланып ҡалынды – беҙ социализмда йәшәйбеҙ... Быларҙың бөтәһендә лә минең өлөшөм бар бит.

Иҡтисад мәсьәләләрендә һыуҙағы балыҡ кеүек йөҙгән Хәлил Барлыбаев төрлө аудиторияларҙа коммунистарҙы ла, аграрийҙарҙы ла һ. б. үҙенә ҡаратып ҡуйҙы, төрлө ҡарашлы кешеләр менән уртаҡ тел тапты, Башҡортостандың яңыртылған Рәсәйҙәге иҡтисади үҙаллылығына ҡағылышлы иң сетерекле һорауҙарға дәүләт кимәленән тороп яуап бирҙе. Әммә уны түгел, ә икенсе кандидатты үткәреү өсөн баҫым көсәйгәндән-көсәйгән шарттарҙа, бер кем башына ла килтермәгән һәм бер ниндәй профессионал булмаған өсөнсө кандидат Рәсәй парламентына һайланды. Халыҡты был юлы түрәләр ҙә еңә алманы. Халыҡ, һуңғы өмөтөн бағлап, коммунистарҙы һайланы. Шул уҡ колхоз, совхоздарҙа, промышленность предприятияларында бөтөнләй эш хаҡы алмаған эшсе-крәҫтиәнде, кеҫәһендә һуҡыр тине лә булмағанлыҡтан, өйләнмәй ҡартайған 40 йәшлек егеттәр армияһын, ошо көндәрҙә һуңғы күлдәген туҙҙырған халыҡты аңларға була. Аптырған өйрәк арты менән һыуға сума, тиҙәр бит.

Тик шуныһы үкенесле: бөтә киҫкенләшкән мәсьәләләрҙе профессионалдар ғына хәл итә ала ине, ә идеология ҡыуыҡтары менән эш иткән депутаттар бер нәмәгә лә ирешмәйәсәк.

Әйтергә кәрәк, Хәлил Барлыбаев һәм милләтебеҙҙең тағы бер нисә арҙаҡлы вәкиле, шулай ҙа, киләсәктә Рәсәй Думаһына үтә алды. Аллаға шөкөр! Тик был хаҡта һуңыраҡ...

## БӨЙӨК ИЛДЕҢ БАХЫР ЗАКОНДАРЫ

... 1996 йылдың 15 июнендә Рәсәй Федерацияһы президенты Борис Ельцин 909-сы Указы менән «Рәсәй Федерацияһының дәүләт милли сәйәсәте концепцияһы»н раҫлағайны. Уның «Дәүләт милли сәйәсәтенең төбәктәр программаларының төп йүнәлештәре» тигән VI бүлегендә шундай юлдар бар: «Илдәге милләт-ара мөнәсәбәттәр күп йәһәттән Рәсәй дәүләтселегенең таянысы булған рус халҡының милли кәйефе менән билдәләнеләсәк. Рус халҡының ихтыяждары һәм мәнфәғәттәре федераль һәм төбәк программаларында тулы кимәлдә сағылыш табырға, Рәсәй Федерацияһы республикаларының һәм автономиялы берләшмәләренең сәйәси, иҡтисади һәм мәҙәни тормошонда даими иҫәпкә алынырға тейеш».

Шунда уҡ бер әкиәт иҫкә төшә... Бер әсәнең өс ҡыҙы була: береһе – үҙенеке, икәүһе – үгәй. Әсә кеше гел генә ике йомортҡа бешерә икән дә үгәй ҡыҙҙарға бирә икән. Шунан мөлдөрәп ҡарап: «Минең ҡыҙыма етмәне бит, һеҙ икегеҙ ҙә яртыһын ғына бүлеп бирегеҙ инде». Мәкерле һәм хәйләкәр ҡатындың үҙ ҡыҙы гелән шулай бер йомортҡа ашай, ә бахыр үгәй ҡыҙҙарға яртышар ғына элəгә икән...

Рәсәй ҙә бит шулай милли республикаларға суверенитетты услап-услап («Күпме йота алаһығыҙ») таратты ла, хоҡуҡтарҙы берәм-берәм тартып ала башланы. Үҙе шулай тулы хоҡуҡлы булып ҡалды, ә төбәктәр яртылаш суверенитетҡа ғына эйә хәҙер.

... Шул уҡ 1996 йылдың 17 июнендә, ике көндән һуң, Рәсәй президенты «Милли мәҙәни автономиялар тураһында»ғы тағы бер мәкерле Федераль законды үҙ көсөнә индерҙе.(Алда был хаҡта бер аҙ ғына һүҙ ҙә булғайны). Рәсәйҙә милли республикаларҙы бөтөрөү һәм саф урыҫ дәүләте яһау өсөн тағы бер ышанысл аҙым яһалды. XX быуаттың башында, Рәсәй эсендә милли дәүләтселектәр барлыҡҡа килтерелгәндә, Башҡортостан автономияһының таңында башҡорт ерҙәре услап-услап күрше Татарстан, Удмуртияға һәм урыҫ өлкәләренә бүл-

геләнгәндә һәм Татарстан ерҙәре лә Ульяновск, Әстерхан кеүек өлкәләргә тарҡатылғанда һалып ҡалдырылған «бомба» эшләй башланы шикелле. Хәҙер Татарстанда торғоҙоп ҡалдырылған башҡорттар һәм Башҡортостанда күбәйгән татарҙар (уларҙың да яртыһынан күберәге «татар телле» башҡорттар) милли-мәҙәни автономиялар иғлан итә башлаһа, Рәсәйҙә 85% тәшкил иткән һәм үҙҙәренең рәсми дәүләте булмаған урыҫтар өсөн сиктәрҙе юйыу һәм тотош Рәсәйҙе тәүҙә милли-мәҙәни кокондар менән сырмап, милли-территориаль бүленеште бөтөрөүгә лә күп ҡалмаясаҡ. Паспортҡа милләтте яҙмау ҙа алыҫ киләсәкте күҙҙә тотоп эшләнде. Унан һуң инде РФ Конституцияһына «Беҙ, күп милләтле халыҡ...» тип түгел, ә «Беҙ рус халҡы...» тип яҙғанды ла оҙаҡ көтөргә кәрәк булмаясаҡ.

Ошоларҙы күҙаллаһаң, Рәсәй бөгөн империя түгел, тигәнгә ышанып та булмай. Бөтә төр дәреслектәрҙә һәм белешмәләрҙә маҡталған, йырҙарҙа йырланған, йылъяҙмаларҙа данланған, кинофильмдарҙа мәңгеләштерелгән Боронғо Русь ҡайҙа булған һуң? Милли республикалар бит ҡайһы яулап алынған, ҡайһы «үҙе теләп» ҡушылған, ҡайһы бөтөрөлгән...

1346 йыл – Коми ерҙәре Мәскәү кенәзлеге иҙеүенә эләгә.

1478 – Карелия рус дәүләтенә инә.

1489 – Төньяҡ Удмуртия...

1552 – Ҡазан ханлығы юҡ ителә.

1557 – Ҡазан фажиғәһенән шаңҡыған Башҡортостан «үҙе теләп» рус подданныйлығын ҡабул итә.

Шул уҡ йылда Удмуртияны тулыһынса Рәсәйгә ҡушалар. Һәм Адыгеяны...

1598 – Себер ханлығы тар-мар ителә.

1630 – бүрәттәр һәм яҡуттар яулап алына.

1654 – Украина «үҙе теләп» ҡушыла.

1721 – Эстония, Латвия Рәсәйгә ҡорбан килтерелә.

1731 – ҡаҙаҡтар «үҙе теләп» инә.

1756–1812 йылдарҙа Таулы Алтай, Ҡалмыҡ ханлығы, Белоруссия, Төнъяҡ Осетия, Ҡабарҙы, Ҡырым, Грузия,

Молдова, Литва, Әрмәнстан, Көньяҡ Осетия, Ҡарабах, Ингушетия, Бессарабия үҙаллылығын юғалта.

1813–1885 йылдарҙа диңгеҙҙәй ҡан түгелеп, Кавказ аръяғы, Чечня, Литва, Хива ханлығы, Коканд ханлығы, Аджарстан, Татарстан, Ҡырғыҙстан яулап алына.

1940 йыл. Гитлер менән Килешеүгә килеп, мәсхәрәле Риббентроп–Молотов пактын төҙөгәндән һуң, Ҡыҙыл Армия Литва, Латвия, Эстонияны баҫып ала. Фашист Германияһы менән Килешеү һөҙөмтәһендә көнбайыш Украина һәм Көнбайыш Белоруссия СССР-ға бирелә. Гитлерҙың Кремлгә сираттағы бүләге – Ҡыҙыл Армияның Бессарабия менән Буковинаны «азат итеүе».

1944 – Тува СССР-ға инә.

1945 йыл. Көнсығыш Пруссия Кенисберг ҡалаһы менән РСФСР-ға инә. Ҡыҙыл Армия Көньяҡ Сахалинды һәм Курил утрауҙарының дүртәүһен баҫып ала.

Тотош илдәрҙе, дәүләтселектәрҙе, ханлыҡтарҙы Мәскәү кенәзлегенә ҡушып, РСФСР, СССР кеүек империялар барлыҡҡа килтергәндән һуң территорияларҙы төп халыҡтарҙан таҙартыу акциялары башлана.

1940 һәм 1945 – Балтик буйы һәм Көнбайыш Украинаның, Көнбайыш Белоруссияның «азат ителгән» өлкәләрендә ерле халыҡтарҙы депортациялау.

1944 – Кавказ һәм Кавказ аръяғы мосолмандарын тотошлай депортациялау. Ҡаршылашҡандарҙы туҡмау, атыу, терелэй яндырыу, асыҡтан-асыҡ талау...

Шул уҡ йылда Ҡырым төркиҙәрен тотошлай депортациялау. Шул уҡ үлтереш, көсләүҙәр...

Энциклопедияларға ингән был исемлек тағы күпме дауам ителер?

1992 йылдың көҙөндә Рәсәй хөкүмәте, армия ярҙамында, Владикавказдан алыҫ түгел Пригородный районынан 70 мең самаһы ингушты тарихи ерҙәренән депортациялай. Депортация барышында ҡот осҡос язалауҙар, яндырып үлтереүҙәр, ҡурҡыныс геноцид акттары үткәрелә.

1994 йылда һәм 1999 йылдан алып бөгөнгә тиклем бойондороҡһоҙ Ичкерияны чечендарҙан «таҙартыу»...

1994 йылдың 28 декабрендә, беренсе Чечен һуғышы башланған көндәрҙә, Архангель районының Аҙау ауылынан Фанияз ағай Садиҡов, йөрәк әрнеүҙәренә түҙә алмай, «Йәшлек» гәзитенә шундай шиғыр яҙып ебәргәйне.

РӘСӘЙ ҮГӘЙ ӘСӘЙ УЛ...

Рәсәй, һин бит беҙгә үгәй әсәй,
Тигеҙ күреп ярата алманың.
Үгәй әсә булып ҡағаһың да,
Үҙ халҡыңды ғына бағаһың.

Рәсәй, һин ҡан көҫәйһең,
Дүрт быуаттан ашыу иҙәһең.
Телһеҙ итеп, үҙ телеңде тағып,
Урыҫ телле итеп көләһең.

Йәшәйһең һин бик рәхәттә,
Һөйәктәрҙән һарай һалдырып.
Ҡомһоҙлоғоң һинең сиктән ашҡан,
Башҡаларҙы ҡолдай ҡалдырып.

Рәсәй һин бит хәйлә ҡораһың да,
Империяң халҡын ҡыраһың.
Төрки халыҡтарҙы ҡаршы ҡуйып,
Һуғыштарға илтеп тығаһың...

Мәскәү кенәзлеге бөгөн дә ҡеүәтле. Ул – Рәсәйҙең үҙ балаһы, ә беҙ – үгәйҙәр. Мәскәү, Рәсәй субъекты булараҡ, рәсми рәүештә республика тип аталмаһа ла, милли республикаларҙан да күберәк хоҡуҡтарға эйә. Мәскәү мэры Юрий Лужков иҫәпләүенсә, «Мәскәү – Рәсәйҙең килемле төбәге». Эйе, Мәскәү метроһы федераль бюджеттан тәьмин ителә, Юрий Михайлович Мәскәү юлдарын да федераль бюджетҡа ҡаратырға тәкдим итә, баш ҡалалағы биналар – «Федераль мөлкәт», хатта «ирекле иҡтисади зона» ла Мәскәү янында ғына – Калининградта, махсус приватизация, торлаҡ-коммуналь хужалыҡтар реформалары ла Рәсәйҙәгесә түгел. Ә бит Рәсәйҙә урыҫ өлкәләре әҙ түгел, ил етәкселеге әгәр теләһә, урыҫ

халкы ла үҙ республикаһына эйә булыр ине. Шунда нимә теләй, шуны эшләр ине – Конституциялы монархиямы, абсолют монархиямы, теократиямы, славяндар берләшмәһеме... Бүтәндәргә көсләп таҡҡансы... Кемгә ниндәй режим оҡшай, тигән бәхәстәр ҙә кәмер ине. Урыҫ өлкәләренең территорияһына Европалағы бер генә ил дә тиңләшә алмай, Рәсәй үҙе тотошлайы менән Африка ҡитғаһына тиң. Ә ҡитға тиклем ҡитғаны империяға бикләп тотоп буламы ни?

Хәҙергә Федераль кимәлде нигеҙҙә бер генә субъект – Мәскәү – билдәләй, шуға ла Рәсәй Федерацияһы әлегә ысын федерализмдан бик алыҫ. Шуға ла ниндәй генә федераль закондар ҡабул ителмәһен, улар гелән теге әкиәттәге үгәй әсәй бешергән йомортҡаға оҡшап ҡала. Ысын мәғәнәһендә «Киндер-Сюрприз» инде! Рәсәйҙәге власть, публика, аудитория бөгөнгәсә империя фекерләүенән арына алмай. Телевизорҙан Владимир Познер программаларын, төрлө журналистар алып барған «Глас народа» тапшырыуын, Николай Сванидзеның «Зеркало» һәм Михаил Леонтьевтың «Однако» тапшырыуҙарын тыңлаһаң, һис шикһеҙ, шуға инанаһың. Әҙ генә икенсе мөхиттән килгән кеше, бигерәк тә Көнбайыш зыялылары йәки «Азатлыҡ» һәм «Америка тауышы» радиостанциялары журналистары күренһә һәм үҙ фекерен белдерһә, Рәсәй аудиторияһыныҡына ҡапма-ҡаршы булып сыға. Мәҫәлән, Чечня мәсьәләһендә. Рәсәйҙең үҙәк матбуғат саралары, чечендарҙы мансып бөтөрөргә кәрәк, тип барһа, цивилизациялы Көнбайыш, юҡ, кеше хоҡуҡтары боҙола, чечендар ҙа йәшәргә хоҡуҡлы, тип ҡаршы төшә.

Йәки икенсе бер миҫал. 2000 йылдың аҙағында Өфөлә уҙғарылған Рәсәй интеллигенцияһы форумында Үҙәктән килгән делегациялар араһында ғына ла беҙҙең профессорҙарыбыҙ Фәнил Фәйзуллин менән Дамир Вәлиевтың суверенитетты яҡлау юҫығындағы үтә тура һүҙле сығыштарынан һуң ҡапыл ҡуҙғып киткән залда: «Америка индеецтары резервацияла йәшәйҙәр бит, ниңә быларҙы ла шунда ҡыуып индермәҫкә?» – тигән фекер яңғырауы ла шул уҡ һөрһөгән империя фекерләүе түгелме ни? Улар бит беҙҙең

суверенитетты ваҡытлыса уйын уйнау тип кенә ҡарай, милли республикаларҙың киләсәге юҡ, тип бара. Улар төп халыҡтың – башҡортмо ул, чеченмы – үҙ ерҙәрендә миллион йылдар йәшәп, милләт булып тупланыуын, мәңгелек мәҙәниәте барлығын, урыҫтарҙыҡынан да боронғораҡ тарихы булыуын күҙ алдына ла килтермәй. Сөнки Рәсәй тигән Федерацияның «Ватан тарихы» дәреслектәрендә бер ҡасан да башҡорттоң, йә татарҙың, йә иһә башҡа милләттәрҙең, этностарҙың тарихы, мәҙәниәте, территорияһы һ. б. тураһында мәғлүмәт бирелмәй. Тик урыҫ тарихы бәйән ителә! Французларҙы ла бер урыҫтар еңгән, немецтарҙы ла... Рейхстаг түбәһенә ҡыҙыл байраҡты ла урыҫтар ҡаҙаған... Александр Матросов та урыҫ – Учалы башҡорто Шакирйән Мөхәмәтйәнов түгел!

Тап ошондай сәйәсәт һөҙөмтәһендә Федерацияла бөгөн урыҫтар 85% тәшкил итә. XIV быуаттағы Мәскәү кенәзлегенә ҡушылған территорияларҙы төп халыҡтарҙан таҙартыу эҙемтәһе шундай.

## Суверенитет та бөҙрә бөтөркәме?

«Бөтә Союз» старостаһы М. И. Калинин, 1919 йылдың 20 сентябрендә РКП(б)-ның Ырымбур губерна Комитетының ябыҡ ултырышында «башҡорт мәсьәләһен» тикшергәндә, сығыш яһап, Ырымбур большевиктарын: «Автономия Башкортостана – буфер для восточных народов...» – тип өгөтләй. (*М. М. Кульшарипов.* Башкирское национальное движение. 1917–1921 гг., Уфа, «Китап», 2000, С. 235).

1990 йылдың 11 октябрендә Башҡорт Совет Социалистик Республикаһы иғлан иткән дәүләт суверенитетына килгәндә, ысын суверенитетты беҙҙең автономия, әгәр 1991 йылдың 7–8 декабрендә өс славян дәүләте – Рәсәй, Украина, Белоруссия – башлыҡтары СССР-ҙы тарҡатмаһа, Союз Килешеүенә үҙаллы ҡул ҡуйып алыр инек. Әгәр шулай насип булһа, Рәсәй Конституция – хоҡуҡи берҙәмлеген генә түгел, территориаль бөтөнлөгөн дә

юғалтыр ине. СССР президенты Михаил Горбачев ул саҡта: «Мин Союз дәүләтен һаҡлап алып ҡалыуу өсөн көрәшәм, суверенлы дәүләттәр, үҙ-ара килешеп, үҙҙәренә ҡулайлы үҙәкте төҙөр», – тигәйне. КПСС Үҙәк Комитетының сентябрь (1989 й.) Пленумында уҡ – ул партияның милли сәйәсәтенә арналғайны – Михаил Сергеевич Совет автономияһына яңы статус биреү идеяһын, йәғни ҡайһы бер автономиялы республикаларҙы союздаш дәүләттәргә әйләндереүҙе ҡуҙғатҡайны.

1990 йылдың 26 апрелендә СССР Юғары Советы «ССР Союзы менән Федерация субъекттары араһындағы вәкәләттәрҙе сикләү тураһында» закон ҡабул итте һәм шунын менән автономиялы һәм союздаш республикаларҙың хоҡуҡи статусын тигеҙләне. Автономиялы республикалар, шул иҫәптән Башҡортостан да, Совет Социалистик дәүләттәр сифатында – Федерация (ССР Союзы) субъекттары – итеп ҡаралды. Уларға үҙҙәре ингән союздаш республикаларҙы уҙып, ССР Союзына вәкәләттәрен тапшырыу хоҡуғы бирелде. Автономиялы республикалар һәм хатта автономиялы берләшмәләр (округтар, өлкәләр) үҙҙәре ингән союздаш республикалар менән (беҙ – Рәсәй менән, әйтәйек, абхаздар – Грузия, ғағауҙҙар – Молдова менән һ. б.) мөнәсәбәттәрен договорҙар һәм килешеүҙәр нигеҙендә төҙөргә тейеш ине.

Рәсәйҙәге бындай демократик үҙгәртеп ҡороуҙар милли республикаларға турайып баҫырға мөмкинлек биргәйне. Элекке автономиялы республикаларҙан Татарстан беренсе булып РСФСР-ҙан сығыуы хаҡында белдерҙе һәм ҡыйыу рәүештә бойондороҡһоҙлоҡҡа юл алды. Икенсе бер көслө регион – Башҡортостан да – үҙаллылыҡҡа аяҡ баҫты. Рәсәйҙә иң көслө һәм иң бай, иң ҙур, иң тыныс республикаларҙан иҫәпләнгән ошо ике дәүләт етәкселәренең фекерҙәре лә берҙәм һәм фиҙакәр ине...

1991 йылдың августында Башҡортостан ССР-ы менән Татарстан ССР-ы араһында Дуҫлыҡ һәм хеҙмәттәшлек тураһында Килешеүгә ҡул ҡуйыу тантанаһынан һуң ике республика етәкселәре М. Шәймиев менән М. Рәхимов-

тың берлектәге матбуғат конференцияһына әйләнеп ҡайтайыҡ...

**Һорау:** Элекке автономиялы республикаларҙан Татарстан беренсе булып РСФСР-ҙан сығыуы хаҡында белдерҙе. Бының экономик эҙемтәләре насар булыр, тип ҡурҡмайһығыҙмы?

**М. Шәймиев:** Татарстан дәүләт-ара мөнәсәбәттәрҙе Дәүләт суверенитеты тураһында Декларацияһына һәм Юғары Советы ҡарарына таянып төҙөй. Беҙ Федератив Килешеүгә ҡул ҡуймаясаҡбыҙ. Әгәр РСФСР яңырырға теләй икән, ни өсөн Конституциялағы Федерацияға нигеҙләнеп эш итә? Дәүләт-ара килешеүҙәр төҙөү күберәк үҙаллылыҡ бирә бит. Ә Рәсәй хөкүмәте бөгөнгө көндә үҙенә генә күберәк үҙаллылыҡ талап итеп, башҡа республикаларҙың яңырыуын таныръа ла теләмәй.

**М. Рәхимов:** Башҡортостандың Дәүләт суверенитеты тураһындағы Декларацияла яҙылғанса, Союз һәм яңыртылған Рәсәй субъекты булып торабыҙ. Унан һуң, кешеләрҙе икенсе сортҡа, автономияларға бүлеү өсөн фәнни теориялар ҙа юҡ. Ҡаҙаҡтарҙан, төрөкмәндәрҙән һ. б. ни яғыбыҙ кәм беҙҙең? Һәр урында һәм һәр ваҡыт ошо инаныуҙарыма нигеҙләнеп сығыш яһайым. Бик оҙаҡ иҫбат итеүҙәрҙән, бәхәстәрҙән һуң, ниһайәт, Мәскәүҙә шундай һығымтаға киленде: Башҡортосан, Союз субъекты булараҡ, Союз Килешеүенә ҡул ҡуясаҡ, ә Рәсәй менән килешеү мөнәсәбәттәре төҙөйәсәк. РСФСР бит Конституциялағы федерация һәм килешеүҙәр менән нығытылмаған. Бөтә донъяла юҡ ундай федерация. Әгәр ҙә «Башҡортостан Рәсәй составында», тигән һүҙҙәр була икән, мин Килешеүгә ҡул ҡуймаясаҡмын. Сөнки был беҙҙең хоҡуҡтарыбыҙҙы ҡыҫасаҡ. («Йәшлек», 24 август, 1991 йыл).

Шулай итеп, Михаил Горбачев реаль суверенитетҡа таянған СССР федерацияһы тураһында хыялланды. Әммә Яҡутстан менән Алматылағы, һуңынан Сумгаит, Ҡарабах, Оша, Фирғәнә, Тбилиси, Бакуҙағы ҡанлы ваҡиғалар, Балтик буйы илдәренең айырылып сығыуы ил башлығының заманса шарттарға яраҡлаша белмәүен, һаман да шул

партия һәм КГБ мәктәбе һәм большевиктарҙың ҡыҙыл террор алымдарынан арына алмай, милли мәсьәләләрҙе көс ҡулланып, армия индереп кенә хәл итергә тырышыуы Союз Килешеүенә юлды япты.

1992 йылдың февраль айында Башҡортостандың Юстиция министрлығы консультанты Әмир Солтанғәрәевтың миңә биргән интервьюһында Рәсәйҙәге һәм республикабыҙҙағы ул саҡтағы хәл-әхүәлдәр айырым-асыҡ күҙаллана, тип уйлайым:

**– Әмир Миһран улы, һеҙ милли-дәүләт мәсьәләләре буйынса ғилми эҙләнеүҙәр алып бараһығыҙ. Нисек уйлайһығыҙ, Башҡортостан үҙаллылығы механизмының эшләп китә алмауына ниҙәр сәбәпсе?**

– Үкенескә ҡаршы, үҙаллылыҡ Башҡортостанда ғына түгел, башҡа ерҙәрҙә лә еңел бирелмәй. Халыҡ-ара хоҡуҡи таяныстар булһа ла, кешелек үҙе ҡабул иткән хоҡуҡи нормаларҙы үтәй белмәй әле, күрәһең.

Белеүегеҙсә, Рәсәй етәкселәре милли республикаларҙы ҡулдан ысҡындырмау өсөн милли-дәүләт ҡоролоштарын һанға һуҡмау йүнәлешендә үҙенә күрә ҙур эш алып бара. Ҡайһы бер милли республикалар Союз килешеүенә ҡул ҡуйырға әҙерләнеп бөткәндә генә, сәйәси хәлдәр үҙгәреп китеп, Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһе барлыҡҡа килеү ҙә хәлде ҡатмарлаштырғандыр. Икенсенән, үҙ республикабыҙҙа Башҡортостандың үҙаллылығына ҡаршы торған төркөмдәргә йүнәлеш алынды һәм уларға ҡырҡа ҡаршылыҡ күрһәтелмәне. Шул уҡ ваҡытта Башҡортостан Юғары Советы күп кенә мөһим шарттарҙан файҙалана белмәй. Дәүләт суверенитетын нығытыуҙа хәл иткес булған ҡайһы бер акттарҙы ҡабул итеү һуҙылды.

**– Әгәр ҙә Рәсәй етәкселәре, бөгөнгө кеүек үк, милли республикаларҙы һанға һуҡмаусы сәйәсәт алып барһа, милли республикаларҙа ығы-зығы тыуыуы, Рәсәй эсендә сәйәси хәлдәр ҡатмарлашыуы мөмкин бит.**

– Эйе, Рәсәй етәкселәре быларҙы ни өсөндөр күрмәмешкә һалыша, башҡа халыҡтарҙың мәнфәғәтен иҫәпкә алмай, тик Рәсәй империяһын ғына нығытырға тырыша. Был, әлбиттә, уларҙың «һуҡырлығы» буласаҡ. Бер

халыҡты ла бәйләп, көсләп, уларҙың мәнфәғәте менән иҫәпләшмәй, империя эсендә тотоп булмай. Халыҡтарҙың иң намыҫына тейгән нәмә – үҙҙәрен һанға һуҡмау, бер үк ваҡытта байлыҡтарын файҙаланыу.

**– Бәлки, Рәсәй составында ҡалырға кәрәктер, тигән фекерҙәр әйтелә.**

– Рәсәй составында ла булырға мөмкин, әгәр ҙә ул дәүләт милләтенең мәнфәғәтен инҡар итмәһә, үҙ милләте менән тиң күрһә һәм ул милләтте йотоу өсөн йәшерен сәйәсәт алып бармаһа. Милли хәрәкәттәр ҡуҙғалыуына ла ошолар сәбәп булып торалыр, тип уйлайым. «Иҡтисади реформалар уҙғарырға ҡамасаулайһығыҙ», – тигән һылтау менән Рәсәй етәкселәре милли республикаларға ҡарата элекке сәйәсәтенән һаман да арына алмай әле.

Өфө ҡала советының бер нисә депутатын ғына алайыҡ. Башҡортостан суверенитетына ҡаршы сыҡҡандарҙың күбеһен яҡындан беләм, ә Рәсәй кимәлендәгеләре (уларҙың байтағы бөгөнгө көндә Рәсәй етәкселегендә дәүләт советниктары, консультанттар һәм башҡа яуаплы вазифа башҡара) ваҡытында Мәскәү университетында, һәр милләттең үҙбилдәләнешкә хоҡуғы бар һәм һәр милләт башҡа милләттәр менән тиң хоҡуҡлы булырға тейеш, тигән темаға лекциялар уҡый торғайнылар.

**– Ни өсөн һуң улар һуңғы ваҡытта үҙгәрҙе? Өфөләгеләре, Башҡортостандан ҡыуырҙар, шуның өсөн алдан һөжүмгә күсеү хәйерлерәк, тигән борсолоу менәнме, әллә Башҡортостанды губерна итеп, үҙҙәре Рәсәй батшалығының наместнигы булып ултырыу теләгенәнме?**

– Юҡтыр. Ҡандарына һеңгән бөйөк державасылыҡ шовинизмылыр был, тигән фекергә киләм. Бойондороҡһоҙлоҡ, тиң хоҡуҡлыҡ өсөн көрәшкән халыҡтарҙы күрмәмешкә һалышыу ҙур бәлә-ҡазаға килтереүе ихтимал. Сөнки бойондороҡһоҙлоҡҡа ынтылыш буйһонған халыҡтың ҡанында һаҡлана һәм, тарих күрһәтеүенсә, көрәш ваҡытлыса ғына туҡталып торорға мөмкин.

Мәҫәлән, тәүҙә Балтик буйы республикалары үҙҙәренең бойондороҡһоҙ дәүләтен булдырыу өсөн көрәшә баш-

лағас та, элекке Үҙәк ең һыҙғанып уларҙы Союзда ҡалдырырға тырышты. Ләкин Балтик буйы үҙ теләгенә иреште, ә һуңыраҡ башҡа элекке союздаш республикалар ҙа бойондороҡһоҙ дәүләт булдылар. Әммә был Рәсәй етәкселәренең элекке автономияларға мөнәсәбәтен үҙгәртә алманы.

**– Тимәк, һеҙҙең фекерегеҙсә, бөтә элекке автономиялар Рәсәйҙән айырылырға, Федерация емерелеүгә дусар булырға тейешме?**

– Әлбиттә, экология насарайыу айҡанлы, ерҙең глобаль проблемалары ла күп, шулар өҫтөндә бергәләп эшләп, бер-береңә ярҙам итеп йәшәүгә ни етә. Ләкин Рәсәй етәкселәре һәр халыҡтың мәнфәғәтен, ысынлап та, ихтирам итмәһә, һәр халыҡҡа еренә, эшләп сығарған байлыҡтарына хужа булып йәшәргә ирек бирмәһә, һис шикһеҙ, киләсәктә Рәсәй империяһы ла, Союз кеүек үк, емереләсәк.

Эш бит Рәсәйҙән айырылыу-айырылмауҙа түгел, дәүләт ҡоролошонда ғына ла түгел. Проблеманың тамыры – кешеләрҙә. Кешеләрҙең этносына хас булмаған көнкүреште, динде, телде милләттәргә көсләп тағырға, уларға бергә йәшәргә бойорорға ярамай. Һәр этносҡа үҙе өйрәнгән, уға ҡулай булған тәбиғи шарттарҙа йәшәүе яҡшыраҡ. Белеүегеҙсә, халыҡтарҙы, бигерәк тә ғөрөф-ғәҙәттәре менән ныҡ айырылғандарын, ҡушыу йүнлегә алып бармай. Киреһенсә, әҙерәк айырымыраҡ йәшәү этник конфликттарҙы баҫа, этностарҙың ғүмерен оҙайта һәм уларға үҫергә булышлыҡ итә.

Уйлап ҡарағыҙ, кешенең тәбиғи күренеше үҙгәрә, ә физиологияһы шул килеш ҡала. Был иһә милләтте рухи фәҡирләндерә, уны тарҡалыуға алып бара һәм үҙенсәлекле милләт булып ҡалыуҙан мәхрүм итә. Һеҙөмтәһе мәғлүм, мәҫәлән, бөгөнгө көндә милләттең хәмер эсеүгә әүәҫ булыуын, телевидение, матбуғат аша порнографияны пропагандалау, башҡа кире күренештәрҙе генә алайыҡ.

Шулай булғас, бойондороҡһоҙлоҡҡа ынтылыштың тамырҙары бик тәрән һәм ул тик торғанда ғына килеп сыҡҡан нәмә түгел.

**– Бөгөн бит донъя кимәлендә төрлө илдәр берләшә. Мәҫәлән, Европа Иҡтисади Берләшмәһе, Европарламент, шул уҡ БДБ?**

– Әммә берләшеү тәбиғи шарттарҙа булырға тейеш. Бына һеҙ һанап үткәндәр бер ниндәй көсләүһеҙ, өгөтләүһеҙ барлыҡҡа килде...

(«Йәшлек», 15 февраль, 1992 йыл).

* * *

Әммә большевиктар илендә ҡыҙылдар һәм аҡтар уйыны артабан дауам итте: Көньяҡ һәм Төньяҡ Осетия, Ингушетия, Абхазия, Чечня... 1992–1993 йылдарҙа ғына федераль бюджетҡа бер каналлы система аша һалымдар күсереп ҡалған Башҡортостан, Татарстан, Чечня һәм Яҡут-Саханы ла тиҙҙән ауыҙлыҡланылар: «демократик» Рәсәйҙә 1993 йылдың 12 декабрендә унитар Конституция ҡабул ителде. Дөрөҫ, ул Конституция өсөн милли республикалар ғына түгел, хатта ҡайһы бер урыҫ өлкәләре ла тауыш бирмәне. Әммә халыҡ фекеренә Рәсәйҙә кем ҡолаҡ һалһын. «Суверенитет» тигән костюм шулай тарайғандан-тарайҙы.

## УЛ РӘСӘЙҘЕ ҠОТҠАРҘЫ!

1994 йылдың 3 августында Рәсәй Федерацияһы менән Башҡортостан Республикаһы араһында төҙөлгән Договорҙы күптәр шулай баһаланы. Шул иҫәптән Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты Ринат Солтанов та. Мөһим документҡа ҡул ҡуйыуға 5 йыл тулған көндәрҙә уның менән әңгәмә ҡорғайным. Депутаттың фекерҙәре бөгөнгө сәйәсәттең күп кенә ҡараңғы мөйөштәренә яҡтылыҡ бөрктө.

*- Ринат Ишбулды улы, иң тәүҙә тарихҡа күҙ һалайыҡ. 90-сы йылдар башында азатлыҡ даулаусы Ингушетияға һәм Чечняға Рәсәйҙең ғәскәр индереүе, халыҡтарҙы ҡанға батырыуы, милли-территориаль дәүләттәрҙе губерналарға әйләндереүгә йүнәлеш тотоуы, ул ваҡыттағы Рәсәй Дәүләт Думаһы рәйесе Иван Рыбкиндың, Чечнялағы кеүек*

*ук. Башкортостанда һәм Татарстанда ла бандит отрядтары юк ителәсәк, тип раçлауы... Ҡурҡыныс һәм таныш алымдар... Башкортостан шундай катмарлы шарттарҙа Рәсәй Федерацияһы менән ике яклы Договор төҙөү өçтөндә әүҙем эш башлагайны...*

– Эйе, был юçыҡта республика етәкселеге, Үҙәк менән республиканың үҙ-ара мөнәсәбәттәрен тамырынан үҙгәртеү бурысын ҡуйып, тәүәккәл эш итте. Ошо аҙым үҙе бер батырлыҡ булды, сөнки иçкесә йәшәү башҡаса мөмкин түгел ине. Дөрөç, был хаҡта күп һөйләнеләр, хатта фильмдар ижад иттеләр. Әммә, Пушкин әйтеүенсә, Рәсәйҙә властарға ҡаршы бөтөн сығыштар һәр ваҡыт мәғәнәһеҙ һәм аяуһыҙ болалар менән тамамланған. Ә иçке тормошто үҙгәртеү өсөн көрәштең мәғәнәле булыуы кәрәк ине. Аңһыҙ ҡан ҡойоштан ҡоттары осоп ситкә тайпылмаһындар, киреһенсә, берләшеп һәм килешеп эш итһендәр өсөн мөһим булды был. Икенсенән, беҙҙең күптәребеҙ совет тормошоноң иң юғары ҡаҙанышы тип иçәпләгән «байрам суверенитетынан» һәм ҡунаҡ өçтәлдәрендә генә танылған «халыҡтар дуçлығы»нан баш тартыу өсөн дә көс талап ителде. Тантаналы юбилейҙарҙа республикаларға һәм уларҙың етәкселәренә ордендар, миҙалдар таратҡанда төп бәлә «халыҡтар дуçлығы» һүҙенең үҙ-ара күрә алмаусанлыҡты һәм бер-береңә шикләнеп ҡарауҙы йәшерергә тырышыуҙа ине. Тимәк, иçкелектән баш тартыу механизмын тәҡдим итеү ваҡыты еткәйне. Юғиһә бит, Үҙәк власть республикалар өсөн бөтөн ваҡ-төйәк мәсьәләләрҙе лә үҙе хәл итергә тырышты – яңы бина һалыу, мәктәп төҙөү, кемделер хөкүмәт йортона эшкә алыу өсөн дә Мәскәүҙән рөхсәт һорарға кәрәк ине. Йәғни, власть «макарон эштәре» менән шөғөлләнә башланы. Шуға күрә, уның ҙурыраҡ, етдиерәк эштәрҙе башҡарырға ваҡыты ҡалманы. Шул ваҡытта республикалар Үҙәктең ҡайһы бер вәкәләттәрен үҙенә алырға, йәғни, «үҙе йота алғансы суверенитет юлларға» ҡарар итте.

*– Ләкин Мәскәү элекке автономиялар менән ике яклы Договор төҙөүҙе, Рәсәйҙе бүлгеләү һәм таркатыу, тип караны.*

– Үкенескә ҡаршы, бөгөнгө көндә лә бик күп сәйәсмәндәр ике яҡлы Договорға ҡаршы сығыш яһай, беҙҙең етәкселекте сепаратизмда, Рәсәйҙе бүлгеләүҙә ғәйепләй һәм бик аҙ кешеләр генә уның Рәсәйҙе ҡотҡарып алып ҡалыуын аңлай. Ысынбарлыҡта иһә ошо мөһим документтар яңыртылған Рәсәйҙе төҙөүгә нигеҙ бирә.

*– Тимәк, «берҙәм һәм бүленмәҫ Рәсәй» тезисы көн үҙәгенән алынмаған икән әле. Әммә Договор этник һәм территориаль бөтөнлөктө, милләтте һәм суверенитетты һаклап алып ҡалыу өсөн мөһим. Ошо йәһәттән Думала һеҙҙең фекерҙәштәрегеҙ күпме?*

– Юҡ, бик аҙ. Дума быйыл РФ менән субъекттар араһында идара итеү даирәһе сиктәрен билдәләү һәм үҙ-ара вәкәләттәр бүлешеү принциптары тураһында закон ҡабул итеп – Президент ҡул ҡуйҙы инде – ике яҡлы Договорҙы ысын мәғәнәһендә юҡҡа сығарҙы. Йәғни һәр ҡабул ителгән яңы закондың уға яраштырылыуы мотлаҡ. Дума, дөйөм алғанда, бер парламент сессияһында, йәғни ярты йылда, 160–180 закон ҡабул итһә һәм уларҙың унауһы Үҙәк менән төбәктәрҙең үҙ-ара мөнәсәбәттәренә ҡағылһа, тимәк, федерация субъекттары хәҙер үк ҡалтырана-ҡалтырана һәм йүгерә-йүгерә үҙ закондарын һәм конституцияларын үҙгәртергә тейешме? Был бит асыҡтан-асыҡ Үҙәктең диктаторлығына, баш-баштаҡлығына килтерә. Беҙҙең Конституцияны ниндәйҙер бер төркөм түгел, ә халыҡ референдумда раҫлаған, ул тотош республиканың яҡлауын тапҡан. Рәсәй шуны ихтирам итергә тейеш түгелме? Минеңсә, Думалағы күпселек үткәргән ошо закон республикаларға, Федерация субъекттарына һәм, асылда, Рәсәйгә ҡаршы йүнәлтелгән. Шуға күрә беҙ 3 августа төҙөлгән Договор өсөн аяҡ терәп көрәшергә тейешбеҙ. Бүтән юл юҡ.

*– Башҡортостан, Рәсәй менән ике яҡлы Договор төҙөп, былай ҙа дәүләтселеге өсөн мөһим булған байтаҡ вәкәләттәрен һәм хоҡуҡтарын Рәсәйгә ҡалдырғайны. Ғәмәлдәге Договорҙың киләсәге бармы?*

– Әгәр беҙ уны әүҙем яҡламаһаҡ, ведомстволар һәм министрлыҡтар менән яңы килешеүҙәр төҙөп нығытмаһаҡ,

бөтөн республика халҡына ике яҡлы Договорҙың беҙгә нимә биреүен аңлатыу эштәрен алып бармаһаҡ, уның эштән сығыуы ла ихтимал, әлбиттә. Ә ул артабан үҫтерелергә, аныҡ һәм йөкмәткеле эштәр менән тулыландырылырға тейеш. Быны Президент, Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай һәм Министрҙар Кабинеты ғына түгел, ә бөтөнөбөҙ ҙә асыҡ күҙ алдына килтерергә бурыслыбыҙ, сөнки Договорҙы яҡлау – киләсәктәге уңыштарыбыҙ нигеҙе ул. Беҙҙең был мөһим документ Мәскәү сәйәсмәндәренең күҙенә аҡ булып төшкән, әгәр мөмкин булһа, улар уны бөгөн үк юҡҡа сығарыр һәм оноторға тырышыр ине. Тимәк, беҙ шуға юл ҡуймаҫҡа тейеш.

* * *

1999 йылдың һуңғы, декабрь айы. Рәсәй Думаһына һайлау кампанияһы бара. Төрлө хәрәкәттәр, ойошмалар, фракциялар, партиялар һ. б., һимеҙерәк ҡалъя эләктереп ҡалырға ашыҡҡандай, уҙыша-баҫтырыша бер-береһенә сүп өйөргә, төрлө лаҡаптар тағырға, берен-бере ришүәтселектә, мафиозлыҡта ғәйепләргә тотондо. Ә Чечняла, Дағстанда һуғыш тынманы, МВД, ФСБ, ОМОН, десант һәм язалаусы отрядтарға әйләнгән башҡа шундай даирәләр, «ваһһабиттар», «мосолман фундаменталистары» һылтауы менән илде урыҫ булып тыумағандарҙан «таҙартыу» менән мәшғүл булды.

Думаның ғәмәлдәге рәйесе Геннадий Селезневтың Мәскәү өлкәһе губернаторы булып һайланыу мәшәҡәттәренә сумыуына ҡарамаҫтан, комитеттар, шул иҫәптән Милләт эштәре буйынса комитет та, тотороҡло эшләне. 2000 йылға хәйерсе федераль бюджет ҡабул ителде. Рәсәйҙең «йыртыҡ тунын» һәр кемдең үҙ яғына тартыуы ыҙғыш-янъялдар ҙа ҡуптарҙы. Бюджет-ара нығынған тәртиптәрҙе яңынан ҡарап сығырға тырышыуҙар, Федерация субъектарынан средстволарҙы тартып алып, Үҙәктә туплarға саҡырыуҙар бик күңелһеҙ күренеш булды. Был йәһәттән тарих фәндәре докторы, профессор, танылған йәмәғәт эшмәкәре, арҙаҡлы сәйәсмән Марат Ҡолшәрипов

хаҡлылыр: «Мәскәүгә (дөрөҫөн әйткәндә, илгә идара итеүсе олигархтарға) тотороҡло иҡтисады булған республиканың кәрәге юҡ... Власть эйәләрен хоҡуҡһыҙ колония ныҒыраҡ ҡәнәғәтләндерер ине, сөнки был осраҡта ул байлыҡ сығанағына әүерелә. Ҡайһы берәүҙәр, «берҙәм һәм бүленмәҫ Рәсәй» шаршауына йәшеренеп, республикабыҙҙың ерҙәрен, тәбиғи байлыҡтарын һәм ресурстарын үҙ ҡулына төшөрөргә тырыша... Чечняны бомбаға тотоп, емереклектәргә сорнанылар – аяуһыҙ көс ҡуллынауға нигеҙләнгән колониаль сәйәсәттең сағыу күрһәткесе был... Тимәк, хәҙерге хакимиәт үҙаллы, көслө республикалар урынына таланған Рәсәй губерналары булдырыуҙы өҫтөнөрәк күрә... Үкенескә ҡаршы, унитаристар чечен фажиғәһенән бәләкәй генә булһа ла һабаҡ алырға теләмәй. Милли республикаларҙы бөтөрөүгә йүнәлтелгән сәйәсәт яңынан-яңы милләт-ара көсөргәнеш усаҡтарын тыуҙырасаҡ..! («Башҡортостан», 3 август, 2000).

Эйе, Рәсәйҙең Үҙәк власть органдарында милли республикаларҙың мәнфәғәттәрен яҡларлыҡ комитет та, ойошма ла, министрлыҡ та, фракция ла юҡ. 1999 йылда, Думала Милләттәр эштәре буйынса комитет эшләгәндә, Рәсәй Федерацияһындағы аҙ һанлы халыҡтарҙың хоҡуҡтарын яҡлау буйынса бик мөһим закон ҡабул ителгәйне, унан һуң, Федераль Йыйылыш эргәһендә күп йәки аҙ һанлы халыҡтарҙың хоҡуҡтары буйынса вәкил вазифаһын индерергә, тигән тәҡдим булғайны. Сөнки, белеүебеҙсә, илдә 178 милләт йәшәй, ә Федерация субъекттары – 89. (Унан һуң, Башҡортостандан ситтә ҡалдырылған 600 мең башҡорт халҡының да хоҡуҡтары Рәсәй парламентында бер нисек тә яҡланмай).

Был үтә мөһим закон проекты яҡын киләсәктә ҡабул ителһен өсөн күп көс һалырға, тир түгергә тура киләсәк. Уны тормошҡа ашырырға бирмәйәсәктәр, ҡаршы төшәсәктәр.

Шулай ҙа, беҙ ышаныс бағлап һайлаған депутаттарыбыҙ ең һыҙғанып эшкә тотондо. Улар араһында республикабыҙ мәнфәғәттәре өсөн быға тиклем дә аяҡ терәп көрәшеүсе уҙамандарҙың байтаҡ ҡына булыуы

ҡыуандыра, киләсәктә ниндәйҙер ыңғай үҙгәрештәргә өмөтләндерә. Әйтергә кәрәк, Башҡортостан ямышы бөгөн ниндәйҙер кимәлдә улар ҡулында. Дәүләткә идара итеү һәм парламент эшендә ҙур тәжрибә туплаған Михаил Бугера һәм Рим Баҡыев, йөмһүриәтебеҙҙең иҡтисади һәм сәйәси мөстәҡиллегенә һәр береһе үҙенең тос өлөшөн индергән академиктарыбыҙ Хәлил Барлыбаев, Рәғиб Ғимаев, Роберт Ниғмәтуллин, механизаторҙан министрға ҡәҙәр хеҙмәт юлын үткән Франис Сәйфуллиндар киләсәктә лә һынатмаç, моғайын.

Яңы парламент эшләй башлағас та депутаттарыбыҙҙың береһе Франис Әсҡәрйән улы Сәйфуллин менән осрашып һөйләшкәйнем. Унық тормошҡа ғәмәли мөнәсәбәте, киләсәккә ышаныс, тормошҡа өмөт менән ҡарауы, һәр нәмәнең яҡшы яғын күрә белеүе һоҡландырҙы.

Тәүҙә үҙе тураһында бәләкәй генә белешмә бирел китәйек: 1950 йылдың 4 сентябрендә Дыуан районының Ҡәҙер ауылында тыуған, урта мәктәпте тамамлағандан һуң колхозда эшләгән, армияла хеҙмәт иткән. Дыуанда ауыл хужалығы техникумын бөтөргәнгә тиклем тракторсы ла була, аҙаҡ – агроном. Башҡортостан ауыл хужалығы институтын тамамлағанға тиклем – үҙ районының Рухта ауыл советы рәйесе, диплом алғас – «Урал» колхозы рәйесе. 1987 йылдан – партия һәм совет эшендә. 1991-ҙә район хакимиәте етәксеһе итеп һайлана. 1995-тә – БР ауыл хужалығы һәм аҙыҡ-түлек министры. Ф. Ә. Сәйфуллин – иҡтисад фәндәре кандидаты, бер нисә китап һәм фәнни мәҡәләләр авторы, Башҡортостандың атҡаҙанған ауыл хужалығы хеҙмәткәре. Өйләнгән, дүрт бала тәрбиәләй.

Думала Франис Сәйфуллин аграр сәйәсәт комитетының рәйес урынбаçары итеп һайланды һәм ауыл хужалығы проблемалары менән шөғөлләнде. Быға ҡағылышлы бик мөһим закондар ҡабул итәһе бар ине. Шуларҙың береһе – хаҡтарҙы тигеҙләү тураһында. Хәҙер бит инде ауыл хужалығы продукцияһының хаҡы юҡ, ә сәнәғәт тауарҙары, электр сығанаҡтары бигерәк ҡиммәт. Ошо

хаҡта ун йыл һөйләйҙәр һәм ... фәтүәһеҙ! Депутаттан һорайым:

– *Быға тиклем шуны эшләргә нимә ҡамасауланы икән?*

– Ябай ғына итеп әйткәндә, Дәүләт Думаһында ауыл хужалығын аңлаусы кешеләр гел әҙ булды, – тип һөйләп алып китте депутат. – Уларҙы сәнәғәтселәр, машина төҙөүселәр яҡламаған, бигерәк тә нефтселәр, газ өлкәһендәгеләр ҡаршы төшкән, ЛДПР һәр саҡ тәүәккәл рәүештә киреләнгән. Ауыл хужалығы тауарҙарына хаҡты күтәрһәң, айырманы нимә иҫәбенәлер ҡапларға кәрәк бит. Газ, нефть, сәнәғәт иҫәбенә, тип тәҡдим иткәндәр. Уға бармағандар.

Беҙ үҙебеҙ комитетта ауыл хужалығы машиналарын етештереүҙе тергеҙеү мәсьәләһен күтәреп сыҡтыҡ. Беҙҙең бит бөтә техника – комбайндар, тракторҙар, мал аҙығын йыйыу машиналары – иҫкергән. Хәҙер Дондағы Ростовтан комбайндар килмәй – беҙҙе Америка, Италия, Германия тәьмин итә. Волгоградтағы, Алтайҙағы трактор заводтары ярты көсөнә генә эшләй, йә тик тора, ә Павлодарҙағыһы Ҡаҙағстанда ҡалды... Унан һуң, ил иҡтисады менән быға са бер кем дә шөғөлләнмәне. Илдең хужаһы үҙе хәстәрләмәгәс ни... Бына, әйтәйек, беҙҙең Президентыбыҙ эштән туҡтаһа, республика шунда уҡ көрсөккә терәләсәк...

**– Ауыл хужалығы машиналарын тергеҙеү өсөн иң тәүҙә нимә эшләргә кәрәк һуң?**

– Завод, фабрикаларҙы эшкә ҡушырға... Тик тәүҙә уларҙың продукцияһын нисек итеп реализациялау тураһында ныҡлап уйлаштырыу фарыз. Юғиһә бит шундай юғары хаҡ менән бер кем дә һатып ала алмай. Шуның өсөн, әйтәйек, техниканы биш йылға бурысҡа биреп тороу, оҙайлы һәм ҡыҫҡа кредиттар булдырыу, башҡа саралар иҫәбенә машиналарҙы арзанайтыу юлдарын ғәмәлләштерергә кәрәк. Юғиһә, хатта техника сығара башлаһалар ҙа, крәҫтиәндең һатып алырға аҡсаһы юҡ. Сөнки үҙе етештергән продукция табыш килтермәй. Бер комбайн бер миллион тора – кәм тигәндә, 400–500 баш һыйыр малы хаҡы! Бер трактор һатып алыр өсөн 120

һыйыр малы һатыр кәрәк. Ә әүәл, мәҫәлән, мин колхоз рәйесе булып эшләгәндә, ете баш һыйыр малына бер трактор һатып ала торғайныҡ.

*– Яҡшы, завод-фабрикалар эшкә ҡушылһа, тимәк, илдә эшһеҙлек проблемаһы ла әҙерәк көсөргәнешлеген юғалтасаҡмы?*

– Әлбиттә, Башҡортостанды ғына алғанда ла, Өфө баҙарҙарындағы «челнок»тар кире УМПО-ға, агрегат заводына һәм башҡа предприятиеларға эшкә килмәһә, шуға тиклем беҙҙең ҡаҙнала аҡса булмаясаҡ. Бюджет аҡсаһын бит инде гел ошо завод, фабрикалар, машина эшләүселәр, нефтселәр, газ сәнәғәте өлкәһендә эшләүселәр «сүкене». Ә бөгөнгө көндә шундай ҙур ил, нигеҙҙә, нефть һәм газ һатыу иҫәбенә йәшәй. Бөтөн башҡа сәнәғәт эшһеҙ тора...

*– Ике йыл элек «бөйөк приватизатор» Чубайс, Үҙәк телевидениенан сығыш яһап, Рәсәйҙә бөгөн меңәрләгән кеше «токсайлы» («челночники»), был бит бик яҡшы, әммә улар тағы ун тапҡырға күберәк булырға тейеш, шул саҡта тормош тағы ла шәберәк буласаҡ, тигәйне...*

– Был бөтөнләй яңылыш фекер, «челнок»тар тауарҙы күбеһенсә Төркиәнән, Ҡытайҙан ташый, тимәк, шунда беҙҙең валютаны илтә һәм улар иҡтисадына индерә. Шул илдәрҙән сепрәк алып ҡайталар ҙа йәнә валютаны уларға илтәләр. Бынан бит беҙҙең илгә бер ниндәй файҙа юҡ. Касса аппараттары ҡуйып маташһалар ҙа, улар түләгән һалым бик әҙ бит ул. Халыҡты эш урынына кире ҡайтарырға кәрәк.

*– Рәсәй Президенты вазифаһын башҡарыусы Путин бөгөнгө көндә игенде сит илдән һатып алмаҫҡа, тик үҙебеҙҙә етештерергә, хатта экспортҡа сығарырға кәрәк, тине. Ә техникаһыҙ быға нисек ирешмәк кәрәк? Шуға күрә заказдарҙы оборона сәнәғәтенә түгел, ә ауыл хужалығы машиналарына арттырырға кәрәкмәнеме икән?*

– Был һорауға бер төрлө генә яуап биреп булмай. Әйтәйек, ҡайһылыр илдә ҡоралға ихтыяж бар икән, ниңә ҡорал һатыуҙан баш тартырға? Беҙ һатмаһаҡ, урыны-

быҙҙы бүтәндәр аласаҡ, мәҫәлән, Америка Ҡушма Штаттары.

*– Ә эштең әхлаки яғына нисек ҡарайһығыҙ? Төньяҡ һәм Көньяҡ Йәмән һуғышканда беҙҙең ил ике яҡты ла ҡорал менән тәьмин итте, тимәк, планеталағы ҡыҙыу нөктәне көсәйтте, ә бөгөн килеп, Иракты атом ҡоралы менән «байытмаксы»... Унан һуң, ошоларҙы күҙәтеүсе БМО, Европа Советы бар бит инде...*

– Әммә бөгөн Рәсәйҙең оборона сәнәғәте бөтөнләй эштән туҡтаған. Ниндәйҙер кимәлдә ул бит эшләргә тейеш. Хәрби офицерҙарҙың йәшәр урыны юҡ, эш хаҡы түләмәйҙәр. Был да эш түгел. Армия есеменә тура килергә тейеш барыбер.

*– Әммә элекке Союздың төрлө мөйөштәрендә урынлашкан һәм бер-береһенә тығыҙ бәйле булған завод-фабрикаларҙы эшкә ҡушыр өсөн элекке СССР-ҙы һәм Совет армияһын тергеҙергә кәрәк булмаҫтыр бит инде?*

– Элекке союздаш республикалар хәҙер мөстәҡил илдәр булып йәшәй, кире СССР-ға ҡыуып индереп булмаясаҡ. Ләкин, Европаға ҡарайыҡ – ул бөгөн берләшә, уртаҡ валютаһын булдыра, Европа илдәре интеграциялана. Ә ниңә беҙ киреһен эшләргә тейеш? Таможнялар, сик буйы һалымдары бөтә нәмәне ҡиммәтәйтә генә. Беҙгә лә бит берҙәм иҡтисади киңлек барлыҡҡа килтергәндә насар булмаҫ ине.

*– Ауыл халҡының, икмәк, ит, һөт, май етештереүселәрҙең хәлен бер аҙ еңеләйтеүсе закондар ҡабул итерлек өмөтлө депутаттар күренәме Думала?*

– Барҙар. Ауыл хужалығын аңлаусы белдекле кешеләр юҡ түгел. Күп төбәктәрҙән минең коллегаларым – ауыл хужалығы министрҙары – үткән.

*– Ә Думала Рәсәй төбәктәре һәм өлкәләре менән Үҙәк араһындағы тауыштар нисбәте ниндәй?*

– Хәҙер ҙә мәскәүҙәр күп. Улар бит партия исемлектәре буйынса үтә. Минең фекеремсә, бындай һайлауҙарҙы бөтөрөргә кәрәк. Шул уҡ Зюганов, Харитонов, Жириновский, Явлинскийҙар дүртенсе тапҡыр һайланалар. Улар бит бер мандатлылар кеүек бер ваҡытта

ла һайлаусылары алдында баҫып торғандары юҡ. Өйҙә, мейес башында ятып ҡына исемлек буйынса үтәләр ҙә үҙҙәрен Дәүләт Думаһында тип иҫәпләйҙәр. Дума уларҙың шәхси Думаһына әйләнә башланы. Шуға үҙҙәрен әрһеҙ, оятһыҙ тоталар. Ҡыҫҡаһы, штаттағы депутаттарға әйләнделәр. Халыҡтың бәләһен дә, хәлен дә аңламай ҙа, белмәй ҙә улар. Шул уҡ ваҡытта һайлау закондарын үҙгәртеп тә булмаясаҡ. Сөнки коммунистар, «Единство» һәм «Халыҡ депутаттары» берләшеп тауыш биреп, депутат өҫтөнлөктәрен һәм партия исемлектәре буйынса һайлауҙарҙы бөтөрөүгә юл ҡуймаясаҡ...

## ФЕДЕРАЛИЗМДЫҢ КИЛӘСӘГЕ БАРМЫ?

Тотош Рәсәйҙең рухи һәм иҡтисади көрсәккә терәлеүе, ниндәй алдынғы сәнәғәттең, ҡеүәтле ауыл хужалығының тар-мар ителеүе демократияны һәм милли республикалар үҙаллылығын, ғөмүмән, федерализм принциптарын ҡыҫырыҡлау менән йәнәшә барҙы.

2000 йылдың 24–25 ноябрендә баш ҡалабыҙ Өфөлә уҙғарылған Рәсәй Федерацияһы интеллигенцияһының форумында Рәсәй халыҡтары ассамблеяһы Советы рәйесе Рамазан Абдулатипов был хаҡта бик әсенеп һөйләгәйне: «Күптән түгел генә бер профессорҙың милләт проблемаларына арналған китабын уҡығайым. 780 битлек! Һәм тотошлайы менән, рустарҙан башҡа, бүтән милләттәр – бөтәһе лә мафиоздар, тип әйтеүгә бағышланған. Йәһүдтәр, ҡаҙаҡтар, татарҙар, башҡорттар – барыһы ла мафиоз милләттәр! Етмәһә, был I том ғына икән әле. II томын уҡыйым. «Беҙ»ҙе һәм «улар»ҙы ҡаршы ҡуйыу, милләт-ара күрәлмаусанлыҡ уятыу дауам ителгән. Ә ул арала «Независимая газета», Рәсәй паспортында милләтте күрһәтмәү – һуңғы йылдарҙа милли сәйәсәттәге төп ҡаҙанышыбыҙ булды, тип мәҡәлә баҫтырҙы... Тимәк, һеҙҙе паспортта яҙмағас, донъяла юҡ булып сығаһығыҙ.

Мин Мәскәүҙә һатылған тарих дәреслектәренең бөтәһен дә ҡарап сыҡтым. Барыһы араһынан тик берәүһенең

генә тәүге бүлегендә күп милләтле илдә йәшәүебеҙ иҫкә алынған. Ошонан һуң беҙ нисек һәм кемде тәрбиәләргә йыйынабыҙ? Мосолмандар тураһында, ғәрәп далаларындағы ҡырағай бедуиндар дине, тип кенә әйтеп үтелгән. Бына шунан һуң беҙ «ваххабиттар» тип саң ҡағабыҙ... Конституцияның беренсе битендә, «Беҙ, Рәсәйҙең күп милләтле халҡы» тип яҙыу ғына аҙ, һәр һүҙҙең мәғәнәһен асыҡлап үтергә кәрәк. Улар нимәне аңлата?».

2000 йылдың йәйендә Дәүләт Думаһы ҡабул иткән Федерация Советы тураһындағы яңы закон да милли республикаларҙың һәм уларҙың президенттарының йоғонтолоғон кәметеүгә, уларҙың Федерация эштәрендә ҡатнашыуын туранан-тура сикләүгә йүнәлтелгәйне. Хәтерегеҙҙә булһа, Рәсәй субъекттарында «суверенитеттар параде» һәм президент һайлауҙары башланғас та Борис Ельциндың һәр республикала үҙ вәкилдәрен тәғәйенләргә һәм шулар аша ғына эш итергә тырышыуы килеп сыҡмағайны. Ысын демократия, фекер төрлөлөгө хакимлыҡ иткән ҡыҫҡа ғына осор ине ул. Уның ҡарауы, Владимир Путин быны, субьекттар менән кәңәшләшеп тә тормайынса, власҡа килеүенең тәүге көндәренән үк көсләп таҡты.

2000 йылдың 14 майы. Үҙәк телевидениеның ОРТ каналы. Тележурналист Сергей Доренко программаһы: «Рәсәйҙе тарҡатыу ҡурҡынысы менән янаған региондар сепаратизмы темаһын дауам итәбеҙ. Рәсәй закондарын, иң тәүҙә Конституцияны, һанға һуҡмау тураһында һүҙ бара. Был аҙнала президент Путин Ингушетия президенты менән Амур өлкәһе губернаторының законһыҙ акттарын көсөнән сығарҙы. Владимир Путин Башкирияға ла закондарын Рәсәйҙекенә тура килтерергә тәкдим итте. Татарстан, минеңсә, Рәсәй Федерализмына Башҡортостанға ҡарағанда ла нығыраҡ ҡаршы торасаҡ. Президент Шәймиев бит, региондарҙың үҙаллылығын сикләргә маташыуҙар бойомға ашырыла алмай, тине. Әммә Чечняның үҙаллылығын сикләү, ризалашмай булдыра алмайһығыҙ, өлөшләтә тормошҡа ашырыла бит. Шәймиев артынан Татарияның Дәүләт Советы рәйесе Рәсәй Кон-

ституцияһына Татария законадарына ярашлы итеп төҙәтмәләр индерергә саҡырҙы[1]. Путинға Рәсәй дәүләтселеген ныҒытыуҙың ни тиклем ауырға төшәсәген был тағы бер тапҡыр иҫбатлай... Бөгөн Владимир Путин республикаларҙы, крайҙарҙы һәм өлкәләрҙе территориаль принцип буйынса берләштереүсе 7 федераль округҡа бүлеү тураһындағы Указға ҡул ҡуйҙы. Һәр округҡа президенттың тулы хоҡуҡлы вәкиле тәғәйенләнәсәк. Был Указ Конституцияны көсөнән сығармай, әммә президент хәҙер вәкилдәре аша эш итәсәк...»

Шул уҡ көндө НТВ каналы аша Евгений Киселевтың программаһы ла алып барылды. «Илдең аҡыл эйәһе» Александр Солженицын һөйләй: «Башбаштаҡ республикалар үҙҙәренә башбаштаҡ Конституциялар эшләнеләр, сит илдәр менән башбаштаҡ һөйләшеүҙәр алып баралар, сит ил займдарын алалар. Рәсәйҙе тарҡатыу өсөн бөтә нәмә эшләнде...»

1974 йылда илдән ҡыуылған рус яҙыусыһы Александр Солженицындан НТВ журналисы Евгений Киселев ҡына түгел, ә бөтә Мәскәү журналистары «Рәсәйҙе ҡотҡарыусы» яһаны. Урыҫтар өсөн, бәлки, шулайҙыр ҙа. Әммә үҙәк матбуғатта: «Татарстанда татарҙар әҙ генә, рустар күп, ә Татария тип атала. Яҡутстанда ла яҡуттарҙан рустар күберәк – барыбер Якутия тип атала. Башҡортостанда башҡорттан рустар күберәк, ә республика ни өсөндөр Башкирия тип атала», – тигән мәкерле интервью биргән кеше Рәсәйҙең урыҫ булмаған халыҡтары һәм милли республикалар өсөн фәрештә лә, Алла ла түгел. «Архипелаг ГУЛАГ» һәм «Красное колесо» кеүек бөйөк әҫәрҙәр яҙған бөйөк кешенең шундай түбән тәгәрәүе шаҡ ҡатырғыс! Ул Сталин төрмәләрендә үлтерелгән йәһүдтәр өсөн генә ғүмере буйы йәш түккән булып сыға.

---

[1] Бында Фәрит Мөхәммәтшиндың «Известия»ғи биргән интервьюһында, законадарҙы яраштырыу проблемаһын Үҙәк менән төбәктәргә берлектәге тырышлыҡ менән хәл итергә кәрәк, Федераль закондар ҙа, Рәсәй Конституцияһы ла төҙәтмәләр индереүгә мохтаж, тигәне күҙҙә тотолғандыр, күрәһең.

Александр Исаевичтың ҡайтыуы сүп өҫтөнә сүмәлә генә булды. Ил буйлап былай ҙа национал-шовинизм, «рус фашизмы» шәүләһе йөрөй. Рәсәй регионлары буйлап ҙур-ҙур майҙандарҙа ғәйәт күп халыҡ йыйып, айырым бер милләттең генә өҫтөн булыуы идеяларын ҡыҙҙырған Владимир Жириновскийҙы асылған ауыҙын ябырға ла онотоп тыңлайҙар.

... Яңы ғына президент булып һайланған һәм 6 майҙа ғына инаугурацияһы уҙғарылған Владимир Путиндың 14 майҙа Рәсәй республикаларын, крайҙарын һәм өлкәләрен территориаль принцип нигеҙендә берләштереүсе ете федераль округ төҙөү тураһындағы Указға ҡул ҡуйыуы һәм шуның менән милли республикаларҙың үҙаллылығын сикләргә ынтылыуы бер ниндәй ҙә халыҡ-ара хоҡуҡ нормаларына һыймай. Рәсәй президентының республикаларҙың конституцияларын Рәсәйҙекенә тура килтереүен талап итеүе лә халыҡтар суверенитетына һәм үҙбилдәләнешкә хоҡуҡ принцибына ҡаршы килә.

Тотош Европа, Азия ҡитғаларының берләшеп, һыйышып йәшәүгә ынтылышы көсәйгәндә «бөйөк» Рәсәйҙең үҙ йортонда ла тыныслыҡ урынлаштыра алмайынса, цивилизациялы һәм хоҡуҡи берләшеп йәшәүҙең халыҡ-ара ҡанундарын танымайынса, унитар Конституцияһын үҙбилдәләнеш алған халыҡтарға көсләп тағып, Николай заманынан ҡалған «берҙәм һәм бүленмәҫ империя» ҡалыптарына яңынан бикләнергә маташыуы көлкө түгел, ә фажиғә. Ер шарында демократияның нығына барыуы шарттарында донъя берләшмәһе халыҡтарға, социаль һәм сәйәси хәленә ҡарамай, дәүләт ҡоролошоноң теләһә ниндәй формаһын көсләп тағыуҙы тәнҡитләй. 90-сы йылдар башында Канадала илдең конституцияһын үҙгәртеүгә йүнәлтелгән ынтылыштар көслө булды һәм был процеста төп халыҡтар һәм Квебек провинцияһы вәкилдәре әүҙем ҡатнашты. Ә хәҙер күҙ алдына килтереп ҡарайыҡ: бик күп республикалар ҡаршы тауыш биргән Рәсәй Конституцияһына әгәр ерле халыҡтар мәнфәғәтен яҡлаған ниндәйҙер үҙгәреш индерергә тырышылһа, Кремль танкыларҙы Чечняға ғына түгел, ә Татарстан

менән Башҡортостанға ла индерер инеме? Әллә был НТВ каналындағы «Ҡурсаҡтар» программаһының кинәйәле шаярыуы ғынамы (14 май, 2000 йыл)?

Шулай итеп, «Бүлгелә һәм хакимлыҡ ит!» принцибы бөгөн дә уңышлы ғәмәлләштерелә. Юғиһә, тарихи башҡорт ерҙәренең быуаттар буйы ҡырҡ тапҡыр бүлгеләнеп, инде йәнә Волга буйы федераль округы һәм Урал федераль округы буйлап һибелеүен нисек аңлатырға? Бында ла бит милләттәрҙе нисек тә нығыраҡ «болғатыу» теләге өҫтөнлөк иткән.

Тарихҡа мөрәжәғәт итәйек.

... XVII–XVIII быуаттарҙа крәҫтиәндәр ихтилалынан һуң башҡортто «тынысландырыу» маҡсатында кантондар (хәрби округтар) төҙөлә. Губерналар, кантондар сиген билдәләгән ваҡытта бер ырыу, аймаҡ кешеләрен бүлгеләү, таратыу маҡсат итеп ҡуйылғандыр... Сөнки ҙур булмаған Мәсетле районы ауылдары ғына Өфө, Ырымбур, Пермь губерналарына инде. Аралары бер километрҙан артмаған Урта Аҡа һәм Оло Аҡа ауылдары араһынан Ырымбур һәм Пермь губерналары үтә ине. (Ғәйникамал Мирхәева. Тарих яҙыр инем ташына... Өфө, «Китап», 2001).

1897 йылғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса башҡорттарҙың Вятка, Пермь, Ҡазан, Нижегородка, Пенза, Ырымбур, Өфө, Һамар, Һарытау, Себер губерналарында тупланып йәшәүе мәғлүм. Милләттәштәребеҙ бөгөнгө көнгә тиклем Һарытау, Һамар, Ульяновск һәм Ырымбур өлкәләренең көньяҡ йүнәлешендә таралып йәшәй.

Гәйнә башҡорттары XIX быуатта уҡ Вятка губернаһының Оса өйәҙенә (әле Пермь өлкәһенең Барҙы районы) ингән. Кама алды йәнәй башҡорттары (борон-борондан Урта Каманың уң ярында йәшәгәндәр) Вятка губернаһының Сауапул өйәҙенә ҡушылған (әле Удмурт республикаһының көньяҡ райондары).

22-се йылдарҙа, Башҡорт Республикаһы барлыҡҡа килтерелгәндә, тарихи башҡорт ерҙәренең бик ҙур өлөшө – Өфө губернаһының Минзәлә өйәҙе – күп һанлы башҡорт халҡы менән Татар АССР-на индерелә.

Шул уҡ 1922 йылда Башҡортостандан Ялан-Ҡатай кантоны (хәҙерге Курган өлкәһенең Әлмән һәм Сафакүл райондары) тартып алынған.

1926 йылда Миәс ҡалаһы тирә-яҡтағы башҡорт ауылдары менән бергә хәҙерге Силәбе өлкәһенә бирелгән.

БАССР-ҙы иғлан иткәндә һәм уның сиктәрен билдәләгәндә үк Өфө губернаһының Златоуст сәнәғәт үҙәге иң боронғо башҡорт ауылдары менән Урал өлкәһенә бүлеп бирелә.

1934 йылдың ғинуарында, ВЦИК ҡарары менән Силәбе өлкәһе барлыҡҡа килтерелгәндә, БАССР-ҙың тик башҡорттар йәшәгән Арғаяш һәм Ҡоншаҡ райондары уға ҡушыла.

1935 йылда БАССР-ҙың Туҡ-Соран кантоны бөтөрөлә һәм территорияһы – Ҡыуандыҡ һәм Һарыҡташ райондары менән бергә – Ырымбур губернаһына күсерелә.

40-сы йылдар башында өс башҡорт ауылы – Петрушино, Туҡтар, Ҡасҡын – йәнә Силәбе өлкәһенә «бүләк» ителә.

2000 йылдың 14 майында Курган, Свердловск, Төмән, Силәбе башҡорттары, Башҡортостан ингән Волга буйы федераль округына түгел, ә Урал федераль округына беркетелде.

Шундай һорау тыуа: ни өсөн Рәсәй дәүләтселеген нығытыу гелән милли республикаларҙы бүлгеләү, тарҡатыу ысулы менән тормошҡа ашырыла? Милли республикалар суверенитынан башҡа күп милләтле Рәсәйҙең, ғөмүмән, федерализмдың киләсәге бармы?

Яуап эҙләп, Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты Михаил Бугераға мөрәжәғәт иттем.

Михаил Евгеньевич Федератив Договорҙы әҙерләүселәрҙең береһе һәм уға ҡул ҡуйыуҙа ҡатнашҡан. 1993 йылдың декабрендә, башҡа авторҙар менән бергә, БР Конституцияһы проектын әҙерләшкән. 1994 йылдың йәйендә РФ дәүләт власы органдары менән БР дәүләт власы органдары араһындағы Килешеүгә ҡул ҡуйыу менән тамамланған һөйләшеүҙәрҙә ҡатнашҡан. Парламент

эшендә ҙур тәжрибә туплаған сәйәсмән һәм депутат булараҡ, ул федерализм хәрәкәтенең үҙәгендә тора.

Депутат менән булған һөйләшеү, 2000 йылдың йәйендә «Башкирия» – «Известия Башкортостана» берләштерелгән гәзитендә донъя күрҙе.

*– Уважаемый Михаил Евгеньевич, Вы политик с достаточно большим опытом парламентской работы, как депутат, находитесь в центре движения федерализма. Как вы думаете, Конституция и федеральные законы могут учесть особенности каждого из 89 субъектов Российской Федерации, существенно различающихся по национальному составу, уровню социально-экономического развития?*

– Конечно же нет, Россия – это огромная страна, состоящая из самых разнообразных субъектов – республик, краев, областей, городов федерального значения, автономных областей, автономных округов. Нет просто двух одинаковых регионов. И федеральным законом, унифицирующим в той или иной мере, учесть все их особенности, естественно, нельзя. В федеральных законах должны находиться только общие положения. Стало быть, Россия создана именно для федеративного устройства. И в любом случае, даже когда был, как мы говорим, советский тоталитаризм, монополия КПСС, с каждым регионом работали индивидуально.

*– Сейчас, когда регионы и Центр стали строить свои отношения на правовой основе, то есть разграничивать полномочия между органами государственной власти, много стали говорить о том, что двусторонние договора Центра с субъектами противоречат федеральному законодательству и нарушают Конституцию Российской Федерации...*

– Во-первых, я не согласен с тем, что они нарушают Конституцию. Потому-что в Основном законе, конкретно в пятой и одиннадцатой статьях, предусмотрена возможность таких вот договоров. То есть все эти договорные отношения строятся у нас на основе Конституции России. Конечно, другой вопрос, федеральный законодатель имеет

тенденцию слишком унифицировать. Если же писать федеральные законы, которые вмешиваются в ведения субъектов Федерации, пытаются всех их подстричь под одну гребенку, то в этом случае да, определенные противоречия могут возникать. Потому что двусторонний договор, естественно, учитывает особенности данного субъекта и какое-то положение какого-то договора может не соответствовать какой-то норме федерального закона. Но это ведь как раз говорит о том, что, учитывая местный опыт разных субъектов Федерации, нужно менять эту норму закона. Двусторонние договора продиктованы реальной жизнью, если мы хотим в нее грубо вторгнуться, то можем говорить, что противоречат. Но если хотим, чтобы жизнь шла нормально, то необходимо федеральный закон приводить в соответствие с реальной жизнью.

*– Двусторонние договора создают основу для асимметричных отношений. Но нам часто говорят, что зарубежный опыт не знает такого явления, как асимметричная федерация.*

– Это неправда. Если изучим любую федерацию, то мы убедимся, что симметричной федерации нет нигде, симметричным может быть только тоталитарное государство, где есть один диктатор и никто ему не должен перечить. А любая федерация асимметрична. Ну возьмем, в частности, любимый пример критиков нашего федеративного устройства – Соединенные Штаты Америки. Якобы, там полная симметрия, все штаты одинаковы. Но в то же время там штат Калифорния называется Республикой, есть федеральный округ Колумбия, где город Вашингтон расположен, существуют союзные территории, не имеющие статуса штата. И если посмотреть на любой из штатов и сравнивать его с другими, то в каждом из них своеобразное устройство – где-то губернаторы избираются на четыре года, где-то – на два, где-то губернатор штата имеет большие полномочия, другой – меньшие. В одном штате, скажем, существует смертная казнь за какие-то особо тяжкие преступления, в другом –

нет. Выходит, нет двух одинаковых штатов. То есть они тоже асимметричны.

*– Михаил Евгеньевич, а в чем выражается процесс выравнивания прав субъектов Федерации? Не приведет ли это к тотальной губернизации и уничтожению национальных республик по примеру Чечни?*

– Если мы хотим бомбить еще какие-то территории внутри России, тогда, наверное, можно говорить о губернизации. Но если мы не хотим ковровых бомбежек, тогда непонятно, о чем здесь спорить. Что же касается равноправия всех субъектов Федерации, то это у нас есть и закреплено в Конституции. В своих отношениях с федеративными органами все субъекты равны. Конечно, они не тождественны друг другу. Так, никогда Республика Башкортостан не будет тем же, что представляет из себя Приморский край. Всегда в Приморье будет своя специфика, в Башкортостане – своя.

*– Ярые противники федерализма сводят существование национальных республик к этнонационализму, к сепаратизму...*

– Пока существуют нации, будут жить и национальные республики. То есть, если есть башкиры, значит, соответственно, они должны иметь свою государственность. Мировая практика выработала наиболее приемлемую форму государственного устройства – республику. И почему, скажем, любая другая нация может иметь свою государственность в форме республики, а те нации, которые объединились в Российскую Федерацию, не могут ее иметь? В конце концов, национальные интересы – это объективно существующая вещь и, нравится это кому-то или не нравится, но это нужно учитывать.

*– А может ли быть будущее у Федерации, состоящей из 89 разнотипных субъектов?*

– 89, может быть, действительно многовато. Ну почему, скажем, нельзя объединить Рязанскую и Тульскую области, территория которых по-отдельности невелика, они в одном природно-климатическом поясе, имеют однородный состав населения по социальному и нацио-

нальному признаку. Кажется, нет никаких объективных оснований, чтобы они существовали отдельно. В то же время неминуемо должны существовать национальные государственные образования, тут, конечно, никакой унификации не должно быть. Потом многие области и края обладают очень большой спецификой. Вряд ли когда-нибудь удастся объединить Приморский край, предположим, с Магаданской областью...

* * *

Башҡортостан Президенты Мортаза Рәхимов бынан дүрт йыл элек үк Үҙәк менән төбәктәр араһындағы мөнәсәбәттәрҙе көсөргәнешләндереүсе ошо проблемаларҙы айырым-асыҡ әйтеп биргәйне:

– ... Депутаттар Федератив Килешеүҙең рухына һәм хәрефенә ҡаршы килгән закондарҙы торған һайын йышыраҡ ҡабул итә. Рәсәй Федерацияһының суд системаһы тураһында яңы ғына ҡабул ителгән законды тап бына шулай баһаларға кәрәктер. Ул ғәмәлдә беҙҙә йәшәп килгән үҙ суд системабыҙҙы инҡар итте. Рәсәйҙе унитар дәүләткә әүерелдереү ынтылышы торған һайын көсәйә. Был – көрсөккә илтеүсе юл. Ул ҡотолғоһоҙ рәүештә яңы Чечняға килтерәсәк. Һуңғы иҫәптә – илдең тарҡалыуына килтерәсәк.

(«Известия», 8 апрель, 1997).

Ә бына «Башҡортостан Конституцияһын Рәсәй Конституцияһына ярашлы хәлгә килтереүгә ҡағылышлы», шуны әйтергә була. Был эш һуңғы йылдарҙа өҙлөкһөҙ дауам итә. Ул шулай булырға тейеш тә, сөнки тормош бер туҡтауһыҙ үҙгәрә. Башҡортостан парламенты республиканың норматив акттарына яңы ҡабул ителгән федераль закондар менән бәйле үҙгәрештәрҙе һәм өҫтәмәләрҙе даими индереп килә.

Тағы ла шуныһы мәғлүм, күп милләтле Башҡортостан Республикаһы менән күп милләтле Рәсәй Федерацияһы Конституцияларында әллә ниндәй иҫ китерлек айырмалар

юҡ, быны үҙ заманында халыҡ-ара экпертиза ла билдәләне.

Беҙҙең Төп Законда, 69-сы статьянан башҡа, башҡорт халҡының үҙ тарихи территорияһында милли дәүләтселеген барлыҡҡа килтереүенә бәйле бер ниндәй хоҡуҡтары ла ҡаралмаған, төп халыҡтың тарихи ерҙәренә айырым хоҡуҡтары ла нығытылмаған, республика барлыҡҡа килтереүсе халыҡтың халыҡ-ара хоҡуҡи акттарҙа ҡаралған хоҡуҡтары айырым билдәләнмәгән, аныҡ аталмаған.

Шуға күрә, Үҙәк менән беҙҙең төбәк араһында талаш булһа ла еребеҙҙе, ер аҫты байлыҡтарыбыҙҙы тартып алыу өсөн барасаҡ. Сөнки ғәмәлдәге власть даирәләре урыҫ өлкәләрендәге завод-фабрикаларҙы, алюминий-никелде, алмаз-алтын фондтарын урлап, һатып бөтөрөп килә, шикелле. Сират милли республикаларға ла етеүе ихтимал.

Ғалим, юрист, БМО-ның консультатив статусына эйә Бөтә донъя Федералистик хәрәкәт Советы (Нью-Йорк) ағзаһы, 1990 йылдан алып республика парламенты депутаты, Европа Төбәктәре Палатаһындағы Рәсәйҙең баш вәкиленең береһе Зөфәр Еникеев былай тигәйне:

«Беҙҙә, үкенескә ҡаршы, дәүләт менән идара итеүҙе үҙәктән айырыу – йәмғиәттең иҡтисади сәскә атыуына килтерәсәген аңларға теләмәйҙәр. АҠШ-та һәм Европалағы башҡа үҫешкән дәүләттәрҙә быны күптән төшөнөп, төбәк органдарына киң вәкәләттәр биргәндәр». («Йәшлек», 28 март, 2000 й.).

Ә Рәсәйҙәге аҡылын май бөргән ғәли йәнәптәренә быларҙың береһе лә кәрәкмәүе көн кеүек асыҡ. Юҡ, памперстар һәм тампондар, ҡанатлы «прокладкалар» ғына ҡулланып, сникерстар һәм «Киндер-сюрприздар» ғына ашап, американдарса «һөйөшөргә» генә өйрәнеп, хатта наркотиктарҙан «Европаса ләззәтләнеүгә» һалышып ҡына алға киткән илдә йәшәп булмай икән шул. Бөтә донъябыҙҙы, тотош системабыҙҙы емереп ташлап та халҡына ҡаршы ҡанлы террор йәйелдергән Ленин, Сталин идеологияһынан ары китә алманыҡ беҙ...

## III. РӘСӘЙҘЕ ҠАЙҺЫЛАЙ ЯРАТЫРҒА?

2000 йылдың яҙында АҠШ-тың Вашингтон ҡалаһында Донъя институтында тикшеренеү эштәрен тамамлап ҡайтҡан Илдус Илишев менән донъя хәлдәре тураһында һөйләшеп ултырғайныҡ.

– Американан Мәскәүгә ҡайтып төшкәс, үҙәк телевидение аша милли республикаларға ҡаршы йәйелдерелгән компанияны күҙаллап, теле- һәм радиокомментаторҙарҙың терминологияһын, жаргон һүҙҙәрен ишетеп, шаҡ ҡаттым. Юғары мәҙәниәтле Европанан һуң Рәсәйҙәге мәҙәниәтһеҙлек, тупаҫлыҡ, хоҡуҡһыҙлыҡ, көслөнөң көсһөҙҙө баҫыуы айырыуса асыҡ күҙалланды... – тигәйне ул ныҡ аптыраулы хәлдә.

Илдус бит АҠШ-тың Дәүләт департаментында Рәсәйҙәге милли республикаларҙың йәшәүгә хоҡуғын яҡлап сыҡҡан кеше. Белгестәр, дипломаттар унын сығышын ҡул сабып алҡышлаған. Милләттәрҙе өйрәнеү йәһәтенән Америка ассоциацияһында Рәсәйҙәге милли республикалар буйынса махсус төркөм эшләй. Татарстандан, Рәсәйҙең башҡа төбәктәренән вәкилдәр килә, төп халыҡтарҙың тел, сәйәси, иҡтисади хоҡуҡтарын киңәйтеү мәсьәләһендә дәғүәләшәләр.

Ә беҙҙең Рәсәйҙә бар милли проблемаларҙы милли республикаларҙы бөтөрөү юлы менән хәл итмәкселәр.

«Мансырға» һәм «мансырға» атлығып торған сәйәси даирәләр бөгөн, «бандиттарҙы юҡ итеү» идеяһына таянып, чечендарҙы төп дошманы күреп, рухи көрсөктән сығыу юлдарын эҙләй. Тотош халыҡтарҙы, кәмһетеп, «лицо кавказской национальности», тип йөрөтә башланылар.

(Беҙҙе, «нацмендар», «националкалар», тип йөрөткән һымаҡ.) Радио-телевидение шулай һөйләй, гәзиттәр шуны тылҡый, шундай закондар ҡабул ителә. Мәҫәлән, 1993 йылдың октябрендә Мәскәү ГАИ-һы сығарған ҡарарҙы ғына алып ҡарайыҡ: «При выявлении лиц кавказской национальности, управляющих автотранспортными средствами... не имеющих московской прописки... их автомобили подлежат конфискации.. а самих водителей следует перепроводить в специально организованные в каждом административном округе сборные пункты».

Кавказ халыҡтарына, ғөмүмән, славян булмаған башҡа милләттәргә, кәмһетеп ҡарау һәм уларҙы күрә алмау, ерҙәренән ҡыуып, махсус лагерҙарға бикләү ысын фашизм төҫөн ала барҙы һәм үҙәк матбуғат саралары аша көсәйтелде.

Эйе, мин яңылышманым – фашизм! Бынан 56 йыл элек фашизмды еңгән бөйөк Рәсәйҙә бөгөн «ҡырылған баштар» ҡалҡа башланы. Улар асыҡтан-асыҡ митингылар, съездар үткәрҙеләр, свастика тағып, Мәскәү урамдарынан үттеләр. Йәмғиәтебеҙҙе икегә бүлгән бындай вәхшилеккә ҡаршы протест акциялары уҙғарылды.

... Рәсәй фашизмының асылына төшөнөү өсөн тарих төпкөлөнә бағыу фарыз. Ғөмүмән әйткәндә, Рәсәйҙең сәйәси тормошондағы полицайҙар авторитаризмына быуаттар буйына мотлаҡ бөйөк держава шовинизмы юлдаш булған. Һәм Сталин осоронда ғына түгел, ә Николай I, Александр III һәм Николай II хакимлыҡ иткәндә лә шулай булған. Тап рус полицияһы 1905 йылда ҡоралл бандаларҙы – «ҡара сотняларҙы» – ойоштора. Уларҙы тарихта хәҙер Гитлер штурмовиктары менән сағыштыралар. Урыҫ национал-шовинистары гелән йәшерен полицияның таянысы булған һәм милли йөмһүриәттәрҙәге милли хәрәкәттәргә оҫта ҡаршы ҡуйылған. Был ҡара көстәр Рәсәйҙә XX быуаттың 60-сы йылдарында яңынан ойоша башлай һәм 70-се йылдарҙа эшмәкәрлеген йәнләндерә. СССР-ҙағы идеология бушлығы, коммунистик идеологияның иҫкереүе һәм Кремль хужаларының ҡартайып, бәлйерәүе быға сәбәпсе була.

Шулай итеп, 60-сы йылдар аҙағында национал-экстремистарҙың «Родина» исемле йәмәғәт ойошмалары бар Рәсәйҙе ялмап ала. Рәсми рәүештә улар урыҫ мәҙәниәтенең һәм тарихының боронғо ҡомартҡыларын һаҡлап алып ҡалыуға булышлыҡ итергә тейеш була һәм үҙе тирәләй төрлө волонтерҙарҙы, энтузиастарҙы һәм фанатиктарҙы туплап ала. Әммә был ирекле берекмәләргә Мәҙәниәт министрлығынан һәм (йәшерен рәүештә) КГБ-нан юғары эш хаҡы алыусы милләтсе идеологтар етәкселек итә. Уларҙы бары тик Иван Грозныйҙың түләүле опричниктарына һәм Борис Ельциндың бюджет казактарына тиңләп булыр ине (Чечнялағы, Ингушетиялағы, Молдовалағы һәм башҡа республикаларҙағы милли-азатлыҡ хәрәкәттәрен быуыу өсөн дә урыҫ казактары ойошторолдо, президент указы ҡабул ителеп, бюджет аҡсаһына тотолдо). «Родина» йәмғиәттәре ағзалары бер партиялы совет системаһында КГБ ярҙамында Коммунистар партияһына оппозиция булып торорлоҡ Рус партияһын барлыҡҡа килтерә. (Совет власы осоронда бындай хәл бары тик КГБ рөхсәте менән генә ғәмәлләштерелә алыуы һәр кемгә мәғлүмдер). 1982 йылдың яҙында улар Мәскәү урамдарында Гитлерҙың тыуған көнөн байрам итергә демонстрацияға сыға. Икенсе Донъя һуғышында 20 миллион халҡын юғалтҡан Рәсәйҙә быны бер кем көтмәгән була, әлбиттә. Ҡара күлдәкле, фуражкаларына свастика беркеткән оҙон сәсле бер нисә тиҫтә йәш кеше Пушкин майҙанында фашист диктаторының юбилейын билдәләп үтә. СССР-ҙа рәсми булмаған бөтә демонстрациялар тыйылыуға ҡарамаҫтан, милиция был юлы яңы фашистарҙы ҡыуып таратырға ашыҡмай. Иң шаҡ ҡатырғаны – неофашистар демонстрацияһында ҡатнашыусыларҙың күпселеге юғары даирәләге партия чиновниктарының һәм Үҙәк Комитет ағзаларының балалары була. (Шуға күрә, Леонид Брежнев үлгәндән һуң Юрий Андропов Кремлгә ингәндә Мәскәү партократтары һәм парламентарийҙар араһында бер ниндәй ҡаршылыҡ булмай, сөнки Андроповтың артында көслө һәм мәкерле йәшерен полиция тора...)

... 1993 йыл. «Память» йәмғиәтенән Александр Баркашов етәкселегендәге радикалдар айырылып сыҡты һәм һуғышсан отрядтар ойошторҙо. Баркашов, Мәскәүҙең теләһә ниндәй мөйөшөндә теләгән ваҡытта бер нисә мең кеше йыя алам, тип иғлан итте. Был хәрәкәт «Русское национальное единство» (РНЕ) тип аталды. Улар Рәсәйҙең урта һыҙатында һәм көньяҡта айырыуса күбәйҙе. Йәш урыҫтарға ҡара күлдәктәр, свастика эмблемалары һәм уң ҡулды алға ташлап сәләмләү оҡшай. РНЕ ағзалары атырға өйрәнә һәм һуғышсан әҙерлек үтә, армияға һәм милицияға күпләп үтеп инә. Ҙур ҡалаларҙағы һәм баш ҡалалағы милиция һәм армия органдарындағы расизм күренештәре, асылда, шунан киләлер.

... «Беҙ берләшкәндә генә көслөбөҙ», – тигәйне Борис Ельцин 1994 йылда Мәскәүҙәге Еңеү көнөндәге митингыла. Матур һүҙҙәр, әлбиттә. Тик уны кем аңлар икән? 1984 йылда афған әсирлегенән миллион долларға һатып алынған Руцкоймы? Әллә афған геройын байраҡ итеп күтәреп, Ельциндың урынын алырға ынтылған жириновскийҙармы? Рәсәй Президенты шуны ла яҡшы белә, 1993 йылдың декабрендә һайлауҙарҙа Рәсәй Ҡораллы Көстәренең 70 проценты Жириновский өсөн тауыш бирҙе. Шулай булғас, армияның Баш командующийы кем була?

Беҙҙең атай-олатайҙарыбыҙ, ватандаштарыбыҙ өсөн иң изге иҫәпләнгән 9 Майҙа Мәскәүҙәге «Националь» ҡунаҡханаһы янында «пархатых – вон из России», «Ельцин – жид» лозунгыларын юҡҡа ғына ҡысҡырманылар. Ҡасандыр Гитлер ҙа үҙенә юлды шулай һалған.

Үҙәк телевидениены ҡараһаң, йыш ҡына Жириновский сығыштарынан рәхәтләнеп көлгән журналистарҙы, сәйәсмәндәрҙе, хатта дәүләт башлыҡтарын күрәһең. Жириновский урыҫтар исеменән нимә теләй, шуны һөйләһен, ә беҙҙең быға ҡыҫылышыбыҙ юҡ, йәнәһе.

Әммә Владимир Жириновский клоун да, аҡылдан яҙған кеше лә түгел, ә бик ҡурҡыныс әҙәм. Ул тупаҫ һәм әҙәпһеҙ ҡыланһа ла бик аҡыллы. Американан Аляскаsuccessful тартып алыуҙы Франциянан – Корсиканы, Италиянан – Сицилияны айырыу һәм Испанияны өс өлөшкә – Катало-

нияға, Басктар иленә һәм Испанияның үҙенә – бүлгеләү менән сағыштырыусы сәйәсмән һис тә наҙан түгел.

Беҙҙең вайымһыҙлығыбыҙ һөҙөмтәһендә илдә Жириновский легиондары формалашты – уларға бит иң һау-сәләмәт, иң төҙ, иң матур, иң көслө, иң аҡыллы егеттәребеҙ генә инде. Эскесе баштар, кәкере-бөкөрөләр кәрәкмәне уларға. Гитлер ҙа ундайҙарҙы кешегә иҫәпләмәгән, һепереп ҡырған.

Завод-предприятияларҙа, иң хәйерсе эшсе-пролетариат иңдәрендә ЛДПР вәкиллектәре асылды. Ябылған заводтарҙан бер тин аҡсаһыҙ ҡыуылып сыҡҡан эшселәр «рус милли берҙәмлеге» үҙҙәрен яҡлаясағына ныҡлап ышанды. Ҡасандыр коммунизм идеяһы һеңдерелһә, бөгөн килеп, «рус идеяһы» киң таратылды. Рус милли берҙәмлеге лидеры Александр Баркашов Вологда өлкәһендә национал-социал хәрәкәт ойошторҙо. Баркашовсылар Череповец металлургтарына таратҡан «Русский порядок» газетаһында, «бөгөнгө көндә хәрбиҙәр, студенттар һәм эшселәр мөхитендә өгөтләү эшен алып барыуы еңелерәк», тиелгән. Шулай итеп, фашистар үҙҙәренең социаль базаһын дәүләт яғынан бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ иркенләп киңәйтә.

Был 1994 йыл ине.

1995 йыл. Кремль янында, Ҡыҙыл майҙанда фашист китаптары иркен һатыуҙа. Төп Ҡәлғәне һәм Мавзолейҙы күрергә килгән немец туристары, йыйылма өҫтәлгә теҙеп һалынған китаптар эргәһенә бер-бер артлы килеп, Адольф Гитлерҙың «Моя борьба» исемле китабын шаҡ ҡатып ғәжәпләнеп ҡарай...

Ер аҫты артылыштарында, метрола, вокзалда Жириновскийҙың урыҫ булмаған халыҡтарға ҡарата күрә алмаусанлыҡ менән һуғарылған өндәмәләре таратыла...

... 1997 йылдың октябрь айҙары. Орел ҡалаһында коммунистар администрацияһы (етәксеһе Федерация Советы рәйесе Егор Строев) яҡлауындағы һәм ҡурсауындағы баркашовсы-фашистар төркөмө хәрәкәт итә һәм хатта енәйәтселәр бандаһына әйләнә. РНЕ партияһының Орел бүлексәһе башлығы Игорь Семенов кеше үлтереүҙә һәм йәһүдтәрҙе күпләп үлтерергә план ҡороуҙа ғәйепләнеп,

төрмәгә ултыртыла. 1993 йылда тап ошо Семенов командаһы Егор Строевты губернаторлыҡҡа үткәреү өсөн көрәшә. Быныӊ өсөн яӊы һайланған губернатор Семеновты Хакимиәткә эшкә ала һәм «йәштәрҙе тәрбиәләү» эшен йөкмәтә. Бөгөн Егор Строев Рәсәй парламентыныӊ иӊ юғары палатаһы рәйесе, йәғни Рәсәй Федерацияһында, Президенттан ҡала, өсөнсө кеше. Шуға күрә «ҡыҙылдар» думаһыныӊ да фашистарға ҡаршы закон проекттарын бер ҡасан да ҡабул иттермәүе аӊлашылып торалыр кеүек. Тарих үҙе лә шуны иҫбатлай... Молотов – Риббентроп акты. Совет армияһыныӊ икенсе донъя һуғышында Германия яғында ҡатнашыуы (1939 йылдыӊ сентябре). 1939 йылда Бреста ике армияныӊ берҙәм парады. Сталиндыӊ немец антифашистарын Гитлерға биреүе. Бөгөн килеп, коммунистарҙыӊ һәм баркашовсыларҙыӊ бергә митингылар уҙғарыуы. Баркашовсыларҙыӊ 1993 йылдыӊ октябрь ваҡиғаларында ҡатнашыуы. 1997 йылдыӊ ноябрендә Рәсәй парламентында РФ Енәйәти кодексына өҫтәлмә рәүешендә тәҡдим ителгән фашистарға ҡаршы закон проектыныӊ кире ҡағылыуы.

Былар бар донъяға мәғлүм хәлдәр. Тап шуға күрә үҙен «демократтар» тип атаусы власть Ичкериялағы тыныс халыҡты бомбаға тотто. Улар кем өсөн һәм нимә хаҡына тырыша – «территориаль бөтөнлөк» өсөнмө, Христос хаҡынамы? Нисек кенә булмаһын, кеше үлтереүселәр закон алдында тиӊ булырға тейеш ине.

1998 йылдыӊ 4 марты, Мәскәү. Был көндө Рәсәйҙеӊ йәһүдтәр общинаһы РФ Федераль Йыйылышы ағзаһы, Краснодар крайы губернаторы Н. Кондратенконыӊ матбуғат аша («Известия», 4 март, 1998) фашист идеологияһын таратыуына, Кубань йәштәре форумы алдынан семиттарға ҡаршы оран ташлауына, Рәсәйҙеӊ урыҫ һәм урыҫ булмаған граждандарын бер-береһенә ҡаршы ҡуйыуына протест белдереп, президент Борис Ельцинға асыҡ хат менән мөрәжәғәт итте.

Ә бит сенатор ауыҙынан сыҡҡан һүҙ Рәсәй Федерацияһыныӊ дәүләт власыныӊ рәсми фекеренә тигеҙләнә. Шул уҡ ҡырағай Рәсәй закондары буйынса Н. Кондратенконы

судҡа биреп тә булмай бит инде, сөнки депутаттар беҙҙә «ҡағылғыһыҙ (неприкасаемая) каста» иҫәпләнә.

... 1998 йылдың 22 һәм 23 апрелендә Америка Ҡушма штаттарының Рәсәйҙәге илселеге хеҙмәткәрҙәре ҡаты иҫкәртеү алды. Илселектең советнигы Джон Окифи уларға «ҡырылған баштарҙан» һаҡ булырға кәңәш итте: Мәскәү расистары негрҙарға һәм азиаттарға ҡаршы һуғыш иғлан иткән. Америка илселегенең консул хеҙмәте әҙерләгән документта урыҫтарҙың «ҡырылған баштары» тарафынан йәйелдерелгән террорҙың шаңҡытҡыс осраҡтары килтерелгән... («Коммерсант-Власть» журналы, 28 апрель, 1998).

Рәсәйҙә фашизм торған һайын асығыраҡ күҙалланды. Үҙәк матбуғатта иң юғары власҡа киләсәк кешене Калигула һәм Нерон, Пол Пот һәм Сталин, Гитлер һәм Муссолини менән сағыштырыусы мәҡәләләр пәйҙә булды. Ҡыҫҡаһы, халыҡтың «көс ҡулланыуға» һыуһауын ҡуйырттылар.

Хельсинкилағы расизмға ҡаршы Вотч ойошмаһының* «Мәскәү хоҡуҡ һаҡлау органдарында расизм сағылыштары» тигән ғилми докладында Мәскәү ғәҙел рәүештә расистарҙың баш ҡалаһы тип аталды.

Мэр Михаил Лужков фатихаһы менән 15 мартта (2000 йыл) Мәскәүҙә башланған «Террорға ҡаршы өйөрмә» операцияһы ваҡытында ғына 50-нән ашыу Кавказ кешеһе рәшәткә артына ырғытылған. Хоҡуҡ яҡлаусы «Мемориал» үҙәге менән «Граждандар комитеты» йәшәгән урыны һәм милләте буйынса дискриминациялау йәһәтенән бөткөһөҙ факттар һәм шаһит күрһәтмәләре йыйып, 44 битлек доклад әҙерләп таратты.

Беҙ бөтәбеҙ ҙә гонаһлыбыҙ һәм барыбыҙ ҙа Аллаһы Тәғәленең хөкөмө аҫтындабыҙ. Ә Мәскәүҙә йәшәүсе чечен, ингуш, авар, черкес, ҡабарҙы, башҡа Кавказ кешеләренә

---

* Америкала, Африкала, Яҡын Көнсығышта һәм Хельсинки килешеүҙәренә ҡул ҡуйған башҡа илдәрҙә халыҡ-ара танылған кеше хоҡуҡтарын тәьмин итеүҙе күҙәтеүсе хөкүмәткә ҡарамаған ойошма. Ул 1978 йылда барлыҡҡа килгән.

иһә, етмәһә, һәр береһенә, «алдан күреп», Енәйәттәр кодексы статьялары тағылған: 222-се статья (ҡорал һаҡлау), 228-се (наркотик һаҡлау) һ. б. Һәр кемдең енәйәте – ҡара тәнле булып тыуыуындамы ни? Былар бит Рәсәйҙә йәшәүсе һәм «урыҫ булып тыуыу» бәхетенән мәхрүм булған ҡайһы бер граждандарға ҡарата асыҡтан-асыҡ геноцид акттары. Улар милләт-ара нәфрәт уятыуға, кешенең милли бәҫен һәм намыҫын кәмһетеүгә йүнәлтелгән һәм РФ Енәйәттәр Кодексының «Милләттәрҙең һәм расаларҙың тиң хоҡуҡлығы» тураһындағы 74-се статьяһына ҡаршы килә. Бынан тыш, Конституция нигеҙҙәре тупаҫ боҙола. Уның 19-сы статьяһында «... милләтенә ҡарап граждандарҙың хоҡуҡтарын сикләүҙең бөтә осраҡтары тыйыла» тип яҙып ҡуйылған.

Хоҡуҡ һаҡлау органдары вәкилдәренең славян булмаған граждандарҙың хоҡуҡтарын тупаҫ боҙоуы осраҡлы хәл түгел, әлбиттә, ә дәүләт сәйәсәтенең туранан-тура эҙемтәһе. Ҡара тәнлеләргә ҡаршы кампания ойошторорға нигеҙ биргән закондар ҡабул иткәндәре өсөн президент Б. Н. Ельцин, премьер-министр В. С. Черномырдин һәм Мәскәү мэры Ю. М. Лужков яуаплы. Ул закондарҙың күп ҡарарҙары Рәсәйҙең халыҡ-ара килешеүҙәрендә һәм эске закондарында ҡаралған кеше хоҡуҡтарын яҡлау гарантияларына ҡаршы килә.

Депутаттар Сергей Юшенков, Сергей Ковалев, Эдуард Воробьев һәм Виктор Похмелкин эшкәртеүендәге «Терроризмға ҡаршы эшмәкәрлекте ғәмәлгә ашырғанда РФ Конституцияһын һәм РФ закондарын тайпылышһыҙ үтәүҙе тәьмин итеү тураһында»ғы ҡарар проекты ла Дәүләт думаһында 62 тауышҡа 136 депутат ҡаршы булып, үткәрелмәй ҡалды. Тимәк илебеҙҙең иң юғары кәңәшләшеү органында ла демократия өҫтөнлөк итмәй. Енәйәтте һәм ғәйепте асыҡлау Рәсәйҙә милләтте асыҡлауға ғына ҡайтып ҡала.

Бөгөнгө көндә Рәсәйҙәге бөтөн хоҡуҡтары ҡыҫылған, геноцодҡа, этноцидҡа, бомбалар һәм ракеталар ярҙамында юҡ итеүгә дусар ителгән урыҫ булмаған этностарҙың йәшәүгә булған хоҡуҡи көрәш алымдарын 1994 йылдың

24 авгусында БМО тарафынан ҡабул ителгән Төп халыҡтар хоҡуҡтары Декларацияһы проектынан уҡып белергә була. Мин уның I өлөшөнөң 6-сы пунктын, мәғәнәһен боҙоп күрһәтмәç өсөн, урыç телендә килтерәм*.

«Коренные народы имеют коллективное и индивидуальное право на защиту от этноцида и геноцида по признаку культуры, включая предупреждение следующих действий и правовую защиту от них.

а) разлучение детей с их семьями и общинами под любым предлогом;

б) любое действие, имеющее своей целью или результатом лишение народов их целостности, их культурного или этнического своеобразия, или самобытности;

в) насильственная ассимиляция в любой форме или интеграция посредством навязывания иной культуры или образа жизни;

г) присвоение их земель, территорий или ресурсов;

д) любая враждебная к ним пропаганда».

Ичкерияның төп халҡы булған чечендарҙы ғына миçал итеп килтергәндә лә был Декларацияның үрҙә килтерелгән пункттары бөтәһе лә унлата, йөҙләтә, меңләтә тапҡыр тупаç боҙолдо. Чечен ҡаршылығы сафтарында беренсе һуғышта ғына тыуған илен һаҡлап ауған 893 мең яугир бандит тип аталды, ә уларға һөжүм итеүселәр орден-миҙалдар менән бүләкләнде, герой исемдәрен алды. Шул уҡ ваҡытта «геройҙар» йөҙәр мең тыныс халыҡты юҡ итте. 34 мең ғәриптәр ҡалды.

1997 йылдың 25 мартында Мәскәүҙәге Сахаров үҙәгендә үткән «Чечня мәҙәниәте өсөн һуғыш эҙемтәләре» тигән конференцияла Рәсәй хәрби енәйәтселәренең мәҙәни мираçты юҡ итеүгә йүнәлтелгән эҙмә-эҙлекле сәйәсәт алып барыуы тураһында һүҙ барҙы. Конфликт мәлендә бөтә институттар һәм университеттар тиерлек юҡ ителгән, теле- һәм радиоүҙәктәр, спорт һарайҙары, театр, кинотеатр, музыка училищелары, уникаль музейҙар,

---

* И. Г. Илишев. Язык и политика в многонациональном государстве. Уфа, «Китап», 2000. С. 230.

китапханалар һәм фонотекалар – бөтөнөһө емертелгән! Ер аҫты бункерында һаҡланған ҡулъяҙмалар яндырылған. Мәсеттәр (һәм сиркәүҙәр ҙә) шартлатылған. (ЭКСПРЕСС–ХРОНИКА, № 13, 1997).

Ә ошоларҙың бөтәһе өсөн дә яуаплы булырға тейешле президентыбыҙ Борис Ельцин һуңынан, 2000 йылдың 8 декабрендә, «Комсомольская правда» гәзитенә: «Я ни о чем не жалею», – тип интервью бирҙе. Бик үкенесле... Бәлки, президентлығынан баш тартыр алдынан бер йыл элек Иерусалимға тәүбә ҡылырға барыуы шулай тип әйтергә хоҡуҡ бирәлер. Аллаһы Тәғәлә ундай гонаһтарҙы ғәфү итәме икән?!

Бөгөнгө көндә Рәсәйҙең бөтөн матбуғат һәм киң информация саралары аша тотош чечен халҡына, ғөмүмән, мосолман халыҡтарына ҡарата күрә алмаусанлыҡ һәм нәфрәт тойғолары уятылыуы, урыҫ шовинизмының ҡотороноуы, Мәскәүҙәге расизм, этник таҙартыуҙар, Чечняға икенсе тапҡыр баҫып инеүҙәр ҙә үрҙә килтерелгән халыҡ-ара документта ҡаралған милләт хоҡуҡтарын тупаҫ боҙоуҙарҙың асыҡ миҫалдары. Мәскәү милицияһы Кавказ халыҡтарын күптәнән, беренсе чечен һуғышына тиклем үк, эҙәрлекләй ине. Мөйөш һайын документтарын тикшерҙеләр, тентенеләр, яла яҡтылар, әҙ генә ризаһыҙлыҡ күрһәтһәләр, рәхимһеҙ туҡмап, төрмәләргә яптылар.

Тағы ла миҫалдар.

Чечендарҙы бер кем дә яратмай. Ҡырағай Рәсәйҙең ҡырағай етәкселәре уларҙы «сортирҙа һуйырға» («мочить в сортире»), «мансырға» («мочить»), «аяуһыҙ ҡырырға», «мәңгелеккә юҡ итергә» саҡыра*.

Ошо тәьҫораттар тулҡынында ярһыған генералитет власҡа үрләне. Ә юғары вазифаларға һайланыу өсөн

---

* 1999 йылда Владимир Путин, әле Рәсәй хөкүмәте рәйесе вазифаһын башҡарғанда, ОРТ каналы аша: «Беҙ террорсыларҙы бөтә ерҙә лә: аэропортта икән аэропортта, әгәр бәҙрәфтә тотһаҡ, һеҙ мине ғәфү итегеҙ, бәҙрәфтә мансыясаҡбыҙ! Бөттө! Мәсьәлә һуңғы сигенәсә ябыҡ!» – тип сығыш яһаны. Был осраҡта һүҙ чечендар тураһында барғанлығы балаға ла аңлашыла!.

яңынан-яңы «батырлыҡтар» талап ителәә. Бына шунда ҡот осҡос шартлауҙар Рәсәйҙе тетрәтте...

1999 йылдың 5 сентябре. Дағстанда Буйнакск ҡалаһында хәрбиҙәр йәшәгән күп фатирлы йорт шартлатыла. 62 кеше һәләк була.

9 сентябрь. Мәскәүҙә Гурьянов урамында йорт шартлай. 92 кеше үлтерелә.

13 сентябрь. Кашира шоссеһында күп ҡатлы йорт шартлатыла. 118 ҡорбан.

Ниндәйҙер «яңы урыҫтарҙы» түгел, ә «йоҡо райондарында» йәшәүсе ябай халыҡты шартлаттылар. Һәм хәйерселектән, өмөтһеҙлектән ҡатҡан күңелдәрҙә дошман образы көндән-көн асығыраҡ һынландырылды. «Чечен эҙе»!.. Беҙҙе шуға ышандырырға тырыштылар. Шартлатҡанда күтәрелгән саң ергә ятырға ла өлгөрмәне, тирә-яҡтан «тәртип урынлаштырырға» саҡырыусы берҙәм һәм түҙемһеҙ тауыштар яңғырай башланы. Рәсәй парламенты спикеры Геннадий Селезнев асыҡтан-асыҡ «кеше хоҡуҡтарын боҙорға» тәҡдим итһә, Михаил Лужков, ниһәйәт, брюнеттарға һәм бөтә килгән кешеләргә ҡаршы тәре походын иғлан итеү мөмкинлеген алды.

Ә бит Рәсәй именлек органдарының был шартлауҙарға туранан-тура ҡағылышы булыуы хаҡында Дәүләт Думаһы депутаты Константин Боровой ҙа әйтте, Рәсәй матбуғаты ла яҙҙы. Рязань ҡалаһында урындағы милиция торлаҡ йортон шартлатырға әҙерләнеүсе бер нисә кешене тотҡас, шикләнеүҙәр тағы ла көсәйҙе. Ҡулға алыныусылар ФСБ хеҙмәткәрҙәре булып сыҡты... Быны Үҙәк телевидение бер нисә тапҡыр күрһәтте.

Краснодар өлкәһе губернаторы Александр Лебедь 1999 йылдың октябрендә Францияның «Фигаро» гәзитенә биргән интервьюһында «Шартлауҙар артында ғәмәлдәге власть тора, тип әйтергә теләйһегеҙме?» тигән һорауға: «Быға мин инанғанмын тиерлек», – тип яуапланы.

Дәүләт Думаһына һайлауҙар алдынан баш ҡалала хәлде тотороҡһоҙландырыу тураһындағы йәшерен планды «Московская правда» гәзите 1999 йылдың йәйендә үк баҫтырып сығарғайны. Тик быға ла бер кем дә ышан-

мағайны... Эфирҙан бары тик Сергей Доренконың региондар менән берләшкән Юрий Лужковҡа («Отечество» – «Вся Россия») һәм милли республикаларға ҡаршы әшәке вакханалияһы ғына яңғырап торҙо. Шул уҡ Доренко ОРТ каналы аша, Чечняны чечендар менән бергә асфальт менән тигеҙләгәндә сиктән тыш файҙалы булыр ине, тип бөтөн Рәсәйҙе геноцидҡа саҡырғанда, бер кем дә мыйығын да ҡыбырҙатманы... Чечендарҙы «мансыу» («мочить») эйфорияһы шулай башланды.

Урыҫтарҙы мосолман халыҡтарына ҡаршы ҡуйыуҙа айырыуса тырышлыҡ күрһәткән гәзит-журналдарҙа, радио-телевидение каналдарында бер генә урыҫ та ултырмаүын иҫкә алғанда, Рәсәй халыҡтарын ҡаршы ҡотортоп, һуғышта бер-береһен ҡырҙырыуҙың ниндәй баҫҡынсыларға уңайлы икәне ап-асыҡ күренер ине, әлбиттә. Рәсәйҙә берәй тапҡыр иң юғары власҡа Гитлер һымаҡ кеше килеп, «милләтте таҙартыу» акцияһын башлаһа, бөгөнгө 87% эсендәге төрлө космополит, маргинал, люмпендарҙан башҡа урыҫтарҙың 30%-тан әҙ генә күберәк ҡалыуы һәм бөгөнгө көндә чечен һуғышында аҙ һанлы халыҡтарға ғына түгел, ә урыҫтарға ла геноцид үткәрелеүе яҡшы аңлашылыр ине. Әммә, үкенескә ҡаршы, үҙ милләтенең аяныслы хәлен аңларлыҡ айыҡ чукчалар ҡалмаған кеүек, айныҡ урыҫтар ҙа күп ҡалмағандыр, күрәһең...

Нисек кенә булмаһын, Буйнакск, Мәскәү, Волгодонск... шартлауҙары яңы чечен һуғышын аҡларлыҡ мөһим ваҡиғалар булды һәм КГБ-ФСБ полковнигы Владимир Путиндың Кремлгә юлын тиҙләтте. Был хаҡта Германияның «Neue Zuricher Zeitung» гәзите 31 ғинуарҙа (2000 йыл) былай тип яҙҙы:

«Көнбайыш күҙәтеүселәренә иллюзияларға бирелергә кәрәкмәй: хәҙерге, икенсе чечен һуғышы – иң тәүҙә Путин һуғышы ул. Тәү осорҙа Рәсәй халҡы тарафынан хуплап ҡабул ителгән һуғыш арҡаһында ғына Путин КГБ-ла ҡараңғы эштәр менән шөғөлләнгән аппаратсынан ҡапыл президент креслоһы өсөн ярышта бөтә дәғүәселәрен артта ҡалдырған фаворитҡа әйләнде».

... Донъялағы иң алдынғы һуғыш техникаһы менән генә түгел, ә чечендарға ҡарата тәрән нәфрәт менән ҡоралланған армия тағы ла рәхимһеҙерәк ярһыу менән Ичкерия ауылдарына һәм ҡалаларына ябырылды. Был 1999 йылдың аҙағы ине.

Тарих тағы ҡабатланды...

1788 йыл. Петр Беренсе, тотош вайнах халҡын рухи, сәйәси һәм физик йәһәттән тулыһынса юҡ итеүҙе маҡсат итеү ҡуйған һуғышты башларға, тигән Указға ҡул ҡуя.

XIX быуат. Айырым Кавказ корпусы командиры, генерал Е. П. Головин «тау халыҡтарын, уларҙың ауылдарын ер йөҙөнән юҡ итеп, ҡурҡытыу» тактикаһын иң йоғонтолоһо, тип иҫәпләгән. (Раевскийҙар архивы, 3-сө том, 1910, 635-се бит).

Николай Беренсе шундай күрһәтмә биргән: «... тау халыҡтарын мәңгегә ауыҙлыҡлау йәки буйһонмаусыларҙы ҡырып бөтөрөү – барыһынан да мөһимерәк».

(Движение горцев Северо-Восточного Кавказа в 20–50-х годах XIX в. Сб. документов. Махачкала, 1959, с. 58, док. 32).

Боронғо башкиҫәрҙәр «бәҙрәфтә мансырға» һәм «асфальт менән тигеҙләргә» янамаһа ла, күренеүенсә, маҡсаттар бер иш булған. Хәйер, 200 йыл эсендә Чечняла Петр I, Николай I, Ермолов, Сталин, Ельцин үткәргән һәм бөгөн Путин дауам иткән «юҡ итеү» кампанияһының фажиғәһен Рәсәйҙәге мосолман халыҡтары һәр береһе үҙ елкәһендә татыған бит. Рәсәйгә «үҙ ирке менән» ҡушылғандан һуң азатлыҡ ихтилалдарында былай ҙа ныҡ ҡырылып, миллион ярым ғына ҡалған башҡорт халҡын 1919–1921 йылдарҙағы Ленин хөкүмәте сәйәсәте – геноцид – яртылаш юҡ итә. Ҡалған өлөшө лә, сиктән тыш фәҡир һәм хәйерсе хәлендә, этностың тарихи хәтере һәм рухы тарҡалырлыҡ итеп, төрлө административ сиктәр менән айырып алына, бүлгеләнә.

1992 йылда Рәсәй ғәскәрҙәре индерелеп, геноцидҡа дусар ителгән тағы бер аҙ һанлы халыҡ – ингуштарҙың – фажиғәһе тураһында Яҡуп Батыев юҡҡа ғына түбәндәге юлдарҙы яҙмағандыр бит:

О Россия!
Твои «братья-народы» спесиво
Наблюдают за казнью других,
И годами взирают трусливо:
Эта участь дойдет и до них...

Кешелек өсөнсө мең йыллыҡҡа аяҡҡа баҫҡанда ла хоҡуҡи дәүләттә йәшәргә өйрәнмәүебеҙҙе, ә мәмерйәнән сығып, бер мамонтҡа күмәкләп ташланыу кимәленән ары китмәүебеҙҙе бик асыҡ күҙаллаған ингуш шағиры. Ә бит Дәүләт Думаһында һуғыш партиялары – ЛДПР менән КПРФ – өҫтөнлөк иткән Рәсәй Федерацияһында «Башҡортостан феномены» айырыуса күҙгә ташлана. Был «феномен» шунан ғибәрәт: Волга буйы Хәрби округы хәбәр итеүенсә, 1993 йылдан алып Башҡортостан хәрби комиссариаты граждандарҙы хәрби хеҙмәткә алыу планын арттырып үтәй һәм иң беренсе урында килә икән («Советская Башкирия», 15 июнь, 1996). Шуға күрә беренсе чечен һуғышында беҙҙең республиканан 74 егет үлтерелһә (был кәметелгән рәсми һан), әле икенсеһендә был һан икеләтә-өсләтә артҡан, сөнки ярты йыл эсендә генә Дағстан, Чечня ерендә һәләк булғандарҙың һаны 50-гә еткән (был һан да тулы түгел әле). Федералдар Дағстанда ай ярым ваҡыт эсендә 250 кешеһен юғалтһа (шуға өҫтәп, 800 һалдат яралы), 89 субъект араһында Башҡортостан, ысынлап та, феноменаль күренеш була инде.

Тик шуныһы үкенесле, нисек кенә тырышһаҡ та барыбер Мәскәүгә ярай алмайбыҙ. Чечендарҙы «мансыған» арала башҡорттарға һәм татарҙарға нисегерәк итеп ташланырға белмәй аҙапланалар хәҙер. 1999 йылдың 19 сентябрендә ОРТ тележурналисы Сергей Доренконың, Мәскәүҙәге шартлауҙарҙа ғәйеплеләр Татарстан мәҙрәсәләрендә әҙерләнелә, ә чечен бандиттары формированиеларында Башҡортостан егеттәре лә бар, тип хәбәр һатыуы шуны раҫлай түгелме?

Тиҙҙән, Татарстан мәҙрәсәләрендә ваһһабиттар әҙерләйҙәр, тигән оран ташланды. Телевизорҙан бер маңҡа ғына урыҫ малайы: «Эйе, ул мәҙрәсәләрҙе тиҙерәк ябырға

кәрәк, юғиһә, иртән аҙан әйтеп, тотош урамды йоҡлатмайҙар», – тип бәлә һалды.

Ошо урында бер аҙ тарихҡа сәйәхәт яһайыҡ әле. Әҙ генә һынын турайтырға маташҡан милли республикаларҙы яңынан тубыҡландырыу Чечнянан ғына түгел, ә Татарстандан да башланғайны бит. Федератив Килешеүгә ҡул ҡуймаған Татарстан 1994 йылдың 15 февралендә, быҒаса ирешкән юғары ҡаҙаныштарынан – үҙ дәүләте Конституцияһында раҫланған тулы бойондороҡһоҙлоҡ һәм халыҡ-ара хоҡуҡ субъекты хоҡуҡтарынан – баш тартып, ғәйәт ҙур сигенеүҙәргә барып, Рәсәй менән ике яҡлы Килешеү төҙөгәйне. Был бөтә төрки донъяһын шаулатты. Татарстан быға тиклем Рәсәйҙәге элекке автономиялар өсөн сәйәси үҫеш яғынан өлгө ине бит.

Бары тик Мәскәүҙәге бөтә Рәсәй татар-мәҙәни ағартыу үҙәге Рәсәй менән Татарстан араһында төҙөлгән һәм президенттар Б. Ельцин менән М. Шәймиев ҡул ҡуйған Килешеүҙе яҡларға саҡырып сығыш яһаны. Татарстандың Милли Мәжлесе Президент Минтимер Шәймиевтың был эшен «хыянат» тип атаны.

«Татарстан хәбәрҙәре» гәзитендә (18 февраль, 1994 йыл) «Рәсәй Федерацияһы дәүләт хакимиәте органдары менән Татарстан Республикаһы дәүләт хакимиәте органдары араһында хакимиәт вәкәләттәре сиктәрен билдәләү һәм үҙ-ара вәкәләттәр бүлешеү тураһында» шартнамә баҫылып сыҡты. Уның IV статьяһының 9-сы пункты – РФ тышҡы сәйәсәте һәм халыҡ-ара мөнәсәбәттәре, РФ халыҡ-ара килешеүҙәре, һуғыш һәм солох мәсьәләләре – бөтәһе лә Рәсәйгә ҡалдырыла. Килешеүҙә сағылдырылған республика статусында «халыҡ-ара хоҡуҡ субъекты» һәм Татарстан дәүләтенең суверенлыҡ төшөнсәләре РФ Сит ил эштәре министрлығы һәм Борис Ельцин администрацияһының дәүләт-хоҡуҡ идаралығы талабы менән алып ташланған.

Рәсәй менән ике яҡлы килешеү төҙөгәндән һуң Татарстанда Рәсәй Федерация Советына һәм Дәүләт Думаһына яңынан һайлауҙар булып үтте. Рәсәй күрһәтеүе һәм өйрәтеүе буйынса уҙғарылған бындай һайлауҙарҙа

ҡатнашыу Татарстан республикаһының сираттағы сигенеүе булды. Мәскәү менән һөйләшеүҙәр делегацияһында иң әүҙем ағзаларҙың береһе, Татарстан халыҡ депутаты Фәндәс Сәйфуллин быны асыҡтан-асыҡ таныны («Ватаным Татарстан», 11 март, 1994 йыл). «Большевиктар үҙ властарын һаҡлап ҡалыу өсөн, илде ваҡытлыса һуғыштан алып сығыу өсөн, Брест килешеүе төҙөргә мәжбүр булдылар, – тине ул. – Әммә уның хурлыҡлы килешеү булыуын халыҡтан йәшермәнеләр. Россия – Татарстан килешеүе лә шундай уҡ сигенеү булып тора. Беҙ аҙҙы һаҡлап алып ҡалыу өсөн күпте юғалттыҡ».

Бөтә Татар ижтимағи үҙәге президенты Илдус Әмирханов, хәҙерге шартнәмә – 1552 йылдан һуң иң ҙур еңелеү, тип белдерҙе һәм элеккесә үк бәйһеҙлек теләүсе халыҡтың түгел, ә Татарстан хөкүмәтенең еңелеүе, тип өҫтәне.

Ә Ҡазандағы Рәсәй яҡлы оппозиция лидеры, Дәүләт Думаһы депутаты Иван Грачев: «Россия – Татарстан килешеүе ашығып төҙөлдө – Ҡазан тағы ла күберәк сигенеүҙәргә бара ине», – тигән фекер әйтте.

Ә элеккесә азатлыҡ теләүсе татар халҡы Шартнамәне нисек ҡабул итте һуң?

... 3 мартта иртәнге сәғәт 9-ҙа Яр Саллыла Татарстан Президенты Минтимер Шәймиев ҡала етәкселәре менән осрашҡанда мэрия бинаһына инергә ынтылған 150 кеше туҡмала. 15 февралдә Рәсәй менән ҡуйылған шартнамәгә ризаһыҙлыҡ белдергән пикетсылар шундай уҡ яза ала. Улар араһында яраланыусылар ҙа була.

Әммә көслө рухлы татар халҡы хатта ошонан һуң да өмөтһөҙлөккә бирелмәне. Ҡазан башын ғорур тотто. Быны Равил Сабырҙың әйткәндәре айырыуса асыҡ сағылдырҙы:

«... Донъяла берләшеү процесы модала. Быуат башында Мәскәү менән килешеү төшөнә лә кермәгән Ҡазан ни өсөн әле Русияне конфедератив дәүләт итеп үҙгәртеп ҡороу өсөн көрәшмәҫкә тейеш? Был юл – беҙҙеңсә берләшеү. Йәғни, Европала бәйһеҙ дәүләттәр үҙ теләктәре менән берләшеүгә өлгәшһә, беҙҙә яулап алынғандарҙың, йә булмаһа, көсләп ҡушылғандарҙың бер үк ваҡытта

бәйһеҙ дәүләттәр ҙә, шул уҡ ваҡытта конфедерация составында ла булаһы килә... Татарстан Президенты ошо беҙҙеңсә берләшеү юлын һайлағанға оҡшаған».

(«Татарстан яшьләре», 19 март, 1994 йыл).

Шулай итеп, Ҡазандағы мосолман мәҙрәсәләрен һәм мәсеттәрен ябырға ынтылыуҙар ҙа, Конституцияһын Ҡөрьән менән алмаштырыусы һәм бойондороҡһоҙ ислам дәүләтен төҙөргә ынтылыусы суверенлы Чечня республикаһын ваһһабизмда ғәйепләү ҙә, ғөмүмән, Рәсәй халыҡтарында дини күрә алмаусанлыҡ тәрбиәләү һис тә осраҡлы хәл түгел. Үзбәкстандағы Кеше хоҡуҡтарын яҡлау йәмғиәте белдереүенсә, урыҫ илендә ҡот осҡос хәлдәр бара. Рәсәйҙә «суверенитет» һәм «демократия» иғлан ителеүенең етенсе йылында, 1997-нең аҙағында, Арал диңгеҙенең көньяҡ-көнбайышында, Устюрт тигеҙлегендә, Яҫлыҡ (Тулей) ҡасабаһы эргәһендә, элекке СССР-ҙың армия частары казармалары базаһында тиҫтәләгән мең тотҡондар һыйышлы ҡурҡыныс лагерь төҙөлә. Ул тик дини инаныуҙары өсөн хөкөм ителгәндәргә тәғәйенләнгән. Лагерь эргәһендә уран эшкәртеү өсөн ике химия заводы төҙөлә, улар 2005 йылда сафҡа индерелергә тейеш. 1999 йылдың майында Үзбәкстандағы Кеше хоҡуҡтарын яҡлау йәмғиәте лагерға бер нисә мең хөкөм ителгән мосолмандар килтерелеүен асыҡлаған. Тиҙҙән унан үлгән тотҡондарҙың мәйеттәрен сығара башлағандар. Ошо йылда ғына 33 тотҡон үлтерелгән.

... Мәскәүҙәге Ичкерия вәкиллеге мәғлүмәттәре буйынса баш ҡалала 2000 йылда ике аҙна эсендә генә 1600 чечен тотолған, шуларҙың 150-һе ҡулға алынған.

... Дағстандан һәм Чечнянан сығарылған мосолман ҡасаҡтары ғаиләләренең 18 йәше тулған улдарын һәм ирҙәрен айырып алып ҡалалар, уларҙы ҡулға алып, юҡ итергә тырышалар.

2000 йылдың яҙында РФ Дәүләт Думаһында үткән семинарҙың барышында Чечняла термо-ядро ҡоралын ҡулланыу тураһында мәсьәлә тикшерелде. Рәсәй гәзиттәренең тәүге биттәрендә түбәндәге юлдар аҡҡа ҡара менән баҫылып сыҡты: «Чечняны икенең берен һайларға мәжбүр

итергә кәрәк: йә Рәсәй ерендә һәр төрлө хәрби хәрәкәттәрҙе туҡтатырға, йәки стратегик авиация көстәре, бактериологик ҡорал, психотроп газдар, напалм - ҡасандыр көслө тип иҫәпләнгән армиябыҙ арсеналында булған бөтөн нәмә менән – Чечня республикаһын тотошлайы менән физик ҡыйратырға...»

Бына һеҙгә Рәсәй Конституцияһында вәғәҙә ителгән милләт хоҡуҡтары һәм дини инаныуҙар ирке! Бына һеҙгә суверенитет һәм демократия!

## ҠАЛАЙ ТЫРЫШҺАҠ ТА – БЕҘ РУС ТҮГЕЛ...

12 миллионға яҡын мосолман, 20 миллион самаһы төрки халыҡтары йәшәгән Рәсәй Федерацияһында дини инаныуҙарға ихтирамһыҙлыҡ күрһәтеү бик хәүефле. 1991 йылда уҡ, СССР тарҡалғас та әле, өс славян дәүләте – Белоруссия, Украина һәм Рәсәй – Славян дәүләттәре берләшмәһен төҙөргә ынтылыш яһап ҡарағайны. Бары тик Урта Азия дәүләттәре, бигерәк тә Ҡаҙағстан һәм уның президенты Нурсолтан Назарбаев ҡәтғи рәүештә ризаһыҙлыҡ белдергәндән һуң, аңдарына килделәр һәм Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһен (СНГ) ойоштороуға барҙылар. Әммә Рәсәй барыбер мосолмандарға үгәй бала итен ҡарауын дауам итте. Хөкүмәт һәм дәүләт кимәлендәге иң юғары сәйәси саралар Сиркәү әһелдәре ҡатнашлығында үтте, Сиркәү фатихаһы менән чечен һуғышы башланды. Беренсе чечен һуғышына армияны оҙатыусы патриарх «Христиан дине кеше үлтереүҙе хуплаймы?» тигән һорауға: «Әгәр ил талап итһә – мотлаҡ!» – тип яуап бирҙе. Үҙәк телевидение шуны бар Рәсәйгә күрһәтте. Шулай итеп, иң кешелекле, иң изге, иң мәрхәмәтле булырға тейешле Сиркәү үҙе кеше үлтерергә фатиха бирҙе.

1997 йылдың 2 апрелендә Рәсәй президенты Борис Ельцин менән Белоруссия президенты Александр Лукашенко «Белоруссия менән Рәсәй союзы тураһындағы Килешеү»гә ҡул ҡуйҙы. Украина милли ассамблеяһы,

Белоруссиялағы оппозиция, «Возрождение» тип исемләнгән Дөйөм Рәсәй ижтимағи берләшмәһе был союзға шунда уҡ протест белдерҙе. Шул уҡ 2 апрель көндө Рәсәй Демократик Союзы яҡлылар Дәүләт Думаһы бинаһы алдында манифестация уҙғарҙы. Улар күтәреп сыҡҡан плакаттар Мәскәү халҡын шаңҡытты: «Герр Лукашенко – поклонник Гитлера», «Обратно в Союз – никогда!», «Лукашенко – камень на шее России!», «Россия за Лукашенко не голосовала!», «Лучше интегрироваться с НАТО, чем с Лукашенко...». Үҙ илендә авторитар режим һәм ҡаты цензура урынлаштырған, репрессия ысулдары менән сәйәси эҙәрлекләүҙәрҙе тергеҙгән, граждандарын яңынан «тимер ҡоршау» артына йәшергән хаким менән Рәсәйҙең ҡул ҡыҫышып берләшеүенә милли республикалар ҙә ғәжәпләнде.

Әммә хәйерсе Белоруссияның хәйерсе Рәсәйгә ҡушылыуы бер нимәне лә үҙгәртмәне тиерлек. Был сара ла «демокрад»тарҙың һәм «прихватизатор»ҙарҙың сираттағы мутлығы ғына булды, шикелле. 2001 йылдың башында Рәсәй-Украина Союзының башлығы (РФ Президентының эштәр идаралығының элекке етәксеһе!) Павел Бородинды Швейцария прокуратураһы ҡурҡыныс енәйәттәрҙә – аҡса «йыуыу»ҙа һәм коррупцияла ғәйепләне.

Ә 1999 йылдың 9 мартында Украина халыҡ үҙобороноһы (УНСО) лидеры Дмитрий Корчинский Мәскәүҙә ЛДПР ағзаһы, Дәүләт думаһының геополитика буйынса комитет етәксеһе Алексей Митрофанов менән осрашып, һөйләшеүҙәр үткәргән. «ЛДПР, украин милләтселәре кеүек үк, берҙәм славян дәүләтен төҙөргә теләй, баш ҡалаһы Киев буласаҡ», – тип белдергән ул матбуғат органдарына. «Мин күп кенә дошмандарымды үлтерҙем. Милләтселек – атып үлтереү ул», – тигән УНСО лидеры һәм Рәсәй коммунистарын һәм милләтселәрен, дошмандарын «атып үлтермәйенсә, күберәк тел сарлайҙар», тип ғәйепләгән. («ЭКСПРЕСС-ХРОНИКА», 15 март, 1999).

Рәсәй хөкүмәте, президент һәм Дума сербтарҙы ла христиандар булғандары өсөн генә яҡлай.

һәм АҠШ, НАТО менән һуңғы йылдарҙағы бөтә килешмәүсәнлектәре лә бары тик Сербия[1] арҡаһында ғына килеп тыуҙы. 1994 йылда уҡ әле, донъя державалары Сербияны ауыҙлыҡлағанда, Кремль Боснияла оккупант ролен үтәүсе сербтарҙы мосолмандарға, хорваттарға ҡаршы ҡоралландарҙы. Шул йылдың февраль башында сербтар Боснялағы Сараевоны миномёттан утҡа тотто – бер һелтәүҙә 68 кеше юҡ ителде, 200 кеше ауыр яраланды. Ҡала сербтар ҡамауында ҡалды. Бар донъя – Төркиә, Германия, Бельгия, Италия, Франция ... – был геноцидты ҡырҡа ғәйепләне. БМО Сарай-Боснала утты туҡтатыу өсөн сербтарға ультиматум ҡуйҙы. Сербия позицияларын бомбаға тотоу ихтималлығы хаҡында НАТО ҡарары иғлан ителде. Ислам конференцияһы ойошмаһы БМО-ның тыныслыҡ яҡлау сараларын ғәмәлгә

---

[1] Сербия – Югославия федерацияһына ингән республика. Сербия һәм Черногория вәкилдәре яңы федерацияға берләшеүҙәре тураһында 1992 йылдың апрелендә белдергәйне. Ә Югославияның үҙенең тарҡалыуы 1989 йылдың башында, Сербияла власҡа экстремист һәм милләтсе Слободан Милошевич килгәндән һуң, ҡотолғоһоҙ ине. Сербия (Белград) менән Хорватияның (Загреб) Балҡан ярымутрауында берҙән-бер хужа булырға ынтылыуы артабан оҙайлы ҡан ҡойоштарға килтерҙе. Тышҡы сәйәсәттәрендә Хорватияның – Германияға, ә Сербияның – Рәсәйгә ҡарап тороуы утҡа ҡуҙ өҫтәне, Сербтарҙың православие диненә хорваттарҙың католик клерикализмы ҡаршы ҡуйылды. Сербияның үҙендә этностарҙың ҡаршы тороуы Косово автономиялы крайында (Сербия дәүләтселегенең тарихи үҙәгендә) албан халҡының күбәйеп китеүенә бәйле булды. 1991 йылдың йәйендә Хорватия менән Словенияның (баш ҡалаһы Любляна, католиктар дәүләтселеге) милли суверенитет, йәғни бойондороҡһоҙлоҡ, иғлан итеүе Югославия армияһында ығы-зығы тыуҙырҙы һәм хорваттар менән сербтар араһындағы оҙайлы һуғышҡа алып килде. 1992 йылдың ғинуарында Босния һәм Герцеговина республикаһында (ислам – 40%, православие – 31%, католицизм – 15 %) референдум аша бойондороҡ-һоҙлоҡ иғлан итеүгә яуап итеп, урындағы сербтар Босния Серб республикаһын төҙөй. Был сербтар, хорваттар, мосолмандар араһында һуғыш хәрәкәттәре тоҡандыра. Хорватия ла, Югословия федерацияһы ла конфликтҡа йәлеп ителә. 1993 йылдың яҙында БМО-ның Хәүефһеҙлек Советы Югословияға ҡаршы иҡтисади санкциялар ҡабул итә. 1993 йылдың башында АҠШ һәм НАТО Балҡан кризисына иғтибарын йүнәлтә.

ашырыу маҡсатында 10 мең хәрби хеҙмәткәр бүлергә әҙер икәнен хәбәр итте. Бер нисә мең Индонезия хәрбиҙәре Боснияға һәм Герцеговинаға китергә теләк белдерҙе.

Бары тик Венгрия ғына Боснияларғы хәрби акцияларҙа ҡатнашыуҙан баш тартты.

«Кемдер Босния мәсьәләһен Рәсәй ҡатнашлығынан тыш хәл итергә тырыша, – тине Борис Ельцин. – Беҙ быға юл ҡуймабыҙ». Мәскәү менән көнбайыш араһында һуңғы 10 йыл эсендәге тәүге етди конфликт өлгөрҙө. Босния сербтарына НАТО ультиматумын кире ҡағыу һәм БМО-ның Хәүефһеҙлек Советын ашығыс саҡырыуҙы талап итеү Рәсәйгә халыҡ-ара изоляцияла ҡалыу менән яныны. Рәсәй етәкселәре, православие динле сербтарҙы яҡлап, нигеҙҙә, эмоциялар менән генә эш итте. Беренсе бөтә донъя һуғышының да шул уҡ Сараевола, шул уҡ православие динле сербтарҙан башланып киткәнен онотторға ярамай беҙгә. Әйткәндәй, 90-сы йылдар уртаһында Геннадий Зюганов, Владимир Жириновский, Сергей Шахрай кеүек ҡайһы бер сәйәсмәндәр Босния сербтарын бомбаға тотоуҙы өсөнсө донъя һуғышын башлау ихтималлығына бәйләй башлағайны. Ысынлап та, сербтар Сараевонан (Босния-Герцеговинаның баш ҡалаһы) ҡамауҙы алмаған һәм НАТО сербтарға ҡаршы ут асҡан осраҡта, һауалағы истребителдәрҙән тыш, «зәңгәр каскаларҙы» һаҡлау өсөн ерҙәге көстәр ҙә эшкә ҡушыласаҡ ине. («Независимая газета», 1994 йыл, 11 февраль). Ә быныһы инде ысын һуғыш! Рәсәй НАТО-Сербия һуғышында йә нейтраллек һаҡларға, йә иһә, көсһөҙҙө яҡлап, сербтар яҡлы армия ебәрергә тейеш буласаҡ ине. Һәм был яңы һуғышта Мәскәү бөтәһенә ҡаршы яңғыҙы ҡуйыласаҡ ине, сөнки Боснияла океан арты илдәре һәм мосолман донъяһы мәнфәғәттәре ғәжәйеп рәүештә тап килгәйне. Был өсөнсө донъя һуғышында Рәсәйҙең еңелеүе һәм, дәүләт булараҡ, йәшәүҙән туҡтауы бик ихтимал ине.

... Артабан, февраль аҙағында, Рәсәй президенты Балҡандағы «триумфын» байрам итте. Дөрөҫ, Ельцин Боснияла тыныслыҡ урынлаштырҙы. Әммә ... ваҡытлыса ғына!

Борис Ельцин сербтарҙың ауыр артиллерияһын Сараевонан алып китеүҙәрен һорап, Көнсығыш Хорватиялағы 400 десантсынан торған Рәсәй батальонын Луковице тирәһенә күсерҙе. Шулай итеп, беҙҙең баш командующий российяндарҙың ғәзиз баштарын инде нисәнсе тапҡыр ер аҫтына илтеп тыға яҙҙы. Сөнки сербтар арҡырыланғанда һәм НАТО утҡа тотҡан осраҡта, Рәсәй армияһының да йәндәре йәһәннәмгә осасаҡ ине. Бәхеткә, сербтар Сараевано ҡалдырҙы, унан хәрби көстәрен алды һәм НАТО ультиматумы үтәлде.

Православие динле сербтарға таянып, Балҡанда нығынырға теләгән Мәскәү Көнбайышты ла үҙенән ситләштермәҫкә һәм Рәсәйҙе сербтар менән берләштергән «славян туғандарына» ла хыянат итмәҫкә тырышты. Беҙгә иһә шуныһы асыҡ, 1992 йылдың көҙөндә Рәсәй армияһының, христиан осетин туғандарын яҡлап, мосолман ингуштарға ҡаршы ҡот оскос геноцид үткәреүен күҙҙә тотҡанда, һарыҡты күҙәтеүҙе бүрегә тапшырыуҙарын бөтә донъя аңлар ине.

Әлегә Рәсәй десантсыларының пәйҙә булыуы Сараеволағы көсөргәнешлекте кәметте. Рәсәй хәрби частары Боснияның баш ҡалаһында утты туҡтатыу тураһындағы килешеүҙе күҙәтеү өсөн килтерелде. БТР-ҙар һәм йөк машиналары колоннаһын йыр-бейеү, икмәк-тоҙ һәм... көмөшкә менән ҡаршы алдылар. Мосолман-босняктарға был һис тә оҡшаманы, әлбиттә. 18–20 йәштәге иҫерек егеттәр идара иткән хәрби техникала Рәсәй Армияһы частарының ингуш ауылдарын тапауын күрһәләр икән улар... Һәм Чечнялағы иҫерек полктарҙы...

1994 йылдың мартында Америка ҡатнашлығында Босния-Герцеговинала хорват-мосолман федерацияһын барлыҡҡа килтерергә килешелде.

1994 йылдың май айы. Европа Советы Боснияны түбәндәгесә бүлергә тәкдим итте: территорияның 49 проценты – сербтарға, ә 51 проценты мосолмандар менән хорваттарға бирелергә тейеш.

Югославия менән ҡушылыу, Адриатик диңгеҙгә сығыу өсөн бөтә көсөн һалған сербтар үҙҙәре теләгән бөтә

территорияларҙы яулап алды һәм утты туҡтатырға әҙер һымаҡ...

Август айында Хорват ҡоралды көстәре «Дауыл» операцияһы барышында Хорватия территорияһындағы серб автономиялы республикаһын юҡ итә. Ҡасаҡтар ағымы Боснияға ябырыла. Быға яуап итеп, серб ғәскәрҙәре Боснялағы мосолман формированиеларына ҡаршы киңәйтелгән һөжүм башлай. Мосолман бөжәнәктәрен сәстәр үрә торорлоҡ ысулдар менән язалаусы сербтар армияһына Р. Караджич етәкселек итә.

1995 йылдың йәй көндәре. Урыҫтарға ҡәрҙәш сербтарҙың Босния менән Герцеговиналағы баҫҡынсылыҡ һуғыштары Рәсәй мосолмандарына – ингуштар менән чечендарға ҡаршы Кремлдең геноцид сәйәсәтенә ауаздаш булды.

Босния сербтары мосолмандарҙың Жепа һәм Серебреница анклавтарын баҫып алып, халҡын еренән ҡыуҙы, меңәрләгән мосолманды язалап үлтерҙе. Донъя матбуғаты хәбәр итеүенсә, унда ла беҙҙең Ингушетия менән Чечнялағы һымаҡ халыҡты тотошлай ҡырыу, ҡатын-ҡыҙҙарҙы мәсхәрәләү, бала-сағаны танктарҙан тапатыу, ирҙәрҙе ситкә алып китеп юҡ итеү кеүек ҡырағай күренештәр урын алды. Франция президенты Жак Ширак былдай геноцидты Гитлерҙың йәһүдтәргә ҡаршы алып барған юҡ итеү сәйәсәтенә тиңләне һәм Босния сербтарын хөкөм алдына баҫтырыуҙы талап итте. Агрессор сербтарҙың лидерҙары Радован Караджич менән Ратко Младич 1995 йылдың 25 июлендә рәсми рәүештә кешелеккә ҡаршы енәйәттәрҙә һәм геноцид үткәреүҙә ғәйепләнде («Сегодня» гәзите, № 1385, 1995 й.). АҠШ, әгәр Босния сербтары баҫҡынсылығын туҡтатмаһа, НАТО ғәскәрҙәре улар өҫтөнә бомбалар яуҙырасаҡ, тип белдерҙе. Рәсәй иһә, үҙендәге территория мәсьәләләрен гел бомбалар һәм «Град» артиллерияһы ярҙамында ғына хәл итеүенә ҡарамаҫтан, Босния сербтарын бомбаға тотоуға ҡаршы булды һәм конфликтты «тыныс юл менән» хәл итергә тырышырға саҡырҙы.

Дөйөм алғанда, донъя йәмәғәтселеге Босния сербтарының Босния мосолмандарына – бөжәнәктәргә ҡаршы ҡанлы геноцид сәйәсәте үткәреүен тыныс ҡына күҙәтеүен дауам итте. Бары тик балҡандарға яҡын ятҡан мосолман илдәре ҡубып сыҡты, сербтарҙың баҫҡынсылығына сик ҡуйырға саҡырҙы, ә төрөктәр, бөжәнәктәрҙең ҡоралланыуына иғлан ителгән эмбаргоны бөтөрөүҙәрен талап итеп, БМО-ға мөрәжәғәт итте.

Сербтар Бихач анклавына һөжүм итергә йыйынғас, хорваттар түҙмәне, серб ерҙәрен утҡа тотто... Эйе, һуғыш бер ваҡытта ла бер яҡлы ғына була алмай. Әгәр быға тиклем сербтар бүтәндәрҙе ерҙәренән ҡыуһа, үлтерһә, канцлагерҙарға япһа, хәҙер серб әсәләре һәм балалары хорват бомбаларынан ҡырылды...

Рәсәй хөкүмәте иһә, Балҡан конфликтына ҡыҫылып, бары тик сербтарҙы яҡлап делегациялар ебәрҙе, гуманитар ярҙам оҙатты, ғәскәр тотто. Дәүләт Думаһының 1995 йылдағы яҙғы сессияһы тотошлайы менән тиерлек сербтарҙы ҡайғыртыуға арналды, тиһәң дә була. Ултырыштан-ултырышҡа һуҙылған «матәм маршын» беренсе булып Глеб Якунин туҡтатты һәм шуның өсөн туҡмала яҙҙы. Унын: «... беҙ бер яҡты ғына яҡлайбыҙ, бөтәһе лә интегә, һәм беҙҙең православие динле туғандарыбыҙ ҙа ғазаплана. Ләкин был конфликтта улар ҙа ғәйепле», – тип әйтеүе булды, депутат Николай Лысенко урынынан һикереп торҙо ла Глеб Павлович эргәһенә йүгереп килеп, муйынынан боронғо көмөш тәреһен йолҡоп алды. Якунин уға: «Һеҙ көс ҡулланаһығыҙ, сөнки идеологияғыҙ бөлгөнлөктә һәм һеҙ ябай енәйәтсе һәм бандит ҡына!.. Һеҙҙең иедологияғыҙ менән бер ҡасан да еңә алмаясаҡһығыҙ – бары тик өсөнсө донъя һуғышын ғына башларһығыҙ», – тине. (Шул уҡ 9 сентябрь көндө депутат Владимир Жириновский депутат Евгения Тишковскаяны сәсенән һөйрәп йөрөтөп туҡмағайны).

Рәсәй парламентында өҫтөнлөк иткән бына шундай «һуғыш суҡмарҙары», экстремистар, национал-шовинистар 1994 йылғы беренсе чечен һуғышын башланы ла инде, хәҙер ул ҡан ҡойоштоң иге-сиге юҡ. Милли

йөмһүриәттәргә танктар индереп, төп халҡын ҡырҙыртыу улар өсөн бер ни тормай. Мәҫәлән, 1995 йылдың 21 июлендә Рәсәй Дәүләт Думаһының иртәнге ултырышында ЛДПР-ҙан һайланған депутат Александр Козырев былай тип тыҙыранданы: «Тыва Республикаһында һаман да минең ярҙамсымды тәғәйенләү мәсьәләһен хәл итмәйҙәр. Федерацияның ошо субъектында депутат статусы тураһындағы законды боҙоуға Дума үҙенең мөнәсәбәтен белдерһен ине. Чечнянан сығарылған ғәскәрҙәрҙе киләсәктә Тываға ебәрергә тура килмәҫ, тип өмөт итәм. Беләһегеҙме, Дудаев та федераль закондарҙы боҙоуҙан башлағайны. Бының нимә менән бөткәнен күреп тораһығыҙ».

Дума ултырыштарында бер туҡтауһыҙ Жириновский, Лысенко, Илюхиндар сығыш яһап, ҡоторонған шовинизмға ғына түгел, дини фанатизмға барып етте. Ә бит Рәсәй Конституцияһында, был илдә власть күп милләтле халыҡ ҡулында, тиелгән. Рәсәй – славяндар иле, тип бер ерҙә лә яҙылмаған. Унан һуң, Рәсәй Федерацияһы закондарында дини ойошмалар дәүләттән айырылған, ә беҙҙә, ҡасан ҡарама, Президент менән Патриарх йәнәш ҡуйыла! Ниңә Рәсәй бөтә халыҡтарҙың, бигерәк тә Рәсәйҙә йәшәгән милләттәрҙең бөтәһененең дә, именлек гаранты була алмай икән?

Әммә Рәсәй Федерацияһы бөгөн донъяуи дәүләтме һуң? Ул саҡта дини тамғалар йөрөтөү граждандар өсөн мотлаҡ иҫәпләнмәҫ ине бит. Ләкин Рәсәй гербы төшөрөлгән паспортты – хәҙер унда беҙ милләтебеҙҙе лә күрһәтергә тейеш түгел булып сығабыҙ – һәр беребеҙ йөрөтә. Ә унда дүрт тәре һүрәтләнгән – өсәүһе таждарҙа һәм береһе державала. Республикан идара итеүле демократик федератив хоҡуҡи дәүләткә (Конституцияла шулай яҙылған!) был герб 1993 йылдың 30 ноябрендә Ельцин Указы менән монархиянан мираҫҡа ҡалды. Рәсәй империяһы бит донъяуи дәүләт булмаған һәм православие дине унда тәхет менән йәнәшә ҡуйылған.

Ә 1997 йылдың 19 сентябрендә Дәүләт Думаһы «О свободе совести и религиозных объединениях» тигән законды президент тәҡдим иткән редакцияла ҡабул итте.

Унын буйынса патриарх һәм патриархия дәүләт власы органдары эшмәкәрлегендә ҡатнашасаҡ, законлы нигеҙҙә рухи цензура урынлаштырасаҡ һәм бюджет аҡсаһына йәшәйәсәк. Шулай итеп, Рәсәй тулы мәғәнәһендә унитаризмға, урта быуаттарға әйләнеп ҡайтты. Әйткәндәй, Мәскәү патриархияһы 1994 йылдан башлап – беренсе Чечен һуғышынан алып – бөтә дәүләт хәрби структуралары менән килешеүҙәр төҙөгән. «Хәрби хеҙмәткәрҙәр статусы тураһында»ғы РФ Законын боҙоп, хәрби частарҙа храмдар асҡан, армияла сиркәү эше йәнләндерелгән. Дини сараларҙа ҡатнашыу хәрбиҙәр өсөн мотлаҡ иҫәпләнә башлаған. Һәм быларҙың бөтәһе лә, 2000 йылдың башында Глеб Якуниндың Мәскәү патриархаты һәм сиркәү иерархтарының енәйәттәрен фаш итеүсе документтар баҫтырып сығарыуына ҡарамаҫтан, һаман да көс ала бара. Хатта элиталы иҫәпләнгән Президент полкына тик славяндарҙы ғына ҡабул итеүҙәре лә күп нәмә хаҡында һөйләй. Был хаҡта 2000 йылдың башында Үҙәк матбуғат яҙып сыҡҡайны.

... Яңынан «серб туғандар»ға әйләнеп киләйек. 1999 йылдың 24 мартында НАТО АҠШ етәкселегендә Югословия президенты Милошевич режимына ҡаршы һуғыш хәрәкәттәре башларға мәжбүр булды. Рәсәй шунда уҡ Америка һәм НАТО менән мөнәсәбәттәрен өҙҙө. 23-нән 24-нә ҡаршы төндә АҠШ-ҡа китеп барған Примаков Атлантик океан өҫтөндә самолетты кире борҙо... Чечняла тыныс мосолман халҡы ауылдары һәм ҡалалары менән «асфальт менән тигеҙләнгәндә» «ыһ» та итмәгән Мәскәү халҡы, серб туғандарын яҡлап, Америка илселеге урынлашҡан бина өҫтөнә сей йомортҡалар һәм буяу тулы банкалар яуҙырҙы. Иң ярһыу «патриоттар» илселек стеналарына саптырҙы. Беҙ бындайҙы күргәнебеҙ юҡ ине. Хатта курдтарҙың азатлыҡ хәрәкәте юлбашсыһы Абдулла Оджаланды Рәсәйҙә ҡабул итмәгәндән һуң ҡаһарман курдтар Мәскәү үҙәгендә үҙҙәрен терелләй яндырғанда ла... Киреһенсә, 1995 йылдың 20 июлендә Рәсәй Сит ил эштәре министрлығы янында Курдистанда төрөк властары алып барған геноцидҡа протест

белдереүсе курдтар ҡулға алынғайны. Уларға Мәскәүҙең Красная Пресня районында суд булды. Төркиә төрмәләрендә зар интегеүсе 10 мең сәйәси тотҡон етмәгәйне беҙгә, күрәһең. Донъяның төрлө илдәре курд халҡына теләктәшлек белдергәндә, күп дәүләттәрҙең парламенттары Төркиәлә кеше хоҡуҡтары тупаҫ боҙолоуын тәнҡитләгәндә, Рәсәй хакимдары бер нәмә лә күрмәмешкә, ишетмәмешкә һалышҡайны. Ә бөгөн килеп, «Америка военщинаһы» һәм «Америка-агрессор», тип ҡысҡырышалалар. Хатта Югославияны, Рәсәйҙе һәм Белоруссияны бер дәүләткә ҡушыу тураһында фекер ҡуйыртыла...

... Шулай итеп, донъялағы иң көслө 19 ил, Рәсәй менән иҫәпләшмәйенсә, славян туғандарҙы бомбаға тота башланы. Һәм Кремль бүтән юҫыҡтарҙа яҡлаусылар эҙләргә мәжбүр булды. Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаттары ғәрәп илдәренә юл алды. Шул ваҡытта мин Судан йөмһүриәтендә һәм Алман Солтанатында эшлекле сәйәхәттә йөрөп ҡайтҡан депутатыбыҙ Ринат Солтанов менән халыҡ-ара сәйәси ваҡиғалар тураһында фекер алышҡайным...

*– Башҡортостан Республикаһы Азия менән Европа киҫешкән урында, Рәсәйҙең йөрәгендә, урынлашҡан. Шуға күрә донъяның ике яртыһындағы ваҡиғалар ҙа беҙгә көслө йоғонто яһай. Ошо юҫыкта Балкандағы һуғыш тураһында нимә уйлайһығыҙ?*

– Балҡанда халыҡ-ара хоҡуҡ нормаларын тупаҫ боҙоу бара. Америка Ҡушма Штаттары етәкселегендә 19 ил оятһыҙ һәм рәхимһеҙ рәүештә Югославия территорияһын бомбаға тота һәм сит дәүләт ерендәге теләгән объектын емергәне өсөн ғәмәлдә бер кем алдында ла яуап бирмәй. Беҙ бөтәбеҙ бер уйҙа булырға – АҠШ-ты һәм НАТО-ны тәнҡитләргә, Югославияны яҡларға – тейештер кеүекбеҙ. Әммә хәл бик ҡатмарлы. Иң тәүҙә беҙ, ә нилектән һуғыш ҡупты, тигән һорау ҡуяйыҡ. Ни өсөн АҠШ һәм НАТО илдәре халыҡ-ара хоҡуҡ нормаларын тупаҫ боҙоуға барҙы? Сөнки быны өсөн Югославия билдәле кимәлдә нигеҙ бирҙе. Шул уҡ Слободан Милошевич, 1987 йылдан башлап, Косоволағы албан халҡының автономияға булған

бәләкәй генә ынтылышын да баҫып килде һәм шуның менән этнос-ара көсөргәнешлек барлыҡҡа килеүенә һәм Косоволағы албандар менән сербтарҙың үҙ-ара ыҙғышыуына юл ҡуйҙы.

*– Балкандағы кризиска кағылышлы тағы бер һорау. Косово Сербия территорияһының тарихи өлөшө, нисек уны албандарға бөтөнләйгә биреп куйһындар?*

– Ләкин, территория Сербияныҡы булыуға ҡарамаҫтан, был Сербия етәкселегенә албандарға ҡарата геноцид актын ҡулланыу хоҡуғын бирмәй. Косовола албан халҡын юҡ итеү киң йәйелдерелмәһә, НАТО менән АҠШ-тың ҡоралды һөжүме лә урын алмаҫ ине. Шуға күрә Балҡанда тыныслыҡ урынлаштырыу юлы берәү генә: НАТО илдәре Югославияны утҡа тотоуын туҡтатырға, ә Сербия һәм Югославия етәкселеге албан халҡын геноцидҡа дусар итеүенә сик ҡуйырға тейеш.

*– Геноцид – халыктарға каршы кулланылған иң куркыныс корал. Донъя тарихы касандыр әрмәндәрҙең – гректарҙы, бөгөн килеп, төрөктәрҙең – курдтарҙы, Рәсәй армияһының чечендарҙы һәм ингуштарҙы күпләп кырыуын күреп тетрәнде. Косово проблемаһын, йәғни унда албандарҙың күбәйеп китеп, урындағы төп халыкты – сербтарҙы – ассимиляциялап һәм хокуктарын кыҫырыклап, үҙҙәренә автономия талап итеүенә һәм Косовоны күрше Албанияға кушырға тырышыуына, шулай ҙа, геноцид кулланып түгел, ә цивилизациялы демократик донъя канундарына таянып каршы торорға кәрәк булғандыр... Мин быны, үҙебеҙҙең республиканың төньяғында һәм төньяк-көнбайышында Косоволағы албандарҙыкына окшаш хәрәкәт барғаны – сиктәрҙе үҙгәртеү һәм күрше дәүләткә кушылыу тураһында һүҙ куҙғатылғаны өсөн әйтәм. Быны бер кемдән дә йәшереп булмай. Акыллы һәм уйланылған сәйәсәт алып барып кына сит дәүләт ерҙәренә кул һуҙыусы сепаратсыларға каршы тороп булалыр, тип уйлайым.*

– Шуныһы көн кеүек асыҡ, беҙҙең республиканың административ-территориаль ҡоролошон үҙгәртергә тырышыуҙар, федерация субъекттары араһындағы ғәмәлдәге

сиктәрҙе яңынан ҡарап сығырға ынтылыуҙар тәүәккәл кире ҡағылырға тейеш, сөнки был иң хәүефле юл һәм ул туранан-тура Чечнялағы һәм Косоволағы оҡшаш мәшхәргә алып бара. Ошондай мәкерле уйҙар менән янып йөрөүселәр ябай провокаторҙар ғына түгел, ә, милләттәр ҡанын түгеп, үҙҙәренә карьера эшләргә тырышыусы сәйәси енәйәтселәр, тип иҫәпләйем. Ул кешеләр үҙ халҡын да, бүтәнде лә яратмай.

*– Ҡушма Штаттарҙың һәм НАТО-ның ҡоралл агрессияһына ҡағылышлы тағы шундай фекер әйтеп үтке килә. АҠШ-тың дәүләт секретары Мадлен Олбрайт: «Беҙ быға тиклем, халыҡ-ара нормаларҙы боҙмайыҡ тип, геноцидҡа ҡаршы тора алманыҡ. Әммә быны башҡа түҙеп торор әмәл ҡалманы», – тигәйне. Был ҡораллы ҡыҫылыу, ни тиклем генә фажиғәле булмаһын, бәлки, киләсәктә Рәсәйҙең дә чечен, ингуш һәм башҡа халыҡтарҙы геноцидҡа дусар итеүенә ҡаршы ниндәйҙер иммунитет булдырыр. Нисек уйлайһығыҙ?*

– Мин шулай ҙа, быны иң тәүҙә үҙ мәнфәғәттәрен ҡайғыртҡан айырым илдәр түгел, ә халыҡ-ара берләшмәнең килешеүе аша хәл итергә кәрәк, тип иҫәпләйем. Бының өсөн ОБСЕ һәм БМО бар. Уларҙы артҡы планға этәреп эш иткәс, көслө яҡтың ҡулдарында уйнаған ҙур күсәк еңә. Әммә бындай юл кешелекте һәләк итәсәк.

* * *

2000 йылдың аҙағы. Югославияла яңы президент һайланды. Рәсәйҙең сит ил эштәре министры Игорь Иванов Югославияға барып, тәхеттән ҡолатылған Слободан Милошевичтың «ҡайғыһын уртаҡлашып» ҡайтты. Шул уҡ ваҡытта Кремль хужалары Чечняның законлы президенты Аслан Масхадовҡа ҡул бирергә лә теләмәне – һуғыш дауам ителде. (Бары тик 2001 йылдың башында ғына тотош емертелгән һәм нигеҙенәсә ҡыйратылған Чечнянан Рәсәй ғәскәрҙәрен сығарыу мәсьәләһе ҡуҙғатыла башланы).

Әлегә Рәсәй етәкселеге үҙ федерацияһындағы президенттарға ҡарағанда кешелеккә ҡаршы эшләгән енәйәттәре өсөн Гаагалағы халыҡ-ара суд тарафынан үлемгә хөкөм ителгән Сербияның элекке президенты Слободан Милошевичты яҡыныраҡ күрә. Славян булғаны өсөн.

Ошондай «ике йөҙлө» сәйәсәт һәр даирәлә – иҡтисадта, мәҙәниәттә, прокуратурала һәм милицияла, матбуғатҡа мөнәсәбәттә – үҙен асыҡ һиҙҙерә. Тағы бер нисә генә миҫал килтерәм. Чечен һуғышы тураһындағы дөрөҫлөктө, кеше хоҡуҡтарын тупаҫ боҙоуҙы, тыныс халыҡҡа геноцид үткәреүҙе ғәҙел яҡтыртҡаны өсөн «Азатлыҡ» радиостанцияһы журналисы Андрей Бабицкийҙы Чернокозово концлагерына алып барып яптылар (бары донъя йәмәғәтселеге килеп ҡыҫылып, үлемдән йолоп алып ҡалды), ә һуғышты бер яҡлы, тик Кремль мәнфәғәтендә генә яҡтыртҡан НТВ тележурналисы Елена Масюкҡа Борис Ельцин бер ҡосаҡ сәскә гөлләмәһе һәм зиннәтле алҡалар бүләк итте.

1994–1996 йылдарҙа Рәсәй Дәүләт Думаһында бөйөк урыҫ шовинизмы рухындағы бөткөһөҙ сығыштары һәм йоҙроҡ һуғыштары менән тамам маҙаға тейеп бөткән экстермист Николай Лысенконың енәйәти эше 1996–1997 йылдарҙа, йыл ярым ваҡыт һуҙымында, Мәскәү ҡала судында ҡаралғайны. Элекке депутат Енәйәти Кодекстың биш статьяһы буйынса ғәйепләнде: терроризм, алдаҡ, законһыҙ юл менән боеприпастар һаҡлау, вазифаһынан үҙ мәнфәғәтендә файҙаланыу һәм дәүләт милкен үҙләштереү. Баҡтиһәң, ул депутат булып һайланыу өсөн үҙ-үҙенә һөжүм итеүҙәр һәм шартлауҙар ойошторған һәм енәйәттәрен чечендарға ауҙарған, шул юл менән халыҡ араһында танылыу алған һәм парламентҡа үткән икән. Шулай итеп, бәғзе берәүҙәр, чечендарҙы «мансып» президент булһа, икенсеһе, чечендарға ялған ғәйеп тағып, депутатлыҡҡа һайланған. Прокурор Николай Лысенконы алты йылға иркенән мәхрүм итеүҙе талап итһә лә, экстремисты тулыһынса аҡлайҙар һәм суд залында уҡ иреккә сығаралар. Һуңғы сиктә ул ни бары Думалағы кабинетынан өйөнә урлап алып ҡайтҡан компьютерҙың хаҡын ғына түләргә тейеш булып ҡала.

Уның ҡарауы, шул уҡ Мәскәү ҡалаһының Бутырка район суды чечен милләтенән булған Ислам Гашаевты, курткаһында бер патрон һаҡлағаны өсөн, законһыҙ юл менән ҡорал йөрөткән, тип, Енәйәти Кодекстың 222-се статьяһы буйынса бер йыл да бер айға иркенән мәхрүм итте. Гашаевты ҡулға алғанда ныҡ туҡмайҙар, шаһиттарҙы тентегендән һәм патрон «тапҡандан» һуң ғына саҡыралар (ЭКСПРЕСС-ХРОНИКА, 17 ғинуар, 1997)...

Бына шундай «тиң хоҡуҡлылыҡ» хөкөм һөрә Рәсәйҙә. Һәр урында тик бер милләттең генә өҫтөнлөгө һыҙыҡ өҫтөнә алына, ә бүтән халыҡтар тын алырға ла ҡурҡып йәшәргә тейеш булып сыға...

1997 йылдың 8 ғинуар көнө. Балҡарстандың дәүләт советы рәйесе Рәсүл Джапуевты Тырнауз ҡалаһында (Кабарҙы-Балҡар республикаһы) енәйәт эштәрен асыу хеҙмәткәрҙәре ҡулға ала. Һәм Нальчик ҡалаһына килтереп, республика прокуратураһы тәфтишсеһе А. Жарков ҡарамағына тапшыра. Тәфтишсе унан балҡар халҡының былтыр ноябрь айында булып уҙған съезының документтарын талап итә. Р. Джапуевҡа һәм балҡар дәүләт советының 23 ағзаһына ҡаршы РФ Енәйәти Кодексының 79-сы статьяһы буйынса – илдең территориаль бөтөнлөгөнә ҡурҡыныс янау – енәйәт эше асыла...

## АМЕРИКАНДАРҘАН НИСЕК КӨС АЛЫРҒА?

Әгәр беҙҙең Рәсәйҙә, христиандар ғына түгел, ә мосолмандар ҙа үҙбилдәләнеш алырға хоҡуҡлы, тигән идея өҫтөнлөк итһә, был ысын мәғәнәһендә юғары үҫешкән йәмғиәттәгесә, хоҡуҡи дәүләттәгесә булыр ине. Сөнки бер ниндәй этносты ла, милләтте лә диненән айырып алып ҡарау мөмкин түгел. Дин өммәттең рухы, йәғни идеологияһы. Шуны дөрөҫ аңламау, йә иһә үҙеңдең динеңде генә юғары ҡуйып, бүтәндекен танымау төрлө аңлашылмаусанлыҡҡа килтерә лә инде. Һиндостанда индустар менән мосолмандар араһында мөнәсәбәттәр көсөргәнешле, Палестинала ғәрәптәр менән йәһүдтәр бер

фекергә килә алмай. Ҡайһы бер мосолман илдәрендә сөнниҙәр һәм шииттар бер-береһенә ышанмай. Төньяҡ Ирландияла католиктар менән протестанттар һыйыша алмай. Рәсәйҙә ғүмер баҡый урыҫ булмағандарҙы көсләп суҡындырыу сәйәсәте алып барылған. Ә бөгөн килеп, президентыбыҙ Борис Ельцин бөтөн халыҡ алдында телевидениенан сығыш яһап, Мәскәү сиркәүе митрополитын үҙенән ҡала икенсе баш командующий тип атаны. Ә президент булып һайлана алмаған Геннадий Зюганов шулай уҡ тура эфирҙан: «Иң юғары маҡсат – коммунизм. Иң юғары идея – христианство», – тип иғлан иткәйне. Уларға тиклем хакимлыҡ иткән Политбюро ағзалары ла шундай уҡ идеология үткәргән. Рәсәй хөкүмәте 1992 йылдың ноябрендә Ингушетияға ғәскәр индергәс, унда мәсеттәрҙе ҡыйратыу, халыҡты ҡырыу башланғас, президент Руслан Аушев бөтә йөрәге менән әрнеп былай тигәйне: «Ниңә Мәскәү беҙгә үҙебеҙ булып йәшәргә хоҡуҡ бирмәй?! Күпме шулай ҡыҫырға мөмкин? Хатта Афғанстанға ингәндә лә сусҡалар алып барып үрсетеп маташтылар бит, тәреләр тағып, мосолмандарҙан көлөп...» Афғанда һуғышҡан бит, үҙе күргәндәрҙе әйткәндер.

1999 йылдың башында Өфөлә уҙғарылған «Бөгөнгө донъяла демократия һәм милли хәрәкәттәр» тигән Рәсәй-Америка семинарында АҠШ профессоры Хафиз Малик Афғанстандағы талибандар дәүләте тураһында доклад менән сығыш яһағанда: «Афғанстандағы хәҙерге хөкүмәт, бөтөн донъяға ғәйәт ҙур экстремизм менән янаусы талибанлыҡ, Советтар Союзының 1979 йылдың декабрендә Афған иленә баҫып инеүенә яуап рәүешендә барлыҡҡа килде», – тип белдерҙе. Эйе, экстремизмды экстремаль шарттар тыуҙыра. Бөгөн талибандар бер генә маҡсатҡа ынтыла: «миллиард кешене тәшкил иткән ислам донъяһын ҡотҡарыу». Әгәр талибтар Афғанстанда һиҙелерлек уңышҡа өлгәшһә (ә бөгөн улар территорияның 90 процентын биләй), талибанлыҡ Пакистанға, Үзбәкстанға һәм Ҡырғыҙстанға ғына түгел, мосолмандар күп йәшәгән Рәсәйгә, Иранға һәм Һиндостанға ла йоғонто яһай башлаясаҡ. Бынан ниндәй хәүеф янай һуң? Талибтар

бөтәһе лә XVII һәм XVIII быуаттарҙағы ҡатып ҡалған ислам дине тәғлимәте уҡытылған мәҙрәсәләрҙән сыҡҡан. Уларҙың теорияһы буйынса гонаһлыларға түбәндәге ҡот осҡос язалар ҡаралған: 1) никахтан тыш енси бәйләнеш өсөн 100 тапҡыр ҡамсы менән ҡайыҙлау йәки таш менән бәреп үлтереү. Гомосексуализм ҙур енәйәт иҫәпләнә һәм ғәйепле кеше стена менән ҡаплатылып, үлемгә дусар ителә; 2) бурҙарҙың ҡул-аяҡтарын ҡырҡалар; 3) шәриғәткә ҡаршы һөйләүсе телевизор каналдары ябыла; 4) фотоға төшөү, йырлау һәм музыка тыйыла; 5) көнөнә биш тапҡыр намаҙ уҡымаусы йәки Рамаҙан айында 30 көн ураҙа тотмаусы төрмәгә ябыла; 6) һаҡалды ҡырыу һәм Көнбайыш стилендә сәсте киҫтереү тыйыла; 7) ҡомарлы уйындар, аҡсаға бәхәсләшеү, күгәрсендәр аҫырау, эт ярыштары тыйыла.

Ислам фундаментализмы бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙарға ҡаты ҡуллы. Уларҙы эшкә алмайҙар, алғандарын ҡыуып сығаралар, белем алыуҙы тыялар. Ҡатын-ҡыҙ ирҙең ҡоло рәүешендә генә йәшәргә тейеш, тип ҡарайҙар.

*Хафиз Маликтың сығышына профессор Ширин Хантер ҡайһы бер аңлатмалар биреп үткәйне:*

– Афған мәҙрәсәләре һуғыш ваҡытында Сауд Ғәрәбстанында финанслана, ә унда төп докторина булып ваһһабизм (саф ислам) һанала. Күреп тораһығыҙ, афған проблемаһы шул төбәктәрҙәге державаларҙың һәм Рәсәйҙең тышҡы йоғонтоһонан тәрәнәйгәндән-тәрәнәйә. Афғанстандың киләсәктә бер нисә өлөшкә бүленеүе лә ихтимал, Тажикстан да этник компоненттарға тарҡалырға мөмкин. Тажикстан һәм Афғанстан тажиктарының берләшеүе бар. Талибандар хәрәкәте хаҡында һөйләгәндә, Афғанстанда халыҡтарҙың бер-береһенә ныҡ ҡаршы тороуын да әйтеп үтергә кәрәк.

*БДУ профессоры А. Науменков сығыш яһап, талибтар хөкүмәтенең террорына донъя йәмәғәтселеге ныҡ ҡаршы торорға, был йәһәттән АҠШ, Пакистан, Иран, Һиндостан һәм Рәсәй берләштерелгән полиция, ФСБ, башҡа көс ҡулланыу органдары ярҙамында ҡаты көрәш алып барырға тейеш, тигән фекер әйтте.* Талибтарға

АҠШ-тың өндәшмәй, тыныс ҡарауын, Пакистандың теләктәшлек белдереүен тәнҡитләне.

*Сығышы менән Пакистандан булған Хафиз Малик уға былай тип яуап бирҙе:*

– Ни өсөн Пакистан талибтарҙы яҡлай? Сөнки улар ниндәйҙер кимәлдә Афғанстанда эске хәлдәрҙе тотороҡландырҙы, йәмғиәтте бергә тупланы. Мәжәһиттәр үҙ-ара һуғышып, быны эшләй алмағайны. Әммә Рәсәй, Пакистан, Иран, Һиндостан талиб хөкүмәте менән язалау планында мөғәләмә итһә, яҡшы нәмә килеп сығыр, тип уйламайым. Һеҙ нимә тәҡдим итәһегеҙ? Иран Афғастанға ғәскәр индерһенме? Йә иһә, Рәсәй йәнә Афған иленә баҫып инеп, талибтар менән һуғышһынмы? Әллә АҠШ ошоларға оҡшаш берәй эш ҡылырға тейешме? Юҡ, беҙ быларҙы үттек инде, берҙән бер юл – талибтар менән хеҙмәттәшлек итеү һәм уларға ыңғай йоғонто яһарға тырышыу. Беҙҙең маҡсат – айырым бер илдә генә түгел, ә тотош донъяла күп төрлө халыҡтарҙың, ниндәй дин тотоуҙарына ҡарамаҫтан, берҙәм һәм татыу йәшәүҙәренә ирешеү.

Шул уҡ Рәсәй-Америка семинарындағы тағы бер нисә сығышҡа иғтибар итәйек.

Ислам диненең әхлаҡи юғарылығы, сафлығы хаҡында һүҙ күтәрелгәс, Вәлит Икбал: «Исламдың көсө лә шунда, ул бер ниндәй әхлаҡи өҫтөнлөккә, бүтәндәрҙән юғары булыуға дәғүә итмәй һәм башҡа диндәрҙе кәмһетергә тырышмай, – тине. – Ҡөрьәндә әйтелгән: Алла ергә христиандарҙы, мосолмандарҙы һәм башҡаларҙы ебәреп, донъяны тигеҙ яралтмаған. Әммә бит уның көсөнөң сиге юҡ, әгәр теләһә, бөтәһен дә бер тигеҙ итеп яралтыр ине. Ысынында иһә бер-береһе менән изге эштәр ҡылыуҙа ярышып, дәғүәләшеп йәшәүҙәрен, гонаһтан, насар ғәҙәттәрҙән йыраҡ тороуҙарын теләгән. Исламдың берҙән-бер өҫтөнлөгө – яуызлыҡҡа өгөтләмәү. Был беҙҙең һәр беребеҙҙең бурысы».

Ислам дине тураһындағы фекерләүҙәрҙе профессор Наим Ратор түңәрәкләп ҡуйҙы:

– Беҙҙең мосолмандар өсөн ислам – тормош рәүеше ул. Исламдағы әүлиәләр, пәйғәмбәрҙәр нисек йәшәгәне,

нимә ҡылғаны минең өсөн әллә ни ҙур әһәмәткә эйә түгел. Мин бит мосолман булып тыуғам – һайлау мөмкинселегем булмаған. Мин мосолман илендә, дини ғаиләлә үҫтем, сит илдә уҡыным, сит идеялар үҙләштерергә лә тура килде, әммә һуңғы сиктә, ғөмүмән, мосолман булараҡ, һуңғы ҡарарҙы мин барыбер үҙем ҡабул итәм. Мосолман булыуымдан оялмайым да, ғорурланмайым да. Был минең тәбиғи хәлем. Мин Аллам алдында ғына яуаплымын, бүтән бер кем алдында ла түгел. Мосолманлығым миңә кеше булып ҡалырға, изгелектәр ҡылып йәшәргә ярҙам итә.

... Ирекһеҙҙән, мосолман булып йәшәргә теләгән чечен ҡарттары һәм дағстандар, Рәсәй ғәскәрҙәре ер менән тигеҙләгән Карамахи, Чабанмахи һәм Кадар ауылдары күҙ алдына килеп баҫты. Унда федераль ғәскәрҙәр Чечнянан килгән боевиктар менән түгел, ә урындағы халыҡ менән һуғышты. 1997 йылда ғына ошо ауылдарҙа шәриғәт ҡанундары буйынса идара итеү системаһын урынлаштырып, ислам йәмғиәте лидерҙары Дағстандың эске эштәр министры М. Таһиров менән осрашып килешкәйне. Әҙ генә ваҡыт премьер-министр булып эшләп алғанда Сергей Степашин да Карамахи ауылында булып киткәйне. Уны ҡәҙерле ҡунаҡ итеп ҡаршы алдылар, премьер ҙа Кадар шәриғәт йәмғиәте территорияһына ҡорал тотоп баҫып инеүҙе һис тә кәрәк тапмағайны. Әйтергә кәрәк, йәмғиәт (община) ағзалары үҙҙәренең ауыл хужалығы продукцияһын һатырға алып сыҡҡанда милиция постарына «яһаҡ» түләүҙән баш тарта, уғрылыҡҡа һәм ришәүәтселеккә батҡан милиционерҙарҙы үҙ еренән ҡыуып ебәреп, йәмәғәт тәртибен үҙ көстәре менән һаҡлау бурысын йөкмәй. Ошонан һуң Дағстандың Даргин районында етди енәйәттәр теркәлмәй, ҡатын-ҡыҙҙар бөркәнсек ябына, ирҙәр баштан-аяҡ ҡораллана. Карамахи, Кадар һәм Чабанмахи территорияһында тик шәриғәт ҡанундары ғына хакимлыҡ итә...

Ошо өс ауылды Рәсәй артиллерияһы 1999 йылдың йәй аҙағында ике аҙна буйы бер туҡтауһыҙ утҡа тота, вертолеттан бомбалар ташлай, авиация һөжүм итә. Бынан



*Низаметдин Әхмәтов*

һуң Эске эштәр министрлығының спецназы, армияның десант частары, Дағстан ополченецтары, урындағы асыулы милиция отрядтары һәм Рәсәйҙең бөтә мөйөштәренән килгән ОМОН-дар ауылдарға баҫып инә. Армияның Баш разведка идаралығы спецназы (ГРУ) һәм ФСБ «таҙартыу» эштәрен алып бара. МВД көстәре менән өс ауылды ер менән тигеҙләгәс, һәр ауыл янында Чечня һуғышында киң ҡулланылған фильтрацион пункттар асылып, улар аша тере ҡалғандарҙан 14 йәштән өлкәнерәк ир-егеттәр үткәрелә. Бик күп баш ҡала журналистарының шаһит булыуынса, уларҙа язалауҙар, мыҫҡыллауҙар, туҡмауҙар киң ҡулланыла. («ЭКСПРЕСС-ХРОНИКА», 20 сентябрь, 1999 йыл).

Ә Рәсәй етәкселәре, ундағы ваһһабиттар ҡайҙа булды икән, тип ғәжәпләнеүен дауам итә. Рәсми булмаған мәғлүмәттәр буйынса, Рәсәй хәрбиҙәре һәм дәүләт эшмәкәрҙәре тыныс ауылдарҙы ҡыйратыуҙы сираттағы «фажиғәле хата» тип иҫәпләй...

Ә милли һәм дини күрәлмаусанлыҡтан ағыуланған Мәскәү репортерҙары, ОРТ һәм НТВ тележурналистары, тауыштары ҡалтырана-ҡалтырана, террорсыларҙың кемделер урлауы йәки үлтереүе тураһында гәп һата, меңәрләгән дағстандар һәм чечендар үлтерелгәндә керпеге лә дерелдәмәгән кешеләр Мәскәүҙәге шартлауҙар өсөн йәнә тыныс Кавказ халҡынан үсен ала, тиҫтәләгән ауылдар ҡыйратыла – Президент милли матәм көнөн бер ҙә иғлан итмәй, Патриарх һәләк булғандар өсөн һыҡранмай...

Рәсәй – Америка семинарында республикабыҙҙың бик абруйлы ғалимы, БР ФА президенты Роберт Ниғмәтуллин: «Беҙ – башҡортостандар һәм шул уҡ ваҡытта – Рәсәй граждандары ла! Беҙҙең бөтә эштәребеҙ, идеяларыбыҙ шул берҙәмлекте һаҡлап алып ҡалыуға йүнәлтелергә тейеш!» – тигәйне.

Эйе, беребеҙ ҙә Рәсәйҙән сығыуыбыҙҙы, ниндәйҙер Төрки ҡағанатында йәки йәһүдтәрҙең «Яңы донъя системаһы»нда йәшәйәсәгебеҙҙе күҙ алдына ла килтермәйбеҙ. «Россиян»дар булыу беҙҙең өсөн ғорурлыҡ булмаһа ла (әлегә!), маңлайыбыҙға уйылған яҙмыш.

Рус телендә ижад итеүсе башҡорт яҙыусыһы, хоҡуҡ яҡлаусы Низаметдин Әхмәтов был йәһәттән бик тә хаҡлы. Бөтә әрнеүҙәребеҙ һәм өмөттәребеҙ ҙә, барыбер, Рәсәйгә төбәлгән бит.

Мине ярат, тиеп, теҙләнмәйем,
Сараһыҙлыҡ быуа. Рухым сәсәй.
Бәхетенән яҙған балаһынан
Йөҙ бора ла тора илем – Рәсәй...
Ҡалай тырышһам да, мин рус түгел.
Ҡан тартмаған кеүек, йәндәр йыраҡ.
Телдәр генә уртаҡ. Уй-хыялда
Үгәйҙән дә үгәй, беҙ – ете ят,
Мин рус түгел. Әммә Рәсәй – илдең
Түрҙәренә юлдар киҫелгәндән
Айырылыу юҡ. Тоҡом ят килеш тә
Яҙмыштар бит бергә ишелгәндәр.

Ләкин, күҙ йәштәренә сумып, тешеңде ҡыҫып йәшәп, үлеп, үлтерелеп, милләтең, динең, ерең тапалып, Рәсәйҙе яратып буламы ни?!

Ә бит тарихи ысынбарлыҡ күрһәтеүенсә, әгәр совет ғәскәрҙәре 1979 йылда Афғанстанға баҫып инмәһә, бөгөн унда талибандар власҡа килмәгән булыр ине. Әгәр Рәсәй ғәскәрҙәре Чечняла ике тапҡыр һуғыш асмаһа, ваһһабиттар Рәсәй территорияһына үтеп инә алмаҫ һәм чечен боевиктары араһында һуғышмаҫ ине. Быларҙың барыһын

да Рәсәй шовинизмы һәм экстремизмы үҙе килтереп тыуҙырҙы. Юғиһә Рәсәй мосолмандарының береһе лә исламға фанаттарса бирелмәгәйне. Шулай ҙа динһеҙ ҙә булманыҡ, һәр беребеҙҙең йөрәгендә Алла йәшәне, тәүфиҡ бар ине. Ә хәҙер нимә ҡалды? Рәсәйҙәге бар матбуғат саралары, радио һәм телевидение, аудио һәм видео, китаптар һәм журналдар, гәзиттәр һәм рекламалар – бөтөнөһө лә ояттың йөҙөн асыуға йүнәлтелгән! Бөтә ерҙә – яланғас бисә һүрәттәре, урам тулы – фәхишәләр. Ислам фундаментализмының барлыҡҡа килеүенә баҫҡынсылыҡ һәм геноцид ҡына түгел, ә тормошобоҙға ябырылып килеп ингән ошо әхлаҡһыҙлыҡ, енси бәйһеҙлек, тәүфиҡһыҙлыҡ та булышлыҡ иткәндер, тип уйлайым мин.

Дөйөм кешелек һәм цивилизация ҡанундарының үтәлешен тәьмин итергә тейеш йорттарҙа ла «һары» бульвар матбуғаты еҫтөнлөк иткәс, нимәгә һәм кемгә өмөт итәһең? «Сенсациялы» баш һүҙҙәр әллә ҡайҙан иғтибарҙы йәлеп итә: «XXI быуатта ҡыҙлыҡ бөтөнләй булмаясаҡ», «... великолепный трах...», «Пугачева иҫерек көйө Путиндың һаҡсылары менән һуғышҡан...» һ. б., һ. б. Шәп-шәрә ҡатын-ҡыҙ һүрәттәре иң беренсе биттәрҙе «биҙәй»...

2000 йылдың көҙө. Башҡорт дәүләт университетының һәм уның ректоры ултырған бүлмәнең ҡапма-ҡаршыһында ғына (Фрунзе, 33) «Соло» бейеү клубы эшләй. Унда киске сәғәт 9-ҙан иртәнге сәғәт 6-ға тиклем «күңел асалар». Программаһы һәм рекламаһы менән Өфө урамдары тулған:

«19 октября, четверг. Конкурсы на раздевание и одевание, предъявителям студ. билетов – скидка 50%.

20 октября, пятница. Ночь «для взрослых». Отрываемся под мега-хиты! Вежливым и красивым девушкам до $23^{00}$ вход бесплатный.

22 октября, воскресенье. Мы тоже работаем!.. Первым 10 пришедшим – по бутылке пива!»

Мин бәйән иткәндәр – бер сиккә һуғылыу булһа, донъяла икенсе сиккә бәрелеү ҙә бар. Уныһы тағы ла аяныслыраҡ һәм аяуһыҙыраҡ. Мәжит Ғафуриҙың «Ҡара

йөҙҙәр» һәм Мостай Кәримдең «Ай тотолған төндә» әҫәрҙәрен уҡып ҡына ла беҙ шәриғәт ҡанундарының рәхимһеҙ һәм бер ниндәй сигенеүһеҙ икәнлеген яҡшы белә инек.

Урлашҡан өсөн ҡулды киҫәләр, иренә хыянат иткәне өсөн таяҡ менән туҡмайҙар. Шәриғәт хәҙер саф көйөнсә Суданда, Иранда, Сауд Ғәрәбстанында һәм Афғанстанда ғәмәлгә ингән. Египетта йөҙөн пәрәнжә менән ҡапламаған ҡатындарҙың битенә кислота һибәләр, Алжирҙа өйөндә Ҡөрьәне булмағандарҙың башын киҫәләр, Иранда иренен буяған ҡатын-ҡыҙҙың помадаһын үткер бритва менән «ҡырып» алалар. Афғанстанда «аллаһыҙҙарҙы» майҙанда бөтә халыҡ алдында бәйләп һалып һарыҡ һымаҡ итеп һуялар. Хөкөм ителгәндәрҙе тәртипһеҙ йыр тыңлағаны, намаҙ уҡырға онотҡаны, һаҡал үҫтермәгәне, «тәүфиҡһыҙ» телефизор ҡарағаны өсөн язалайҙар.

Ҡанлы «Хамас» төркөмө (уның ағзалары 1987–1996 йылдарҙа, кәүҙәләренә гранаталар бәйләп, Израиль баҙарҙарында һәм автобустарында үҙен шартлатты) һәм «Алла партияһы» (бөтә донъяла Израиль синагогаларын һәм илселектәрен шартлатыусылар) Израилдең күрше ғәрәп ерҙәрен туҡтауһыҙ баҫып алыуы һөҙөмтәһендә ойошто...

Эйе, экстремизмды экстремаль шарттар тыуҙыра. Тик был әле уны аҡлау һәм ғәфү итеү түгел. Беҙҙе лә дин генә түгел, ә иң тәүҙә юғары үҫешкән Европа закондары һәм төп халыҡтарға үҙбилдәләнеш гарантиялаусы БМО Декларациялары ҡотҡарып алып ҡаласаҡ. Сөнки шуны оноторға ярамай: ислам халыҡтар үҙбилдәләнешен танымай һәм: «Бөтәһе лә Алла ҡулында!» – тип бара. (***«Демократия и национальные движения в современном мире»***. Өфө, 1999. 203-сө б.). Пәйғәмбәр әйткән (хәҙистәр): «Күпселек артынан бар». Һәм «һинең бурысың – ойошҡан берләшмәне һәм күпселекте яҡлау». Был шулай уҡ һуғыш иғлан итеү, хөкүмәттәрҙе ҡолатыу һәм конституцияға төҙәтмәләр индереү мәсьәләләренә лә ҡағыла. (***Шул ук китап. 210-сы бит***). Ә быуаттар буйы алып барылған колонизация һәм геноцид сәйәсәте

һөҙөмтәһендә үҙ илендә әҙселектә тороп ҡалған төп халыҡтар өсөн бындай мажоритар принцип бөгөнгө демократия шарттарына һис тә яуап бирмәй.

Шуға күрә ислам динен кеше өркөтөрлөк сәйәсәткә әйләндерергә һәм оло майҙандарҙа «Алла һәппәр!» тип ҡысҡырырға ашыҡмайыҡ әле. Алла иң тәүҙә беҙҙең күңелебеҙҙә булһын һәм ҡылған изге эштәребеҙҙә сағылһын.

## КҮҢЕЛГӘ АЛЛА ҠАЙТҺЫН

Беҙҙе иң беренсе сиратта түбәндәге хәлдәр ныҡ борсорға тейеш: ил өҫтөнә боҙоҡлоҡ таратылғанда – йәш быуынға тәмәке, араҡы, «порнуха» һәм наркотиктар таш булып яуҙырылғанда, уларҙың күңелдәре һәм ҡолаҡтары һаңғырау ителгәндә, күҙҙәренә ҡорма ябып, йөрәктәренә ғазап, тәндәренә сир килтерелгәндә, беҙгә ни эшләргә? Халыҡтарҙың һәм милләттәрҙең киләсәгенә, генофондына үлемесле афәт янағанда, иманды нисек ҡайтарырға? Кеше кешенең ҡанын түккәндә, бер-береһен өйөнән ҡыуып сығарғанда, бала-сағаһын утҡа һалғанда, ерен тартып алғанда, нисек иман һаҡларға? Шул ҡәҙәр аяныслы һынауҙарға кешене сабый бала сағынан уҡ нисек әҙерләргә, кереһеҙ күңеленә бер ҡасан да тап төшөрмәҫлек көслө рухты нисек бирергә?

... Яңы ғына тыуған 1995 йылдың ғинуар айы. Салауат районының Мәсетле ауылында урам буйлап атлап килә́м. Юлымда осраған һәр бала мине ололоҡлап иҫәнләшеп үтеп китә. Күңелгә май яғылғандай булып ҡала. Олоно-ололоҡлай, кесене кеселекләй белгән халҡымда иман көслө әле. Беҙ үҫкәндә лә шундай була торғайныҡ бит ул. Тик ҙурайып, ауылдан ситкә китһәк, донъя бысраҡлыҡтары менән осрашһаҡ, йыш ҡына ебеп төшөп, төшөнкөлөккә бирелә инек. Үҙебеҙҙе гел кәм-хур тойҙоҡ. Нилектән икән ул? Ниңә беҙ йәш быуынды киң донъяға аяҡ баҫырға әҙерләмәйбеҙ, ауырлыҡтар алдында ҡаушап, ҡурҡып ҡалмаҫҡа, ғорур булырға өйрәтмәйбеҙ? Былар бит мәктәптән генә түгел, нәҫел-тамырҙарынан килә. Ауылда

бит ҡарттар эсеп ята. Пенсия аҡсаһына. 50–60-сы, 70-се йылдарҙа ғына әле әңкәйем менән ҡарттайымдар эсеү түгел, бала-саға алдында әҙәпһеҙ һүҙ ысҡындырмай торғайны.

Мәсетле мәктәбе директоры Рәйфә апай Басирова менән фекер алышабыҙ. Ул 24 йыл буйына мәктәптә математика, физика дәрестәрен уҡытып, ҙур тәжрибә туплаған кеше.

– Ғаиләлә лә тәртип ныҡ ҡаҡшаны шул. Эскелек боғаҙҙан алды, – тине Рәйфә Ғәйетҡол ҡыҙы. – Йәш ғаиләләр ҙә шуға һалышты. Уларға ла үпкә юҡтыр инде, моғайын, күңел асыр урын да юҡ бит. Радио һөйләмәй. Телевизор бик насар эшләй, Өфө иплән күрһәтмәй. Тәүҙә, асылғас та, матур ғына күрһәтеп алғайны, үткән йәйҙән бирле беренсе программаны бөтөнләй ҡарай алмайбыҙ.

– Ә радио ниңә һөйләмәй? Радио бит бөтөн Әй буйында йүнләп эштәмәй. Был нилектән килә икән?

– Ҡайҙа ғына мөрәжәғәт итеп ҡараманыҡ инде! Депутаттар ҙа күтәреп сыҡҡыланы, гәзиттә лә яҙҙылар – яйға һалынманы. Ваҡытлыса ғына килеп эшләп китәләр ҙә, шунан тағы өҙөлә. Ҙур радио бер кемдә лә хәҙер юҡ. Ваҡытлы матбуғатҡа ла халыҡ насар яҙыла. Бөтөнләй гәзит уҡымаған ғаиләләр күп. Бына быйылға ла эш хаҡы иҫәбенә тип яҙҙырғайнылар, совхоздың күсерергә аҡсаһы булманы. Әле, күсерәсәктәр, февраль айынан башлап гәзиттәр килә башлаясаҡ, тиҙәр! Хәйер, эш хаҡы ла ҙур түгел инде. Шуға кеше бер гәзиткә яҙыла ла шуның менән бөттө. Башҡаһына яҙыла алмайҙар.

– Һеҙ, ни өсөн эсәләр икән, тигән һорауға, күңел асырға урын булмағанғалыр, бәлки, тип фараз иттегеҙ. Шуны үҙегеҙ нисек күҙ алдына килтерәһегеҙ? Күңел асыу урыны ниндәй булырға тейеш?

– Эштән бушаған арала, кемдер ҡайҙалыр барып, әҙерәк кенә күңелен бушатырға тейештер ҙә инде. Ә ҡайҙа барырға? Мәҫәлән, беҙ, мәктәп хеҙмәткәрҙәре, балалар менән төрлө кисәләр үткәрәбеҙ, буш ваҡытыбыҙ ҙа әҙерәк. Ә ауыл халҡының ваҡыты күберәк тә инде – бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙыҡы – уларға ауылда эш юҡ. Ҡыштың буйы

бер нәмә лә эштәмәйҙәр. Йәй көндәре лә хәҙер элекке һымаҡ сөгөлдөр утамайҙар. Бесән әҙерләү ҡатын-ҡыҙ иңенән төшкән ул. Ҡул эштәре лә бик әҙҙер. Күңелгә ятҡан киноны ла барып ҡарап булмай бит.

Ә бит беҙҙең милли мөхитебеҙ һис тә ярлы булырға тейеш түгел һымаҡ. Бөгөнгө башҡорт донъяһы китапҡа күмелгәндә, халҡыбыҙҙың сарсаған күңеленә тарихи ғәҙеллек ҡайтарып бирелгәндә, ауыл китапханаһының ярлы булып ҡалыуы бик үкенесле. Үҙебеҙҙең тарих – Ҡол Ғәли, Салауат батыр, Аҡай, Ҡараһаҡал, Батырша, Муса Мортазин, Зәки Вәлиди, Рәми Ғарипов, Шәйехзада Бабичтар миҫалында ғына бит ысын кеше, аяғында ныҡ баҫып торған милләт тәрбиәләп булыр ине.

Йә иһә данлы тарихыбыҙҙы ус төбөнә һалып күрһәтерлек музейҙар асҡанда, нисек булыр? Музей, тигәндән, мин үҙебеҙҙең Әй буйынан сығып китеп, Өфөгә килгәндән бирле бары тик төлкө бүрек һәм еләндән генә торған униформаға әйләндерелгән милли кейемебеҙҙе күреп, һәләк аптырай торғайным. Йәйге селләлә бүрек кейеп йөрөргә башҡорт иҫәр булмаған бит. Ҡайҙа уның түбәтәйе, яулығы, кәпәсе – кемдәр бүлешеп алып бөткән? Бына музейҙа беҙҙең Әй буйы ҡарсыҡтарының яулыҡтары, буайҙарҙың түбәтәйҙәре, еңгәләр ҡайыған ҡулъяулыҡтар менән сәскәләп сигелгән алъяпҡыстар һәм селтәрле мендәр тышлыҡтары, сигелгән ашъяулыҡтар, сатраш тамғаһы ҡуйылған таҫтамалдар һәм башҡа көнкүреш әйберҙәре урын алһын ине. Юғиһә, мин үрҙә һанап үткән милли биҙәктәр әлегә тиклем үҙенең тамырҙарын, ерлеген таба алмай интеккән бөтөнләй икенсе бер милләт символына әйләнеп бара.

Унан һуң, һәр ауылдың арҙаҡлы кешеләре була. Музейҙа уларға ла мөйөш бүлгәндә, шәп булыр ине.

– Бар инде ул, бар, үҙебеҙ генә онотабыҙ, – ти Рәйфә апай. – Әле бына Тайфур Сәғитовтың «Аманат» тигән китабын алып уҡып ебәргәйнек, унда үҙебеҙҙең ауыл буайы – Йәғәфәр Ғәлин тураһында көндәлек яҙылған икән. Ташҡа баҫылып сыҡмаһа – ишеткән дә, күргән дә

юҡ. Ошо буай һуғышҡа китеп һәләк булған, балалары ҡалған, ейәнсәрҙәре мәктәптә уҡытып йөрөй. Ҡарттайҙарының кем булғанын улар ҙа белмәй. Йәғәфәр Ғәлин буай һуғышҡа тиклем район советы рәйесе һәм уҡытыусы булып эшләгән. Балалары бик һәләтле булған. Әтеләре – һуғышта, инәләре ауырып үлеп, етем ҡалғас, уҡый алмағандар. Берәү генәһе уҡып сығып, хәҙер ҙур ғалим, Мәскәүҙә космос өлкәһендә тикшеренеү эштәре алып бара. Менә шул турала ла әҙ беләбеҙ.

Бәндәне юғары күтәрерҙәй, кешене кеше итерҙәй, юғары әхлаҡлы, көслө рухлы шәхес тәрбиәләрҙәй йондоҙҙарҙы һәр төбәктә барларлыҡ. Милли байлыҡ, мәҙәниәт, әҙәбиәт, арҙаҡлы шәхестәр – шуларҙың сатҡылары, әгәр уларҙы күрә белгәндә, күтәрә белгәндә, йән өрҙөргәндә, ялҡын сәсрәтеп, балҡып китәр ине бит. Шулай эшләгәндә, ашап-эсеүҙе генә ҡайғыртып йәшәүселәр йән аҫрарға ғына түгел, ә йәшәргә, ҡанатланып-талпынып йәшәргә ынтылыр ине. Кешенең Аллаһы булыр ине. Ул бит тамырҙарҙан килә, әтей-ҡарттайҙар әрүахтарынан күсә. Әйткәндәй, күпме ауылдарҙа ғибәҙәтханалар юҡ. Ауылға мәсет, ә кешеләр күңеленә Алла әйләнеп ҡайтһа, клуб менән мәктәп рухты һәм ғилемде күтәрһә, ә асыласаҡ музей йөҙөбөҙҙө асһа, әле ҡырҡ йоҙаҡҡа бикле күңелебеҙ ҙә асылмаҫ инеме икән? Бушҡа кәйеф-сафа ҡороуҙан һәм эсеүҙән арынып, күңел асыу менән мәжлес ҡороуҙың һәм ҡунаҡ булышыуҙың ысын асылына ҡайтһаҡ икән беҙ...

## «СҮП УТАУСЫЛАР» ТУРАҺЫНДА

Ә хәҙер, көндәлек мәшәҡәттәребеҙҙе бер аҙ ситкә ҡуйып тороп, яңынан донъяуи мәсьәләләргә сумайыҡ.

1996 йылдың 12 сентябрендә Рәсәй Думаһы депутаты Владимир Жириновский журналистар алдында сығыш яһап, былай тигәйне: «Эта война велась для того, чтобы, наконец, проснулись у народа национальные настроения, чтобы у молодого поколения навсегда появилось бы отвращение к южанам». (*«Правда Жириновского», № 4, 1997*).

Мәскәүҙән тағы бер «аҡыллы баш» Андрей Савельевтың әйткәндәре лә демократиянан бик алыҫ: «... Если откажемся от занесенного к нам гнилыми западными ветрами «гуманизма», вернемся к традициям государственности Российской Империи, увидим их современность и справедливость, тогда и будут у нас основания смотреть на сепаратистов и западников с презрением, а не с учтивым подобострастием. И пропалывать, пропалывать сорняки». (*«Молодежная газета», 13 апрель, 2000*).

Был авторҙың да бөтөн өҙгөләнеүҙәре чечендарҙы ҡырағайлыҡта, бандитлыҡта, терроризмда ғәйепләүҙән һәм, Чечняла урыҫ халҡына геноцид үткәрелә, тип ҡоро илаҡлауҙан ары китмәй. Әйтерһең дә Рәсәй үҙе Чечняға ғәскәр индермәгән дә, урындағы халыҡты ла, армияны ла үлемгә дусар итмәгән. Әйтерһең дә пуля милләтте һайлап тора. Атыу ҡоралының үлтереү көсө бөгөн шундай ҡеүәтле (ә артиллерия менән авиацияны әйтеп тә тораһы түгел), хатта иң еңел ракета ла ауыр һуғыш ҡоралына әйләнә. Бөтөн донъяның хәрби көстәре бөгөн ҡалаларға һөжүм итмәй, ә уларҙы ер йөҙөнән юҡ итә. Һәм беҙ шул хәтлем ҡорал менән үҙ халҡыбыҙға ҡаршы һуғыш асҡанбыҙ икән, ниңә һуң шул халыҡтың да үҙ-үҙен яҡлап ҡулына ҡорал алып, беҙгә төбәп атырға мәжбүр булыуына ғәжәпләнәбеҙ икән? Әгәр Мәскәү Чечняла халыҡ-ара терроризмға ҡаршы һуғыша икән, ниңә һуң көнө-төнө тотош чечен халҡына ғәйеп өйөлә, «бойондороҡһоҙ Ичкерия» тигән һүҙҙәр бер туҡтауһыҙ мыҫҡыллап телгә алына? Бандиттар һәм террорсылар менән көрәшәләр икән, ниңә һуң шул бандиттарға 1994 йылғы беренсе чечен һуғышынан алып бер ҙә ел-ямғыр теймәй? Бөгөнгә тиклем улар тере һәм имен-аман. Ә тыныс халыҡ һәм армия меңәрләп ҡырыла...

Бер генә миҫал. 2000 йылдың февраль айы. Катыр-Юрта ауылы аша Грозныйҙан боевиктар сигенә. Рәсәй хәрби комендатураһы тотошлайы менән әллә ҡасып бөткән, әллә йәшеренгән. Бер генә атыу тауышы ла яңғырамай. Боевиктарҙы, теләгәндә, Катыр-Юртаға ингән мәлдәрендә авиация йәки артиллерия утына тотоп була.

Рәсәй командованиеһы боевиктарҙың артабан Гехи-Чу ауылына юл тотҡанын да бик еңел асыҡлай ала. Катыр-Юртанан Гехи-Чуға тиклем – ике саҡрым асыҡ урын. Күпме теләйһең, шул тиклем бомбаға тот!

Әммә 6 февралдән 7-һенә ҡаршы төндә «бандиттар» ауылдан имен-аман сығып ҡотола. Тик шунан һуң ғына бер ниндәй иҫкәртеүһеҙ һәм тыныс халыҡҡа ауылдан сығып китеү мөмкинлеген бирмәйенсә, федераль авиация һәм артиллерия күҙ асҡыһыҙ ут аса. Чкалов исемендәге үҙәк урам тулыһынса емертелә, бер генә йорт та имен ҡалмай. Тыныс халыҡ араһынан 167 кеше юҡ ителә... (*«Новая газета», 21–27 февраль, 2000*).

Шул уҡ «МГ» яҙғанса, унда йәшәлгән һәр көн – батырлыҡмы икән ул?

Ә бына РФ Генераль прокуратураһының халыҡ-ара бүлек етәксеһе, юстиция буйынса юғары класлы дәүләт советнигы Исса Костоев Чечняла һуғышыусыларҙы патриоттар түгел, ә оккупанттар тип атай: «Рәсәй закондарының береһендә лә, шул иҫәптән «Оборона тураһындағы закон»да ла Рәсәй субъекттарының береһенә бомбалы ракеталар яуҙырыу өсөн хәрби көстәрҙе файҙаланыу, территорияһын баҫып алыу һәм законлы һайланған власты ҡолатыу хаҡында әйтелмәгән. Тимәк, Чечняның РФ субъекты түгеллеген Мәскәү үҙе лә таный... Яңы Конституцияла Федератив килешеүгә ҡул ҡуйған һәм Рәсәй Конституцияһы проекты өсөн тауыш биргән бөтә субъекттар Федерацияныҡы тип теркәлгән. Белебеүеҙсә, Чечня Рәсәй Конституцияһы өсөн тауыш бирмәне, Федератив килешеүгә ҡул ҡуйманы... Шулай булғас, Рәсәй бөгөн күрше дәүләт менән иғлан ителмәгән һуғыш алып бара. Федераль командованиеның Чечняла хәрби хәрәкәттәр барышы тураһындағы хәбәрҙәренә ҡолаҡ һалығыҙ: «беҙҙең ғәскәрҙәр һөжүмде дауам итә», «дошман ҙур юғалтыуҙар кисерҙе...» Иғтибар иттегеҙме: «беҙҙекләр – һеҙҙекеләр» тип бер үк илдең граждандарын атайҙармы? Был сит дәүләт менән алып барылған һуғыш терминологияһы». (*«Новая газета», № 40, 1999*).

ОБСЕ күҙәтеүҙәре аҫтында уҙғарылған һәм донъя берләшмәһе тарафынан демократияға ярашлы һәм законлы тип танылған һайлауҙарҙа Ичкерия Республикаһының президенты итеп һайланған Аслан Масхадовтың фекере: «Чечня һәм Рәсәй президенттары ҡул ҡуйған договор тупаҫ рәүештә бер яҡлы тәртиптә боҙолдо. Шундай шарттарҙа мин һуғышты ҡабул итергә һәм республиканы хәрби хәлгә күсерергә мәжбүр булдым... Чечня суверенитетын терактtар менән бәйләргә ярамай. Чечендар бер ҡасан да террор акцияларын бойондороҡһоҙлоҡ алыу ысулы итеп һайланманы... Ә Чечняла тыныслыҡ – был, әйткәндәй, тотош Төньяҡ Кавказ регионында тотороҡлолоҡ гарантияһы. Бойондороҡһоҙ Чечен дәүләте йөҙөндә Рәсәй үҙенә ышаныслы партнер булдырыр ине» (*«Новая газета», № 38, 1999*).

Елена Боннэрҙың 1999 йылдың 4 ноябрендә АҠШ сенатының сит ил эштәре буйынса комитетындағы сығышынан: «Беренсе чечен һуғышы һайлауҙар алдынан Ельцинды икенсе срокка ҡалдырыу өсөн кәрәк ине. Икенсе чечен һуғышы иһә әлеге президент асыҡтан-асыҡ үҙенең вариҫы итеп тәғәйенләнгән премьерҙың рейтингын күтәреү өсөн кәрәк. Афғанстанда һәм беренсе чечен һуғышында еңелгән генералитет иһә реванш алыу өмөтө менән яна. Кремлдәге, хөкүмәттәге һәм Думалағы сәйәсмәндәргә һуғыш, патриотик лозунгыларға йәшеренеп, йәмәғәтселек иғтибарын коррупцияға һәм финанс махинацияларына бәйле янъялдарҙан дошманға – был осраҡта теләһә ниндәй чеченға, күсереү өсөн кәрәк*.

---

* Францияның «L’Express» журналындағы «аҙған һәм ришүәтселеккә күмелгән Ельцин батша» тураһындағы мәҡәләлә түбәндәге мәғлүмәттәр килтерелгән: «... 1998 йылдың октябренән 1999 йылдың мартына тиклем 4,2 млрд. доллар аҡса күсерелгән (Нью-Йорк банкы аша), был 10000 банк операцияһын тәшкил итә. Был яҡынса иҫәпләүҙәр генә. Дәүләт сығанаҡтары икенсе һанды атай: 9 млрд. Ысынында иһә һандар 10–15 миллиардҡа барып етеүе ихтимал... Шундай көсәргәнешле мәлдә Борис Ельцин үлгәнгә һалыша. Уның урынында теләһә ниндәй башҡа дәүләт етәксеһе телевидение аша үҙ халҡына мөрәжәғәт итер ине...»

Хельсинкилағы расизмға ҡаршы Вотч ойошмаһының күрһәтмәләренән: «5 февралдә йөҙҙән ашыу Рәсәй һалдаты Грозный янындағы Алды ҡасабаһына бәреп инеп, тыныс халыҡты йорттарында һәм урамдарҙа тотошлай ҡырырға тотона. Күп осраҡтарҙа һалдаттар йорт талаған һәм яндырған; түләһәгеҙ, үлтермәйбеҙ, тип халыҡтан аҡса таптырған... Карателдәр киткәндән һуң ҡасабала 82 мәйет ятып ҡалған...»

*«Новая газета», № 11, 2000*: «Февраль башында ғына Грозныйҙан тыныс халыҡ араһынан 500 мәйет һәм яндырылған 30 кешенең һөйәктәре сығарылды. Ғаиләләре менән атылғандар һәм бомбаларҙан һәләк булғандар әлегә тиклем ерләнмәй подвалдарҙа сереп ята».

Һуғыш Аллаһы бер кемде лә аямай. 1999 йылдың 10 сентябрендә Рәсәй эске эштәр министрлығының махсус тәғәйенләнештәге эске ғәскәрҙәренең Армавир отряды Рәсәй армияһы тарафынан юҡ ителде. Шунда 34 яугир һәләк булды. Яралы подполковник Юрий Яшиндың аңын юғалтҡансы: «Был хыянат... Был хыянат... Был хыянат...» – тип ҡабатлауына бер кем дә ышанманы. (*«Аргументы и факты», № 38, 1999*).

Рәсәй Федерацияһындағы милли территорияларҙы суверенитеттан, йәғни төп халыҡтарҙан «таҙартыу» һис тә батырлыҡ түгел, ә дөйөм йортто һәләкәткә илтеүсе фажиғәле сәйәсәт. Бынан алты йыл элек танылған ғалим, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Никита Моисеев ғәҙел булмаған чечен һуғышында ҡулдары ҡанға мансылған хөкүмәттән Еңеүҙең 50 йыллығы айҡанлы бирелгән юбилей миҙалынан баш тартты. «1945 йылғы армия ҡатын-ҡыҙҙарҙы һәм балаларҙы үлтермәне», – тине ул.

Кавказда һуғышыусы офицерҙар араһында Афғанстан, Днестр буйы, Абхазия, Тажикстан, Төньяҡ һәм Көньяҡ Осетияла «тәжрибә» туплаған башкиҫәрҙәр күп. Ә беҙ шуларҙан һаман да геройҙар яһауҙан туҡтамайбыҙ. Афғанстанда «батырҙарса» һәләк булғандар тураһында Башҡортостанда ла китаптар сыҡты, шағирҙар «ҡаһармандарға» шиғырҙарын арнаны. Киләсәк быуындар алдында

оят, ә улар, һис шикһеҙ, беҙҙән яҡшыраҡ, аҡыллыраҡ һәм кешелеклерәк буласаҡ.

Юҡ, Михаил Савельев хаҡлы түгел, донъяны расизм түгел, ә гуманизм ҡотҡарасаҡ. Мин быға инанғанмын. Йолҡоп алып ташларға, йәғни утарға (пропалывать) чечендар ҙа, беҙ ҙә, бүтәндәр ҙә сүп үләне түгел, ә шул ерҙә миллион йылдар йәшәгән, милләт булып ойошҡан төп халыҡтар.

Рәсәйҙә «газон ҡырҡыусылар» былай ҙа саманан тыш күбәйҙе. Бигерәк тә 1994–1997 йылдарҙағы беренсе чечен һуғышынан алып илдә енәйәтселек ныҡ артты. 1999 йылдың йәйендә Дәүләт Думаһы бәләкәй срокка иркенән мәхрүм ителгән 20 мең енәйәтсегә амнистия иғлан итһә, 10 айҙан Рәсәй тотҡондары армияһы тағы 25 мең кешегә артҡан. Ә лагерҙарҙа һәм төрмәләрҙә хәлдәр ҡот осмалы. Чечня, Ингушетия һәм Дағстан лагерҙарындағы, Чечнялағы Чернокозово концлагерындағы һымаҡ, тип әйтергә була. Рәсәйҙә халыҡтың дөйөм һаны буйынса 100 мең кешегә 750 енәйәтсе тура килә – был донъяла иң юғары күрһәткес. Элек СССР-ҙағы ун биш республикала күпме кеше иркенән мәхрүм ителгән булһа, хәҙер Рәсәйҙә генә шул тиклем тотҡон ултыра.

Армия ҡатнашлығындағы «терроорға ҡаршы операциялар», ҡағиҙә булараҡ, хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең үҙҙәренең енәйәт эшләүенә килтерә. 1999 йылдың авгусынан алып Төньяҡ Кавказда һуғыш хәрәкәттәре яңыртылғандан бирле Рәсәйҙең баш хәрби прокуратураһы 500-гә яҡын енәйәт эшен асҡан. Шуларҙың 65-ен генә Рәсәй һалдаттары һәм офицерҙары Дағстанда эшләгән, ә ҡалғаны Чечняға тура килә. Шулай итеп, «афған синдромы»на алмашҡа «чечен синдромы» килгән. Ул тағы күпме ир-егеттәрҙе аҡылынан яҙҙырыр икән?

## ҺУҒЫШ АФӘТТӘРЕ

Рәсәй халҡының өстән бер өлөшө – 51 млн. кеше – фәҡирлек сигенән түбән йәшәй. Эшһеҙлек, фәхишәлек, эскелек, наркомания «сәскә ата».

Әйтергә кәрәк, наркомания күптән инде Рәсәйҙең милли проблемаһына әйләнде. Наркотиктар ҡулланыуҙа беҙҙең ил донъяла алдынғылар сафында. Токсикомандар ғәйәт күбәйҙе, наркотик суррогаттарын эшләп таратыу киңәйҙе. «Момент» елемен еҫкәп үлгән 12–13 йәшлек балаларҙың иҫәбе-хисабы юҡ хәҙер. Йәштәрҙе аҙҙырыу өсөн бөтөн шарттар бар – аҙым һайын дискотека, бар, аҙым һайын араҡы, тәмәке. Алтындай йәштәребеҙ, «тәгәрмәс» таблеткаларын йотоп, төнө буйы дискотекаларҙа һикерешә, ҡайҙа баҫҡанын белмәй шашына. Мөйөш һайын – марихуана һәм кокаин. «Чернушка», героин суррогатын ҡаҙап, күмәкләп спид йоҡтороуҙар... Бындайҙы әүәл иң артта ҡалған Африка илдәрендә генә күреп булған.

Унан һуң, юғары власть органдарында коррупция, енәйәтселек, һуғышсанлыҡ саманан ашты. Хатта Дәүләт Думаһының беренсе һәм икенсе саҡырылыш депутаттарының ҡайһыһы криминал донъяла «авторитет» икәнлеге бар донъяға мәғлүм. Һәм «һуғыш аллаһы» ЛДПР был йәһәттән берҙән-бер структура түгел.

Хәтерегеҙҙә булһа, илдең вице-президенты Александр Руцкой 1993 йылда уҡ: «Мин илебеҙ байлыҡтарын талауҙың быуаса күрелмәгән факттарын асыҡланым, уларҙы урлауҙа дәүләт аппаратының юғары әһелдәренең бөтәһе лә ҡатнаша», – тип, халыҡты шаҡ ҡатырғайны. Руцкой Юғары Совет ултырышында Рәсәй хөкүмәтенең элекке һәм хәҙерге ағзаларының эш урынындағы енәйәттәре тураһында телмәр тота, бигерәк тә вице-премьер Владимир Шумейкоға ныҡ эләктерә. Борис Ельцин коррупция менән көрәш буйынса ведомство-ара комиссия ойошторорға мәжбүр була. Ул комиссия тиҙҙән вице-президент алдына компромат ҡуя: Швейцария банкындағы 3 млн доллар аҡсаға уның ҡыҫылышы ла бар икән. Борис Ельцин Руцкойҙы ла, Шумейконы ла, тағы бер нисә кеше менән бергә, вазифаларынан бушата.

Шул ваҡыттан алып Рәсәй президентының вице-президенты башҡа булғаны юҡ.

1994 йыл. Төрлө этрәгәләмдәргә, экстрасенстарға, бигерәк тә «изге батшаға» мөкиббән китеп ышаныусы Рәсәй халҡын иң ныҡ алдаған һәм шаңҡытҡан МММ пирамидаһы 49 млрд һум бурысҡа бата. Акциялар һатып алыу туҡтатыла, улар 125 тапҡырға осһоҙая. Мәскәүҙәге Варшава шоссеһындағы МММ офисына ғәйәт ҙур сират теҙелә – вкладчиктар аҡсаларын ҡайтарып биреүҙе талап итә. Ҡулға алынған МММ башлығы Сергей Мавродиҙы Дәүләт Думаһына депутат итеп һайлайҙар. Ул шулай «ҡағылғыһыҙ кастаға» әүерелә һәм фирма етәксеһе вазифыһынан бушатыла...

1995 йыл. Рәсәй Дәүләт Думаһының яҙғы сессияһы бара. Депутат Вячеслав Марычев сығыш яһай: «Минең өсөн Санкт-Петербургтың бөтә енәйәтселәре, эскеселәре, бомждары тауыш бирәсәк, мин – улар менән, мин – улар араһында». (Федеральное собрание – парламент Российской Федерации. Государственная Дума. Стенограмма заседаний. Весенняя сессия. 1995. Том 20. Издание Государственной Думы).

1996 йылдың 30 апрелендә Америка конгресында «Ойошҡан Рәсәй енәйәтселеге янаған хәүеф» тураһында 70 битлек халыҡ-ара тикшереү документтары ҡарала. Унда ҡатнашҡан халыҡ-ара эксперттар ойошҡан Рәсәй енәйәтселегенең Рәсәй дәүләтселегенең айырылғыһыҙ өлөшө икәнен дәлилләй. Рәсәй криминаль синдикаттары күптән инде үҙ иленең сиктәренән үтеп сығып, донъяның 50 илендә эшмәкәрлек йәйелдергән һәм Америка мәнфәғәттәренә ҡурҡыныс менән янай, тип билдәләнеп үтелә АҠШ конгресында. Унда Рәсәй дәүләте туранан-тура бандиттарҙыҡы, йәки криминаль дәүләт тип нарыҡлана. ЦРУ башлығы Джон Дейч былай тип белдерә: «Дәүләт думаһы ағзаларының 30% ойошҡан енәйәтселек бандаларының ағзалары булып тора. Премьер-министр Виктор Черномырдиндың шәхси байлығы, Израиль «Моссад»ы баһалауынса, дүрт йыл элек 28 млн. тәшкил итһә, хәҙер 5 млрд. долларға етә. Ул нефть менән газға ҡағылышлы барлыҡ килешеүҙәрҙән процентлата килем ала...» («Известия», 5 апрель, 1997). Дөрөҫ, В. Черномыр-

дин һуңынан быларҙы инҡар итте. Әммә унан ғына аҡсаһы кәмемәне.

1997 йылдың көҙө. Нәшер ителмәгән хеҙмәттәре өсөн аванс алыуҙары бер нисә Рәсәй министрының сәйәси карьераһын селпәрәмә килтерә. Уларҙы Яҙыусылар союзы тип нарыҡлайҙар. Иң тәүҙә гонорар рәүешендә ришүәт алыуҙа дәүләт милеге комитеты рәйесе Альфред Кох ғәйепләнә. Артабан икенсе бер шундай уҡ сыҡмаған китап – «Рәсәйҙе приватизациялау тарихы» өсөн тотош авторҙар коллективына түләүҙәре асыҡлана. Улар араһында йәнә Альфред Кох, беренсе вице-премьер Анатолий Чубайс, вице-премьер Максим Бойко, федераль служба башлығы Федор Мостовой һәм президенттың администрация башлығының беренсе урынбаҫары Александр Казаковтар була. Һәр береһе 90000 доллар ришүәт алған. Чубайс, тәүҙә аҡланып маташһа ла, «гонорарҙың», ысынлап та, саманан ашыуын таный. Ельцин «Яҙыусылар союзы»н отставкаға ебәрә. Чубайстан башҡаларын. Ул финанс министры вазифаһынан бушатыла, әммә беренсе вице-премьер итеп ҡалдырыла.

1998 йыл. Нижний Новгородта енәйәт донъяһында Прыщ ҡушаматы менән киң танылған бизнесмен Андрей Клементьев, 13000 артыҡ тауыш йыйып, губернатор һайлауҙарында еңеп сыға. Өлкә һайлау комитеты һайлауҙарҙы ғәмәлгә яраҡһыҙ тип иғлан итә. Суд Клементьевты дәүләт кредитын урлауҙа ғәйепле тип таба һәм алты йылға төрмәгә ултырта. Ә ҡала урамдарында енәйәтсе аҡсаларына һатылған ҙур ғына кешеләр төркөмө бер нисә көн буйы тауыш күтәреп, быға ризаһыҙлыҡ белдереп йөрөй...

Криминалитет, шулай итеп, закондар сығарыу һәм башҡарма власть өлкәһенә үтеп ингән. Тимәк, закон да, аҡса ла улар ҡулында. Шуға ла Борис Ельцин менән Аслан Масхадов ҡул ҡуйған Хасавюрт килешеүҙәрен һәм тыныслыҡ договорын ғәмәлгә ашырырға һәм Чечняны емереклектәрҙән тергеҙергә ашыҡманылар. Шуға тип күсерелгән аҡсалар Доку Завгаев хөкүмәтенең хәҙер ҙә Чечняла власта ҡалған әһелдәре кеҫәһенә инеп юғала

торҙо. Ә инде Халыҡ-ара валюта фонды күсергән долларҙарҙың демократик структуралар булдырыуға түгел, ә оборона доктринаһына тотонолоуын аңлап ҡалған АҠШ тауыш күтәргәс һәм дәүләт секретары Мадлен Олбрайт кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәр тулы доклад менән сығыш яһағас, енәйәт эштәрен икенсе чечен һуғышында йәшерергә ашыҡтылар.

Шулай итеп, дәүләт ҡаҙнаһында тыныс тормошто яйға һалырға аҡса булмаһа ла һуғышҡа табылды. 2000 йылға бюджетта һуғыш сығымдары 27–30 млрд. һумға арттырылды, ә ВПК өсөн хәрби заказ күбәйтелде, һуғышыусы һалдаттарға премьер (хәҙер ул президент) 1000 доллар аҡса вәғәҙә итте. Бындай эмиссия ярлы халыҡты тамам фәҡирләндерҙе, түләп бөткөһөҙ һалымдар кесе һәм урта бизнесты бөлдөрҙө.

Яңы указдарҙа һәм хоҡуҡи акттарҙа ла һуғыш алға ҡуйыла. Конституция суды ҡабул иткән ҡарар буйынса дәүләт ҡарамағында булмаған юғары уҡыу йорттары талиптарын уҡыуҙарын тамамламаҫ борон армияға саҡырырға мөмкин. Президент Борис Ельцин хәрәкәт итеүсе ғәскәрҙәргә алты ай хеҙмәт иткән йәш һалдаттарҙы ебәрергә Указ биргәйне, теләгеңә ҡарап һуғышта ҡатнашыу хоҡуғын бөтөргәйне. Шунан алып һуғышта ҡатнашыу мәжбүри бурысҡа әйләнде. Ә бының Рәсәй Конституцияһына ҡаршы килеүе бер кемде лә борсоманы. Төп Законда ҡаралған альтернативалы хеҙмәткә хоҡуҡ тулыһынса инҡар ителде*.

Рәсәйҙә хатта һауала һуғыш еҫтәре аңҡый. Телевидение бер туҡтауһыҙ Владимир Путинды күрһәтә: бына ул һауала пилот урынында, бына һыу аҫты кәмәһендә,

---

* Тотош Рәсәйҙә берҙән-бер кеше, Калуга өлкәһенең Обнинск ҡалаһынан йәш математик, милитаризацияға ҡаршы радикаль ассоциация ағзаһы Дмитрий Неверовский ғына «һуғыш машинаһын» судта еңеп сыҡты – тик бының өсөн уға бер йылға яҡын төрмәлә ултырырға тура килде. «Минең һуғышта ҡатнашмаҫҡа Конституцияла ҡаралған хоҡуғым бар һәм мине ирекһеҙләргә бер кемдең хаҡы юҡ. Әгәр Чечняға барһам, барыбер тыныс халыҡ яғына күсер инем», – тип белдерҙе Дмитрий судта (НТВ, 24 октябрь, «Суд бара» программаһы).

йәки Чечняла һалдаттарҙы яңы һуғыштарға рухландыра, бына ул шлем кейеп, парашют аҫып алған һәм СУ-27 истребителендә Чечняға оса, йәки каратэ менән шөғөлләнә... Бары тик Баренц диңгеҙендә хәрби-диңгеҙ уҡыу тәжрибәләре ваҡытында илдең иң яҡшы судноһы – КА-141 «Курск» һыу аҫты атом кәмәһе фажиғәле һәләк булғандан һуң бар донъя тетрәнеп, ярҙам ҡулы һуҙғанда ла ҡотҡарыу эштәрен башларға теләмәгән һәм Сочила ял итеүен дауам иткән президентыбыҙҙың һәм баш командующийыбыҙҙың абруйы һыпырып алғандай юҡҡа сыҡты. Шулай ҙа Путин үҙе булып – президент булып ҡалды, ә бына беҙ, меңәрләгән чечендар ауыл-ҡалалары менән ер йөҙөнән юҡ ителгәндә «һыһ!» та итмәгән кешеләр, үкерешеп илаштыҡ... Йортһоҙ, илһеҙ, ерһеҙ, телһеҙ, динһеҙ ҡалғандарҙы кем йәлләп илар икән?..

Тик Кремль үлемгә лә, күҙ йәштәренә лә битараф шул. Тотош халыҡтар ҡырылышып ятҡанда ла ул шулай алтын көмбәҙҙәрен ҡояшҡа уйнатып, фейерверктар сөйөп, еңеү салюты залптарына күмелеп йәшәүен дауам итәсәк. Ә беҙҙең ғүмерҙәр, беҙҙең суверенитет, беҙҙең киләсәк тимер мундир аҫтында – атом боеголовкалары менән көпләнгән матрешка эсендә бикләп тотоласаҡ. Шартлап, күккә осорға теләмәһәк, тын да алмай, тимер ҡурсаҡ эсенән башыбыҙҙы сығарырға ла ҡыймай йәшәйәсәкбеҙ.

Шулай булды – шулай буласаҡ. Илде милитаризациялауҙа тос өлөш индергән Ельцин менән Путин «эшмәкәрлеген» генә күҙаллап ҡарайыҡ әле.

Өс йылда биш тапҡыр хөкүмәтте алмаштырған, НАТО-ға ядро ҡоралын беренсе булып ҡулланасағы менән янаған, Чечняла ике тапҡыр һуғыш тоҡандырып, үҙенең ғаиләһенең именлеген тәьмин итәсәк кешене тәхеттә вариҫы итеп тәғәйенләгән Борис Ельцин дәүләт хәүефһеҙлеген тәьмин иттеме, граждандарын ҡайғырттымы?

Документтарға мөржәғәт итәйек.

1996 йылдың 16 майында Ельцин, танк броняһына баҫып, 2000 йылдың яҙына профессиональ армия буласаҡ,

тип, 722-се указға ҡул ҡуйғайны. Хәрбиҙәр көләп рәхәтләнгәйне.

1999 йылдың сентябрендә ул бер йыл хеҙмәт иткәндәрҙе генә һәм үҙ теләге менән генә һуғышҡа алырға, тигән 1347-се указ сығарҙы. Ә 15 сентябрҙә алты ай хеҙмәт иткән һәр һалдатты, теләгенә ҡарамайынса, һуғышҡа ебәрергә, тигән 1366-сы указ иғлан итте.

(Шундай сәйәсәтте нисек инде килделе-киттеле тимәҫһең?! Азатлыҡ бирәләр ҙә – тартып алалар, Федератив килешеү төҙөйҙәр ҙә – империя иғлан итәләр, һалдатҡа алалар ҙа – парламентҡа йә үҙ халҡыңа атырға ҡушалар...)

Тәүҙә тотош Рәсәйҙә шундай күренеш пәйҙә булды: Мәскәү, Ленинград кеүек ҡалаларға бер генә табут та ҡайтманы, ә төпкөлдәге региондарға күпләп ҡайтарылды. Ата-әсәләр ҡапыл хат яҙыуҙан туҡтаған һәм «хәбәрһеҙ юғалған» уландарын эҙләп, арманһыҙ булды. Күп әсәләр ғәзиздәрен Чечняға барып таптылар. Һуғышҡа оҙатыу бик ашығыс, ығы-зығылы һәм тәрән сер һаҡлап алып барылды.

Унан һуң, һәр беребеҙгә мәғлүм булыуынса, Рәсәй армияһы әүәлгесә эшсе-крәҫтиән армияһы булып ҡалды. Сөнки хәйерсе ябай халыҡтың, ришүәт биреп, һуғыштан ҡотолоп ҡалыу әмәле юҡ*.

... Мундирлы түрәләргә хәҙер даими армияға саҡырылғандар ғына етмәй – балалар кәрәк. 1999 йылдың 31 декабрендә Путин, әле премьер-министр сағында, граждандарҙы хәрби хеҙмәткә әҙерләү тураһындағы 1441-се ҡарарға ҡул ҡуйғайны. СССР-ҙағы һымаҡ, мәктәптәрҙә хәрби әҙерлек дәрестәре мотлаҡ уҡытыла. Улар шулай уҡ училище, колледж, техникумдарҙа, предприятиеларҙа ла индерелә. Афғанстандан алып Чечняға тиклемге партизан һуғыштарында оҫтарған, шымарған запастағы офицерҙар

---

* 2000 йылдың ноябрь айы мәғлүмәттәре буйынса, Мәскәүҙә йәшәү кимәле, тотош илдеке менән сағыштырғанда, дүрт тапҡырға юғарыраҡ. Һәм Рәсәй Федерацияһындағы иң бай кешеләрҙең 80% Мәскәүҙә йәшәй. Баш ҡалаға бына ни өсөн табуттар ҡайтмай.

уҡытасаҡ балаларҙы. Программаларҙы генералдар төҙөйәсәк. (Ә генералдарҙың иҫәбе буйынса Рәсәй СССР-ҙы уҙҙы!) «Ул-был килеп сыҡмаһын өсөн» малайҙар һәм ҡыҙҙар айырым уҡытыласаҡ. Хәрби әҙерлектең патриотик йоғонтоһон көсәйтеү өсөн Сиркәү ҡатнашлығы ла рөхсәт ителә.

Рәсәй хөкүмәте шулай уҡ тәрбиәләнеүселәрҙе хәрби частарға биреү тураһында ла ҡарар ҡабул итте. 14–16 йәштән ата-әсәһеҙ ҡалған етем малайҙар армия частарына һәм тимер юлы ғәскәрҙәренә, Тышҡы разведка хеҙмәтенә, ФСБ һәм ФАПСИ органдарына ебәрелә ала.

Унан һуң, оборона министрлығы ҡарамағындағы наградлау фондында хәҙер атыу ҡоралы һәм һалҡын ҡорал да бар. Улар менән хәрби хеҙмәткәрҙәр, хәрби көстәрҙең граждандар персоналы, шулай уҡ армияға булышлыҡ итеүсе граждандар бүләкләнәсәк. Был тураларғы Указға президент вазифаһын башҡарыусы Путин 2000 йылдың 25 мартында, һайлауҙарға бер көн ҡалғас, ҡул ҡуйғайны.

... Һуғыш беҙҙең мейебеҙгә, ҡаныбыҙға, рухыбыҙға үтеп инде һәм йәнебеҙҙе, тәнебеҙҙе тарҡатты. СССР бөтөрөлөп, уның төрлө төбәктәрендә милләт-ара бәрелештәр ҡабынғандан һуң ун йыл үткәс тә беҙҙең Рәсәйҙә идеология үҙгәрмәне, халыҡтың хәле лә яҡшырманы.

... 1991 йылдың иң йәмле яҙ көндәре. Ер ҡарҙан әрселеп, ағастар бөрөгә тулышып, һутлы сағыу япраҡтары шартлап яҙылған мәл. Ҡояш иркәләүенән, йомшаҡ ел ҡағылыуынан иҫереп йөрөгән саҡ. Иртән йөрәкһенеп эшкә киләм, кисен талпынып өйгә ҡайтам. Апрель баштарында булды был хәл. Редактор мине Аксаков урамындағы 6-сы студенттар ятағына ебәрҙе – унда ниндәйҙер фажиғә булған. Гәзиттә материал әҙерләргә кәрәк. Тиҙерәк йүгерҙем шунда. Барһам... Ятаҡ янындағы асфальт өҫтө тулы ҡан. Шул һаман күҙ алдымдан китмәй, һаман тетрәндерә. 9-сы ҡаттан ташланған егеттең ғәзиз ҡаны ине ул. Ҡот осҡос үлемгә нимә этәргән уны?

Вафат булыусының дуҫтары, таныштары менән төнгә тиклем ошо хаҡта әңгәмәләшеп, ҡайғыға батып

ултырғайныҡ. Ул төн гәзиттә («Замандаш», 12 апрель, 1991 йыл) генә түгел, йөрәктә уйылып ҡалды...

**Светлана Зарипова:** – Вәсил (исеме үҙгәртеп алынды. – *Автор*) менән өс йыл элек әҙерлек факультетында бергә уҡығайныҡ. Минеңсә, ул Афғанстандан шулай төшөнкөлөккә бирелеп, тормоштан төңөлөп, маҡсатын юғалтып ҡайтҡайны. Ни өсөн тигәндә, берҙән, һуғышта ҡаты яраланып, аяғы ғәрипләнгәйне. Беҙҙең менән кисәләргә йөрөү, йәштәрсә күңел асыу мөмкинлеге лә, теләге лә булманы уның. Һәр ваҡыт үҙен башҡаларҙан кәм тойҙо, эргәһендә һөйгән ҡыҙы ла булманы. Унан һуң, ҡан ҡойғос һуғыштың, иптәштәренең һәләк булыуының шаһиты булған кешегә тыныс тормошта һәр кемдең үҙен генә ҡайғыртып йәшәүен күреүе йән өшөткөс булғандыр. Бөтә идеалдар юғалтылғанда, дөйөм яуапһыҙлыҡ осоронда, бөтә яманлыҡҡа, әшәкелеккә юл асылған һәм кеше ғүмерен сүп урынына ла күрмәгән шарттарҙа үҙенә урын таба алмай яфаланды.

**Илшат Сафиуллин:** – Армияға тиклем үтә етеҙ, хәрәкәтсән, яҡшы спортсы булғанға күрә, әле ауыртҡан аяғы арҡаһында бер нәмә лә эшләй алмауы, походтарға йөрөмәүе, ҡыҙҙар менән аралашмауы өсөн бигерәк тә ҡайғыра, хатта илай торғайны. Һуғыш уның бөтә тәнен йәрәхәтләгәйне. Күптән түгел генә баш мейеһенә ике тапҡыр приступ булды. Врачтар уға эсергә лә, тартырға ла ҡушманы. Аяғы серей башлағас, киҫергә тейештәр ине. Мәрхүм ризалыҡ бирмәне. Мәңге тартмаған кеше һуңғы ике айҙа туҡтауһыҙ тәмәке тартты, гел күңелһеҙ йөрөнө. «Уҡып бөткәс тә берәй конторала тик ултырырмын инде, йөрөп булмағас», – тип өҙәләнде. Эскән саҡта, эх, ҡаянан ташланып үлергә ине, тип ыҫҡындырған саҡтары булды. Бер егетебеҙҙән: «Алтынсы ҡаттан һикерһәң, үләһеңме икән?» – тип тә һораған. Ғөмүмән, йәшәргә ышанысы ҡалмағайны уның.

**Светлана:** – Минеңсә, кешелекле мөнәсәбәт, күңел йылылығы етешмәгән уға. Бер тапҡыр һикерәнләп баҫҡыстан төшөп бара инем, ҡаршыма килгән Вәсилде осраттым. Сырайы күңелһеҙ генә. Ә мин ҡулыма ни

өсөндөр бәләкәй генә үтә күренмәле быяла шар тотҡайным. Бер ни уйлап тормай, тоттом да шуны бүләк итем. Вәсилдең йөҙө балҡып китте. Их, кеше күңеленә әҙ генә кәрәк бит ул. Әллә күпме ваҡыт үткәс, мәрхүмде осратҡайным: «Беләһеңме, мин теге шарҙы һаман үҙемдә һаҡлайым», – тине.

**Сәриә Зарипова:** – Ошо БДПИ-ның дөйөм ятағында беҙ ҙә, БДУ-ла уҡыусылар ҙа, йәшәйбеҙ. Бында бигерәк тә «афғандар» күп. Уларҙың берҙән-бер шөғөлө – ял етте ниһә, йыйылышып эсеү һәм һуғышыу. Вәсил дә гел улар менән бергә булыша ине. Эсһә лә, уҡыуы яҡшы ине. Изгелекле, яҡшы күңелле булыуы менән айырылып торҙо. Шуға уны бөтәбеҙ ҙә ихтирам итә инек. Кемгәлер ауыр һүҙ әйтергә теле әйләнмәç, башлап һуғышырға ҡулы күтәрелмәç ине. Йомшаҡ күңелле булғанға, бүтәндәргә ҡарағанда ла нығыраҡ ғазаплана ине ул. Ниңә беҙҙең аранан гел генә тик иң яҡшылар китә?

**Светлана:** – Сөнки ошо тормошҡа ҡулайлаша алмайҙар.

**Фәрит Назаров:** – Тормоштоң хәҙер ниндәй ҡыҙығы ҡалды һуң? Нимәгә ышанып йәшәргә? Сталинды, Ленинды бөтөрҙөләр. Бер Алла ҡалды инде. Халыҡҡа бөтөнләй битараф булған, үҙ-ара власть бүлешә алмай туҡтауһыҙ низағлашҡан хөкүмәт органдарына ла өмөт бағлап булмай...

**Илшат:** – Беҙҙең, «афғандарҙың», кемгә кәрәгебеҙ ҡалды хәҙер? Бер ғәйепһеҙгә баштарын һалған, аяҡһыҙ-ҡулһыҙ ҡалған, тереләй тиреһе туналған яугирҙар оккупанттар исемен алды. Быға беҙ ғәйепleме? Магазинда «афғандар» өсөн айырым бүлектәр асҡансы, беҙгә ҡарата кешелекле мөнәсәбәттә булһындар ине. Инвалидтар өсөн ярыштар ойошторғансы, тәүҙә уларҙы протездар менән тәьмин итһендәр ине, исмаһам. Шул уҡ өсөнсө группа инвалиды булған Вәсилде, физкультураға йөрөмәгәне өсөн, күпме эҙәрлекләнеләр? Дәрескә йөрөмәгәс, деканат уның спортсылар тураһында реферат яҙып тапшырыуын талап итте. Кеше күңелен уйламай, исем өсөн генә эш итеү был. Поликлиникала, хәрби комиссариатта иçәптә торған кеше ғәриплеген тағы нисек иçбатларға тейеш?

Барып күрһәтергәме? Уйлап та тормай күңелде йәрәхәтләйҙәр. Беҙ кеше түгелме ни?

**Фәрит Ғүмәров:** – I курста, исмаһам, «Ҡыҙыл йондоҙ» берекмәһе ойошторолғайны. Үҙ-ара осраша, мәктәптәргә барып, уҡыусылар араһында сығыш яһай инек. Хәҙер инде беҙ бөтәһе өсөн дә оккупанттар, интервенттар булып ҡына ҡалдыҡ. 13 меңдән ашыу һөләктәй йәш егет ғүмерҙәренең ваҡытһыҙ өҙөлөүе, меңдәрҙең ғәрипләнеүе, тыныс тормошта ла һаман «афғандар» ҡанының ҡойолоуы өсөн йәмғиәтебеҙ яуаплы түгелме? Армияның да, кешенең дә ҡәҙере бөттө. Шуға хәрби антҡа ла бөгөн төкөрөп кенә ҡарайҙар бит.

**Хәлит Хәлиуллин:** – Хөкүмәттең беҙгә льготалар вәғәҙә итеп закон сығарыуынан ни фәтүә? Шул арҡала хәҙер беҙҙе бер ҡайҙа ла эшкә алмайҙар.

**Айҙар Низамов:** – Улар тәүҙә генә бер нимә лә һорамай, һуңынан фатирын да, башҡаһын да таптыра, тип ҡурҡалар.

**Илшат:** – Ошо ҡатмарлы заманда сәләмәт кешегә үҙен табыуы ҡыйын, ә ауырыуҙарға, инвалидтарға уғата ауыр. Кемдәрҙеңдер, түҙемлеге бөтөп, һуңғы өмөтө өҙөлә...

... Йәштәр менән хушлашып, баҫҡыс буйлап өсөнсө ҡаттан түбәнгә табан төшкәндә, тотош стенаның ҡанға буялыуын, ҡандың түбәгә тиклем сәсрәүен күреп, баштарым әйләнеп китте. Тағы ҡан. Тик былары бит Вәсилдең ҡаны түгел. Үҙҙәренә тормошта урын да, шөғөл дә таба алмаған һәм табырға ла теләмәй, эскелеккә бирелеп, дөйөм ятаҡта туҡтауһыҙ йоҙроҡ һуғыштары ойоштороусы юғалтылған быуындың ҡаны был!

Тик, егеттәр, тормош проблемаларын, бөтә ҡыйынлыҡтарҙы араҡы һәм йоҙроҡ менән хәл итеп булһа икән! Һуңынан, уҡып бөткәс, үҙегеҙҙең йәшәгән һәм эшләгән урындарығыҙҙың стеналарын да ҡанға мансып һуғышырһығыҙмы?

«Афған»дарға килгәндә, шәхси хоҡуҡтары, үҙҙәренә ҡарата кешелекле мөнәсәбәт талап итеп, икенсе ысулдар менән көрәшеүселәр ҙә аҙ түгел бит. Һәм улар күберәккә ирешә лә.

Түгелгән ҡан – бәйһеҙлектә, законһыҙлыҡта йәшәгән йәмғиәтебеҙҙең ҡан йәштәре лә улар.

* * *

«Мин контракт төҙөп армияға китергә теләйем. Ләкин быны нисек итеп эшләргә белмәйем. Быны өсөн ниндәй документтар кәрәк? Хеҙмәт итеү урынын үҙең һайлап алаһыңмы? Тажикстанға йәки башҡа «ҡыҙыу нөктәләргә» теләгең буйынса алалармы икән?

Мин был һорауҙар менән урындағы хәрби комиссариатҡа мөрәжәғәт иткәйнем, унда минең менән йүнләп һөйләшмәнеләр. «Десантниктарҙы ғына алабыҙ, әгәр ҙә парашюттан өс тапҡыр һикереүе булһа», – тинеләр. Башҡа төр ғәскәрҙәрҙә, мәҫәлән, сик буйы һәм эске эштәр министерствоһы ғәскәрҙәрендә хеҙмәт иткән егеттәр десантниктарҙан ҡайһы ере менән кәм?

Үҙем тураһында. Миңә 24 йәш. Милләтем башҡорт. 1987–1989 йылдарҙа пограничник булып хеҙмәт иттем. Шул ике йылдың 15 айын Афғанстан Республикаһында хеҙмәт итергә тура килде...»

Был хат 1994 йылдың 15 ғинуранында «Йәшлек» гәзитендә баҫылып сыҡты. Мин уға яуап итеп түбәндәге мәҡәләне яҙғайным.

## Киҫелгән баштар һәм керпек остарында ҡатып ҡалған әсе күҙ йәштәре...

Беҙ быны Башҡортостан телевидениеһы күрһәткән «Пяндж аҡҡан ерҙә» тигән фильмда күрҙек. Тағы ла ҡырҡылған аяҡтар, ҡулһыҙ кәүҙәләр... тәгәрәшеп яталар. Рәсәй хөкүмәте башҡорттарҙы Порт-Артурҙан Афғанстанға һәм Тажикстанға тиклем ниндәй һуғыштарҙа ғына файҙаланманы ла, башын һалған башҡорттоң үҙ иленә ниндәй генә эмигранттарҙы килтереп тултырманы. Шуға

ла беҙ бөгөн донъялағы иң уникаль дәүләттә – «федерация эсендәге федерацияла» – күп милләтле Башҡортостанда йәшәйбеҙ. Урал битендәге төп милләтте – башҡортто – бөтөрөп килеүҙәре генә етмәгән, шуларҙың маңҡорт улдары бөгөн икенсе бер мосолман илендәге ҡанлы фажиғәлә, ерле халыҡты – тажиктарҙы – бөтөрөүҙә ҡатнаша. Һәм уларҙы Пяндж буйына, Дангара, Бохтар, Хорогҡа көсләп, бәйләп ебәрергә лә кәрәкмәй. Үҙҙәре атлығышып торалар.

Их, егеттәр, эскелектән һәм мосолман ҡәрҙәштәрегеҙҙе үлтереп йөрөүҙән башҡа шөғөл тапмаçлыҡ милләт сигенә еткерҙеләрме ни беҙҙе!?

... «Пяндж аҡҡан ерҙә» фильмында: «Рәсәйҙең генә түгел, Башҡортостан сиге лә ошонда ята», – тигән фекер яңғыраны. Иң мөһиме, шуны онотмайыҡ: башҡорт һуғышсылары Рәсәй армияһына элек-электән еңеү өсөн генә кәрәк булған, ә һуғыш бөткәс, шундуҡ онотолған. Шуға, Рәсәй составындағы Башҡортостан сиге лә Пяндж буйында, тигән һүҙ йәшереп күрһәтелгән йоҙроҡ ҡына ул.

Юҡ, Башҡортостан егеттәренең урыны Тажикстанда түгел. Ә бына Рәсәй армияһының суверенлы тажик илендә нимә эшләүе бөтөнләй икенсе мәсьәлә. 1993 йылдың йәйендә Грузиялағы утлы нөктәләрҙә һәм сик буйы ғәскәрҙәрендә булып, шуға инанғайным – бөтә урыç офицерҙарының фекере бер: армияның Рәсәй империяһының элекке сиктәрен ташлап китергә хаҡы юҡ, юғиһә, киләсәк урыç полковниктарын һәм генералдарын бер ҡасан да ғәфү итмәйәсәк! Бына нисек бит ул... Ә «ислам фундаментализмы» иш эргәһендә ҡуш ҡына.

Афғанстан, Молдова, Грузия, Тажикстан, Ингушетия... Башҡорт егеттәренең киçелгән баштары тағы ҡайһы сит ерҙәргә тәгәрәп төшөр? Башҡортостан егеттәре тағы ҡайһы суверенлы дәүләттәрҙә сик буйҙарын юйыу эштәрендә ҡатнашып йөрөр? Ошолай дауам ителһә, Владимир Жириновскийҙың һүҙҙәре дөрөçкә сығасаҡ һәм Урта Азияла ғына түгел, ә тотош Кавказда һәм Уралда суверенлы ил-дәүләттәрҙе бүлеп торған сик буйы бағаналары ауып бөтәсәк.

Былар менән мин шуны әйтергә теләйем, юҡ, Башҡортостан сиге Пяндж аҡҡан ерҙә түгел. Һәм үҙе лә бойондороҡһоҙлоҡҡа ынтылған, үҙбилдәләнешкә, үҙ дәүләтен һәм үҙ сиктәрен нығытырға юл алған башҡорт халҡының улдары икенсе бер мосолман ҡәрҙәштәренең илен бүлгеләүҙә, тажик халҡының оло йөрәген телгеләүҙә ҡатнашмаһын ине. Юғиһә, тажик халҡының ҡәһәре минең халҡымдың да башына төшәр бит...

* * *

Ә ниндәй «армия» һәм «хәрби бурыс» тураһында һүҙ бара һуң? Был һорауға яуап биреү өсөн Чечнялағы ҡайһы бер «манёврҙар»ға күҙ һалайыҡ.

1999 йылдың 6 декабре. Һуғыштың иң ҡыҙған мәле. Был көндө бар донъя Чечнялағы Берләштерелгән ғәскәрҙәр төркөмө командованиеһының халыҡҡа 11 декабргә тиклем Грозный ҡалаһынан сығып китергә ультиматум ҡуйыуын ишетеп тетрәнеү кисерҙе. «Ҡалала тороп ҡалған кешеләр террорсылар һәм бандиттар тип иҫәпләнәсәк. Уларҙы артиллерия һәм авиация юҡ итәсәк... Ҡаланан сығып өлгөрмәгән һәр кем юҡ ителәсәк», – тиелгәйне ультиматумда...

2000 йылдың февраль баштары. Рәсәй авиацияһы Чечняла 500 килограмдан алып 1,5 тонна ауырлығындағы күҙ күремендәге киң урынды шартлатыусы бомбаларҙы ҡуллана башланы, улар шартлағанда тирә-яҡта бер кемде лә тере ҡалдырмай. Бомбанан тәүҙә газ сыға ла тирә-яҡты ҡаплап ала, ә бер нисә секундтан детонатор тоҡана һәм газ шартлай. Газ бөтә ергә үтеп инә, кешене тонсоҡтора. Бындай бомба шартлағандан һуң ҡап-ҡара булып көйгән ер генә ятып ҡала.

Шулай итеп, федералдар өсөн боевиктар менән тыныс халыҡ араһында бер ниндәй сик тә, айырма ла юҡ.

2000 йылдың 2 марты. Грозныйҙағы «этник таҙартыуҙар» өсөн боевиктар үс алды: Мәскәү эргәһенән килгән ОМОН подразделениеһын юҡ итте. Үҙәк матбуғат

тапшырған был мәғлүмәттән шуныһы ла мәғлүм булды: һөжүм итеүселәрҙең береһен дә тота алманылар, уның ҡарауы, тыныс халыҡ араһынан 80 кешене әсир иттеләр.

Боевиктар быға яуап итеп, Ведено тарлауығындағы көслө алыштарҙа 76-сы Псков дивизияһынан йөҙгә яҡын десантсыны юҡ итте. Был рәсми мәғлүмәт. Ә чечендар 3–10 март араһында Рәсәй армияһының 1000 кешеһен юғалтыуын раçлай.

2000 йылдың февраль башында Чечняның һаулыҡ һаҡлау министры хирург Омар Хамбиев етәкселегендәге медицина бригадаһы 20 хеҙмәткәре һәм 81 яралы кешеһе менән бергә Рәсәй ғәскәрҙәре тарафынан әсир ителә. Барыһы ла Чернокозово лагерына оҙатыла...

Март аҙағы. Комсомольск ауылында һуғыш тамамланды: «бандиттар» имен-аман сығып ҡасты, уның ҡарауы, ауыл тулыһынса емертелде, тыныс халыҡтың ҡасып өлгөрмәгәне юҡ ителде. («ЭКСПРЕСС-ХРОНИКА», 25 март, 2000).

Генералитеттың һәм офицерҙарҙың Чечнялағы «батырлыҡтары» хаҡында Рәсәй матбуғаты күпме генә күкрәк ҡаҡһа ла «бандиттар» юҡ ителмәне, «халыҡ-ара террор» онотолдо, ә халыҡтың хәле тағы ла нығыраҡ мөшкөлләнде, инфляция ҡоторондо, ҡасаҡтар менән донъя тулды. XX ғасырҙы лагерҙар быуаты тип атанылар. Ингушетиялағы лагерҙарҙа ғына 1999 йылдың көҙөндә үк 98 һалдат палаткаларына өс меңдән ашыу ҡасаҡ тыңҡыслап тултырылғайны... Ҡышын уларҙың күбеһе асығып, туңып үлде.

Яңы Кавказ һуғышын асыусылар ҡасаҡтарҙың шул тиклем күп булырын күҙ алдына ла килтермәгән. Беренсе чечен һуғышында ҡасаҡтар Чечняның бер районынан икенсеһенә күсеп йөрөһә, хәҙер икенсе хәл: тотош территория артиллерия һәм авиация утына тотола. Дағстанға ла ҡасып булмай: унда санитар кордон булдырылған... Ингушлаг, әйтеүебеҙсә, тыңҡыслап тултырылған. Ә Рәсәйҙең урыç өлкәләрендә уларға ҡырағай һунар ойошторолдо.

«Һуғыш һәм кеше хоҡуҡтары» исемле интернет проекты хеҙмәткәрҙәре хәбәр итеүенсә, Ставрополь крайының Эске эштәр идаралығы начальнигы Н. В. Мамонтов 1999 йылдың 29 октябренән крайҙың бөтөн эске эштәр органдарына шундай телефонограммма тапшырған:

«1. Ваҡытлыса, айырым күрһәтмә бирелгәнгә тиклем, Ставрополь крайы территорияһына Чечен республикаһынан килгән кешеләрҙе йәшәгән һәм торған урындарында теркәүҙе туҡтатырға...

2. Булған ашығыс мәғлүмәттәр буйынса, 1992 йылдан алып Ставрополь крайы территорияһына Чечнянан килгән кешеләрҙе йәшәгән (торған) урындарында күҙәтеүҙә тотоуҙы тәьмин итергә. Уларға аҙнаһына ике тапҡыр урындағы эске эштәр органдарында (милицияның ҡасаба бүлексәләрендә, йәмәғәт тәртибен һаҡлау пункттарында) күренеп китеү бурысын йөкмәтергә».

Бына шулай! Конституция тәртибен Чечня Республикаһында түгел, ә расизм сәскә атҡан Ставрополь крайында урынлаштырырға кәрәкмәҫ инеме икән? Сөнки Рәсәй Федерацияһы Конституцияһының 27-се статьяһында былай тип яҙылған: «Рәсәй Федерацияһы территорияһында законлы йәшәгән һәр кем иркен күсеп йөрөү, тороу һәм йәшәү урынын һайлау хоҡуғына эйә».

Ә Мәскәүҙә теркәлмәйенсә йәшәгән чечен ата-әсәләренең балаларын мәктәптәрҙән ҡыуалар, уларҙы балалар баҡсаһына һәм интернат-мәктәптәргә ҡабул итмәйҙәр. Сөнки ҡала мэры Михаил Лужковтың күрһәтмәләре шундай.

Мәскәү хөкүмәте эргәһендәге Мәскәү мәғариф комитеты рәйесе Любовь Кезина 21 сентябрҙә «Белем биреү йорттарында уяулыҡты көсәйтеү тураһында»ғы 567-се приказға ҡул ҡуйып, балаларҙы дискриминацияға дусар итә һәм белем алыуға хоҡуҡтарынан яҙҙыра. Был приказ Мәскәү мәғариф комитеты 11 сентябрҙә ҡул ҡуйған «Мәскәү ҡалаһының белем биреү йорттарында балаларҙың һәм хеҙмәткәрҙәрҙең ғүмеренең һәм сәләмәтлегенең хәүефһеҙлеген тәьмин итеү тураһында»ғы 528-се приказға өҫтәмә була һәм башҡа ҡалаларҙан килгән-

дәрҙе белем биреү мәктәптәренә һәм интернат-мәктәптәргә теркәү документтарынан башҡа ҡабул итеүҙе ҡәтғи тыя. («ЭКСПРЕСС-ХРОНИКА», 22 ноябрь, 1999).

Лужковтың 528-се приказы иһә Рәсәйҙең Төп Закондарының 43-сө статьяһына һәм «Мәғариф тураһында» РФ законының 2-се статьяһына – белем алыуға һәр кемгә юл асыҡ булыуы хоҡуғына ҡаршы килә. Унан һуң, «Мәғариф тураһындағы закондың» 5-се статьяһы Рәсәй Федерацияһы граждандарына, «расаһына, милләтенә, йәшәгән урынына ҡарамай, белем алыу мөмкинлеген» гарантиялай.

Ә көҙ көнө, Төньяҡ Кавказда ҡасаҡтар фажиғәһе иң ҡурҡыныс һыҙатҡа яҡынлашҡанда, Рәсәйҙең кеше хоҡуҡтары буйынса уполномоченныйы Олег Миронов Минскиға Александр Лукашенко эргәһенә «Белоруссия граждандарының хоҡуҡтары һәм азатлыҡтары» темаһын өйрәнергә осто. Аслыҡтан, һыуыҡтан, пуляларҙан һәм снаряд ярсыҡтарынан һәләк булыусы Чечня һәм Ингушетия ҡасаҡтары эргәһенә түгел, Чукоткалағы һәм Себерҙәге астан интегеүсе балалар эргәһенә лә түгел, ә Белоруссия колхоздарында, заводтарында, университетында ҡунаҡ булып йөрөнө. (Был хаҡта радиотелевидение мәғлүмәт бирҙе). 1996 йылдың августында Грозныйҙа һуғыш иң ҡыҙған мәлдә генерал Анатолий Квашнин тыуған көнөн байрам итергә өйөнә ҡайтып киткән кеүек инде. Шул уҡ йылдың 6 августында, ҡала урамдарында Рәсәй һалдаттары тиҫтәләп ҡырылғанда, Завгаев хөкүмәте премьеры Николай Кошман кәрәҙле телефондан Мәскәүгә шылтыратып: «Был һуғыш түгел, ә ваҡ провокация. Кискә, йә булмаһа иртәгә боевиктар юҡ ителәсәк», – тип түрәләрҙе «тынысландыра». («Московский комсомолец», 10–17 август, 2000).

Шул уҡ кешеләр, шул уҡ спектакль. Төкөрҙө ти улар чеченыңа ла, ингушыңа ла, «туп итенә» әйләндерелгән Рәсәй армияһы һалдаттарына ла... Тик беҙ шуны ҡасан аңларбыҙ икән дә, ҡасан кеше үлтереүселәргә һәйкәлдәр ҡуйыуҙан туҡтарбыҙ икән?

Егерме бер ай дауам иткән үткән чечен һуғышында 100-ҙән алып 130 меңгә тиклем тыныс халыҡ һәм хәрбиҙәр ҡырылды. «Таҙартыу» акцияларында һәм фильтрацион лагерҙарҙа хәбәрһеҙ юғалған 1500-ҙән ашыу кешенең яҙмышы әлегәсә билдәһеҙ. 6–8 млрд аҡса тотонолдо. Был йыллыҡ бюджеттың 25–30 проценты. Шуның яртыһынан күберәге эҙһеҙ юғалды. Ул саҡтағы президент Борис Ельцин телевидение аша: «Шайтан белһен ул аҡсаларҙың ҡайҙа булғанын!» – тип ҡулдарын йәйҙе. Бына һеҙгә ил башлығының яуабы! Ә икенсе чечен һуғышында күпме аҡса урланды?! 2000 йылдың 29 октябрендә үҙәк телевидениеның «Халыҡ тауышы» тапшырыуында яңыраҡ ҡына Чечняға күсерелгән 12 млн. аҡсаның «юғалыуы», ә унда 150 мең кешенең бына әле ҡыш алдынан бер нимәһе – йорто, малы, кейеме, ашарына аҙығы ла булмауы хаҡында мәғлүмәттәр бирелде.

Чечняны аяҡҡа баҫтырыу өсөн күсерелгән бюджет аҡсаларының бер туктауһыҙ юғалыуы күптән инде бер кемде лә ғәжәпләндермәй. Шул уҡ ваҡытта иң юғары ил әһелдәренең генә түгел, уларҙың Чечнялағы ярҙамсыларының да ҡулы таҙа түгеллеге көн кеүек асыҡ. Мәҫәлән, Чечнялағы хәҙерге хакимдар ебәргән мәғлүмәттәргә ышанһаң, 2000 йылда Чечняла 1,1 млн. кеше йәшәгән булып сыға. Ә 10 йыл элек Чечен-Ингуш АССР-ның халҡы 1,3 млн-дан да артмаған. Йөҙәр мең халыҡты бандитлыҡта ғәйепләп ҡырғандан һәм йөҙәр мең депортациялағандан һуң республикала 600 мең кеше ҡалғанмы, юҡмы, уныһы ла аныҡ билдәле түгел. «Үлек йәндәр» өсөн бүленгән бюджет аҡсалары урындағы Чичиковтар кеҫәһенә инеп ята. Бер генә юғары уҡыу йорто ҡалмаған Грозныйҙа бөгөн 11 мең талип иҫәпләнә – уларға стипендия алалар. Хәтерләһәк, А. Кадыровҡа тиклем Чечняға Н. Кошман етәкселек иткәйне. Баҡтиһәң, ул администрацияның бөгөн һуғыш төбәгендә эшләмәгән чиновниктары ла айына 18-әр мең һум эш хаҡы алыуын дауам итә икән. Чечняға тәғәйенләнгән миллион һум аҡсалар Мәскәү өлкәһендәге ҡайһылыр бер банкыла өйөрөлә икән. Был аҡсаларҙың да осона сыҡмаҫ өсөн тағы Генераль прокурорҙы алмаштырырҙармы?

Шул уҡ ваҡытта һуғыш хәрәкәттәре һаман туҡтатылмай, ике яҡтан да юғалтыуҙар кәмемәй. Тимәк, етемдәр, ғәриптәр, хәйерселәр, ҡасаҡтар, асарғаҡтар, енәйәтселәр... тағы ла нығыраҡ артасаҡ, тигән һүҙ. Бөгөнгө көндә һуғыш ветерандарына һәм Чернобыль инвалидтарына ғына ла лайыҡлы тормош тәьмин итә алмаған хәйерсе Рәсәйҙең хәйерсе бюджеты менән киләсәктә нимә буласаҡ һуң?

Нимә, ниндәй «бөйөк идея» хаҡына шундай ҡорбандар килтерелде һәм бөгөн дә килтерелә?

Быға яуапты ниндәйҙер кимәлдә Рәсәйҙең яңы хәрби доктринаһы бирә. Уны президент Владимир Путин 2000 йылдың 21 апрелдәге указы менән раҫлағайны. Яңы доктринаның мәғәнәһе, Путин үҙе билдәләүенсә, шунда: Рәсәйҙең ике генә союздашы бар – армия һәм флот. Бының менән ул беҙҙең илдең донъялағы демократик берләшмә ағзаһы булып йәшәүен түгел, ә үҙ эсенә генә бикләнеп, үҙ көсөнә генә таяныр, үҙендәге ядро ҡоралы арсеналы менән Ер шарын дер һелкетеп ҡурҡытып тоторға йыйыныуын тағы бер тапҡыр иҫкәртте.

Доктринала, әгәр Рәсәйгә йәки уның союздаштарына (СНГ буйынса) ҡарата агрессия алымы ҡулланылһа һәм әгәр ошо агрессия был дәүләттәрҙең йәшәйешенә ҡурҡыныс менән янаһа, беҙҙең ядро ҡоралын ҡулланыу мөмкинлегебеҙ барлығы тураһындағы тезис ҡаралған. Бер яҡтан уйлаһаң, НАТО-ның Рәсәйгә ғәскәр индереүен күҙ алдына ла килтерерлек түгел. Икенсе яҡтан уйлағанда, Европалағы хәүефле конфликтты – Боснияләғы һуғышты бары тик НАТО-ның көс ҡулланыуы ғына ыңғай хәл итте. Тимәк, беҙҙең яңы доктрина чечендарға ғына түгел, ә Рәсәйҙәге икенсе бер суверенлы халыҡҡа ҡаршы агрессия алымын ҡулланғанда ла НАТО бер нисек тә килеп ҡыҫыла алмаҫлыҡ итеп эшләнгән. Был иһә демократик, хоҡуҡи илгә түгел, ә тоталитар системаға хас күренеш. Эске конфликттарҙа ҡораллы көстәрҙе файҙаланыу мөмкинлеге тураһындағы тезис тап шуны раҫлай. Ысынында иһә Рәсәй етәкселеге илдең Чечнянан башҡа төбәктәрендә лә махсус ғәскәрҙәрҙең дә, хоҡуҡ һаҡлау органдарының да көсө етмәҫлек хәл-ваҡиғалар килеп тыуыу ихтималлығын таный.

Шулай итеп, беҙ үҙ илебеҙҙең ҡурғаш һалдаттары ғына. Беҙҙән, нимә теләһәләр, шуны яһайҙар: герой, боевик, «бандит», «террорсы», «сепаратист», «бур», «милләтсе»... Салауат Юлаевты – «бур», Зәки Вәлидиҙе – «башҡорт милләтсеһе», Муса Мортазинды – «бандит», бөгөнгө суверенитетты «сепаратизм» тип атаған һымаҡ. Бөгөн күмәкләшеп һуғышты туҡтатыуҙы талап итмәһәк, иртәгә мәмерйә хужалары беҙҙең үҙебеҙҙән мамонт яһауы бик ихтимал.

Рәсәйҙең яңы хәрби доктринаһы шуға юл ҡуя.

Президент Владимир Путиндың 2000 йылдың 14 майҙағы Указы ла шуға булышлыҡ итмәксе. Был иһә илде 7 федераль округҡа – дөрөҫөрәге, хәрби кантондарға – бүлеү һәм кантон башлыҡтары итеп генерал-губернаторҙар тәғәйенләү. Әйтәйек, ул генералдарҙың берәүһен, Төньяҡ Кавказ округына тәғәйенләнгән Виктор Казанцевты, Чечняла әлегә тиклем ҡанлы күҙ йәштәре аша хәтерләйҙәр. «Таҙартылған» Аргун һәм Шали ауылдарына боевиктар һөжүм иткәндән һуң Казанцев, бынан ары 10 йәшкә тиклемге балалар һәм 60-ты уҙған ҡатын-ҡыҙҙар ғына ҡасаҡтар булып иҫәпләнәсәк, ә башҡалар ҡулға алынасаҡ һәм тикшереүгә дусар ителәсәк, тип белдергәйне. 10–14 йәштәге, әле сабыйлыҡтан сығып өлгөрмәгән, балаларҙың һәм әсәләрҙең төрлө фильтрацион лагерҙарға, шул иҫәптән Чернокозовоға ла, ебәрелеүен һәм язаланыуын күҙ алдына килтерә алаһығыҙмы? Ә бит ул көндәрҙә шул уҡ «ҡаты ҡуллы» генералдың бойороғо буйынса Комсомольск ҡасабаһы яндырылып, көлгә әйләндерелде, халҡы ҡырылды...

Генерал-лейтенант Константин Пуликовский 1996 йылдың авгусында Грозный халҡына 48 сәғәт эсендә ҡаланы ташлап сығырға ультиматум ҡуйыуы һәм, билдәләнгән ваҡыт үткәс тә Грозныйҙы «таҙартасаҡмын», тип иғлан итеүе менән дан-шөһрәт ҡаҙанды. Хәҙер ул Алыҫ көнсығыш округында президент вәкиле. Ул вәкилдәрҙең тағы өсәүһе, тимәк етәүҙең бишәүһе – хәрби генерал: ФСБ генералы Виктор Черкесов (Санкт-Петербург округы), чекист Георгий Полтавченко (Мәскәү округы), Петр Латышев (Урал округы).

## ҺУҢҒЫ ӨМӨТ – ЕВРОПА СОВЕТЫНДА

Европа Советы Ассамблеяһы 1999 йылдың 4 ноябрендә ҡабул иткән 1201-се Резолюцияһында Рәсәйҙе тыныс халыҡты утҡа тотоуҙан тыйылырға, һуғышты туҡтатырға һәм законлы һайланған чечен властары менән һөйләшеүҙәрҙе башларға, хәрби енәйәтселәрҙе хөкөм итергә, ә аманатҡа алынғандарҙы азат итергә саҡырҙы. Шулай уҡ 10 йәштән алып 60-ҡа тиклемге чечен үҫмер малайҙарына һәм ир-аттарына Чечен Республикаһының сиген үтеүҙе тыйыу тураһындағы законһыҙ ҡарарҙы ла юҡҡа сығарырға кәңәш бирҙе.

Ә Парламент Ассамблеяһы Бюроһы үҙенең 13 декабрҙәге Декларацияһы менән, әгәр Чечняла кеше хоҡуҡтарын боҙоу дауам ителһә, Рәсәйҙең Ассамблея эшендә һәм, ғөмүмән, Европа Советында ҡатнашыуы һорау аҫтына алынасаҡ, тип киҫәтте.

Ул арала сит ил радиостанциялары, телевидение һәм гәзиттәр бар халыҡты террорсылар тип атап, Чечняны тотошлай бомбаға тотоуҙарға ҡаршы протест белдереп сығыш яһаны. Тап ОБСЕ саммиты асылған көндө, 17 ноябрҙә, Мәскәүҙә Ҡыҙыл майҙанда Рәсәйҙең Чечняла алып барған сәйәсәтенә ҡаршы митинг булып үтте. Унда Рәсәй Дәүләт Думаһынан ҡайһы бар депутаттар ҙа ҡатнашты. Митингыға сығыусыларҙың һәр береһенең ҡулында бер генә йөкмәткеле лозунгылар: «Икенсе чечен һуғышын туҡтатығыҙ!», «Икенсе чечен һуғышын туҡтатығыҙ!..» Мин Демократик союз лидеры, Дәүләт Думаһы депутаты Валерия Новодворскаяның шундағы сығышынан бәләкәй генә өҙөк килтерергә теләйем:

– Рәсәйҙең Чечняла ҡылғандарын сталинизм һәм гитлеризм мәшхәре менән генә сағыштырырлыҡ. Президент Ельцин властан ситләтелгән тиерлек һәм махсус службалар менән ҡотороңған генералитет тарафынан аманатҡа алынғанға оҡшай. Асылында иһә, Галина Старовойтованы үлтереүсе, телевидениеға тулы хужа булыусы һәм, яңы Кавказ һуғышын башларға сәбәп эҙләп, Мәскәүҙә торлаҡ йорттарын шартлатыусы махсус службалар илгә идара

итә... Европаның көнсығышында, Рәсәйҙә, ядро боеголовкалары менән ҡоралланған фашизм өлгөрөп килә...

Ә ОБСЕ саммиты 1999 йылдың 17 ноябрендә Төркиәнең баш ҡалаһы Стамбулда асылды. Чечен темаһының уға йүнәлеш бирәсәге бер кемгә лә сер түгел ине. АҠШ конгресының вәкилдәр палатаһы иһә Билл Клинтон хакимиәтенән дошманлашыусы яҡтарҙы һөйләшеүҙәр өҫтәле артына ултыртыуҙы ҡәтғи талап итте.

Бөтә Рәсәй, шул иҫәптән беҙ, Башҡортостан халҡы ла, ҙур өмөттәр бағлап, телевизор экрандарына текәлдек...

Дума ултырышын күрһәтәләр. «Баярҙар» асыулы. Һәр ваҡыттағыса, асырғанып әрләшәләр, аҡырышалар. Иғтибар үҙәгендә, әлбиттә, Владимир Вольфович. Рәсәйҙең «бөйөк» депутаты был юлы ла үҙ амплуаһында: йоҙроҡ болғай-болғай, «нисек тә Көнбайышҡа күберәк этлек эшләргә» саҡыра. Төркиәгә үс итеп, курдтарҙың эшселәр партияһын яҡларға, Испанияла – баск сепаратистары, Великобританияла – ирланд республика армияһы, ә Алжирҙа (Францияның йәненә тейеү өсөн) Ислам фундаменталистары яғында булырға кәрәк.

... ОБСЕ саммиты хаҡында шулар мәғлүм булды. Унда сығыш яһаусыларҙың бөтәһе лә, БМО-ның Генераль секретары Кади Аннан менән ОБСЕ рәйесе Кнут Воллебек та, тыныс чечен халҡына зыян килтерелергә тейеш түгел, тип, ҡәтғи рәүештә белдерҙе. Германия канцлеры Герхард Шредер һәм Франция президенты Жак Ширак айырыуса киҫкен тәнҡит менән сығыш яһаны. АҠШ президенты Билл Клинтон кеше хоҡуҡтарының теге йәки был дәүләттең генә эске эше булмауын Борис Ельциндың хәтеренә төшөрҙө.

Эйе, Борис Николаевичтың 1991 йылдың авгусында танкыға һикереп менеп, үҙен бар донъяға азатлыҡ символы итеп танытыуын һәм республикаларға «күпме теләһәләр, шул тиклем суверенитет йоторға» тәҡдим итеп, азат чечен халҡын ҡанға батырыуын аңларлыҡ та, аңлатырлыҡ та түгел шул.

Ҡаршылыҡты тыныс ысул менән хәл итеүҙең бөтә юлдары файҙаһыҙ булғанда ғына һуғышты аҡлап булыуын Рәсәй етәкселегенең аңына һеңдерергә тырыштылар. Ваҡытында АҠШ Саддам Хусейндың Кувейттан китеүен бик оҙаҡ көттө, талап итте. Милошевичтан да Косовоға тыныслыҡ урынлаштырыусы ғәскәрҙәрҙе үткәреүен бер нисә ай буйына һоранылар һәм бары тик көс ҡулланыуһыҙ эш барып сыҡмаясағы асыҡланғас ҡына һуғыш хәрәкәттәре башланды.

Рәсәй етәкселеге иһә Ичкерияның законлы һайланған президенты Аслан Масхадов менән һөйләшеп ҡарауҙан да баш тартты. Стамбулдағы саммитта ла Борис Ельциндан Чечняла тыныслыҡ урынлаштырыу планын ишетергә яҙманы. Бары шуға ирешелде: Рәсәй етәкселеге Кавказға ОБСЕ миссияһын үткәрергә ризалыҡ бирҙе.

Тиҙҙән Европа Советы һүҙҙән эшкә күсте: кеше хоҡуҡтары буйынса юғары комиссар Альваро Хил-Роблес Төньяҡ Кавказда булып киткәндән һуң, 1999 йылдың 14 декабрендә һәм 2000 йылдың ғинуарында Чечня буйынса ПАСЕ ултырышы булды. Артабан ПАСЕ рәйесе лорд Дэвид Рассел-Джонстон етәкселегендә Европарламент делегацияһы Рәсәйгә килеп китте. Проблема менән күҙмә-күҙ осрашып, ентекле тикшергәндән һуң, Европа Советы Чечнялағы ваҡиғаларға ҡағылышлы 1444-се Рекомендацияһын ҡабул итте. Уға ингән документтар үтә етди. Иғтибар менән уҡыйыҡ: «Асыҡланыуынса, Рәсәй кеше хоҡуҡтары һәм халыҡ-ара гуманитар хоҡуҡ буйынса Европа Конвенцияһы рамкаларында ҡайһы бер айырыуса мөһим йөкләмәләрҙе боҙа».

Был документтарҙан Рәсәйҙең Европа Советына ингәндә алған йөкләмәләрен боҙоуы ла мәғлүм. Сөнки 1996 йылда ойошма ағзаһы булып ингәндә Рәсәй эске һәм халыҡ-ара килешмәүсәнлектәрҙе тыныс саралар менән хәл итергә һәм халыҡ-ара гуманитар хоҡуҡ положениеларын ихтирам итергә – шул иҫәптән, унын территорияһындағы ҡоралды бәрелештәр осрағында ла – йөкләмә алғайны. Рәсәй, Европа Советы ағзаһы булараҡ, кеше хоҡуҡтары буйынса Европа конвенцияһы принциптарын ихтирам

итеү һағында торорға һәм бөтә территорияһында, тимәк, Чечняла ла, закондың һәм демократик принциптарҙың өҫтөн булыуын күҙәтергә тейеш ине. Ассамблея иҫәпләүенсә, Чечнялағы Рәсәй федераль ғәскәрҙәренең хәрби операциялары закон өҫтөнлөгөн боҙа. Сөнки был операцияларҙың масштабы ойошҡан енәйәтселек менән көрәш тураһындағы законға тура килмәй, ә ғәҙәттән тыш хәл иғлан ителмәгәс, бындай операциялар нигеҙһеҙ һәм законға яраҡһыҙ, тип табыла.

Әлбиттә, АҠШ та, Франция һәм Германия ла, Борис Ельцинға тураһын әйтә алмаған кеүек, Путинға ла дөрөҫөн «ярып һалырға» ҡыймай. Сөнки бер туҡтауһыҙ ядро боеголовкалары менән янаусы Рәсәй етәкселәренең бөгөн нимә һөйләп, иртәгә нимә эшләре билдәһеҙ. Улар Европа Советы 2000 йылдың 27 ғинуарында раҫлаған һәм әле мин үрҙә килтергән документтарға ла етерлек дәрәжәлә етди ҡараманы. Етәкселектең нимә уйлағанын көҙгөләге кеүек сағылдырған үҙәк матбуғат быны асыҡ күрһәтте. ОРТ аша мәғәнәһеҙ «Однако» программаһын алып барыусы Михаил Леонтьев 24 ғинуарҙа мәғәнәһеҙ фекерҙәрен ишеттерҙе. «Парламент Ассамблеяһы – ысын мәғәнәһендә мәғәнәһеҙ орган, – тине ул, – ул беҙҙең кеүек ҡырағайҙарҙы аҡылға ултыртыу өсөн генә ойошторолған».

Икенсе чечен һуғышы башланыр алдынан, хөкүмәт башлығы вазифаһын башҡарыусыға эйәреп, телевидение аша бар ғаләмгә: «Их надо мочить, пришло время мочить их!» – тип оран һалған кешенән нимә көтәһең инде. Иң ҡурҡынысы, был һүҙҙәрҙе лагерҙа оҙаҡ ултырып, туңбашҡа әйләнгән «пахан» түгел, ә көр һәм һимеҙ, тотанаҡһыҙ һәм әҙәпһеҙ ОРТ журналисы әйтә бит әле.

Эйе, беҙҙә хәҙер һуғыштарҙы телерепортерҙар менән президент ярҙамсылары «иғлан итә». 2000 йылдың 22 майында Сергей Ястржембский, әгәр Рәсәйҙең йәки беҙҙең менән дуҫ йәшәгән илдәрҙең милли мәнфәғәттәренә ҡурҡыныс янаһа, Афғанстан территорияһына һөжүм итеүебеҙ ихтималлылығы бар, тип хәбәр итте...

Ә Рәсәй Думаһы депутаты Владимир Жириновскийҙың хыялы күптән тормошҡа ашты – Рәсәй Көньяҡҡа

ташланды. Ун йыллыҡ ғәҙел булмаған һуғышта (1979–1989) совет илбаҫарҙары еңә алмаған афған мөжәһиттәре күптәнән чечен отрядтарында һуғыша, хатта мөжәһиттәргә ҡаршы торған талиптар – Афғанстандағы бөгөнгө власть даирәләре – 2000 йылдың яҙ башында Рәсәйгә йыһат – изге һуғыш иғлан итте.

* * *

Чечен Республикаһында һуғышты туҡтатыу, закон урынлаштырыу һәм кеше хоҡуҡтарын тупаҫ боҙоуҙарға сик ҡуйыу буйынса талаптар үтәлмәгәнлектән, Европа Советының Парламент ассамблеяһы 2000 йылдың 6 апрелендәге рекомендацияһы менән, Рәсәй делегацияһының вәкәләттәрен туҡтатып торҙо. Ассамблея Рәсәйҙең Кеше хоҡуҡтары буйынса Европа конвенцияһын һәм бигерәк тә уның 2-се статьяһын (йәшәүгә хоҡуҡ) боҙоуҙы дауам итеүен белдерҙе. Ассамблея Рәсәй Федераль ғәскәрҙәренең Чечнялағы түбәндәге «батырлыҡтарын» ҡаты тәнҡитләне:

– тотош халыҡҡа ҡаршы бер нисек тә аҡланмаған киң һуғыш хәрәкәттәре алып барып, Грозный ҡалаһын емереү һәм йөҙәрләгән, меңәрләгән тыныс халыҡты юҡ итеү;

– ҡеүәтле хәрби техника ҡулланып, халыҡ тығыҙ йәшәгән райондарҙы ерҙән һәм һауанан утҡа тотоу;

– чечен ҡатындарын һәм ҡыҙҙарын көсләү;

– һуғышта ҡатнашмаған халыҡты ирекһеҙләүҙәр, ҡулға алыуҙар;

– яңы хеҙмәткә алынғандарҙы Чечен Республикаһындағы хәрби кампанияла файҙаланыу.

Европа һуғышыусы чечендарҙы ла маҡтамай: улар ҙа бөгөнгә тиклем утты туҡтатмай һәм аманатҡа алыуҙы дауам итә.

Әммә төп яуаплылыҡ барыбер Рәсәй яғында – был һыҙыҡ өҫтөнә алына. Һәм ҡуйылған талаптар үтәлмәһә, Рәсәйҙе Европа Советынан сығарыу процессы башланасаҡ. Ассамблея Рәсәйҙең Чечняла кеше хоҡуҡтарын тупаҫ боҙоуҙы туҡтатыуын талап итеүҙе ҡәтғиләштерҙе

һәм Кеше хоҡуҡтары буйынса конвенцияның төп яҡлау механизмы булған Европа судына мөрәжәғәт итергә йыйына башланы. Был һеҙгә Никита Хрущевтың БМО трибунаһын ботинкаһы менән төйгөсләүе йәки Рәсәй Думаһы депутаттарының Европа Советы ишектәрен шаҡылдата ябып сығып китеүҙәре түгел. Рәсәй донъя берләшмәһенән юғары була алмай. Сөнки үҙенең төп законында, халыҡ-ара хоҡуҡ нормалары Рәсәй Конституцияһының нигеҙҙәрен тәшкил итә, тип яҙып ҡуйған. Әйткәндәй, Башҡортостан Конституцияһының 16-сы статьяһында ла шуға оҡшаш юлдар бар: «Киң танылған халыҡ-ара хоҡуҡ принциптары һәм нормалары һәм Башҡортостан Республикаһының халыҡ-ара килешеүҙәрҙе хоҡуҡ системаһының нигеҙҙәрен тәшкил итә».

* * *

... Әммә идиллияға бирелергә лә ярамай. 2001 йылдың 23 февралендә Рәсәйҙең сит ил эштәре министры Игорь Иванов «Интерфакс» агенствоһы аша, элекке Югославия буйынса Гаагалағы халыҡ-ара трибуналдың кәрәге юҡ, уны бөтөрөү мәсьәләһен ҡуйырға кәрәк, тигән белдереү яһаны. Бына шулай, тиҙҙән Европа Советына һәм БМО-ға ла сират етмәç, тимәгеҙ. Ә Рәсәй Конституцияһына килгәндә, уны нисек теләһәләр, шулай үҙгәртәләр. Халыҡтан һорап торғандары юҡ. Яза ла, ярлыҡау ҙа – үҙҙәренең ҡулында. Ошо уҡ йылдың март башында Дондағы Ростовта Себер хәрби округының 160-сы танк гвардия полкы командиры полковник Юрий Буданов өҫтөнән барған суд быны тағы бер тапҡыр иҫбатланы. Ул 2000 йылдың 27 мартында Чечняның Урус-Мартан районындағы Танги ауылында йәшәүсе яңы ғына 18 йәше тулған Эльза исемле чечен ҡыҙын үҙенә буйһонған БМП экипажы менән күп балалы ата йортонан көсләп алып сыға һәм һуңынан полк урынлашҡан ергә алып килеп, үҙенең вагонында бикләнә... Үҙәк матбуғатта яҙылыуынса «... иҫерек полковник Буданов ҡыҙ баланы аҙғын ысул менән мәсхәрәләй һәм быуып үлтереп, ергә күмә». Бөгөн

килеп, енәйәтсене аҡлау процесы башланды: йәнәһе, чечен ҡыҙын снайпер тип уйлаған, йәнәһе, енси көсләү булмаған, ә быуып үлтергән генә... Әйтерһең, кешене быуып үлтереү үҙе генә лә ҡот осҡос енәйәт түгел. «Война все спишет», – тиҙәр, күрәһең. Һуғышта һәр кем йыртҡысҡа әйләнә. Иҫерек офицерҙарҙың чечен ҡыҙҙарын сәстәренән һөйрәтеп килтереп, палатка эстәренә ташлауҙары, әле ныҡынып та өлгөрмәгән саф тәндәрен нисек өҙгөләп-йыртҡылауҙары тураһында кешелек Европа Советы Ассамблеяһы материалдарынан уҡып белһә, беҙгә был хаҡта Чечняла «хеҙмәт итеп» ҡайтҡан һалдаттар һөйләй.

Борон Кириловтар, Тәфтиләүҙәр, Татищевтар, Суворовтар, Брагиндар ҡылғанды бөгөн Будановтар ҡабатлай. Уны ла, Чечняла эшләгән «батырлыҡтары» өсөн, аҡлап, берәй аборигендарға генерал-губернатор итеп ҡуйһалар, һис тә ғәжәпләнергә тура килмәйәсәк.. Сөнки Рәсәйҙә шәхес булып танылыу өсөн тән семерҙәтерлек боҙоҡлоҡтар, сәстәр үрә торорлоҡ енәйәттәр ҡылып, кәм тигәндә 18 йыл төрмәлә ултырып сығырға кәрәк. Тап шундайҙарҙың бәғзеһе, Алыҫ Көнсығыштағы иң йоғонтоло криминаль авторитеттарҙың береһе Владимир Податев 1995 йылда Халыҡ-ара хоҡуҡ яҡлау хәрәкәте президенты, Рәсәйҙәге һәм сит илдәге(!) Казак ғәскәрҙәренең верховный атаманы урынбаҫары, Рәсәй президенты эргәһендәге йәмәғәтселек палатаһының Кеше хоҡуҡтары буйынса комиссия ағзаһы булып эшләне. Рәсәйҙең төрлө төбәктәрендә вәкәләтлектәр асты. Һәр ерҙә, үҙ кешеләрен йыйып, вазифалы урындарға ҡуйып, шуларҙы хөкүмәт аҡсаһына тотто. «Был кешеләр кем – мэр, кем губернатор буласағын иртәгә үк хәл итә аласаҡ», – тигәйне Податев» («АиФ», № 24, 1995).

# МИЛЛӘТТЕ СИСТЕМА ТОТАМЫ, ӘЛЛӘ ЙОТАМЫ?

## *ҺЫҒЫМТА*

Донъя ҡитғалары – Азия менән Европа – киҫешкән ерҙә, Ер кендеге Арҡайым, унан ҡала Таналыҡ ереккән урында, Йыһан нурынан туҡылған Уралым күккә ашҡан төбәктә, Йәншишмәнән юл алған Ер әсәһе – Ағиҙел тере һыу бөркkән ерҙә, гөлбостан, сөнбөлостан, нурбостан, былбылстан иләндә изге әруахтарынан рухи ем алып, тупраҡтан һут уртлап, төп ерлегендә – милли бишегенә йәбешеп ятып, тырмашып донъя көтөп, нәҫелен ишәйтергә һәм өммәтен көсәйтергә ынтылмайынса, иртәгәһен ишәккә уйларға ҡалдырып, сит яҡтарға, ят мәмләкәттәргә бермә-бер хәлһеҙләндереп һибелгән башҡортто бергә туплап, үлмәҫ милләт яһау өсөн берҙән-бер юл – уның Башҡортостандағы милли дәүләтселеген нығытыу, милләтте рухи һәм физик яҡтан тергеҙеү.

Әммә төп халыҡты үҙ еренән һыуындырыу һәм бәхет эҙләп сит илдәргә юлландырыу инерцияһына ҡоролған ысынбарлыҡ бәкәлгә һуға. Уйлап ҡына ҡарағыҙ әле, 2000 йылда ғына Башҡортостанға 2130 ғына милләттәшебеҙ ҡайтҡас (сағыштырығыҙ: 2839 урыҫ һәм 4891 татар килгән), ә 943 башҡорт илен ташлап киткәс, ниндәй милли дәүләтселек тураһында хыялланып булһын? Нигеҙҙә сәнәғәт, фән һәм мәҙәниәт өлкәләрендә нығынған рустарҙан һәм сауҙаға киң үтеп ингән татарҙарҙан айырмалы рәүештә, күпселеге ауыл һәм урман хужалыҡтарында ғына эшләгән башҡорттар, урмандарҙы

рәхимһеҙ ҡырыу һәм ер һатыу һөҙөмтәһендә эшһеҙ, йорт-ҡураһыҙ, бесәнлекһеҙ, малһыҙ ҡалып, йәшәү таяныстарынан яҙа бара. Түбәндәге мәғлүмәттәр – төп халыҡ хоҡуҡтарының үҙ республикаһында бер нисек тә яҡланмауының туранан-тура һөҙөмтәләре ул.

| Годы | Число прибывших | | Число выбывших | | Миграционный прирост | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | всего | в т. ч. башкиры | всего | в т. ч. башкиры | всего | в т. ч. башкиры |
| 1997 | 99357 | 27831 | 88195 | 25601 | 11162 | 2230 |
| 1998 | 91772 | 26664 | 81361 | 24328 | 10411 | 2336 |
| 1999 | 91655 | 27509 | 80951 | 24665 | 10704 | 2844 |
| 2000 | 85142 | 25009 | 81152 | 24066 | 3990 | 943 |

*(Госкомстат РБ)*

Шундай система милләтте йәшәтәме, әллә ҡаҡшатамы?

Рудольф Нуриев кеүек шәхестәребеҙ бөгөн дә илен ташлап китә. Мәҫәлән, һуңғы йылдарҙа үҙенең торна сыңрауы кеүек яңғырауыҡлы ла, моңло ла, һағышлы ла илаһи тауышы менән дәүләт театрҙары залдарын ғына түгел, ә тотош республиканы шаулатҡан һәм, йөрәктәргә үтеп инеп, беҙҙе таң ҡалдырған йырсыбыҙ Сибай ҡыҙы Светлана Арғынбаева Италияға китеп барғас, күңелдәр бушап ҡалды.

Сыңрау торнаһы ташлап киткән илдең бәҫе буламы? Талантлы улдарын һәм ҡыҙҙарын баһалай ҙа, күтәрә лә белмәгән милләттең киләсәге бармы?

Изге урын буш булмай – беҙҙең киткәнебеҙҙе көтөп кенә торалар. Юҡ, тип әйтер өсөн. 1995 йылдың 1–2 июнендә, Өфөлә Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы уҙғарылғанда үтә етди сәйәси документ – профессор Билал Юлдашбаевтың «Башкиры и Башкортостан. Этностатистика» исемле баҫмаһы һәр делегатҡа бушлай таратылды. Унда былай тиелгәйне: «Хотя Башкирская республика родилась как национально-территоральная автономия башкир, но незначительность удельного их веса, то есть ограниченность свобственно башкирского

национального содержания Башкирии, впоследствии усугубилась, и административно-бюрократической системе оставалось лишь одно – престижности ради и во имя конъюнктурно-идеологического «выигрыша» искусственно подпирать считающуюся национальной республику» (17-се бит).

Тимәк, республикаға индерелгән ҡасаҡтар араһында башҡорттарҙың ике-өс тапҡырға кәм булыуы нисбәтенең тотороҡло һаҡланыуы һәм илен ташлап китеүсе төп халыҡтың һаны һуңғы дүрт йыл эсендә генә 100 меңгә еткерелеүе Башҡортостан милли республикаһының башҡорт милли йөкмәткеһен арттырыуға эшләмәй.

Системаны, әгәр ул бөгөн ысынлап та демократияға һәм федерализмға таяна икән, Рәсәйҙә милли республикаларҙы һаҡлап алып ҡалыу мәнфәғәтендә эшләтеү, шул юҫыкта БМО-ның Халыҡ-ара хоҡуҡ документтарына нигеҙләнгән ике гражданлыҡ һәм төп халыҡ хоҡуҡтары тураһында закондар ҡабул итеү зарур. Рәсәй халыҡтарының үҙбилдәләнеше, атап әйткәндә, башҡорт халҡының да киләсәге, йәғни милли дәүләтселеге, шуға бәйле.

## ҠУЛЛАНЫЛҒАН БЕЛЕШМӘЛӘР ҺӘМ СЫҒАНАҠТАР


1. Коренное население. Доклад для независимой комиссии по международным гуманитарным вопросам. Москва. «Международные отношения». 1990.

2. Демократия и национальные движения в современном мире. Российско-американский семинар. Уфа, 1999.

3. Суверенная республика как правовое государство. Издательство «Гилем». Уфа – 1998.

4. *Ирназаров Р. И.*. Равенство этносов в Республике Башкортостан. Издательство «Гилем», Уфа – 1997.

5. *Илишев И. Г.* Язык и политика в многонациональном государстве. Уфа: «Китап», 2000.

6. *Кульшарипов М. М.* Башкирское национальное движение. 1917–1921 гг. Уфа: «Китап», 2000.

7. *Кузеев Р. Г.* Демократия. Гражданственность. Этничность. Москва, 1998.

8. Федерализм власти и власть федерализма. Ответственный редактор: Губогло М. Н., Москва, 1997.

9. Государственный (национальный) доклад о состоянии и использовании земель Республики Башкортостан за 1999 год. Уфа, 2000.

10. Госкомзем Республики Башкортостан. Рекламно-информационный проект. Уфа, 2001.

11. *Камалов Азат.* Башкирские географические термины и топонимия, Уфа: «Китап», 1997.

12. *Асфандияров А. З.* История сел и деревень Башкортостана. Кн. 1–8. Уфа: «Китап».

13. *Яппаров Хазгали.* Наше шежере. Уфа: «Китап», 1999.

14. Советский энциклопедический словарь.

15. Энциклопедический справочник. Страны мира. Москва, 1999.

16. Башҡортостан энциклопедияһы.

## ЙӨКМӘТКЕ

I. Мин һаман да мөғжизәгә ышанам (Инеш һүҙ урынына) ..................3

1. Ер – милли республикалар бишеге ..................13
2. Раиль Кузеев: «Башҡортостанда йәшәгән халыҡтарҙың күпселеге – башҡорттар!» ..................32
3. Төньяҡ-көнсығышта ..................48

Милләт китабының ауыр юлдары

4. Бөрйән районында ..................51

Ағас кеүек ҡорорға теләмәйем

5. Тел һәм ... глобус ..................57
6. Төп халыҡ хоҡуҡтары ..................62
7. Дүртөйлө районында ..................70

Һаумыһығыҙ, һаумыһығыҙ, милләттәштәр!..

8. Илеш районында ..................83

Манҡортлоҡтан арынырға ваҡыт

9. Ҡариҙел районында ..................96

Мин кем икән? Их, беләһе килә...

10. Октябрьский ҡалаһында ..................113

«Туған телде яратмаған кеше
башҡаларҙың телен үҙ итмәй»

11. Нефтекама ҡалаһында ..................118

Теле барҙың – рухы бар

12. Бәләбәй ҡалаһында ..................130

Тормошта үҙ урыныбыҙҙы яуларға ваҡыт

13. Балтас районында ..................133

Мишәр башҡорттары

14. Ике дуҫтың берәһе ҡол түгел ..................144
15. Берәү яна ..................152

II. Мажоритар принциптарҙан – консоциаль демократияға..................173

АҠШ менән Рәсәй араһы

1. Ыҙғыш «Алма»һы ..................183
2. Ҡатын-ҡыҙға юл бирегеҙ ..................190

3. Лебедь, Шахрай һәм ... башҡорттар ........................................ 199
4. Бөйөк илдең бахыр закондары ........................................ 204
5. Ул Рәсәйҙе ҡотҡарҙы! ........................................ 215
6. Федерализмдың киләсәге бармы? ........................................ 224

III. Рәсәйҙе ҡайһылай яратырға? ........................................ 235
1. Ҡалай тырышһаҡ та – беҙ рус түгел... ........................................ 252
2. Американдарҙан нисек көс алырға? ........................................ 265
3. Күңелгә Алла ҡайтһын... ........................................ 274
4. «Сүп утаусылар» тураһында ........................................ 277
5. Һуңғы өмөт – Европа Советында ........................................ 302

Система милләтте тотамы, әллә йотамы?
Һығымта ........................................ 309

Художественно-документальное издание

Ханова Зайтуна Канзафаровна

Отчизна

Редактор *Фирдауса Бикташева*
Художник *Иван Файрушин*
Художественный редактор *Азат Мухтаруллин*
Технический редактор *Найля Зарипова*
Компьютерная обработка *Юлай Абсалямов*

Изд. лиц. № 0168 от 10.04.96. Сдано в набор 04.01.01. Подписано в печать 13.07.01.
Формат 84x108 $^{1}/_{32}$. Бумага офсетная. гарнитура Таймс. Печать офсетная.
Усл. печ. л. 16,8. Усл. кр-отт. 17,22. Усл.-изд. л. 14,13.
Тираж 3000 экз. Заказ № 564.

Башкирское издательство «Китап». 450001, Уфа, ул. Левченко, 4а.
Отпечатано с предоставленных диапозитивов
на Уфимском полиграфкомбинате. 450001, Уфа, пр. Октября, 2.

# ЗӘЙТҮНӘ ХАНОВА · ИЛКӘЙЕМ

Өфө «КИТАП» 2001